# Һуңғы Һулыш





*Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә*
*һәммәбеҙҙең дә һуңғы һулышын ғүмеренең*
*гүзәл нәтижәһе итһен!*
*Хәйерле рухи ғилем менән тулы тормош бирһен,*
*беҙҙең һуңғы һулышыбыҙ Хаҡ Раббыбыҙ менән*
*көтөп алынған, һоҡланғыс осрашыу булһын!*
*Ғүмеребеҙҙең һуңғы һулышы мәңгелек бәхеттең*
*тәүге һулышына әйләнһен!*
*Әмин!*

УДК 28-1
ББК 86.38-124.7
Т14

**Баһалаусылар:**
А.З. Салеев
Р.Р. Фасхудинов
К.Л. Жагипаров
Р.Ш. Мамедов

**Төрөксәнән тәржемәсе:**
Дауыт Ҡадыров

**Рус теленән тәржемәсе:**
Әҙилә Ниғмәтуллина

**Редактор:**
Айҙар Ғәййәр

ВСЕ ПРАВА ЗАЩИЩЕНЫ
**ISBN:** 978-5-9500224-0-1
ИЗДАТЕЛЬСТВО ООО “МИР ЗНАНИЙ” 2018

**Книги можно заказать:**
Тел. 8(968)7693443
Веб-сайт: www.islamicbook.ru
mirznaniy571@mail.ru

РУХИӘТ БАҠСАҺЫНАН

# *Һуңғы Һулыш*

*Нуриман Мусин*

**МӘСКӘҮ - 2018**

# Йөкмәткеһе


Инеш һүҙ ........ 7
Һуңғы һулыш - 1 ........ 13
Һуңғы һулыш - 2 ........ 25
Һуңғы һулыш - 3 ........ 37
Таңдағы Зекруллаһ ........ 47
Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 1 ........ 59
Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 2 ........ 69
Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 3 ........ 81
Тәүбә һәм күҙ йәштәре ........ 95
Доға ........ 107
Хәҡиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа өндәү - 1 ........ 117
Хәҡиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа өндәү - 2 ........ 127
Исар ........ 137
Шөкөр итеү - истиғна ........ 149
Сауҙаның әхлаҡи нигеҙҙәре ........ 163
Аллаһҡа бирелгән гүзәл үтес ........ 177
Үтескә нисек бирергә һәм алырға? ........ 189
Дуҫлыҡ ........ 207
Һүҙгә тоғролоҡ ........ 221
Тәҡүәлек ........ 237
Яҙмыш һәм уның серҙәре ........ 247

# *Инеш һүҙ*

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт Мостафа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, аша Үҙенең зәғиф ҡолдарын иман шатлығы һәм тыныслығы менән бүләкләгән Аллаһү Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә бөтә хөрмәт һәм маҡтауҙарыбыҙ булһын! Кешелекте ҡараңғылыҡ ауынан ҡотҡарған, нурға күмелеүенә сәбәпсе булған Ғаләм Ғорурлығы, Аллаһ пәйғәмбәренә салауат, бәрәкәт һәм сәләм булһын!

Әҙәм балаһы, һынауҙар өсөн ебәрелгән фани донъянан киткәндә, Әхирәт ҡапҡаһынан мәңгелек йортона инә. Әммә ул йорттоң ҡапҡаһы икәү: береһе һәләкәткә илтә, икенсеһе - бәхет-сәғәҙәткә. Бөтә ғүмеренең һөҙөмтәһе булған **Һуңғы һулышы** еткәс, ул ошо ҡапҡаларҙың ҡайһыһы асыласағын беләсәк. Ҡыҫҡа ғүмеребеҙҙе Һуңғы һулышыбыҙҙы иҫтә тотоп үткәрәйек тиһәк, беҙгә иғтибарлы, һиҙгер һәм айыҡ аҡыллы булыу зарур.

**Һуңғы һулышыбыҙ** - Әхирәттәге хәлебеҙҙең тәүге шаһиты. Ваҡытлы донъябыҙ менән лайыҡлы хушлашайыҡ тиһәк, үҙебеҙҙе шул һуңғы һулышыбыҙға әҙерләргә тейешбеҙ. Мәңгелектәге тормошобоҙ бәхетле булһын өсөн, ғүмеребеҙ изге ғәмәлдәр, намыҫ, рухи аҡыл, тура юлыбыҙ менән биҙәлгән булыуы шарт. Ғүмер стаканға ағып төшкән һыу тамсылары кеүек. Тамсылар саф, таҙа булһа, стакандағы һыу ҙа саф, таҙа. Һуңғы тамсы әйтерһең дә һуңғы һулыш.

*«Әҙәм нисек йәшәһә, шулай үләсәк, нисек үлһә, шулай ҡабат тереләсәк»* (Мунауи, Фәйзул-Ҡадир, Шәрхүл-Джамиғис-Сағир, V, 663).

Һуңғы һулыш - тормош спектакленең һуңғы сәхнәһе, унда һәр яҙмыш таҙа көҙгөләге һымаҡ сағыла. Һуңғы һулыш мәлендә кеше үҙенең кемлеген аңлаясаҡ. Барыһы ла тап Нәжип Фазыл әйткәнсә:

*Ҡорғандар алмашына был мәл: төшә лә күтәрелә,*

*«Хуш килдең, Ғазраил!» - тип әйтергә генә кала...*

Бөтә үткән ғүмерен кеше был мәл йөрәге аша үткәрә. Әҙәм балаһы өсөн ошонан да ғибрәтлерәк тамаша юҡ. Фани донъяла һәр һулышыбыҙ һайын ҡылған ғибәҙәттәребеҙ, ғәмәлдәребеҙ, изгелектәребеҙ һуңғы һулышыбыҙ мәлендә сығарылған хөкөмдөң йөкмәткеһен тәшкил итә. Ул хөкөм Әхирәттә беҙҙе нимә көтөүе хаҡында һөйләй.

Ҡиәмәткә ҡәҙәр һуҙыласаҡ ҡәбер тормошобоҙ фани донъялағы хәлебеҙгә, эштәребеҙгә ярашлы биреләсәк. Әхирәттәге һуңғы адресын аныҡ белгән, уға ныҡлы әҙерләнгән әҙәм генә үлем алып килгән юғалтыуҙарҙы еңеүгә, матәмде «тәүге никах төнө»нә әүерелдерергә һәләтле. Аллаһтың ундай ҡолдары төн һәм таң мәлендәге зекерҙәрҙең (Аллаһты маҡтау доғалары) хаҡын белә. Ул зекерҙәргә таң алдынан барса ғаләм ҡушыла. Таң - киләһе көндөң башланғысы, йоҡлап, унан үҙҙәрен мәхрүм итеүселәр бәрәкәтле ләйсән ямғырҙан баш тартҡан ялан-ҡырҙар ише. Шундай моңһоҙлоҡтан ҡурҡҡан Аллаһ ҡолдары Ҡөрьән мөхитен һәм тәфәккерҙе (уйға батыу) ташламай. Ҡөрьән аҡылын һулап, улар шундай һабаҡ ала: Аллаһтың Илаһи сифаттары Кеше, Ҡөрьән һәм Йыһанда үҙенең сағылышын тапҡан. Йыһан ғәжәйеп билдәләр һәм серҙәр тулы китап һымаҡ, Ҡөрьән – Илаһи асылдың сағылышы. Ҡөрьән – һүҙгә уралған Йыһан. Ғилем эстәүсе һәм Аллаһ ҡоло булған кеше ике сфера киҫешкән урында тора. Ҡөрьән мөхитендәге һәм тәфәккерҙәге йәшерен ғилемдәрҙе белеүсе ғарифтар һәр нәмә башында Ҡөрьән тороуын, ә фән уның артынан эйәреүен белә.

Ҡөрьән Раббыбыҙ үҙ ҡолдарына биргән барса ғилемде бергә туплаған. Ул яңы асыштар өсөн әҙәм балаларына аҡыл да бирә. Ҡөрьән һәм тәфәккергә килгәндә, шуны әйтә алабыҙ: ҡеүәтле ағас үҫһен өсөн бер ҡарыш ер һәм бер орлоҡ ҡына кәрәк булған кеүек, Ҡөрьәнде уҡып, унан көс алып ҡына хаҡты ҡабул итергә өйрәнә алабыҙ. Әгәр Ҡөрьәндә иге-сиге булмаған рухи ғилем һәм тура юлға баҫтырыу көсө булмаһа, беҙҙең уйланыу һәм хаҡты ҡабул итеү ҡеүәбеҙ һутлы тупраҡҡа төшмәй кипкән орлоҡ кеүек булыр ине. Беҙгә, ҡолдарына, Ҡөрьәндә кәүҙәләнгән Аллаһтың бөйөклөгөн, ихтыярын аңларға ынтылыуҙан да олораҡ бәхет юҡ.

Хаталар, гөнаһтар йорто булған ығы-зығылы донъяның һынауҙары эсендә хаҡты танып белгән йәндәр тәүбәләре һәм күҙ йәштәре менән йөҙҙәрен нурландыра, йөрәктәрен сафландыра. Аллаһтың был һайлам ҡолдарын шағир бик күркәм тасуирлаған:

*Аяҡ аҫтындағы тупраҡ ише*
*Бар баҫалҡы йәндәр.*
*Офоҡтарҙы ҡоскан изге йәндәр*
*Намаҙ рәттәрендә иң һуңғыһы.*
*Улар өсөн һәр мәл һуңғыһы кеүек.*
*Мәңгелек тә кеүек ул ғүмер.*
*Раббыһын онотҡан һәр бер мәлде*
*Ғүмер буйы йыуа әсе күҙ йәше…*

Гел доғала булған был ғарифтар тураһында Аллаһы Тәғәлә былай ти:

قُلْ مَا يَعْبَأُ بِكُمْ رَبِّي لَوْ لاَ دُعَاؤُكُمْ

**«Әйт: «Аллаһҡа мөрәжәғәт итмәгән булһағыҙ, Аллаһ һеҙгә иғтибар итмәгән булыр ине...»** (Фурҡан, 25/77).

Тормоштоң һәр минутын Аллаһҡа бағышлауҙары менән улар фатихалы, бәхетле өммәткә ҡарай, ынтылыштары Раббыбыҙға, яҡшылыҡҡа саҡырыу менән биҙәлгән. Изге аятта шундай һүҙҙәр бар:

كُنتُمْ خَيْرَ أُمَّةٍ أُخْرِجَتْ لِلنَّاسِ تَأْمُرُونَ بِالْمَعْرُوفِ وَتَنْهَوْنَ عَنِ الْمُنكَرِ

**«Һеҙ — кешеләрҙең именлеге өсөн** (Ләүхел Мәхфүздә һайланып) **донъяла мәртәбәгә күтәрелгән иң изгелекле бер ҡәүем. Изгелеккә өндәп, яманлыҡтан ваз кисергә саҡырҙығыҙ…»** (Әлү Ғимран, 3/110).

Үҙҙәрен ошо маҡсатҡа арнаусылар рухи донъяларын Исламдың нәзәкәтлеге, тәьҫирлелеге, юғарылығы менән биҙәй; әхүәле рухиәләре, һүҙҙәре, ғәмәлдәре яҡтылыҡҡа өндәүсе өлгө. Раббыбыҙға саҡырыуҙа улар изге аятҡа таянып эш итә:

اُدْعُ إِلِى سَبِيلِ رَبِّكَ بِالْحِكْمَةِ وَالْمَوْعِظَةِ الْحَسَنَةِ وَجَادِلْهُم بِالَّتِي هِيَ أَحْسَنُ

**«**(Ий, Мөхәммәд) **һин Раббың юлына хикмәттәр һәм матур өгөттәр менән саҡыр, улар менән бик тә гүзәл рәүештә бәхәсләш»** (Нәхл, 16/125).

Был гүзәл ғилемдәр мөьминдең йөрәгенә үтеп инһә, уның рухи донъяһы һәм ғәмәлдәре лә гүзәл була. Ул үҙенә кәрәк булғанды саҙаҡа итеп биреүҙән йәм таба, булғанына шөкөр итеп, әхүәле рухиәһен байыта. Сауҙаһында ул таянған этик нормалар Аллаһ рәсүлененең, саллаллаһу ғәләйһи

үә сәлләм, бәрәкәт тулы сауҙа эштәре һымаҡ. Әгәр мөьмин хәләл килем юлдарын ҡулланмаһа, харам килем яман шеш кеүек була. Саҙаҡа – Аллаһҡа бирелгән һәйбәт үтес. Үтескә биреү һәм алыу мәсьәләһендә мөьмин илаһи талаптарҙы ентекле үтәй. Ул бит Аллаһ һәм уның Пәйғәмбәре, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән дуҫтарса килешеү төҙөгән. Ул Аллаһтың яратҡан ҡолдары – әүлиәләр (рәхмәтуллаһи ғәләйһим) менән килешеү төҙөгән. Был дуҫлыҡты вафа (биргән һүҙгә тоғролоҡ) менән нығытҡан. Юғары намыҫҡа эйә булған мөьминдәр язаға тарттырылғанда ла биргән анттарын боҙмаясаҡ. Үҙҙәренең әхүәле рухиәһе, холҡо менән улар имандың юғары баҫҡысына күтәрелгән.

***Ҡәҙерле уҡыусым!***

Шуны һис оноторға ярамай: әҙәм балаһы көн һайын, төн һайын үлемгә яҡын йөрөй. Үлем уны аҙым һайын һағалап тора. **Мәүләнә Йәләлетдин Руми** (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) үҙенең «*Мәснәүиҙәр»ендә* былай ти:

*«Асылда, һәр мәлебеҙ менән үлемгә, йәнебеҙ тәндән айырылыуға яҡынлашабыҙ; һәр мәлебеҙ – ғүмеребеҙҙең ҡыҫҡарыуы ул».*

Һәр көн һайын был ваҡытлы донъянан алыҫлашабыҙ, ҡәбергә юлыбыҙ яҡыная түгелме? Йәшәлгән һәр көнөбөҙ ғүмеребеҙ календарынан бер битте йыртып ташлай түгелме?

Ҡәбер өҫтөнә ҡуйылған һәр таш – тереләргә нәсихәт. Зыяраттарҙа, юл ситтәрендә, мәсеттәр янындағы ул ҡәберҙәр үлемде һәм ерҙәге һәр нәмәнең фани булыуын хәтергә төшөрә. Үлемдең ҡурҡыныс баҫырауын һүҙҙәрҙең зәғиф иңдәре күтәрә алмай. Үлем алдынан ниндәйҙер көскә эйә булған һәр нәмәнең аҙаҡ баһаһы һуҡыр бер тин.

Һәр кеше өсөн үлем – Ҡиәмәт сәғәте. Үкенеүселәр рәтен тултырмаҫ өсөн, шул Ҡиәмәт сәғәтенә ҡәҙәр йоҡобоҙҙан айнырға тейешбеҙ. Ғазраил ҡайҙа һәм ҡасан көтөп торғанын берәү ҙә белмәй. Үлемдән ҡасып ҡотола торған урын юҡ. Бәс, шулай булғас, һәр минуттың ҡәҙерен белеп, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бойороғон үтәргә ашығыу кәрәк: فَفِرُّوا إِلَى اللّٰهِ **«Барығыҙ ҙа Аллаһҡа һыйынығыҙ...»** (Ҙәрийәт, 51/50).

Аллаһ ҡолдарынан берәү ҙә, пәйғәмбәрҙәрҙән башҡа, ғәләйһис-сәләм, иман мәсьәләһендә тайып китеү ҡурҡынысынан азат түгел. Шуға күрә һәр мөьмин бүләк итеп бирелгән ғүмерен лайыҡлы файҙаланырға тейеш. Йөрәкте өшөтөрлөк үлем ҡурҡынысынан берҙән-бер һаҡланыу сараһы –

тәҡүәлек. Үлемгә ысынлап әҙер булыусылар унан ҡурҡмай, киреһенсә, мәңгелек менән ҡауышыу сараһы итеп ҡарай. Улар – хатта «үлемде гүзәл итә алыусылар,» хозурлыҡҡа (рухи тыныслыҡҡа) ирешеүселәр. Вайымһыҙ ғүмер һөрөүселәр үҙҙәрен үлем ҡурҡыныcына һәм Әхирәттәге һәләкәткә әҙерләй. Мәүләнә Йәләлетдин Руми (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) бик матур әйткән:

*«Улым, һәр кемдең үлеме уның үҙенә хас: Аллаһҡа яҡынайтыуын аңламайынса, уны күрә алмағандарға, ерәнеп ҡарағандарға – дошман ул. Ә үлемгә дуҫтарса ҡарағандарға – дуҫ».*

Тап-таҙа, тигеҙ көҙгө һымаҡ ул һуңғы һулыш. Һәр кеше ул көҙгөлә барса яҡшы һәм яман ҡылыҡтары менән бөтә ғүмерен күрә. Бер ниндәй ҙә кирелек, вайымһыҙлыҡ ҡорғаны ҡараштырҙы, ҡолаҡтарҙы томалай алмай. Киреһенсә, бөтә ҡорғандар, кәртәләр ауып төшәсәк, әҙәм балаһы тәрән үкенестә буласаҡ. Һуңғы һулышыбыҙҙа үкенестәр менән тулы көҙгөнө күрергә яҙмаһын. Беҙ иҫән саҡта, тормошобоҙҙа изге Ҡөрьән һәм намыҫлы Сөннә беҙгә юлдаш булһын. Иң бәхетлеләр – үлемен танығансы үҙен таныусылар.

**Раббым, һуңғы һулышыбыҙҙа мәңгелектә беҙгә әҙерләнгән бүләктәрҙе күрергә насип ит…**

**Әмин!..**

**Нуриман Хәҙрәт МУСИН**

# *Һуңғы һулыш - 1*

*Әҙәм үҙ ғүмерендә бик күп тапҡырҙар үлем менән йөҙмә-йөҙ осраша. Ауырыуҙар, ғәҙәттән тыш хәлдәр, һағалап ҡына торған хәүеф-хәтәрҙәр кешенең моңһоҙлоғо, зәғифлеге арҡаһында эҙһеҙ үтәме, артында үлем торған пәрҙәнең үтә лә йоҡа булыуын төшөндөрмәйме?*

# *Һуңғы һулыш - 1*

Аллаһу Тәғәлә Әл-Бәҡый (Мәңгелек) сифатын был донъяла Үҙенә генә ҡалдырған, шуға күрә һәммәһе лә үлемгә дусар. Изге аяттарҙа шулай тип әйтелә:

كُلُّ مَنْ عَلَيْهَا فَانٍ

**«Ер йөҙөндәгеләрҙең барыһы ла юҡҡа сығасаҡ»** (Рахмән, 55/26);

كُلُّ نَفْسٍ ذَائِقَةُ الْمَوْتِ

**«Һәр йән эйәһе үлем әсеһен татыр…»** (Әнбиә, 21/35).

Һәр әҙәм үлемгә дусар, шуға күрә был турала уйланыу лазым. Изге аят киҫәтә:

وَجَاءتْ سَكْرَةُ الْمَوْتِ بِالْحَقِّ ذَلِكَ مَا كُنتَ مِنْهُ تَحِيدُ

**«Көндәрҙән бер көндө үлем иләҫлеге килер. Һинең ғүмер буйы ҡасып йөрөгән нәмәң шул (әжәл) булыр»** (Ҡаф, 50/19).

Кеше был фани донъяға һынау өсөн ебәрелгән, тимәк уның төп бурысы – Аллаһу Тәғәләнең ризалығын алырҙай ғәмәлдәр ҡылыу һәм бәхет, именлек һарайы булған йәннәткә инергә лайыҡлы булыу. Донъялыҡта Әхирәт баҫыуы өсөн ҙур тырышлыҡ һалып орлоҡ сәсеүселәр сәғәҙәткә өлгәшер:

يَوْمَ لاَ يَنفَعُ مَالٌ وَ لاَ بَنُونَ إِلاَّ مَنْ أَتَى اللّٰهَ بِقَلْبٍ سَلِيمٍ

**«Ул Көндө мал да, улдар ҙа файҙа килтермәç. Әммә ләкин Аллаһҡа саф күңел менән инанғандар (ул Көндө) бәхетле булыр»** (Шүғәрә, 26/88-89).

Быға нәпсеңде ауыҙлыҡлап, тәрбиәләп кенә ирешергә мөмкин. Хаҡ юлға өндәгән пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткәндәрен еренә еткереп үтәү – нәпсене тәрбиә ҡылыу сараһы. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ябраил фәрештә аша Изге Ҡөрьәнде пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йөрәгенә индергән, шуға күрә уның һәр бер ғибәҙәтен, һәр бер һүҙен, һәр бер ғәмәлен Ҡөрьән тәфсире итеп ҡарарға кәрәк. Хөрмәтле пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, рухиәтенән үҙ өлөшөбөҙҙө алыр өсөн, беҙ уны үҙебеҙҙе, балаларыбыҙҙы, яҡындарыбыҙҙы яратҡандан да ныҒыраҡ яратырға тейешбеҙ. Ул һөйөү Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә оло һөйөү булып әүерелер, сөнки пәйәмбәребеҙҙе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөү – ул Аллаһты һөйөү, ә Аллаһты һөйөү – ул пәйғәмбәребеҙҙе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөү. Раббыбыҙға яҡынайыу өсөн, әхүәле рухиәләребеҙҙе шундай камил дәрәжәгә күтәреү мөһим.

Һуңғы һулышҡа иң гүзәл әҙерлек был. Тормоштарын изге эштәр менән биҙәп, Аллаһҡа һәм уның пәйғәмбәренә оло һөйөү менән ғүмер кисергәндәр ғүмерҙәренең һуңғы минуттарын тыныс күңел менән, кәлимә-и шәһәҙәт (Әшһәду әлләә иләһә илләллааһу үә әшһәду әннә Мүхәммәдән ғабдүһүү үә расүүлүһ!) әйтеп ҡаршы аласаҡ. Хөрмәтле пәйғәмбәребеҙ әйтеп ҡалдырған шатлыҡлы хәбәрҙе ишетәсәк:

*«Кем һуңғы һулышында (бөтә йөрәктән) кәлимә-и-тәүхидте әйтә, шул Йәннәткә инәсәк».* *(Хәким, Мустадрак, I, 503)*

Иншә Аллаһ, бер Аллаһҡа ышанып йәшәүселәр һуңғы минуттарында кәлимә-и-тәүхид менән Хаҡ Тәғәләгә китәсәктәр.

Шуны иҫтә тотоу лазым: тотош донъяға, бөтә ғаләмгә идара иткән Аллаһы Тәғәлә Еребеҙҙе иҫәпһеҙ күп матурлыҡтар менән биҙәгән, әммә ул ваҡытлы төйәгебеҙ. Йыһанда бер нәмә лә буштан-бушҡа барлыҡҡа килмәгән. Ошо донъяла йәшәгән кешенең маҡсаты – мәңгелек донъяһында сәғәҙәткә ирешеү. Был хаҡта Раббыбыҙ беҙҙе киҫәтеп әйткән:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُواْ اتَّقُواْ اللّهَ حَقَّ تُقَاتِهِ وَلاَ تَمُوتُنَّ إِلاَّ وَأَنتُم مُّسْلِمُونَ

**«Әй, иман килтергәндәр, Аллаһтың язаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыктан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ (мосолман булып үлегеҙ)»** (Әлү Ғимран, 3/102).

Ғүмере булған һәр кешенең үлеме – уның ер тормошо менән хушлашыуы һәм шәхсән үҙе өсөн Ҡиәмәт сәғәте. Шуны ла оноторға ярамай: әҙәм балаһы көн һайын, төн һайын үлемгә яҡын йөрөй. Үлем уны аҙым һайын һағалап тора. **Мәүләнә Йәләлетдин Руми** (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) үҙенең «*Мәснәүиҙәр»ендә* былай ти:

*«Асылда, һәр мәлебеҙ менән үлемгә, йәнебеҙ тәндән айырылыуға яҡынлашабыҙ; һәр мәлебеҙ – ғүмеребеҙҙең ҡыҫҡарыуы ул».*

Үткән ғүмерҙе ағым һыу менән сағыштырып, хөрмәтле **Мәүләнә** әҙәмде вайымһыҙ булмаҫҡа саҡыра:

*«Эй, әҙәм! Көҙгөлә сағылған йөҙөңә ҡара! Сибәрлегең ҡарт көнөңдә харабаға әйләнгән бина кеүек булыр, буш хыялдар менән үҙеңде алдама!..»*

Һуңғы һулышыбыҙ – мең хикмәт тулы илаһи сер. Киләсәктә буласаҡ иң мөһим ваҡиғабыҙ - үлемебеҙ – илаһи тәҡдиргә бәйле. Әҙәм үҙ ғүмерендә бик күп тапҡырҙар үлем менән йөҙмә-йөҙ осраша. Ауырыуҙар, ғәҙәттән тыш хәлдәр, һағалап ҡына торған хәүеф-хәтәрҙәр кешенең моңһоҙлоғо, зәғифлеге арҡаһында эҙһеҙ үтәме, артында үлем торған пәрҙәнең үтә лә йоҡа булыуын төшөндөрмәйме? Көн эсендә генә лә кеше нисәмә тапҡыр үлем һулышын тоя, тик уға артабан йәшәргә, хаталарын төҙәтергә мөмкинлек бирелә, Әхирәттә иһә ундай мөмкинлек булмаясаҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әҙәм балаһы вайымһыҙ, ғүмер календарының биттәре берәм-берәм ҡойолоуын ул битараф ҡына күҙәтә бирә.

Асылда тыуғандан алып беҙ көн һайын яйлап үләбеҙ, тик һәр аҙымыбыҙ менән үлемгә атлауыбыҙҙы аңлап ҡына етмәйбеҙ. Беҙгә бүлеп бирелгән ваҡыттың һәр миҙгеле хаҡлыкты күреүгә яҡынайта торған мәл булыуы хаҡында әйтелә изге аятта:

وَمَنْ نُعَمِّرْهُ نُنَكِّسْهُ فِي الْخَلْقِ أَفَلاَ يَعْقِلُونَ

**«Берәүһенә оҙон ғүмер бирә ҡалһаҡ, Беҙ уны бөкрәйтеп бөтөрөрбөҙ. Шул турала уйлап ҡарамайҙармы?»** (Йә Син, 36/68).

Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡәҙәр йәшәгән иманлы ҡоло Ҡус бин Саида баҙарҙа һөйләгән бер телмәрендә әйтерһең дә был аяттың асылын асып һала:

*«Эй һеҙ, кешеләр!*

*Яҡын килегеҙ, тыңлағыҙ, белегеҙ һәм нәсихәт алығыҙ!*

*Йәшәгән үлер, үлгән юҡҡа сығыр. Ямғыр яуыр, үлән үҫер. Балалар тыуыр, ата-әсәһенең урынын алыр. Аҙаҡ һәммәһе юҡҡа сығыр. Ваҡиғалар сылбыры өҙөлмәҫ. Һәр кем был сылбырҙа бер-береһен алмаштырыр...»*

Аллаһ бүләк итеп биргән һулыштарыбыҙ бөткәс, һуңғы һулыш алған көнөбөҙҙә, хушлашып йәки хушлашып та өлгөрмәйенсә, үлем менән осрашырбыҙ. Әммә Раббыбыҙҙы яратҡан иманлы ҡолдар өсөн ул үлем менән осрашыу булмаясаҡ, ә бәхетле яңынан тыуыу, һөйгәндең Һөйгәне менән осрашыуы буласаҡ. Бының өсөн түбәндәге һүҙҙәрҙең йәшерен мәғәнәһен аңлау кәрәк:

*«Үлемгә ҡәҙәр үлегеҙ».*

Был серҙе **Мәүләнә Руми** шундай фраза менән асып һалды:

*«Терелеү өсөн үлегеҙ!»*

**Хәлиф Али**, разыйаллаһу ғәнһү, иһә былай тип раҫлай:

*«Кешеләр серем итә. Үлем килгәс тереләләр...»*

Беҙгә нәпселе теләктәргә, ығы-зығылы тормоштоң талаптарына буйһонмау, хайуани кимәлгә төшмәү зарур, шунда ғына Аллаһу Тәғәлә биргән йәнебеҙгә торошло ысын тормош менән йәшәй аласаҡбыҙ. Иң фажиғәле үлем – Раббыбыҙ тураһында белмәйенсә, Уның ризалығын алмайынса үлеү. Һәр мөьмин иҫтә тоторға тейеш: үлем сәғәте уның йәшәү рәүешенә бәрәбәр, шуға күрә имандан ихсанға илтеүсе тәрбиәне үтеү лазым. Пәйғәмбәрҙәрҙән ҡала бер әҙәм дә ни рәүешле үлерен, ни рәүешле ҡубарылырын белмәй. Йософ ғәләйһис-сәлләмдең доғаһында тәрән мәғәнә һалынған:

تَوَفَّنِي مُسْلِمًا وَأَلْحِقْنِي بِالصَّالِحِينَ

**«Мосолман булған хәлемдә йәнемде ал, зинһар. Һәм мине изгеләр рәтенә ҡуй»** (Йусуф, 12/101).

Һәр бер иманлы әҙәм үҙ йөрәген хәүеф һәм өмөт менән тулы булған юғары камиллыҡ дәрәжәһенә күтәрергә тейеш. Бындай камиллыҡ уға һуңғы һулышын да иман менән алырға мөмкинлек бирәсәк. Һуңғы һулышыбыҙ мәңгелектәге тормошобоҙҙо тасуирлар. Хаҡ юлға әйҙәүсе булған изге Ҡөрьәнебеҙ мәңгелек хозурлыҡҡа эйә булыу юлында һуңғы һулышына ҡәҙәр иман өсөн көрәшеүселәр хаҡында нәсихәт бирә.

**Фирғәүен сихырсылары**, Муса ғәләйһис-сәләм күрһәткән мөғжизәнән һуң, иманға ҡайтып, былай ти:

**«Ғаләмдәрҙең һәм Муса менән Һарундың Раббыһы булған Аллаһҡа инандыҡ!»** (Әғрәф, 7/121-122).

Хакимиәте һәм көсө бойороу хоҡуғы бирә тип иҫәпләгән, аҡылын юйған фирғәүен уларға янай башлай:

**«Минең рөхсәтемдән башҡа һеҙ нисек итеп (Аллаһҡа) иман килтерҙегеҙ?.. Ант итеп әйтәм, аяҡ-ҡулдарығыҙҙы арҡылы-торҡоло сапҡылап ташлаясаҡмын, унан һуң бөтәгеҙҙе лә аҫып ҡуясаҡмын»** (Әғрәф, 7/123-124).

Иман килтергән:

**«сихырсылар әйттеләр: «Шулай булғас, теләгәнеңде эшлә. Һин бары тик ошо донъяла ғына хөкөм итә алаһың!»** (Та Һа, 20/72),

رَبَّنَا أَفْرِغْ عَلَيْنَا صَبْرًا وَتَوَفَّنَا مُسْلِمِينَ

**«... Йә, Раббыбыҙ, беҙгә сабырлыҡ бир, мосолман булараҡ йәнебеҙҙе ал... »** (Әғрәф, 7/126).

Бүләк ителгән хаҡ юл өсөн, уларҙың аяҡ-ҡулдарын киҫәләр һәм улар Хаҡ Тәғәлә ҡашына шәһиттәр һәм изгеләр данына лайыҡ булып китә.

Залимдар **Утлы Ур әһелдәрен** дә һәләк итә: Аллаһҡа иман килтергәндәре өсөн, уларҙы енәйәтселәргә һанап, утлы соҡорҙарға ташлайҙар. Был хаҡ мөьминдәр, ауыр яҙаларҙан ҡурҡмайынса, Аллаһ бүләге булған иманға тоғро ҡала, үлемде һис бер ҡурҡыуһыҙ ҡаршы ала - Аллаһтан ысынлап ҡурҡҡандар өсөн һис нимә ҡурҡыныс түгел.

Иман килтергән **Хәбиб Наджарҙы** ауылдаштары таштар менән бәргеләп үлтерә. Фани донъя ишектәре ябылған мәлдә, Әхирәт донъяһына

асылған тәҙрә аша үҙенә биреләсәк илаһи бүләктәрҙе күрә ул һәм үҙенең томана наҙан халҡын йәлләп былай ти:

**«... Аһ, ни ҡыҙғаныс, Раббымдың нисек итеп мине (йәннәткә) лайыҡ иткәнен халҡым күрһә ине…»** (Йә Син, 36/26-27).

Таштар менән бәргеләнеп тә иманын һатмаған өсөн, уға мәңгелек донъяла йәннәт вәғәҙә ителә. Ғүмере **Аллаһ менән** тығыҙ **бәйләнештә** булғандар ана шундай рухи бейеклектәргә күтәрелергә һәләтле.

Риүәйәттәрҙә бәйән ителеүенсә, бер заман мәсеттә халыҡҡа Ҡиәмәт көнө хаҡында һөйләйҙәр. Халыҡ араһында **Шибли** шәйех, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, була. Лекция аҙағында вәғәз һөйләүсе ҡәберҙә һорау алыу тураһында һүҙ ҡуҙғата:

«Алған белемеңде нисек ҡулланыуың хаҡында һораясаҡтар. Булған милкеңде нисек сарыф итеүең хаҡында һораясаҡтар. Харам-хәләлгә иғтибар итеү-итмәүең хаҡында һораясаҡтар. Һораясаҡтар, һораясаҡтар!...» - шул рәүешле ул һораласаҡ күп нәмәләр хаҡында һөйләй.

Бик күп һөйләнеп тә иң мөһиме әйтелмәгәс, Шибли шәйех былай ти:

**- Хөрмәтлем! Аллаһы Тәғәлә һорауҙы улай күп бирмәйәсәк. Ул шулай тип кенә әйтәсәк: «Ҡолом минең! Мин һинең менән булдым, ә һин кем менән булдың?»**

Иң мөһиме – Аллаһ менән бергә булыу һәм һәр һулышыңды юҡ-барға сарыф итмәү. Түбәндәге хикмәтле һүҙҙәр ҙә быны раҫлай:

*Юғалғанын аңланыҡ беҙ*
*Һинһеҙ үткән ғүмерҙең...*

**Ибн Ғүмәрҙе**, раҙыйаллаһу ғәнһү, иңдәренән тотоп, **Аллаһ илсеһе**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шуға саҡыра:

*«Был донъяла сит кеше йәки мосафир кеүек бул!»* (Бухари, Рикак, 3)

Хаҡты тәрән тойған Ибн Ғүмәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, әңгәмә ҡорғанда гел шундай нәсихәт биргән:

«Кискә ҡәҙәр йәшәһәң, иртәне көтмә, таңды еткерһәң, кисте күрергә өмөтләнмә. Һау сағыңыда, ауырыу хаҡында уйлан, иҫән сағыңда – үлем хаҡында». (Бухари, Рикак, 3)

Ләйсән ямғырға  бәрәбәр ҡыҫҡа ваҡытлы фани донъя беҙҙе хаҡ тормошҡа йүнәлтә. Аллаһ илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шулай тигән:

*«Эй, Аллам! Хаҡ тормош – ул Әхирәт».* (Бухари, Рикак, 3)

Бик күп миҫалдар сәхәбәләрҙең ул йәшерен серҙең айышына төшөнөүе тураһында һөйләй.

**Хубәйб**, раҙыйаллаһу ғәнһү, мөшрик халыҡтар ҡулына барып ҡапҡас, был донъялағы һуңғы теләге шундай була: ул Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөү тулы сәләмен еткергеһе килә. Һағыш тулы күҙҙәрен күккә төбәп, Хубәйб, раҙыйаллаһу ғәнһү, былай ти:

- Эй, Аллам! Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һуңғы сәләмемде еткерерҙәй бер әҙәм дә юҡ бында. Һин уны тапшыр инде!

Был мәлдә Мәҙинәлә сәхәбәләре араһында ултырған Аллаһ илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үәхи аша уның сәләмен ала һәм әйтә:

- *Һиңә лә «сәләм» булһын.*

Сәхәбәләр һорай ҡуя:

- Йә, Рәсүлуллаһ, кемдең сәләменә яуап ҡайтарҙың?

- *Иптәшегеҙ Хубәйбтең сәләменә*[1].

Артабан пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уны **«шәһиттәрҙең бөйөгө»** тип иҫкә ала һәм өҫтәп ҡуя:

***«Йәннәттә ул минең күршем буласаҡ!»***

Йәнә бер оло һөйөү һәм фиҙакәрлек миҫалы:

Өхөд һуғышынан һуң, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яу яланына үлеләр һәм яралылар хаҡында белергә ебәрә. Айырыуса уны **Сәғд бин Раби**, раҙыйаллаһу ғәнһү, исемле сәхәбәнең яҙмышы борсой, тик уны таба алмайҙар. Шул саҡта үлектәр менән тулы яу яланына ҡарап, уны эҙләп йөрөгән сәхәбә өмөт менән былай ти: «Әй, Сәғд, мине Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ебәрҙе. Ул һинең тереләр араһындамы, әллә үлеләр араһындамы икәнлегеңде асыҡларға ҡушты». Яҙмышы менән пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡыҙыҡһыныуын ишеткән, инде һуңғы һулышын алған Сәғд аҡтыҡ көсөн йыйып яуап бирә:

1 Бохари, Магази, 10; Вакиди, Магази, 280-281 бит.

**«Мин инде үлеләр араһында!»**

Йүгереп килеп еткән сәхәбә ҡылыстан үткән, ҡанға батҡан Сәғдтең һуңғы һүҙҙәрен ишетә:

**«Аллаһ менән ант итәм, күҙҙәрегеҙ күрә алғанда Рәсүлуллаһты, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яҡламаһағыҙ һәм уның менән берәй аяныслы хәл килеп тыуһа, Аллаһ һеҙҙән өмөтөн өҙөр һәм Уның асыуынан һеҙҙе бер кем дә ҡотҡармаҫ».**[2]

Сәғд бин Рабиҙың, рaҙыйаллаһу ғәнһү, һуңғы һүҙҙәре – бөтә өммәткә васыят та, шул ваҡытта фани донъя менән хушлашыу ҙа була.

Сәхәбәләр үлем менән яғалашҡанда ла рухи юғарылыҡтарын кәметмәй. Хөрмәтле **Хузайфа**, раҙыйаллаһу ғәнһү, бына нимә тип һөйләй:

«Ярмук янындағы һуғыш ине был. Ҡыҙыу алыш артта ҡалды, ҡылыстан үткән, һөңгөләр менән яраланған мосолмандар ҡыҙған ҡом өҫтөндә үлем эсендә ята. Мин, һуңғы көсөмдө йыйып, ике туған ҡустым **Харисты** эҙләп киттем. Ул, үлемесле яраланып, һуңғы минуттарын кисерә ине - ҡанһырап, инде һөйләшә лә алмай, күҙҙәре генә әле иҫән булыуы тураһында һөйләй. Мин үҙем менән алған һыулы турһығыма күрһәтеп һораным:

- Һыу эсәһеңме?

Эскеһе килә ине, әлбиттә, ирендәре лә ярғыланып бөткәйне, әммә яуап бирергә хәле генә булманы. Эсерергә тип, һауытты яҡынайттым, тик ошо мәлдә **Икримәнең** тауышы ишетелде:

- Һыу! Һыу! Аллаһ хаҡы өсөн һыу!

Тауышты ишеткәс, Харис ҡустым, эсеүҙән баш тартып, Икримә яғына ымланы. Ҡыҙған ҡомда ятҡан шәһиттәр араһынан йүгереп үтеп, Икримә янына килдем һәм турһығымды һондом. Икримә һыу уртлап та өлгөрмәне, **Ийаштың** ыңғырашыуы ишетелде:

- Һыу бирегеҙ! Аллаһ хаҡы өсөн һыу бирегеҙ!

Ҡулы менән турһыҡты этәреп, Икримә мине Ийашҡа ебәрҙе. Харис һымаҡ ул да һыуҙан баш тартты.

Шәһиттәрҙе урап үтеп, Ийашҡа йүгереп килгәндә, мин Ийаштың һуңғы һүҙҙәрен ишеттем:

2 Ибн Ғәбдилбәр, Истиаб, II, 590 бит.

- Аллам! Иман юлында беҙ бер нәмәбеҙҙе лә йәлләмәнек. Шаһит бул быға, Аллам! Гөнаһтарыбыҙҙы ярлыҡа!

Күрҙем: Ийаш инде шәһит шәрбәтен эсә. Ул минең турһыҡ менән йүгереп килгәнде күрҙе, тик донъялыҡта һыуһынын ҡандырырға өлгөрмәне, шәһәҙәт һүҙҙәрен генә әйтеп өлгөрҙө.

Шунан бөтә көсөмә кире йүгерҙем, Икримәне табып, йәнә турһығымды һондом, тик Икримә лә шәһит киткәйне.

Инде минең берҙән-бер теләгем – Харис ҡустымдың һыуһынын ҡандырыу, тик ҡыҙған ҡом араһында ул да байыҡлыҡҡа күскәйне... Ҡыҙғаныс, өс шәһит янында турһыҡ тулы һыу ятып ҡалды». (Хаким, Мустадрак, III, 270)

Аҙаҡ, ошондағы уй-тойғолары хаҡында һөйләгәндә, Хузайфа былай ти:

«Үҙ ғүмеремдә күпте күрҙем, ләкин күңелде тетрәтерлек ошонан да ауырыраҡ рухи кисереш булманы. Туғанлыҡ ептәре менән бөтөнләй бәйләнмәгән әҙәмдәр бер-береһе хаҡына үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итте һәм ғәмәлдәре менән **«...мосолман булып ҡына үлегеҙ»** изге аятының асылын төшөндөрҙө, улар күңелемдә юғары иман өлгөһө булып уйылып ҡалды...»

**Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәммәбеҙҙең дә һуңғы һулышын ғүмеренең гүзәл нәтижәһе итһен. Ғүмеребеҙҙең һуңғы һулышы мәңгелек бәхеттең тәүге һулышына әйләнһен!**

**Әмин!..**

# *Һуңғы һулыш - 2*

*Был тормоштоң мәғәнәһе шунда:*
*Аллаһтың гүзәл ҡоло булып йәшәү һәм гүзәл ҡоло булып бақыйлыкҡа күсеү. Маҡсатыбыҙ - Аллаһ илсеһененең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, юғары хистәр һәм ынтылыштар менән тулы тормош өлгөһөнән үҙебеҙҙең өлөшкә тейгән рухи ғилемде алыу, йәғни Аллаһтың игелекле, кеселекле, иманлы һәм сабыр ҡолдары булыу.*

# *Һуңғы һулыш - 2*

Аллаһтың гүзәл ҡоло булараҡ ғүмер итергә теләһәк, һуңғы һулышыбыҙға, был донъянан лайыҡлы күсеүгә әҙер булырға тейешбеҙ. Әхирәтебеҙҙә бәхетле булайыҡ тиһәк, тормошобоҙ игелектәр, яҡшылыҡтар, тәҡүәлек кейеме менән биҙәлгән булыуы шарт. Бер изге хәҙистә әйтелә:

*«Әҙәм нисек йәшәһә, шулай үләсәк, нисек үлһә, шулай ҡабат тереләсәк»* (Мунауи, Фәйзул-Ҡадир Шәрхүл-Джами ис-Сағир, V, 663).

Быға миҫалдар бихисап.

Йәнә ғибрәтле бер ваҡиға: өйлә намаҙы тамамланғас, Адапазары мәсетенең мәзине велосипедында Муса шәйехтең сохбетына (дини темаға әңгәмә) юл тота. Урам сатында, йәшел ут янып торғанда юл бирмәйенсә, уны автомобиль бәреп йыға һәм мәзин оло юлға барып төшә. Йүгереп килеп еткән кешеләр уның йөрәкте һулҡылдатырлыҡ һүҙҙәрен ишетә:

**«Раббым, мин һиңә барам!»**

Бик күптәр һуңғы минуттарын ҡурҡыныс итеп төштәрендә күргән мәлдә, берәү Аллаһ менән осрашыуға алдан уҡ әҙерләнеп йөрөй һәм һуңғы мәлендә шатланып әйтә: «Аллаһ, мин һиңә барам!» Хаҡ Тәғәлә беҙгә лә фани донъянан яҡты күңел менән, тәҡүәлек кейемдәренә уранып китергә насип итһен! Әмин!..

Шундай мәҡәл бар:

**«Көршәк һыуға барғанда ватыла».** Йәғни кешенең әхүәле рухиәһе нимә менән тулы булһа, үлгәндә лә шул була. Ҡалыплашҡан бер нәмә лә юҡ, әлбиттә. Ғүмерен изгелектәр ҡылып үткәргән ҡол да һуңғы минутында Аллаһтың рәхмәтенә ирешеүенә тулыһынса өмөт бағлай алмай. Гөнаһтарға батҡан әҙәмдәр ҙә Аллаһтың мәрхәмәтенән өмөт өҙөргә тейеш түгел. Һәммәбеҙҙең һуңғы һулышы – илаһи сер.

Беҙҙең Изге Китабыбыҙҙа – Ҡөрьәндә – тура юлды һайлаған бөйөк шәхестәр менән бергә, хаҡ юлды һайлап, аҙаҡ көфөрлөккә төшөп үлгәндәр ҙә тасуирлана. Алған ғилемдәрен нәпселәрен арттырыуға файҙаланған һәм шул рәүешле Раббыбыҙҙың рәхмәтенән яҙған **Иблис**, **Ҡарун**, **Бәлғәм бин Баура**, хатта тәүҙә Аллаһ илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәһе булған, аҙаҡ фани донъя ауына эләккән **Сәғләбә -** барыһы ла быға асыҡ миҫалдар.

Билдәле булыуынса, **Иблис** Раббыбыҙҙа тәүҙә юғары урын биләгән, әммә ғорурлығына барып, Аллаһы Тәғәләнең Бөйөклөгө, Ҡеүәте, барса мәхлүктәрҙән өҫтөн тороуы хаҡында уйламайынса һәм Әҙәм ғәләйһис-сәләмдән үҙен юғары һанап, буйһоноуҙан баш тартҡан. Тәкәбберлек һәм килелек әсире шулай итеп үҙен ғүмерлек мөртәткә, дәһригә әүерелдергән.

Тәүҙә ярлы һәм иманлы булған **Ҡарун** Муса ғәләйһис-сәләмдән ҡала Тәүратты иң яҡшы тәфсир ҡылыусыларҙан һанала. Муса ғәләйһис-сәләм доғаһы менән уға алхимия ғилеме бирелә. Тик шайтан һәм нәпсеһе ҡотҡоһона бирелгән Ҡарундың йөрәген байлыҡ йыйыу әүәҫлеге ялмап ала. Ул шул ҡәҙәр күп байлыҡ туплай, хазиналары ятҡан келәт асҡыстарын әзмәүерҙәй ир-егеттәрҙән торған тотош отряд саҡ күтәреп йөрөтә. Маһайыусанлығынан, байлыҡ көҫәү дәртенән арыныу теләге унда бөтөнләй булмай, һәм, хазиналары менән яуызлығы ла арта барып, оҙаҡламай ул һауалы залимға әүерелә. Муса ғәләйһис-сәләм, уға мөлкәтенән зәкәт түләргә кәрәклеге тураһында иҫкәрткәс, Ҡарун әҙәпһеҙ һәм тупаҫ рәүештә уға былай ти: «Әллә минең байлыҡҡа күҙең ҡыҙамы? Уларҙы мин үҙем эшләп таптым!..»

Ҡарун, байлығы менән һауаланып, остаҙдары Муса һәм Һарундың (ғәләйһис-сәләм) урынын алырға яҫҡына башлай. Ә Муса ғәләйһис-сәләмгә ялған ғәйептәр тағып сиктән сыҡҡас, уны бөтә хазиналары менән ер йота.

Берәү бөтә мөлкәттәрҙең хужаһы Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә икәнлеген онотоп, йөрәген мөлкәт, байлыҡ, дәрәжәләр тоҙағына тыҡһа, ҡаты аҙашыуы шул була.

**Бәлғәм бин Баураға** Аллаһы Тәғәлә бөйөк исемен аса һәм мөғжизәләр тыуҙырыу һәләте бирә. Йәһүдтәр уны Аллаһҡа яҡын булған ғалим тип иҫәпләй. Ул, асылған һәләттәре баҫырауын күтәрә алмайынса, әхүәле рухиәһен һайығайтып, иманһыҙ булып үлә. Ҡөрьәндә был ваҡиға шулай һүрәтләнә:

**«Һин уларға үҙенә аяттар индерелгән кеше тураһында уҡып күрһәт: ул аяттарымды инҡар итте, шуға күрә, шайтан уны үҙ арты-**

**нан эйәртте, ул кеше аҙғын юлға баҫты. Теләгән булһаҡ, һис шикһеҙ, аяттарыбыҙ ярҙамында Беҙ уны юғары дәрәжәгә күтәргән була инек. Ләкин ул донъя малына йәбеште һәм комһоҙлоҡ нәфсеһенә эйәрҙе. Уның хәле хас эт тормошо кеүек ине. Янына табан килә башлаһаң да, телен сығарып йыш-йыш һулар, янынан китһәң дә, телен аҫылындырып һулап ҡалыр...»** (Әғрәф, 7/175-176).

Бәхетле осорҙа йәшәгән, гүзәл иман эйәһе булған **Сәғләбә**, фани донъяның ялтыр биҙәктәренә ҡыҙығып, мәңгелек бәхетен мәңгелек бәхетһеҙлеккә алмаштыра. Тәүге мәл гел мәсеттә булған, пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер генә вәғәзен дә ҡалдырмаған сәхәбә, байығас, мәсеткә йөрөүен һирәкләтә, аҙаҡ бөтөнләй юҡҡа сыға. Ә зәкәт йыйыусылар өйөнә килгәс, тейешле мөлкәтен биреүҙән баш тарта һәм үҙен ҡыҙғаныс яҙмышҡа дусар итә. Сәғләбә пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, биргән вәғәҙәһен боҙа һәм үлер алдынан әрнеп, үкенеп, пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һүҙҙәрен ҡат-ҡат иҫенә төшөрә:

*«Эй, Сәғләбә, һинең шөкөр ҡылынған бәләкәй милкен һин шөкөр ҡыла алмаҫлыҡ ҙур милкеңдән яҡшыраҡ».*[3]

Тасаввуф юлында ҙур бейеклектәргә күтәрелгән **Суфйан Саури**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, ошондай тарих бәйән ителгәйне:

Йәш ваҡытында уҡ Суфйан Сауриҙың, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, арҡаһы көмрәйә. Быны сәбәбен һорағандар шундай яуап ишетә:

«Мине ғилемгә өйрәткән остаҙым бар ине. Ҙур тырышлыҡ һалыуыма ҡарамаҫтан, ул кәлимә-и-тәүхидте әйтеп китә алманы был донъянан. Мин шаһит булған ул ваҡиға арҡамды көмрәйтте лә инде».

✵

Күреүебеҙсә, һуңғы минуты нindәй булырын берәү ҙә белмәй. Фирғәүен сихырсылары һымаҡ, ғүмер буйы яңылышып та, Әхирәткә күсер алдынан хаҡ юлды табыусылар бар. Ғәмәл дәфтәрҙәрен ҡазаға ҡалып япҡан Ҡарун, Бәлғәм бин Бауралар бар. Әҙәм балаһы ниндәй генә рухи бейеклеккә күтәрелмәһен, нәпсе һәм шайтан үҙҙәре өсөн һәр уңайлы мәлде һағалап боҫҡонда ултыра. Изге Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, Аллаһу Тәғәләгә шайтан шундай антын белдергән:

3 Табари, *Тәфсир*, XIV, 370-372; Ибн Кәҫир, *Тәфсир,* II, 388

**«Һин мине аҙғынлыҡҡа мәхкүм иттең, шуға күрә, мин дә уларҙы аҙҙырыр өсөн һинең тура юлың өҫтөндә ултырасаҡмын...»**[4]. Ул Ҡиәмәткә ҡәҙәр үҙенә ваҡыт һорай һәм теләгәнен ала, сөнки бында ла Аллаһтың бер оло һынауы. Аллаһтың ихлас ҡолдары ғына иблис тоҙағына эләкмәйәсәк, быны иблис үҙе лә таный:

**«Валлаһи, барсаһын аҙҙырасаҡмын. Әлбиттә, һиңә ихлас булғандарҙан башҡаларын»**[5].

Пәғәмбәрҙәрҙән башҡа тайып китеүҙән берәү ҙә азат түгел, бәс, шулай булғас, һәр мөьмин бүләк итеп бирелгән ғүмеренең ысын хаҡын белергә тейеш. Йөрәктәрҙе тетрәтерлек үлем ҡурҡынысынан тырышлыҡ һалып иман юлынан атлау ғына ҡотҡарасаҡ, сөнки үлемгә әҙер булғандар унан ҡурҡмай, мәңгелек тормошҡа юл тип ҡарай. Улар – Аллаһтың ризалығына ирешеп, «үлемде лә гүзәл итергә һәләтле» ҡолдар. **Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, бик матур әйткән:

*«Һәр кемдең үлеме үҙенә оҡшаған: үлемдең Аллаһ менән берләштерәеүен аңламағандар, унан ҡурҡалар, ытырғаналар; үлемгә насар мөнәсәбәттә булғандар өсөн ул – хас дошман, ә кем уға яҡшы мөнәсәбәттә – дуҫ».*

*«Үлемдән ҡото осоп сапҡан йән! Хаҡтың асылы шунда: һин үлемдән түгел, үҙеңдән ҡурҡаһың».*

*«Һин үлем көҙгөһөндә күрергә ҡурҡҡан нәмә үлем һыны түгел, һинең ҡәбәхәт йөҙөң. Йәнең ағас кеүек. Үлем япраҡтар кеүек. Һәр бер япраҡ үҙенә ярашлы ағаста үҫә...»*

Донъялыҡта нәпсеңде буйһондороу, рухыңа һалынған фәрештәләргә хас сифаттарҙы үҫтереү, юғары кимәлгә күтәреү, «үлем килгәнсе үк үлем серен асыу» - хис менән дә, аҡыл менән дә танып белә алмаған Бөйөк һәм Ҡөҙрәтле Аллаһҡа табан бер аҙым ул. Һөҙөмтәһе гүзәл: ғәҙәттә һәр кемдә үлем тыуҙырған ҡурҡыу «иң яҡын дуҫың менән осрашыу» шатлығына әйләнә.

Аллаһ илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғүмеренең һуңғы минуттарында буласаҡ осрашыуҙы көтөп ләззәтләнә. Ул ғүмер буйы Аллаһҡа фиҙакәр хеҙмәт итә һәм уның һуңғы минуттары «тәүге никах төнөнә» әүерелә. Ғәйшә һәм Али, разыйаллаһу ғәнһүмә, һүҙҙәре буйынса,

4 Ҡөрьән, «Әғрәф» 7/16.
5 Ҡөрьән, «Сад» 38/83.

пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үлеменә өс көн ҡала уға Ябраил фәрештә, ғәләйһис-сәләм, килә һәм хәлен һораша. Ул үлер көндө Ябраил фәрештә, ғәләйһис-сәләм, менән бергә үлем фәрештәһе Ғазраил, ғәләйһис-сәләм, килә.

Ябраил фәрештә, ғәләйһис-сәләм, әйтә:

- Эй, Рәсүлуллаһ! Үлем фәрештәһе инергә рөхсәт һорай! Быға саҡлы ул Әҙәм балаларының береһенә лә рөхсәт һорап инмәне, бынан һуң да бер кемдән дә һорамаясаҡ! Уға инергә рөхсәт бир инде!

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, алдына килеп баҫҡас, үлем фәрештәһе, ғәләйһис-сәләм, уға мөрәжәғәт итә:

- Эй, Рәсүлуллаһ! Мине Аллаһу Тәғәлә ебәрҙе һәм һинең фарманыңа буйһонорға ҡушты. Әгәр теләһәң, йәнеңде алырмын! Әгәр теләмәһәң, йәнеңде ҡалдырырмын!

Хөрмәтле пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, аптырап:

*- Эй, үлем фәрештәһе! Һин быны ысынлап әйтәһеңме?*

Ғазраил, ғәләйһис-сәләм әйтә:

- Миңә һинең бойороғоң буйынса эш итергә ҡушылған!

Ябраил фәрештә, ғәләйһис-сәләм, әйтә:

- Эй, Әхмәт, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һине һағынған.

Хөрмәтле пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бойора:

*- Иң һәйбәте, иң тоғроһо – Аллаһтыҡы! Эй, үлем фәрештәһе, ғәләйһис-сәләм! Ал минең йәнемде!*

Ике ҡулын һыулы һауытҡа тығып һәм ҡулдары менән йөҙөн һыпырып, пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйтә:

*- Ләә иләәһә илләллаах! Үлем иҫереклеге һәм аҡылды алыуы хаҡ!* – Аҙаҡ ул, ҡулдарын һоноп, түбәгә баға:

***- Эй Аллам! Рафиҡи-Әғлә, Рафиҡи-Әғлә! (Бөйөк Дуҫым!)*** – Шул һүҙҙәрҙе ҡабатлай-ҡабатлай, Аллаһуға һөйөү һәм уҡталыу тулы фиҙакәр ғүмере менән хушлаша[6].

---

6 Ибн Сағд, Табаҡат,II, 229, 259; Белазури, Әнсаб әль-Әшраф, I, 565; Әхмад бин Ханбәл, VI, 89.

Тасаввуф юлында рухи бейеклектәргә күтәрелгән Аллаһ ҡоло - хөрмәтле **Мәүләнәнең** буласаҡ шатлыҡлы осрашыу минуттарын кисеререүе тураһында уның уҡыусыһы **Хусаметдин Челеби** һөйләй:

Бер тапҡыр **Садретдин шәйех** һәм бер нисә дәрүиш ауырыу Мәүләнәнең хәлен белергә баралар. Хәле мөшкөл икәнен күреп ҡайғыралар. Садретдин шәйех яҡшы теләктәр әйтә:

- Аллаһ һеҙгә иҫәнлек бирһен инде! Тиҙ арала аяҡҡа баҫырға насип итһен!

Уның теләгенә ҡаршы Мәүләнә былай ти:

- Именлек-һаулыҡтар һеҙгә ҡалһын! Һөйгән менән һөйөлгәндең араһы - бер сәс бөртөгө ҡалынлығы. Шул ара юҡҡа сыҡһын да ике яҡтылыҡ бер булһын тип теләмәйһегеҙме ни?[7]

Мәүләнәлә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, күп кешеләргә хас сифат - үлемдән ҡурҡыу булмай, киреһенсә, уның өсөн үлем – Хаҡ Матурлыҡ, йәғни Сикһеҙ Матурлыҡтар Эйәһе булған Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә менән осрашыу ул. Үҙенең робағиҙарында ул былай ти:

*Мин үлгәстен, минең турала*
*Һис берегеҙ үлде тиеп әйтмәһен.*
*Үлем менән мәңгелектә терелдем мин,*
*Раббым алып китте был ерҙән.*

Үлем менән хушлашыуҙы хөрмәтле Мәүләнә һәр ваҡыт «Шәби Ғәрүс» (тәүге никах төнө) тип атай.

✵

Үлем - өнһөҙ яҙҙар иле,
Гүзәл йәндәр хушланып та йөҙә унда..
Ҡәберҙәре кипаристар ышығында.
Таңда рауза сәскә ата бында,
Төнөн һайрап туймай һандуғас... Яхъя Кемал

وَاعْبُدْ رَبَّكَ حَتّٰى يَأْتِيَكَ الْيَقِينُ

**«Әжәлең килгәнгә ҡәҙәр Раббыңа ғибәҙәт ҡыл»** (Хижр, 15/99).

7 Әбу әль-Хәсән ән-Нәдәүи, Ислам Ондерлери Тарихи, I, 449.

Аллаһҡа яҡын булырға тырышҡан һәр бер ҡол тормошон шул ҡағиҙәгә нигеҙләнеп ҡора.

Йәшерен серҙәр һәм камил һөйөүҙе аңлаған һәр бер йән Аллаһ аманат итеп биргән ғүмерен хаҡ юлдағы хеҙмәт һәм ғибәҙәттәр менән биҙәргә һәм Раббыһы ҡашына **сәләмәт ҡәлб** менән менән барып баҫырға теләй.

Илаһи серҙәрҙең асылын аңлаусылар **«Эй Аллам! Рафиҡи-Әғлә, Рафиҡи-Әғлә!» (Бөйөк Дуҫым!)** һүҙҙәрен ҡабатлай-ҡабатлай донъялыҡ менән хушлашҡан пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сөннәтенә эйәрә. Хөрмәтле Мәхмүт Сәми әфәнде шуларҙың береһе, уның һуңғы һулышы – һәммәбеҙ өсөн гүзәл һабаҡ. Изге Ҡөрьән буйынса ғәмәл ҡылып йәшәгән Сәми Әфәнде йөрәге пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оло һөйөү менән тулы була. Ҡар өҫтөндәге эҙҙәре буйлап кешенең үҙен табып булған кеүек, Сәми Әфәнде Рәсүлуллаһ менән бергә булырға теләп, һәр нәмәлә уның Сөннәтенә таяна. Ғүмере уның тәһәжжуд намаҙына аҙан әйтелгәндә өҙөлә. Был мәл янында торғандар уның «Аллаһ, Аллаһ, Аллаһ!..» - тигән һүҙҙәрен ишетә.

Аллаһтың иманлы ҡоло булып йәшәп, иманлы хәлдә китеү – гүзәл маҡсат. Аллаһ беҙҙән шуны көтә: Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йәшәү өлгөһөнән һабаҡ алып, Уның игелекле, изгелекле, әҙәпле ҡолдары булыуҙы. Аллаһу Тәғәләгә бөтә күңеле менән бирелгәндәр хаҡында ғына Раббыбыҙ шулай тип әйтер: **«Ниндәй гүзәл был ҡолом!»** Илаһи һөйөү күңелебеҙҙе биләп алһын өсөн, әхүәле рухиәбеҙҙе юшҡындарҙан, бысраҡтарҙан таҙалау зарур. Шул саҡта Хаҡ яҡтылыҡ һәр күҙәнәгебеҙҙе солғап алыр, һәр һулышыбыҙҙа тойолор, һуңғы һулышыбыҙҙың да асылы булыр.

Рухи тайпылыштар Аллаһты онотоуҙан килә. Изге аят бойора:

وَلَا تَكُونُوا كَالَّذِينَ نَسُوا اللهَ فَأَنسَاهُمْ أَنفُسَهُمْ أُوْلَئِكَ هُمُ الْفَاسِقُونَ

**«Аллаһты оноткан һәм шуның арҡаһында Аллаһ та уларға улар кем булыуын онотторған кешеләр кеүек булмағыҙ. Улар - Аллаһ юлынан яҙған бәндәләр»** (Хәшр, 59/19).

Дөрөҫө шул: бөтә гөнаһтар беҙ Аллаһты онотҡан мәлдә башлана. «Аллаһ», - тип ҡабатлаған, үлемдең ҡотолғоһоҙлоғо хаҡында уйлағандар ғибәҙәттәрен тейешенсә үтәй, кеше хаҡына кермәй, йәғни һүҙе менән дә, ғәмәле менән дә берәүгә лә зыян һалмай...

Ғүмеребеҙ һуңында упҡынға барып юлыҡмаҫ өсөн, йөрәгебеҙ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә бөтмәҫ-төкәнмәҫ һөйөү менән һуғарылырға тейеш. Бәс, шулай булғас, изге аят ҡушҡанса йәшәү зарур:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُواْ اتَّقُواْ اللّهَ حَقَّ تُقَاتِهِ وَلاَ تَمُوتُنَّ إِلاَّ وَأَنتُم مُّسْلِمُونَ

**«Әй, иман килтергәндәр, Аллаһтың яҙаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ (мосолман булып үлегеҙ)»** (Әлү Ғимран, 3/102).

Юғиһә был донъяла ғүмерҙең ҡыҫҡалығының йәки оҙонлоғоноң әһәмиәте юҡ. Илаһи аятта әйтелгәнсә, һәр ғүмерҙең тамамланышы бер төрлө:

كَأَنَّهُمْ يَوْمَ يَرَوْنَهَا لَمْ يَلْبَثُوا إِلَّا عَشِيَّةً أَوْ ضُحَاهَا

**«Ҡиәмәт көнөн күргәс, уларға донъяла өйләгә саҡлы - ярты көн, өйләнән һуң ярты көн генә торған кеүек тойолор»** (Нәзиғәт, 79/46).

Тимәк, шул бер көнлөк ғүмеребеҙҙе Аллаһтың ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып, ғибәҙәттәр менән үткәреү кәрәк. Ошо йәһәттән Джунайд әл-Бағдадиҙың нәсихәттәрендә яңғыраған киҫәтеүҙе ҡолағыбыҙға киртеп ҡуйһаҡ артыҡ булмаҫ:

*«Был донъялағы бер сәғәт Ҡиәмәт көнөнөң бер йылынан ҡиммәтерәк. Ул ваҡытта үҙеңде ҡотҡарыу өсөн бер ғәмәл дә мөмкин булмаясаҡ».*

Бөгөн беҙгә бирелгән ваҡыттың минуты, сәғәте, көнө ифрат та ҡәҙерле, сөнки улар ғәмәлдәребеҙ, ғибәҙәттәребеҙ өсөн бәхетле мөмкинлек. Ә хаж иһә һуңғы һулышыбыҙға әҙерлек өсөн әһимиәтле. Хаждың һәр этабы үлем һәм ҡубарылыуға бәрәбәр. Хаж ҡылыусы бөркәнгән ихрам кәфен һымаҡ. Ғәрәфәт – Аллаһуға тәүбәләр ҡылып, өмөттәребеҙҙе Уға бағлау урыны. Шайтанға таштар атыу – донъя ҡоршауҙарынан арыныу, нәпсеңдән, һәләкәткә илтеүсе теләктәреңдән арыныу өсөн күпме ихтыяр көсө талап ителеүен төшөнөү урыны...Был һынауҙарҙан һуң яңы тыуған бәпәй һымаҡ булыу Раббыбыҙ менән осрашыу хаҡында хәтергә төшөрөр. Тормош менән хушлашыуҙың, һуңғы һулышыбыҙҙың репетицияһы ул. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә шулай камил рәүештә хаж ғәмәлдәрен үтәргә насип итһен.

**Эй, Аллам! Хәйерле рухи ғилем менән тулы тормош бир, беҙҙең һуңғы һулышыбыҙ Хаҡ Раббыбыҙ менән көтөп алынған, һоҡланғыс осрашыу булһын!**

**Әмин!**

# *Һуңғы һулыш - 3*

*Һуңғы һулыш шыма, таҙа көҙгө һымаҡ. Һәр кем унда гүзәлме, йәмһеҙме - үҙенең тормошон күрә. Ул мәл күҙҙәрҙе, ҡолаҡтарҙы томалаған һылтаныу, вайымһыҙлыҡ ҡорғандары шыуып төшәсәк. Барса ҡорғандар алынғас, аҡыл һәм намыҫ, ғәйептәрҙе таныып, үкенергә мәжбүр итер. Иншә. Аллаһ, һуңғы һулышыбыҙ үткән ғүмеребеҙгә үкенеп бағырҙай көҙгөгә әйләнмәһен.*

# *Һуңғы һулыш - 3*

Һуңғы һулышыбыҙ шыма, таҙа көҙгө кеүек, тинек. Һуңғы һулыш мәлендә кеше үҙенең кемлеген асыҡтан-асыҡ күрәсәк. Күңел көҙгөһө йәшәлгән бөтә ғүмергә баһа бирәсәк. Әҙәм балаһы өсөн үлем сәғәтенән дә ғибрәтлерәк картина юҡ.

Изге Ҡөрьәндә бәйән ителгәнсә, Аллаһҡа буйһонмай йәшәгән **фирғәүен**, Илаһи асыу уны Ҡыҙыл диңгеҙ упҡынына быраҡтырғас ҡына, үҙен, ғүмерен һәләк итеүен, хакимлығы һәм ҡеүәтенең хаҡтан күҙен быуҙырған алдатҡыс бер нәмә генә булғанын аңлай. Изге аятта әйтелә:

**«...Ысындан да, Исраил улдары инанған Тәңренән башҡа тәңре булмағанына мин иман килтерҙем. Мин дә мосолман булдым», - тине»** (Йунус, 90).

Әммә эш үткәйне... Ҡыҙыл диңгеҙ һыуҙарында бата башлаған фирғәүен «иман» тип аталған ҡотҡарыу түңәрәгенә йәбешергә кәрәклекте һиҙеп ҡала, әммә Аллаһы Тәғәлә әйтә:

**«Хәҙер иман килтерҙеңме? Гәрсә бынан алда һин буйһонманың һәм аҙғынлыҡ таратыусыларҙан инең»** (Йунус, 91).

Насар ғәмәлдәре язаһыҙ ҡалғанда үҙен имен итеп тойғандарҙың яҙмышы шундай. Һуңғы минуттарында, үткәндәре ныҡышмалы рәүештә кире әйләнеп ҡайтҡанда, улар уяна, һуңлап үкенә, һуңлап тура юлға баҫа. Тәүбәләрҙе һуңғы минутҡа ҡалдырыу - үҙ-үҙеңде алдау ул. Үлемдең өнһеҙ тауышын ишетергә теләмәйенсә, донъяның ығы-зығыһына буйһоноп йәшәү - емештәре әсе булған алданыу.

Аллаһу Тәғәлә байтаҡ аяттарында донъя тормошон имтихан өсөн яралтыуы тураһында әйтә. Изге аяттар, төп маҡсатыбыҙҙы онотоп, вайымһыҙлыҡ һаҙлығына батмаҫҡа саҡыра:

**«Һәр йән эйәһе үлем әсеһен татыр. Һеҙҙе муллыҡ, ләззәт һәм яманлыҡ менән (ымһындырып) һынайбыҙ. Унан һуң һеҙ (ҡылғандарығыҙ өсөн яуап тоторға) ҡайтарыласаҡһығыҙ»** (Әнбиә, 35);

**«Аллаһ кемдең изгелек ҡыласағын һынап ҡарар өсөн, үлемде, йәшәйеш-тормошто бар итте...»** (Мүлк, 2).

Ҡыҫҡаса әйткәндә, йәшәйешебеҙ, ғәмәлдәребеҙ, әхлағыбыҙ, ғибәҙәттәребеҙ - һәммәһе лә һуңғы һулышыбыҙға хат-хәбәр. Ерҙәге тормошобоҙ менән Әхирәттә үҙебеҙгә урын әҙерләйбеҙ.

**Имам Ғазали** (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) былай әйткән:

*«Фани донъяла ғилем алыу ләззәтен татымағандар, мәңгелек тормошта танып-белеүҙән йәм тапмаҫ. Бәндә был донъяла түләмәгән нәмәһенә Әхирәттә эйә була алмаҫ.* ***Унда һәр кем бында сәскәндең уңышын йыясаҡ. Әҙәм нисек йәшәһә, шулай үлер, нисек үлһә, шулай ҡабаттан терелер.*** *Ни кимәлдә бәндә үҙен танып, Хаҡты танып, шуға ярашлы ғәмәл ҡылһа, Әхирәттә ул ирешкән кимәлгә ҡарап бүләк бирелер».*

Һәр һулышыбыҙ менән беҙ үҙебеҙгә йә Аллаһтың язаһын, йә бүләген әҙерләйбеҙ. Аллаһу Тәғәлә беҙҙе, Үҙенең ҡолдарын, изге аяты менән киҫәтә:

**«Әй, иманлы бәндәләр, утын урынына кешеләр һәм таштар яғылған йәһәннәмдән үҙегеҙҙе һәм ғаиләгеҙҙе һаҡлағыҙ»** (Тәхрим, 6);

**«... хәтәр ялкынлы йәһәннәм артығы менән ҡыҙғанда; йәннәт яҡынайғанда, бына шул саҡта һәр бер кеше үҙенең ҡылғандары менән үҙенә ни әҙерләгәнен бик яҡшы аңлар»** (Тәкүир, 12-14);

**«Шулай булғас, (Ҡөрьәнде танымайынса) ҡайҙа китеп бараһығыҙ?»** (Тәкүир, 26).

Һәр әҙәм ҡайҙа юл тотҡанына, үҙенә нимә әҙерләгәненә бик тә иғтибарлы булырға тейеш – һуңғы һулышыбыҙға ҡалдырмайынса, ошо хаҡта даими хәстәрлек күреү зарур. Файҙа, килем, юғалтыу, табыштар – ер тормошона хас ғәмәлдәр. Әхирәттә файҙа һәм килем хаҡында һүҙ ҙә булмаясаҡ.

Ваҡытлы донъя байлыҡтарын өҫтөн күргәндәр, нәпсеһенә буйһоноп, донъяның алдатҡыс ялтырауыҡтарына ҡыҙыҡҡандар, мөкиббән китеп ятҡандар Әхирәттә ҡаза күрәсәк. Ундағы тормошо нindәй буласағын

берәү ҙә белмәй, шуға мәңгелек тормошобоҙға ныҡлы әҙерлек менән барырға тырышыу мөһим.

Икенсе яҡтан, күңелендә иман нуры балҡыған мөьминде үлем ҡурҡытмай, мәңгелек тормошҡа юл кеүек ҡабул ителә. Дуҫтарының, яҡындарының исемдәре теркәлгән ҡәберҙәр, зыяраттар иманлылар өсөн ҡурҡыныс урын түгел, ә өнһөҙ рухи нәсихәт һәм киҫәтеү батшалығы. Уйлана белгән мөьмин өсөн тормош һәм үлем - йәнәшә торған тәбиғи ысынбарлыҡ. Тәҡүәле кешеләр - асылда үлем менән килешеү төҙөүселәр. Әгәр ул донъялыҡта быға әҙерләнгән икән, мәңгелектә рухи тыныслыҡ табасаҡ. Ҡыҫҡаса әйткәндә, йөрәктәрендә Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә оло һөйөү йөрөткәндәрҙең генә һуңғы һулышы гүзәл булыуы ихтимал.

Әхирәткә тулы әҙерлек Раббыбыҙ Изге Ҡөрьәндә әйтеп үткән Аллаһтан ысын ҡурҡыу, тотанаҡлылыҡ, ихласлыҡ, миһырбанлылыҡ һәм игелекле, түбәнселекле, физакәр, түҙемле булыу кеүек **Аллаһ яраткан сифаттарҙы** үҙебеҙҙә тәрбиәләүҙән ғибәрәт. Шуға күрә һәр мөьмин, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең сикһеҙ миһырбанлығынан үҙ өлөшөн алып, йомарт һәм шәфҡәтле булырға, Аллаһтан ысын ҡурҡыу менән ҡурҡырға, әйткән һүҙенә тоғро булырға тейеш. Мөьминдең һуңғы һулышына әҙерлеге һауаланыу, тәкәбберлек, исраф итеүгә әүәҫлек, ғәҙелһеҙлек, яуызлыҡ һәм ғәйбәт, яла яғыу, алдашыу ише йәһәннәм юлына төшәлгән, Аллаһ яратмаған сифаттарҙан бөтөнләйгә арыныу ул.

Ҡол иман менән һуңғы һулышын ҡаршы алһын өсөн, йөрәкте ҡаралыҡтарҙан таҙартыу, насар ғәҙәттәрҙән ҡотолоу зарур. Йөрәгеңде Аллаһтан ысын ҡурҡыу менән байытыу – донъялыҡта беҙ эйә була алған иң күркәм сифат. **Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, рухи таҙарыныуҙың асылын былай аңлата:

«Ҡәбер түшәр өсөн таш та, таҡталар ҙа, кейеҙ ҙә кәрәкмәй. Керләнмәгән күңелеңдә, таҙа әхүәле рухиәңдә үҙ-үҙеңдең нәпсеңә ҡәбер әҙерләргә кәрәк, бының өсөн Аллаһтың бөйөклөгө алдында шәхси дәғүәләреңде һәм мин-минлегеңде ҡыйратып ташлау зарур».

Рухиәтең таҙарһын һәм йөрәгең тейешле юғары кимәлгә күтәрелһен өсөн, уны Аллаһу Тәғәләгә һәм Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оло һөйөү менән һуғарыу лазым. Аллаһуға оло һөйөү – Уға тулыһынса буйһоноу ул. Уның ҡушҡандарын үтәмәйенсә, Уға һөйөүең хаҡында һөйләү – үҙ-үҙеңде алдау ғына.

Изге аятта Аллаһу Тәғәлә бойора:

**«Әйт һин: «Әгәр аталарығыҙ, улдарығыҙ, ҡәрҙәштәрегеҙ, ҡатындарығыҙ, яҡын туғандарығыҙ, йыйған байлығығыҙ, туҡтап ҡалыуынан ҡурҡҡан сауҙағыҙ, ҡәнәғәтләндергән йорттарығыҙ һеҙгә Аллаһтан һәм Уның Рәсүленән, Аллаһ юлындағы Йыһаттан да ҡәҙерлерәк икән, Аллаһтың хөкөмөн көтөгөҙ. Аллаһ боҙоҡ кешеләр тоҡомон тура юлға сығармаç»** (Тәүбә, 24).

Аллаһу Тәғәләгә һәм Уның Рәсүленә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, изге һөйөү ғүмеребеҙ буйы һуңғы һулышыбыҙға ҡәҙәр һәр нәмәнән өҫтөн булырға тейеш. Һуңғы һулышына әҙер булыу өсөн, мөьмин һәр ғибәҙәтен хошуг, түбәнселек менән үтәй. Изге аятта Аллаһу Тәғәлә илаһи серҙәрҙе асҡан мөьминдәрҙең ҡотолоуға алып барған сифаттарын әйтеп үтә:

قَدْ أَفْلَحَ الْمُؤْمِنُونَ الَّذِينَ هُمْ فِي صَلَاتِهِمْ خَاشِعُونَ

**«Һис шикһеҙ, мөьминдәр сәғәҙәткә ирешәсәк. Улар намаҙ-ғибәҙәттәрендә итәғәт менән сәждә итә»** (Мөьминун, 23/1-2).

Намаҙҙарын илтифатһыҙ ғына ҡылыусылар тураһында былай әйтелә:

فَوَيْلٌ لِّلْمُصَلِّينَ الَّذِينَ هُمْ عَن صَلَاتِهِمْ سَاهُونَ

**«Уларҙың намаҙ уҡыуы – гөнаһ йыйыу ғына. Уларҙың намаҙы ихлас һәм етди түгел»** (Мәғүн, 107/4-5).

Күреүебеҙсә, Аллаһу Тәғәлә ғибәҙәт аша кешенең тәне һәм йәне араһында тығыҙ бәйләнеш барлыҡҡа килеүен теләй. Әлбиттә, был намаҙға ғына түгел, ураҙа, хаж ҡылыу, саҙаҡалар биреүгә һәм башҡа ғибәҙәттәргә лә ҡағыла. Ураҙа - Аллаһыбыҙҙың биргәненә шөкөр итеп, йөрәгеңде төшөнкөлөктән паклау, мохтаждарҙың хәленә керә белергә өйрәнеү, күңелеңде юшҡындарҙан таҙалау ул. Башҡа ваҡыттарҙа хәләл булған ҡайһы бер ғәмәлдәрҙән, ләззәттәрҙән сикләп, ураҙа беҙҙе харамдан айыра-та алыç торорға кәрәклекте күңелебеҙгә һала. Ә хаж атмосфераһы, кәфенгә оҡшаш кейемгә уранып йөрөү ҡолға Аллаһтың Бөйөклөгө алдында кес кенә булыуын күрһәтә, үлемгә дусар икәнлеген хәтеренә төшөрә. Хәйер-саҙаҡалар биргән мөьмин барса байлыҡтарҙың Хужаһы Аллаһ икәнлеген белә, ҡулындағы милкенең уға тапшырылған аманат булып, хәләлгә тотонорға тейешлеген аңлай. Саҙаҡаның асылын яҡшы төшөнгән мөьмин

бүтәндәрҙең милкенә көнләшеп ҡарай аламы ни?! Ғибәҙәттәрҙең асылы - Раббыбызға аңлы рәүештә буйһоноуҙа. Ҡәлбен ҡаралыҡтарҙан таҙартҡан әҙәм ғибәҙәттәрен ихлас ҡыла, рухиәте Хаҡ яҡтылыҡ менән нурлана.

Ғибәҙәттәрҙең өлгөһө - Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм тәҡүәле сәхәбәләрҙең, разыйаллаһу ғәнһүм, тормоштарындағы ғибәҙәттәр. Сәхәбәләр, Әхирәтте һәр саҡ иҫтә тотоп, ғибәҙәттәрен көндәм ихласлыҡ менән атҡарған.

Бер заман сәхәбәләрҙең береһе Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шулай тип мөрәжәғәт итә:

- Ҡыҫҡа ғына итеп миңә бер кәңәш бир әле, Рәсүлуллаһ!

Ул шундай яуап ишетә:

- *Һәр намаҙыңда һуңғыһы һымаҡ тор! Аҙаҡ ғәфү үтенерҙәй бер нәмә лә һөйләмә! Башҡалар ҡулындағыға өмөт бағлама!* (Ибн Мәджә, Зөхд, 15; Әхмәт бин Хәнбәл, Муснәд, V, 412).

Һуңғы юлына әҙерләнгән иман юлындағы әҙәм ғибәҙәттәрен генә түгел, барса ғәмәлдәрен, кешеләргә мөнәсәбәтен Сөннәнең юғары рухи ағылы менән биҙәргә, эштәре менән дә, һүҙҙәре менән дә кешеләргә файҙа килтерергә, өммәтендәгеләрҙең һәммәһенә лә үҙенә теләгәнде теләргә тейеш. Ул матур хистәр йәйлап Аллаһу Тәғәләгә һәм Уның Пәйғәмбәренә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оло һөйөүгә әүерелә һәм, ташып сығып, барса барлыҡҡа Раббыбыҙ күҙе менән бағырға мөмкинселек бирә.

Һуңғы һулышҡа әҙерлектең икенсе шарты – йөрәгендә ихсан дәрәжәһенә күтәреү, йәғни күңелеңдең һәр саҡ Аллаһҡа бағланған булыуы. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йөрәгенә түгел, нәпсеһенә буйһонған аҡыл быға ирешә алмай. Ул бөйөк сәғәҙәттән мәхрүм.

Мөьминдең баҫалҡы һәм сабыр булыуы ла мөһим. Ниндәй генә тормош шарттары булмаһын, ул түҙемлеген, төплө аҡылын юғалтмаҫҡа тейеш. Ауыр һынауҙарҙы үтеү, алты балаһының бишәүһен ер ҡуйынына һалыу ҙа Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ныҡлы рухын һындыра алмай; ағаһы Хәмзә һәм күңеленә бик яҡын көрәштәше Мусғаб, разыйаллаһу ғәнһүмә, үлтерелгәс тә ул Аллаһ ризалығы өсөн түҙемле, сыҙамлы булып ҡала.

Хаҡ юлдан барыусылар, фани донъя вәсүәсәһен, ҡайғы-хәсрәттәрен түҙемлек менән еңергә, яманлыҡты – яҡшылыҡ, кирелекте

– буйһоноусанлыҡ, һаранлыҡты – йомартлыҡ, эгоизмды – кешелеклелек, шиктәрҙе – ышаныс, хәйләне – ихласлыҡ, эскерһеҙлек, ҡаршылыҡтарҙы - тәүбәләр, вайымһыҙлыҡты – фекерләү менән алмаштырып, рухи кимәлен байытырға тейеш.

Мөбәрәк көн һәм төндәрҙән тыш таң алды зекер итеү өсөн ҡиммәтле ваҡыт. Мәңгелек тормош ҡояшы таң алдындағы ҡараңғылыҡҡа йәшеренә. «Йәшәү» һәм «үлем» төшөнсәләрен берҙәй итеп күргән Аллаһтың яратҡан ҡолдары Раббыларының ризалығын алыр өсөн төндәрҙе зекерҙә үткәрә.

Хәйер-саҙаҡалар таратыу – Аллаһ юлындағы мөһим үҙенсәлек. Изге аят нәсихәт ҡылып әйтә:

وَأَنفِقُواْ فِي سَبِيلِ اللّهِ وَلاَ تُلْقُواْ بِأَيْدِيكُمْ إِلَى التَّهْلُكَةِ

**«Аллаһ юлында тейешле малдарығыҙҙы ҡыҙғанмағыҙ. Үҙ ҡулдарығыҙ менән үҙегеҙҙе ҡурҡыныс язаға ташламағыҙ»** (Бәҡара, 2/195).

Ҡөрьән тәфсире менән шөғөлләнеүселәр фекеренсә, был изге аят бөлгөнлөккә төшөүҙән ҡурҡып һәм фани донъя байлыҡтарын артыҡ һөйөп, дин юлында изгелек ҡылыу, фиҙакәрлектән ҡасыуҙың ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтерәсәге хаҡында һөйләй. Шуға күрә мөьмин Аллаһ юлында милке менән дә, ғибәҙәттәре менән дә хеҙмәт итергә бурыслы, сөнки тормошобоҙ ҙа, ундағы һәр нәмә лә беҙҙең яуаплылыҡҡа бирелгән аманат. Әхирәттә тейешле урындарға сарыф ителгән милкебеҙҙең әжерен аласаҡбыҙ, һаранлыҡтың, ҡомһоҙланып байлыҡ йыйыуҙың ҡазаһын да Әхирәттә күрәсәкбеҙ.

Саҙаҡаларға килгәндә, мөьмин бер нәмәне хәтеренән сығармаҫҡа тейеш: мәйетте ер ҡуйынына тапшырғас, ул боҙолоп өлгөргәнсе, бөтә таныш-тоноштары туғандарының ҡайғыһын уртаҡлаша, һуңыраҡ, вариҫтары милкен бүлә башлағас, мәйет тә тарҡала башлай. Был ваҡиғалар бер үк ваҡытта башланып, бер үк ваҡытта тамамлана. Бер яҡта милек бүленә, икенсе яҡта мәйет тарҡала. Быларҙы күҙәтеп торған йән бушҡа сарыф ителгән ғүмере өсөн үкенә. Баҡтиһәң, фани донъяла һыҡмырланып йыйған байлығыбыҙҙың Әхирәттә хаҡы һуҡыр бер тин икән, таратҡан хәйер-саҙаҡаларыбыҙ ғына Әхирәттә ысын байлыҡ, оло сауап икән.

Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шулай тигән:

*«Ҡәбер (ғәмәлдәребеҙгә күрә) йәннәт баҡсаһы булыуы ла ихтимал, йәһәннәм упҡыны булыуы ла ихтимал».* (Тирмизи, Ҡиәмәт, 26)

Ҡиәмәткә ҡәҙәр ҡәбер тормошобоҙ фани донъялағы әхүәле рухиәбеҙгә, ғәмәлдәребеҙгә бәйләнгән. Шуға күрә үлемде юғалыу түгел, ә ҡотолоу, фажиғә түгел, ә «тәүге никах төнө» итеп ҡабул итеү – уға әҙер булғандарҙың өлөшө. Тормошта ошо рухи аҡыл менән тура юлдан барыусылар, үлемдәре менән Раббыбыҙға ҡушылғандар тарихта бөйөк эҙ ҡалдырған. Шуларҙың береһе – **Зәбит Мозафар**. Был тәҡүәле егет Чанаҡкала янындағы алышта ҙур ҡыйыулыҡ күрһәтә. Еңеү яуланғас, Көнсығыш фронтҡа күсә. Алыштарҙың береһендә бик ҡаты яралана, киләһе быуындарға һабаҡ булып шәһит китә.

Хәлдәр былай була: ут һыҙығында Зәбит Мозафар үлемесле яралана. Һуңғы минутында, һөйләшер хәле булмағас, кеҫәһенән ҡағыҙ киҫәге алып, ҡанына манылған тапсыҡ менән былай тип яҙа:

**«Һалдат! Ҡайҙа ҡибла?»**

Янындағылар, Зәбит Мозафарҙың һуңғы һулышы еткәнен һиҙеп, йөҙөн ҡиблаға ҡаратып һалалар. Яралының йөҙөндә буласаҡ осрашыу шатлығы сағыла һәм шәһиттең намыҫлы йәне Раббыһына юл ала.

Ҡоло ҡайҙа, кем генә булып эшләмәһен, әгәр тормошонда ҡиблаһын юғалтмаһа, Аллаһ уны үлер алдынан да ҡиблаһынан мәхрүм итмәйәсәк. Эшендә, ғаиләһендә, йәмғиәттә әҙәм, бер Аллаһҡа өмөт бағлап, кәлимә-и-тәүхидткә ярашлы йәшәгән икән, ҡиблаһын тапҡан икән, һуңғы һулышы менән ул уны йәнә табасаҡ. Әлбиттә, беҙ «ҡибла» тигәндә кәлимә-и-тәүхидткә ярашлы Ҡөрьән һәм Сөннә күрһәткән юлдан барыуҙы атайбыҙ. Иң мөһиме – тормошобоҙҙа ла, һуңғы һулышыбыҙҙа ла тура юлда булыу:

اهدِنَــا الصِّرَاطَ المُستَقِيمَ

Юғиһә, флотынан тороп ҡалып, һәр урында ҡыйратылыуға дусар булған карап ише булырбыҙ. Аллаһ һаҡлаһын!

**«Үлгәнгә ҡәҙәр үлегеҙ»** һүҙҙәренең серен асып, үлем ҡуйынында тиерлек гүзәл тормош менән йәшәү – Аллаһтың йәшерен ғилемгә эйә булған яратҡан ҡолдарының айырым хоҡуғы. Ҡиәмәт көнөндә улар ҡурҡыу, борсолоуҙан азат буласаҡ – был Аллаһтың вәғәҙәһе. Үҙ намыҫын һаҡлаған, Аллаһ ҡушыуы буйынса һуңғы һулышын алырға әҙер булған был ҡолдар

өсөн үлем – бәхет. Пак килеш бирелгән йәнде пак килеш һаҡлау ҙур ғилем талап итә.

Ҡорғандар алмашына был мәл:

бәғзеләре төшә, бәғзеләре күтәрелә...

«Хуш килдең, Ғазраил!»- тип әйтергә генә ҡала...

Н.Фазыл Ҡыҫаҡйөрәк

Һуңғы һулыш шыма, таҙа көҙгө һымаҡ. Һәр кем унда гүзәлме, йәмһеҙме - үҙенең тормошон күрә. Ул мәл күҙҙәрҙе, ҡолаҡтарҙы томалаған һылтаныу, вайымһыҙлыҡ ҡорғандары шыуып төшәсәк. Барса ҡорғандар алынғас, аҡыл һәм намыҫ ғәйептәрҙе танып, үкенергә мәжбүр итер. Иншә Аллаһ, һуңғы һулышыбыҙ үткән ғүмеребеҙгә үкенеп бағырҙай көҙгөгә әйләнмәһен. Фани донъяла уҡ беҙҙең көҙгөбөҙ Ҡөрьән һәм Сөннә булһын. Ысын бәхеткә эйә булыусылар – үлем килгәнсе үк үҙҙәрен таныусылар.

**Аллаһ һуңғы һулышыбыҙҙы мәңлек донъябыҙҙағы бүләктәребеҙҙе күрһәткән тәҙрә итһен…**

**Әмин!..**

# *Таңдағы Зекруллаһ*

*Таң – зекер өсөн сәғәҙәтле мәл. Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ошо ваҡытҡа ғәжәп ҙур әһәмиәт бирә. Ҡолдоң был саҡта уяу булыуы – Раббыһына оло һөйөүе һәм хөрмәте ул. Асылда төнгө намаҙ һәм тәсбих әҙәмдең Бөйөк Яҡыны менән осрашыуы, дуҫтарса әңгәмәһе. Таң алдынан рухиәтеңде байытыу - көн буйына етерлек нур*

# *Таңдағы Зекруллаһ*

«Әл-Хәйй» (Мәңге Тере) атлы Раббыбыҙ Үҙе бар иткән бөтә йән эйәләренә ғүмер биргән. Йыһанда «йәнһеҙ» тип аталған бер нәмә лә юҡ. Беҙ кешеләрҙе, хайуандарҙы, үҫемлектәрҙе генә йәнле тип иҫәпләйбеҙ, әммә материяның молекуляр төҙөлөшөн өйрәнеп, һәр бер матдә эсендә туҡтауһыҙ хәрәкәт барыуын аңлағас, бында ла тәртип һәм тормош барлығын төшөнәбеҙ. Тәртип бөтә йыһанға хас. Аллаһу Тәғәлә, барса барлыҡҡа Үҙенең асылын белдереп, зекер итеү мөмкинлеген биргән.

Предметтар, үҫемлектәр һәм хайуандар Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм башҡа пәйғәмбәрҙәр, ғәләйһи-мусәләм, хаҡында белә. Был хаҡта пәйғәмбәрҙәрҙең мөғжизәләре, ғәләмәттәре буйынса фекер йөрөтөргә мөмкин. Кәрәк булғанда, улар Аллаһу Тәғәләнең ярҙамы менән таштарҙы, таяҡтарҙы, башҡа нәмәләрҙе йәнләндерә. Мәҫәлән, **Әбү Йәһил** ҡулындағы таштар **Мөхәммәт, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм,** пәйғәмбәрлеген раҫлай һәм Аллаһты зекер итә. Ә **Муса**, ғәләйһис-сәләм, таяғы, йыланға әүерелеп, **Фирғәүенде** ҡурҡыта. Ҡыҙыл диңгеҙ, Аллаһтың бойороғона буйһоноп, Муса пәйғәмбәргә, ғәләйһис-сәләм, һәм уның халҡына юл аса, әммә ғәскәре менән уларҙы баҫтырып килгән фирғәүенде тулҡындары менән ҡаплай. Финик пальмаһы, Аллаһ илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уға тотонған ҡулын алғас, шығырлап ыңғыраша. Ә хайуандар Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үҙҙәре менән насар мөғәмәлә иткән хужаларына зарлана.

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, йәнһеҙ предметтарҙың Аллаһ бойороҡтарын бик яҡшы үтәүе хаҡында әйтә:

*«Һин күрмәйһеңме әллә? Болоттар, ҡояш, ай һәм йондоҙҙар – һәммәһе лә тәртип буйынса йөрөй. Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ йондоҙҙарҙың һәр береһе, бер*

*минутка ла һуңламай һәм вакытынан алда ла ашыкмайынса, үҙ мәлендә калка.*

*Ни өсөн беҙ пәйғәмбәрҙәрҙең мөғжизә ғәләмәттәрен күрмәйбеҙ һәм аңламайбыҙ? Улар бит таштарҙы һәм таяктарҙы йәнләндергән. Таш, таяк кеүек нәмәләргә кара ла уйлан был турала.*

*Таштарҙың пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, таяктың Мусаға, ғәләйһис-сәләм, буйһоноуы һәммә барлыктың Аллаһка, Уның ихтыярына буйһоноуы хакында һөйләй.*

*Улар шулай ти: «Беҙ Аллаһты беләбеҙ, Уға буйһонабыҙ. Беҙ осраклы ғына пәйҙә булған әйбер түгел. Беҙ Кыҙыл диңгеҙгә окшаш. Һыу ғына булған диңгеҙ фирғәүенде Израиль халкынан айырҙы һәм уны батырҙы!..*

*Мостафа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, кайҙа ғына бармаһын, уны күреп, ағастар, таштар сәләм биргән. Шуға күрә бел: һиңә йәнһеҙ булып күренгән нәмәләрҙең барыһы ла тере!..»*

Кешеләр генә түгел, ендәр, хайуандар, предметтар Рәсүлуллаһты, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, белә, был белемде уларға Аллаһ индергән. Улар һис бер каршылыкһыҙ, һөйөү менән Уға буйһона. Әммә һынау өсөн бирелгән фани донъя ығы-зығыһында кайнаған кешенең күҙе томаланған һәм ул быны күрмәй тиерлек. Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, беҙҙе моңһоҙлоктан уятыуға йүнәлтелгән хәҙисе ифрат фәһемле:

*«Күктәге һәм ерҙәге һәр бер зат, буйһонмаусан ендәрҙән һәм кешеләрҙән башка, минең Аллаһ илсеһе булыуымды белә».* (Әхмәт бин Ханбал, Мүснәд, III, 310)

Рәсүлуллаһты, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, таныу һәм уға буйһоноу кешегә генә хас сифат булмауы тураһында һөйләй был. Киреһенсә, һайлау хокуғы бирелмәгән кайһы бер мәхлуктар был мәсьәләлә кешенән уҙҙырып ебәреүе лә ихтимал.

Изге аят та быны раҫлай:

**«...Коштарҙы һәм тәсбих итеүсе тауҙарҙы Дауытка буйһондорҙок. Был эштәрҙе Беҙ әмер иттек»** (Әнбиә, 21/79).

Аллаһ, үҙенең Колдарын вайымһыҙлыктан уятып, улар ишетмәһә лә, Үҙе бар иткән һәр мәхлуктың үҙ телендә Уны зекер итеүе хакында әйтә. Ғибәҙәттәрҙә күлбен паклағандар, ихлас ғәмәлдәре менән битарафлыктан арынғандар, донъяны ысынбарлығында нисек бар, шулай күрә алғандар

ғына ул зекерҙе ишетергә ҡадир. **Юныс Эмрәнең** «Һары сәсәк менән һөйләшеүе» бының бер миҫалы.

Аллаһтың яратҡан ҡоло **Әзиз Мәхмүт Хоҙайи**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, хаҡындағы киләһе бәйән үҫемлектәрҙең дә зекер итеүенә дәлил:

Бер заман **Уфтада** шәйех, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, мөриттәре менән тәбиғәткә сыға. Уның ҡушыуы буйынса, шәкерттәренең һәр береһе гөлләмәләр йыйып килтерә. Барыһы ла матур сәскәләр менән тора, Ҡады Мәхмүттең, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, генә ҡулында һабағы һынған һулыған сәскә. Башҡалар гөлләмәләрен тапшырғас, Ҡады Мәхмүт, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, уңайһыҙланып ҡына сәскәһен һона. Уфтада шәйех, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, башҡа шәкерттәрҙең аптыраулы ҡарашы аҫтында сәскәне ала ла былай тип һорай:

- Улым, Мәхмүт! Бүтәндәр гөлләмәләр менән килгәндә, ниңә һин һулыған сәскә тотоп килдең?

Ихтирамлы йөҙ менән Ҡады Мәхмүт, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, шулай тип яуап бирә:

- Остаҙым! Һиңә нимә генә бүләк итһәм дә әҙ булыр. Өҙөргә тип сәскәгә эйелгәс, минең уның йөрәкһегән тауышын ишеттем: «Аллаһ, Аллаһ...», - тип зекер итә ине ул. Берәүһен дә өҙөргә ҡулым барманы. Мин һеҙгә ошо сәскәне генә алып килдем, ул инде Аллаһты зекер итә алмай...

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

«Ҡоштар батшаһы – аҡ ҡауҙы (төрөксә «лейлек»). Уның «лек, лек» тип ҡысҡырыуы нимә аңлата beләһеңме? Ул шуны аңлата:

Хәмед Лек, Шөкөр Лек, Мүлкү Лек, йәә Мустаған!» (Маҡтауҙар Һиңә, Шөкөрҙәребеҙ Һиңә, Батшалыҡ Һиңә, Эй, Раббым! Һинең ярҙамға һәммәһе мохтаж!)

Ә **Мөхөтдин Ғәрәби**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, был хәҡиҡәткә шундай аңлатма бирә:

«Һәр йән эйәһе Аллаһты үҙенсә зекер итә. Аллаһты данлау кимәле лә уларҙа төрлөсә:

Йәнһеҙ мәхлуҡтар битарафлыҡтан алыҫыраҡ, улар даими зекерҙә, сөнки аша-эсеү, һулау кеүек мохтажлыҡтары юҡ.

Үҫемлектәр уларҙан бер аҙ ҡалыша, сөнки үҙҙәренә күрә ихтыяждары бар: үҫер өсөн уларға тупраҡта дым булыуы ла, ҡояш нурҙары ла кәрәк.

Хайуандар уларҙан һуң килә. Уларҙың йәшәү функциялары күпкә ҡатмарлыраҡ, сөнки ихтыяждары һәм нәпселәре күберәк.

Әҙәмдәрҙең хәжәттәре икһеҙ-сикһеҙ. Һауаланыу, эшкә ашмаҫ хыялдар уларҙың вайымһыҙлығын арттыра».

Изге аят бойора:

يَا أَيُّهَا الْانْسَانُ مَا غَرَّكَ بِرَبِّكَ الْكَرِيمِ الَّذِي خَلَقَكَ فَسَوَّاكَ
فَعَدَلَكَ فِي أَيِّ صُورَةٍ مَّا شَاءَ رَكَّبَكَ

**«Әй, әҙәм балаһы нимәгә ҡыҙығып (алданып), һин сикһеҙ йомарт Аллаһтың ниғмәттәренән (сауаптан, ярлыҡаныуҙан, йәннәттән) ҡоро ҡалдың? Аллаһ һине юҡтан бар итте, сәләмәт ағзалар биреп, (бөтөн кәүҙәңде) тигеҙ, теүәл итте, (уларҙы бер-береһенә яраҡлаштырып) бөтә яғынды үлсәм менән камиллаштырҙы. Нисек теләһә, һеҙҙе шундай ҡиәфәттә яралтты»** (Инфитар, 82/6-8).

Йыһан серҙәрен һәм аҡылын аңлау өсөн, кешенең әхүәле рухиәһе юғары кимәлдә булыуы шарт. Донъяға йөрәк күҙе менән баҡҡан мөьминдәрҙең тойғолары ла үҙенсәлекле. Изге Ҡөрьән беҙгә күктәрҙә һәм ерҙә һәр туҙан бөртөгөнөң Раббыһын зекер итеүен күрһәтә. Унда бәйән ителгәнсә, күктәр, ер, тауҙар, ағастар, үләндәр, ҡояш, ай, йәшен, хайуандар, ишелеп төшкән таштар, хатта ки ергә һуҙылып ятҡан күләгә лә таңдан кискә ҡәҙәр сәждә хәлендә.

**«Күктәрҙә һәм Ерҙә булғандар иртә-кис, теләһә-теләмәһә лә, Аллаһка сәждә итә, улар менән бергә күләгәләре лә»** (Рәғд, 13/15);

**«Аллаһ яралтҡан барса нәмәләрҙе күрмәйһегеҙме ни? Уларҙың күләгәләре Аллаһҡа сәждә итеп уңға-һулға сайҡала»** (Нәхл, 16/48).

Изге аяттар ғәжәйеп картинаны һүрәтләй: хатта ки күләгәләр ҙә сәждәлә. Тимәк кәүҙә лә, күләгәһе лә айырым-айырым Аллаһу Тәғәләгә сәждә ҡыла... Йыһандың кес кенә өлөшсәләре бергә лә, айырым да, ышаныу-ышанмауына ҡарамайынса, Раббыларының ихтыярына күнеп, сәждә ҡыла, ҡушылғанды үтәй. Ҡыҙғаныс, барса Йыһан Аллаһтың бөйөклөгө алдында теҙ сүккәндә, бәндәләр араһында буш, моңһоҙ йөрәктәр ҙә табыла.

Аллаһтан башҡаларға эйәргән әҙәмдәр кумирҙарының хатта күләгәләре лә Аллаһ урынлаштырған тәртипкә буйһоноуын беләләрме икән! Ни ҡәҙәр аҙашҡан бәндәләр улар!

Изге аяттар күләгәләр, предметтар, йәнле заттар һәм фәрештәләр ҡатнашҡан сюжеттарҙы ла тасуирлай. Һәммәһе лә, тулҡынланып, йөкмәтелгән бурысын үтәй. Аллаһтың ҡушҡандарына буйһоноп, ғибәҙәт ҡылыу, шөкөр итеү урынына Илаһи фармандарға ҡаршы барыу аҙашып йөрөгән бәхетһеҙ әҙәми заттарға ғына хас. Илаһи аяттар, ғафиллыҡ йоҡоһондағы ул бәндәләрҙе шелтәләп, бөтә барлыҡтың, хатта күләгәләренең дә Аллаһ алдында сәждә ҡылыуы хаҡында һөйләй.

Ысынлап та, әгәр беҙ тирә-йүнебеҙгә иғтибар менән баҡһаҡ, офоҡтан офоҡҡа һуҙылған күктең, тау теҙмәләренең сәждә ҡылыуын, ғибәҙәтен күрербеҙ. Тулҡынланып ергә ауған ағастарҙың, сәскә, үлән, хайуандар һәм кешеләрҙең сәждәләге күләгәләре – һоҡланғыс күренеш. Әйтерһең, ер – бөтә барлыҡтың ғибәҙәте өсөн оло-ғара келәм. Әйтерһең, күк күкрәү һәм йәшен - тәүбә йәштәре.

Һиҙгер йөрәк өсөн күктә лә, ерҙә лә нәсихәттәр бар. Кескәй генә бөжәк йөрәгенең леп-леп тибеүе, ғәләмәт ҙур хайуандың үкереүе – һәммәһе Илаһи бөйөклөктөң сағылышы.

Һандуғастың тамсы ҡәҙәр генә йөрәгенән ағылған моң, алатубаның гөрөлдәүе, ҡауҙының торҡолдауы - ишетә белгән йәндәр өсөн тулҡынландырғыс тәсбих:

**«Күрмәйһегеҙме ни, Күктәгеләр ҙә, Ерҙәгеләр ҙә, Ҡояш та, Ай ҙа, йондоҙҙар, тауҙар, ағастар, хайуандар һәм кешеләрҙең күбеһе Аллаһҡа сәждә итә; язаға тарығандары ла байтаҡ»** (Хаж, 22/18).

Күреүебеҙсә, барса барлыҡ, хатта ки йәнһеҙ әйберҙәр – һәммәһе ғибәҙәттә, тәсбих әйтеүҙә. Бик йәл: зекруллаһҡа иғтибарһыҙ булған кешелектең бер өлөшө бының өсөн язаһын аласаҡ.

Мәғлүм бит, йыһандың остоҡ ҡына киҫәксәһе, ҡоштар, тауҙар, йылғалар Раббыларын белә, Уны данлай, һөйөүен белдерә. Бәндә генә бөтәһе лә буйһонған был теүәл система һәм тәртиптән ситтә, үҙен оло-ғара юғалтыуҙарға дусар итеп, үҙенең асылына ҡаршы килеп, бөтә барлыҡ белгән ғилемдән үҙ өлөшөн алмай.

Тәҡүәле ҡол күңеле менән гел Раббыһы янында. Ҡайҙа ғына күҙ ташламаһын, һиҙгер күңелле ҡол Уның зекер нурын күрә, һәр тауышта Уның тәсбих моңон ишетә. Был тормошта ни кимәлдә Аллаһты зекер итеүебеҙгә, данлауыбыҙға ҡарап, иртәгә шул кимәлгә күтәрелербеҙ, Уға яҡынайырбыҙ.

Ғүмер юлын саф намыҫ менән үтеү, иман менән үлеү, мәңгелек бәхеткә, именлеккә лайыҡ булыу өсөн, Раббыбыҙҙы онотorға ярамай, сөнки уны донъялыҡта онотҡандар мәңгелектә үҙҙәре онотоласаҡ. Күптәр үлем йөҙөн күргәс кенә ғафиллыҡтан айныр, тик инде эш үткән булыр – моңһоҙлоғо менән әҙәм үҙенә тигән яҡшылыҡ ишектәрен япҡан булыр.

Изге аят бойора:

**«Аллаһты онотҡан һәм шуның арҡаһында Аллаһ та уларға уларҙың кем икәнен онотторған кешеләр кеүек булмағыҙ. Улар - Аллаһ юлынан яҙған бәндәләр»** (Хәшр, 59/19).

Бер сәхәбә Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөрәжәғәт итә:

- Эй, Рәсүлуллаһ! Дин талаптары күбәйеп китте. Өйрәт әле, Аллаһтың ризалығын алып, киләһе тормошта бәхетле булыр өсөн, миңә нимә эшләргә?

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уға былай тип яуап бирә:

- Аллаһты зекер итеүҙән телең һәр саҡ дымлы булһын! (Тирмиҙи. Дават, 4; Ибн Маджә, Әҙәп, 53).

Аллаһты зекер итеү Уның Исемдәрен ҡабатлау ғына түгел. Йөрәктән килгән зекер генә файҙа бирә. Бындай зекер донъя барлыҡҡа килгәнсе үк – «Калу Бела» осоронда һәр йәндең Раббыбыҙға тоғро булырға ант итеүе кеүек: «Эйе! Һин беҙҙең Раббыбыҙ» – шул рәүешле зекер ҡылып ҡына иманыңда ихласлыҡҡа ирешергә мөмкин.

Зекер хаҡында йыш ҡына онотоуыбыҙ арҡаһында, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә уның мөһимлеге хаҡында ҡат-ҡат иҫебеҙгә төшөрә. Муса һәм Һарун пәйғәмбәрҙәрҙе, ғәләйһүмәс-сәләм, фирғәүенгә ебәргәндә, Аллаһ уларға шундай нәсихәт бирә:

**«Һин дә, туғаның да бергәләшеп Минең аяттарымды алып, Мине зикер итеп, Фирғәүен янына китегеҙ»** (Та һа, 20/42-43). Ул хатта пәйғәмбәрҙәренә лә ташлама яһамай, һәм был беҙгә һабаҡ.

Мөьмин, әхүәле рухиәһе наҙанлыҡ ҡом-таштарынан йыуылып таҙарынһын өсөн, даими зекерҙә булырға тейеш. Бында, әлбиттә, бер көнгә йәки бер сеансҡа һуҙылған зекер күҙ уңында тотолмай, ә ғүмереҫ буйына ҡабатланған, һәр һулышың менән берләшкән зекруллаһ тураһында һүҙ бара – ана шунда ғына әҙәм рухиәте уянырға һәләтле.

Изге Ҡөрьән шулай тип бойора:

أَلَمْ يَأْنِ لِلَّذِينَ آمَنُوا أَن تَخْشَعَ قُلُوبُهُمْ لِذِكْرِ اللهِ وَمَا نَزَلَ مِنَ الْحَقِّ

**«Иман килтергән кешеләрҙең Аллаһты һәм Унан ингән Ҡөрьәнде зикер итеп, күңелдәренең мөхәббәт менән йомшарған заманы килде түгелме?..»** (Хәдид, 57/16). Был аят, ҡайһы бер сәхәбәләр, Мәккәләге әҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып Мәҙинәгә һижрәт иткәс, муллыҡҡа ирешеп, аҙаҡ артыҡ йомшарып киткәс индерелә. Шуға күрә беҙ, Аллаһҡа сикһеҙ һөйөү мөхитендә йәшәгәндә, донъя байлыҡтарына ҡыҙығып, табыш артынан ҡыуырға тейеш түгел, рухи әүҙемлек һәм ныҡлыҡҡа ынтылырға тейеш.

Яратҡандар үҙҙәренең һөйгәндәрен һәр саҡ йөрәгендә һаҡлай. Мөхәббәтһеҙ йөрәк эшкәртелмәй ятҡан тупраҡ кеүек. Һөйөү аша бара асыштар, сөнки һәр нәмә һөйөүҙән яралған. Аллаһу Тәғәлә һөйөүҙең этәргес көсөн танып белеүҙәрен теләгән һәм донъяны ла шуның өсөн бар ҡылған. Мөхәббәттең көсө һәм бөйөклөгө уның өсөн ниндәй ҡорбандарға әҙер тороуыңа бәйләнгән. Бына ни өсөн Аллаһты зекер итеп таңдарҙа уяу тороу - Уға һөйөүеңде иҫбатлау ул.

Мөьминдең зекере өсөн таң – иң изге мәл, тинек. Аллаһ тап ошо ваҡытҡа ҙур әһәмиәт бирә. Был ваҡыттағы зекер, ғибәҙәттәр башҡа ваҡыт менән сағыштырғанда ауырыраҡ. Ҡолдарының ул ваҡыттағы тырышлығы, фиҙакәрлеге Раббылларына оло һөйөүе һәм хөрмәте хаҡында һөйләй. Раббыбыҙ Үҙе разый булған ҡолдары тураһында былай ти:

**«Шик юк, Аллаһҡа ҡаршы сыҡмағандар Раббы биргән йәннәттәргә кереп, шишмә яндарында ултырасаҡ. Улар фани донъяла изгелек ҡылған шәхестәр булыр. Төндәрен әҙ йоҡлағандар. Сәхәр уаҡыттарында ярлыҡау һорағандар»** (Ҙәрийәт, 51/15-18).

Йәнә Аллаһу Тәғәлә бойора:

**«Һин һәр сак еңеүсе һәм ярлыкаусыға (Аллаһка) һыйын. Ул намаҙ уакытында башка бик күп ғибәҙәт кылыусылар араһында һинең нимә эшләгәнеңде күреп тора»** (Шүғәрә, 26/217-218).

Был аяттар төшөрөлгәс, пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, урамдар буйлап китә һәм төн караңғылығында Көрьән укыған һәм Аллаһты зекер иткән сәхәбәләренең бал корто күсе геүләүе шикелле тауыштарын ишетә.

Төнгө намаҙҙар укыуҙағы тырышлык һәм тәсбихтәр Аллаһка булған һөйөүҙең көсө хакында һөйләй. Асылда төнгө намаҙ һәм тәсбих – Аллаһ менән осрашыу, Уның менән дусҭарса әңгәмә.

Изге аяттарҙа әйтелә:

**«Төндөң бер өлөшөн Уға сәждәлә уҙҙыр, төндөң оҙон вакытында ла тәсбих тарт. Хактыр, кешеләр күҙ асып йомғансы уҙып китә торған фани донъяға мөкиббән һәм киләсәктә баштарына төшәсәк (Киәмәт) көндө онотала»** (Инсән, 76/26-27);

**«Куркыу менән өмөт араһында Раббыға (намаҙҙа) ялбарғандар йылы һәм рәхәт яҫтыктарынан айырылып, төндә тороп доға укый. Беҙҙең тарафтан индерелгән ризыктарынан (зәкәткә, хәйер-саҙакаға) сарыф итәләр. Кылған ғәмәлдәренә күрә бүләк булараk, ниндәй шатлык күрәсәктәрен күпме әжер аласактарын берәү ҙә белмәҫ»** (Сәждә, 32/16-17).

Камиллыкка ирешкән мөьминдәр өсөн төнгө һиллек – әйтеп бөтөргөһөҙ табыш. Төндөң икенсе өлөшөнөң оло хакын белгәндәр тап шул мәлдә, барса йыһан тынлыкка сумғанда, Аллаһка ялбарып доғала, ғибәҙәттә була. Көн тәнгә ризык табыу өсөн булһа, төнгө сәғәттәр - йөрәктәрҙе Илаһи нур менән тултырыу өсөн, рухи аҙык эстәү өсөн.

Аллаһтың яраткан колдарының береһенән укыусылары үҙҙәре аңламаған вәғәздең асылын аңлатып биреүҙе һорағандар:

- Остаҙыбыҙ, тәбиғәттә эттәрҙең уларҙың ите менән туклланған дошмандары юк тиерлек, улар күберәк тәбиғи үлем менән үләләр. Тик көсөктәре күп булыуға карамаҫтан, уларҙың иҫәбе артмай. Кешеләр һарыктарҙы корбан итеп сала, иттәрен ашай. Һарык күбеһенсә бер бәрәс бәрәсләй, тик һарыктар һаны кәмемәй, арта ғына. Һарыктарҙың бәрәкәте артыуының сере нимәлә?

Остаҙдары йылмайып тыңлаған да былай тигән:

- Ғәжәп күренһә лә бар ғилләһәр хайуандың яңы көндө нисек ҡаршы алыуында. Таң – тәүлектең иң бәхетле мәле, ул мәлдә Аллаһтың рәхмәте, бәрәкәте төшә. Төнө буйы өрөп арыған эт таң атыуға йоҡоға тала, һарыҡ иһә таңда уяу. Шуға күрә бәрәкәттән үҙ өлөшөн ала.

Бер нәмә бәхәсһеҙ: таңды йоҡлап уҙғарыусылар Аллаһтың рәхмәтенән, бәрәкәтенән үҙен мәхрүм итә. Был бәрәкәтле ләйсән ямғырҙы һеңдерергә теләмәгән сүллек, диңгеҙ, ҡаялар кеүек була инде.

**Эй, Раббым! Һәр һулышыбыҙ һайын Һине иҫтә тоторға насип ит. Көн һәм төндәребеҙҙе бәрәкәтле зекруллаһ менән тултыр! Әхүәле рухиәләребеҙҙе таңдағы илаһи ғилем ямғыры менән һуғар! Зекруллаһтың хаҡ асылын аңларға насип ит! Һинең Илаһи бөйөклөгөңдө аңламағандарҙы ла тура юлға төшөр! Таңда Һине зекер иткәндәр хаҡы өсөн Ватаныбыҙҙы, халҡыбыҙҙы дошмандарҙан һаҡла!**

**Әмин!..**

# *Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 1*

*Йондоҙҙар менән биҙәлгән күктәр Ҡиәмәткә*
*ҡәҙәр Аллаһтың Көсе һәм Ҡөҙрәтенең*
*ғәләмәте булған кеүек, кешелектең бөгөнгөһө*
*һәм киләсәге булған Ҡөрьән дә, өҫтөбөҙҙәге*
*күк һымаҡ, аят йондоҙҙары менән донъя*
*һуңына ҡәҙәр балҡып торасаҡ. Шуға күрә*
*Ҡөрьән ышығына йыйылыусылар - иң*
*тәҡүәле һәм иң бәхетле кешеләр.*

# *Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 1*

Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Илаһи сифаттары үзенең бөтә камиллығында был донъяның өс объектында сағылыш тапҡан:

**Кеше, Ҡөрьән һәм йыһан...**

Аллаһтың Гүзәл Исемдәренең сағылышы булған **кеше** – ғаләмдең асылы. Аллаһтың Гүзәл Исемдәренең һүҙҙәге кәүҙәләнеше – **Ҡөрьән**. Уларҙың уртаҡлығы хаҡында шулай әйтелә:

*«Кеше һәм Ҡөрьән – игеҙәктәр...»*

Аллаһтың Гүзәл Исемдәренең өсөнсө кәүҙәләнеше булған **йыһан** – Ҡөрьән тәфсиренең бер төрө. Йыһан – өнһөҙ Ҡөрьән, ә Ҡөрьән – һүҙҙә кәүҙәләнеш тапҡан йыһан. Бәйән итеүсе һәм өнһөҙ Ҡөрьән яҡтылығынан камиллыҡҡа ирешкән кеше үзенең эске асылы буйынса хаким хәленә күтәрелә. Был йәһәттән ҡарағанда, **«кеше, Ҡөрьән һәм йыһан»** - бер Аллаһ балалары. Йондоҙҙар менән биҙәлгән күктәр Ҡиәмәткә ҡәҙәр Бөйөк Барлыҡтың ғәләмәте булған кеүек, кешелектең бөгөнгөһө һәм киләсәге булған Ҡөрьән дә, өҫтөбөҙҙәге күк һымаҡ, аят йондоҙҙары менән донъя һуңына ҡәҙәр балҡып торасаҡ. Шуға күрә Ҡөрьән ышығына йыйылыусылар - иң тәҡүәле һәм иң бәхетле кешеләр.

Бөйөк аҡыл һәм хаҡлыҡ йәшеренгән Ҡөрьән. Иман юлына баҫҡандар аша шул Ҡөрьән аҡылы менән үҙҙәренә бәхет ҡапҡаларын аса. Бөтә был оло-ғара донъя шуны иҫбатлай: әгәр Аллаһу Тәғәлә теләһә, тамсы эсенә океанды һыйҙырыр ине. Был дөрөҫлөктән сығып, **Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Бер килке миндә Аллаһ нурын кешеләрҙә күреү теләге уянды. Мин, әйтерһең, тамсыла диңгеҙҙе, ә Ҡояшты туҙанда табырға теләнем...»*

Хәҡиҡәткә тартылыу, уның үрҙәрен яуларға ынтылыу әҙәм балаһын һәр саҡ үҙенә тартып, ымһындырып тора, ә ул үрҙәргә артылыуҙың бөйөк сараһы ябай – уйланыу, фекер йөрөтөү, йәғни **тәфәккүр** (уйланыу) һәм таджассус (күҙәтеү).

Уйланыуҙар аша ғаләм ниәтенең нәзәкәтлелеге, нескә аҡылы асыла. Һынау урыны булған йыһан киңлеге – иман мәктәбе ул. Аллаһ ризалығына тап килмәгән ҡиммәттәргә таянып, Илаһи тәрбиәгә, етәкселеккә ҡаршы килергә маташҡандар мәңгелектәге тормоштарына төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерә, ә фани донъяла йыш ҡына стресс кисерә, күңел төшөнкөлөгөнә дусар була.

Раббыбыҙҙың ихтыярына намыҫ менән буйһоноп, лайыҡлы йәшәгәндәр киләсәктең сеймәлгән төйөндәрен сисергә, илаһи асыштарҙың етәкселегенә таянып һәм хәҡиҡәт хаҡында уйланып, үлем серен асырға һәләтле. Ғүмерҙең һуңғы мәлендә барсабыҙҙы үлем упҡыны ялмап ала икән, алдан уҡ шул турала уйланып, мәңгелектәге киләсәгеңде ҡайғыртыу – һәр әҙәмдең бурысы.

Әҙәм балаһына, ғаләм аҡылын, илаһи серҙәрҙе асыу өсөн, уйланыу, күҙәтеүҙәрен Ҡөрьән ярҙамында дөрөҫ юҫыҡҡа һалыу зарур. Әгәр кеше, Изге Ҡөрьәнһеҙ үҙ аҡылына ғына таянып, Раббыбыҙ аҡылы сағылышын аңлауға ҡадир булһа, Аллаһу Тәғәлә Үҙ ҡолдарына ярҙамға пәйғәмбәрҙәрен һәм Изге китаптарын ебәрмәгән булыр ине. Бәндә тәбиғәттән бирелгән фекерләү, күҙәтеүсәнлек кеүек һәләттәрен лайыҡлы файҙаланыуҙа Раббыбыҙҙың ярҙамына мохтаж. Әҙәм Ҡөрьәнгә мөрәжәғәт итмәһә, Аллаһтың **«Берҙән-бер», «Мәңгелек»** кеүек сифаттарын нисек асыҡлай алһын?

Әгәр Ҡөрьән фекер йөрөтөү ҡапҡаларын асып ҡуймаһа, хәҡиҡәтте төшөнөү ситен булыр ине. Ҡөрьән йөкмәткеһенең иксеҙ-сикһеҙ булыуы аҡылды эшкә ҡуша. Әлбиттә, танып белеүебеҙҙең сиктәре бар һәм ул билдәле критерийҙарға буйһона. Ғаләмдә бит Аллаһ хәҡиҡәтенең һәм тәртибенең сиге юҡ, шуға әҙәм уларҙы белеп бөтә алмай. Ҡөрьән, тура юлға баҫырға нәсихәт биреп, эшмәкәрлегебеҙ өсөн юл аса, хаталарҙан әрсәләй. Мөмкинлектәребеҙҙе асыҡлау маҡсатында быларҙы аңлау һәм белеү мөһим. Бүләк итеп бирелгән аҡылыбыҙҙа рөхсәт итеүсе механик үлсәүҙәр һәләте бар, ә беҙ үлсәйәсәк хәҡиҡәт легендар Ҡаф тауы дәүмәлендәй. Бәс, шулай булғас, аҡылыбыҙҙы күндәмлек менән биҙәп кенә асыштар донъяһына сумырға кәрәк. Аҡылыбыҙҙың сикле мөмкинлектәре,

камил булмауын иҫәпкә алып, изге аяттарҙы тәфсир итеүселәр һәр саҡ шулай өҫтәр булған:

**«Хаҡ белем Аллаһта ғына...»**, йәғни Аллаһтан төшөрөлгән хәҡиҡәтте нисек бар шулай ҡабул итергә тейешбеҙ.

Мәҫәлән, кухнялағы графинда торған һыу үҙенсәлектәре буйынса океан һыуынан айырылмай, әммә дәүмәле һәм тәрәнлеге буйынса айырма ҙур.

Икенсе яҡтан, тыумыштан һуҡыр кешегә ниндәйҙер төҫтөң асылын аңлатырға тырышһаҡ, был унын аҡылына һеңәсәк. Әммә ул күҙ алдына килтергән төҫ менән ысынбарлыҡ араһында айырма ниндәй? Уларҙың берберенә яҡын тороуы икеле.

Тимәк, Изге Ҡөрьәндең һәр һүҙенә, фразаһына төшөнөү әҙәмдең аңлау ҡеүәһенә бәйле булыуын күҙ уңында тотоп, тулы һәм камил тәфсир биреүҙе талап итеп ныҡышырға кәрәкмәй.

Уйланыу, күҙәтеү һәләттәрен ҡулланыуҙа, хәҡиҡәтте таныуҙа әҙәм өсөн билдәле сиктәр бар. Тура юлдан барырға өндәп, киҫәтеүҙәр, нәсихәттәр биреп, Ҡөрьән ҡат-ҡат уйланырға саҡыра.

Тиңе булмаған етәксе һәм бәхет сығанағы булған Ҡөрьән кешегә һалынған аҡыл, ғаләмдәге ғәжәйеп тәртип хаҡында һөйләй һәм уйланырға саҡыра. Кешегә лайыҡ тормош менән йәшәргә теләгәндәр Изге Ҡөрьән асҡан фекерләү донъяһына инергә тейеш.

Йыһандағы төрлө ғәләмәттәрҙе күҙәтеп, кеше үҙ-үҙенә һорау бирә: «Был донъя нимә ул? Ни өсөн килдем мин был донъяға? Көндәрҙең етеҙ ағышының хәҡиҡәте, асылы нимәлә? Бәхеткә ниндәй юлдар алып бара?» Һәм артабан «Кем мин? Йәшәүемдең маҡсаты нимәлә? Мин нисек уйларға тейеш? Был донъянан киткәндә, мин нимәгә әҙер булырға тейеш?»

Ғаләмдә һәр нәмә күҙгә күренмәгән ҡанундарға буйһоноп аҡҡанда, Аллаһ барлыҡҡа килтергәндәр араһында юғары урын биләгән кеше нәпсе ҡоло булып, һис бер яуаплылыҡ тоймай ғүмер итә аламы ни?

Изге аяттарҙа әйтелә:

أَفَحَسِبْتُمْ أَنَّمَا خَلَقْنَاكُمْ عَبَثًا وَأَنَّكُمْ إِلَيْنَا لاَ تُرْجَعُونَ

**«Былай ғына, эше булмағандан эш булһын тип кенә беҙҙе яралтты һәм, ысынлап та, Ул беҙҙе үҙ хозурына ҡайтармаç, тип өмөтләнәһегеҙме?»** (Мөьминун, 23/115);

أَيَحْسَبُ الْاِنْسَانُ أَنْ يُتْرَكَ سُدًى

**«Кеше үҙен һис сикләүҙәрһеҙ, күҙәтеүсеһеҙ йәшәргә хаҡлы, тип һанаймы әллә?»** (Ҡийәмә, 75/36).

Бәлиғ булғандан һуң, әҙәм балаһы ғәмәлдәре өсөн яуаплы һанала. Мөьмин ғүмеренең мөһим өлөшө башлана шул мәл – ул Аллаһтың лайыҡлы ҡоло булыуын иҫбатларға тейеш. Хәҙер инде уға ғаләмдең илаһи серҙәрен асыр өсөн, юғары аҡылды тойор өсөн, донъяға аҡыл күҙе менән генә түгел, йөрәк күҙе менән бағыу зарур. Изге аятта әйтелә:

**«Күккә ҡарамайҙармы һуң улар? Уны нисек итеп төҙөнөк, биҙәнек. Бер генә сатнаған урыны ла юҡ – камил иттек. Ерҙе нисек итеп хасил иттек, өҫтөнә тауҙарҙы беркеттек һәм һәр төрлө (енестән) үҫемлектәр үҫтерҙек. Аллаһҡа йүнәлгән кешеләрҙең күңел күҙе асылһын өсөн һәм ғибрәт алһындар тип шулай ҡылдыҡ»** (Ҡаф, 50/6-8).

Йылыһы менән һөйөндөрөп, көн һайын ҡояш сыға, байый, ерҙә бихисап хайуандар йәшәй, емештәренең төҫө һәм тәме төрлө-төрлө булған үҫемлектәр үҫә, төнгө күк көмбәҙендә иҫәпһеҙ күп йондоҙҙар емелдәй, ай үҙенең фазаһын алмаштыра. Ошоларҙың һәммәһен күргән, ошо күк аҫтында йәшәгән һәм шулар менән ләззәтләнгән, әммә шөкөр итеп ҡәҙерен белмәгән кешене бөтә был милектең Хаҡ Хужаһы киҫәтә һәм нәсихәт бирә:

**«Беҙ ерҙе үә күктәрҙе, улар араһында булған нәмәләрҙе файҙаһыҙ һәм хикмәтһеҙ яралтманыҡ…»** (Сад, 38/27);

**«Күктәрҙе, Ерҙе һәм икеһе араһындағыларҙы Беҙ (тик торғанда ғына, эс бошҡандан) күңел асыу өсөн генә яралтманыҡ. Бөтөнөһөн дә бары тик бер сәбәп менән (Аллаһтың Хәҡиҡәте өсөн) яралттыҡ. Ләкин кешеләрҙең күбеһе быны аңламай»** (Духан, 44/38-39).

Ғаләм – Илаһи ҡөҙрәт сағылыш тапҡан мөғжизә. Тирә-йүндәге хозурлыҡ һәр бер иманлы әҙәмде даими рәүештә уйланырға мәжбүр итә, зирәклекте арттыра, йыш ҡына әхүәле рухиәбеҙҙе көтмәгәндә нурландырып ебәрә. Изге аяттарҙа әйтелә:

**«Күреп тораһың бит, Аллаһ Күктән ямғыр яуҙырҙы. Уны ерҙәге шишмәләргә йүнәлтте. Һуңынан төрлө-төрлө төҫтәге игендәр үҫтерҙе. Унан һуң улар ҡорой, һап-һары була. Аҙаҡ улар кибеп бөтә. Шик юҡ, был эштәрҙә аҡылы булғандар өсөн һабаҡтар бар»** (Зумар, 39/21);

**«Шик юҡ, күктәрҙең, Ерҙең яратылыуында, төн менән көндөң бер-береһен алыштырыуында, кешеләргә файҙалы йөктәр тейәгән кәмәләрҙең диңгеҙҙәрҙе ярып йөҙөүендә, Аллаһ күктән индереп, йәнһеҙ тупраҡты йәнләндергән ямғырҙа, Ер йөҙөндә һәр төрлө йән эйәһен булдырыуҙа, йәнә елдәрҙә, ер менән күк араһында йөҙөп йөрөүсе, Аллаһтың һәр әмеренә буйһоноусы болоттарҙа фекер йөрөтөүсе халыҡ өсөн (Аллаһтың барлығын, берлеген) раҫлай торған дәлилдәр бар»** (Бәҡара, 2/164).

Күңел күҙе асыҡ булғандар күрә: күктән илаһи мәрхәмәт нуры ағыла, ер ҡуйынынан зөбәржәт һөйөү ҡалҡа. Ер һәм күктәге илаһи һөйөүгә сорналған, уйлана белгән кешенең илаһи камиллыҡҡа ынтылмауы мөмкин түгел. Аллаһу Тәғәлә әйтә:

**«Ул – Ерҙе яһаусы, шунда йылғаларҙы, тауҙарҙы барлыҡҡа килтереүсе һәм Ул – емештәрҙең һәр береһен үҙ орлоҡтарынан пар-пар итеп яралтыусы. Төн менән көндө ҡаплаусы. Аңлай белгәндәр өсөн был хикмәттәрҙә ғибрәттәр бар»** (Рәғд, 13/3).

Аллаһ ҡолдары булыу бәхетенә һәм Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, өммәтенә инеү бәхетенә ирешкәндәр, юғары һөйөү менән берләшеп, бер сафта килә. Уларҙың гүзәл ҡоралы – иман. Аллаһу Тәғәләнең нурына һәм Илаһи һөйөүгә ҡойонған күңел изге хисте - иманды һаҡлай. Был донъяға рухи ғилемгә эйә булып баҡҡандар илаһи серҙәр менән биҙәлгән осһоҙ-ҡырыйһыҙ күкте йәки, ерҙән һут алып, устар ише һәр япрағы менән Раббыбыҙға тартылған ағасты күрә...

Бына Мөхәммәт, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, өммәтенең ғибәҙәте өсөн келәм һымаҡ йәйелгән үләндәр, өммәтендәге мөьминдәр һымаҡ ергә эйелә биреп, Аллаһҡа тәсбих әйткән сәскәләр. Мәғрур тауҙар теҙмәһе Илаһи ҡараш аҫтында тын ғына тора. Бына Раббыбыҙ бүләге - дым, бәрәкәт ташыусы болоттар. Бына елдәр – илаһи хәбәрҙәрҙе ташыусы сабауылдар. Ҡурҡыу һәм өмөт уятып йәшнәүсе йәшендәр. Ғафиллыҡ йоҡоһонан айный алмағандарҙы Хаҡ Ҡөҙрәт эйәһе хаҡында киҫәтеп, нәсихәт биреп күкрәгән күк... Көндәр – Ул биргән яҡтылыҡтың сағылышы, төндәр – Уның серҙәре

һәм аҡылы тантанаһы. Йыһан – ғәжәйеп билдәләр, серҙәр тулы китап, Аллаһтың гүзәл Исемдәренең сағылышы булған Ҡөрьән. Ә Ҡөрьән – бөтә йыһанды урап алған Илаһи һүҙ... Ошо ике донъя киҫешкән урында торған кеше – танып белеүҙең терәге, үҙәге.

Ғәйшә, разыйаллаһу ғәнһә, Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әхүәле рухиәһенең нескәлеге, камиллығы хаҡында бәйән итә.

«Бер заман кис Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, миңә былай тине:

- Эй Ғәйшә! Әгәр һин ҡаршы булмаһаң, мин был төндө Раббыма ғибәҙәттә үткәрер инем.

- Аллаһ менән ант итәм, - тинем мин, - миңә һинең менән булыу оҡшай. Әммә һине шатландырған нәмә миңә бигерәк тә оҡшай.

Аҙаҡ ул торҙо, тәһәрәтләнде лә намаҙға баҫты. Ул илай ине...Ул шул ҡәҙәр иланы, хатта ки кейеме, күркәм һаҡалы, ул сәждә ҡылған урыны йәшкә мансылды. Иртәнге намаҙға Пәйғәмбәребеҙҙе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уятырға килгән Билал да уны шул хәлдә күрҙе. Йәштәрен күргәс, Билал аптырап һораны:

- Эй Рәсүлуллаһ! Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һинең үткән һәм буласаҡ бөтә гөнаһтарыңды ғәфү итте, ниңә илайһың?

Аллаһ Илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шулай тип яуап бирҙе:

- Мин Аллаһтың рәхмәтле ҡоло түгелме ни? Аллаһ менән ант итәм, бөгөн төндә миңә шундай аяттар төшөрөлдө, уны уҡып уйға талмағанды йәлләргә генә ҡала! - Аҙаҡ ул ошо аятты уҡыны:

**«Күктәрҙең һәм Ерҙең яратылышында, төн менән көндөң сиратлашыуында аҡылы сәләмәт кеше өсөн, ысынлап та, ғибрәт биреүсе дәлилдәр бар. Улар (мосолмандар) аяҡ өҫтө тороп та, ултырып та, янға ятҡан килеш тә Аллаһты зекер итәләр, күктәрҙең һәм Ерҙең яратылышы хаҡында тәрән фекерләйҙәр, (һәм әйтәләр): «Раббыбыҙ! Һин быларҙы бушҡа ғына яралтманың. Һине тәсбих итәбеҙ (маҡтайбыҙ, Һин барса кәмселектәрҙән пакһың). Беҙҙе йәһәннәм ғазабынан ҡотҡар!»** (Әлү Ғимран, 3/190-191). (Ибн Хиббан, II, 386)

Был аяттар төшөрөлгәс, Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, таңға ҡәҙәр илай, һәм ул йәштәргә күктәге йондоҙҙар ҙа тиң була алмай, сөнки Аллаһтың рәхмәте менән мөьминдәрҙең йәштәре – төндәрҙең

биҙәге, ҡәбер ҡараңғылығының нуры, йәннәт баҡсаларының ысыҡ тамсылары.

✵

Раббыбыҙға яҡыныраҡ булыу өсөн, Аллаһтың рәхмәте менән, бәхетле мөмкинлектәр биргән махсус ай, көн, төндәр бар. Аллаһ биргән 12 айҙың ҡайһы берҙәре башҡаларынан өҫтөнөрәк. Шуларҙың береһе - Аллаһ айы булған Рәжәп айы.

Хатта яһилиәт осоронда ла ошо осорҙа ҡылыстар ҡындарға тығылған, ҡан ҡойоштар туҡталған. Ислам килгәс тә Рәжәп айының мәртәбәһе һаҡланған. Был изге айҙа тәүге йома төнөндә башланған Рәғәиб кисе һәм 27-се тәүлек кисендә башланған  Миғраж төнө бар.

Беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе - ул төндәрҙе илаһи ғилем һәм Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөүебеҙҙе белдереү менән биҙәү. Пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөхәббәте – беҙҙе бәхеткә алып барыусы капитал. Уны һөйөп, ғүмерҙәрен уның юлынан атлауға бағышлаусылар – пәйғәмбәрҙәрҙең, әүлиәләрҙең, шәһиттәрҙең, изгеләрҙең мәңгелек юлдаштары.

**Аллаһы Тәғәлә йөрәктәребеҙҙе был изге көндәрҙең, төндәрҙең, айҙарҙың илаһи ғилеме һәм бәрәкәте менән тултырһын һәм Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, нуры менән йәндәребеҙҙе яҡтыртһын, уға һөйөү менән бәйләһен. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ҡиәмәт көнөндә беҙҙе Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, байрағы аҫтына йыйһын һәм уның шәфәғәтенә ирештерһен.**

**Илебеҙгә һәм Ислам донъяһына Үҙенең бәрәкәтен, еңеүен, уңыштарын насип итһен.**

**Эй Раббым! Беҙ оҙайлы сәфәр һәм яңғыҙлыҡ йортона юл тотабыҙ. Иманыбыҙ унда ҡояш булһын, дуҫтарыбыҙ – пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр, изге ғәмәлдәребеҙ – шатлыҡ баҡсалары.**

**Эй Аллаһ! Беҙҙе хаҡ ғилемгә эйә булғандарҙан ит, ғаләмде, тирәйүндәге нәмәләрҙе күңел күҙебеҙ менән күрергә насип ит! Йөрәктәребеҙҙе «Уҡы» тигән әмерендә үтәүселәрҙән ит!**

**Әмин!**

# *Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 2*

*Беҙҙең әхүәле рухиәбеҙ Ҡөрьән һәм Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, Сөннәһе хәҡиҡәттәренә юғары ынтылыш һәм һөйөү менән һуғарылған булырға тейеш. Изге Ҡөрьән һәм Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, беҙҙе сикһеҙ бәхеткә һәм хаҡ юлға саҡыра бит. Китап һәм Сөннә һаҡлау һәм тормошҡа ашырыу өсөн Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһү үә сәлләм, тарафынан безгә аманат итеп бирелгән.*

# *Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 2*

Әҙәм балаһы мускулдарҙан һәм һөйәктәрҙән генә торған йән эйәһе түгел, ул – камиллыҡ мөғжизәһе, сөнки тик уға ғына Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләне танып белеү һәләте бүләк ителгән. Тәбиғәттән бирелгән почетлы урынын һәм бәҫен һаҡлап, камиллыҡҡа ирешкән кеше – Илаһи аҡыл, тәҡдир, йәшәйеш һәм ғаләм серҙәре сағылыш тапҡан бөйөк хазина. Аллаһ уны гүзәл сүрәттә яралтҡан.

Күркәм сифаттар менән бүләкләнгән әҙәм, наҙанлыҡ, шикләнеүҙәр бысрағына батып, ваҡытын, һәләттәрен бушҡа сарыф итерме, үҙен һәләкәткә дусар итерме?

Бәндәләр нәпсе уҡтарының сәбенә әйләнеүсән. Үлемдең беҙҙе һағалап ҡына йөрөүен иҫтә тотоп, әхүәле рухиәбеҙҙең уяу булыуы шарт. Ғүмеребеҙ көндәре һанаулы календарь ише. Күҙебеҙгә күренмәгән ҡул йәшәлгән һәр көнөбөҙ һайын уны үлем еле ҡарамағына осора.

Үткән көндәребеҙ – беҙҙең шаһиттарыбыҙ, алдағы көндәребеҙ – ҡунаҡтарыбыҙ. Ҡунаҡ булып киләсәк көндәребеҙҙе ентекле әҙерлек менән ҡаршыларға тейешбеҙ. Ғүмеребеҙ – мәңгелек досье. Кирәмән Кәтибин фәрештәләре һәр ғәмәлебеҙҙе ентекле яҙып бара. Бер көн килеп был досье ҡулыбыҙға тапшырыласаҡ һәм фарман яңғыраясаҡ:

اقْرَأْ كِتَابَكَ كَفَى بِنَفْسِكَ الْيَوْمَ عَلَيْكَ حَسِيبًا

**«Үҙ дәфтәреңде уҡы. Үҙ-үҙеңде хөкөм итергә ошо ғәмәл дәфтәрең етер»** (Исра, 17/14).

Ғәмәлдәребеҙ яҙылған китаптарҙан тыш Ер Аллаһу Тәғәләгә уның өҫтөндә ҡылынған эштәребеҙ хаҡында шаһитлыҡ бирәсәк. Изге аятта әйтелә:

يَوْمَئِذٍ تُحَدِّثُ أَخْبَارَهَا

**«Ул Көндө (Ҡиәмәттә) Ер өҫтөндә нимәләр ҡылынғандың барыһы тураһында ла Ер үҙе хәбәр итер»** (Зәлзәлә, 99/4).

Аллаһ бойорһа, ул көндө мөьминдәрҙең йөҙө яҡтырыр. Ошо маҡсат өсөн Изге Ҡөрьән беҙҙе ҡотолоу юлына йүнәлтә:

**«Ҡурҡыу һәм өмөт араһында Раббыға ялбарғандар, йылы һәм рәхәт яҫтыҡтарынан айырылып, төндә тороп доға уҡый. Беҙҙең тарафтан индерелгән (зәкәткә, хәйер-саҙаҡаға) сарыф итәләр»** (Сәждә, 32/16);

**«Ысындан да беҙ ситен (ауыр) һәм хәтәр көндөң ғазабынан ҡурҡабыҙ», -тип әйтерҙәр»** (Инсән, 76/10);

**«Аллаһтың язаһынан ҡурҡҡан – хаҡтыр, Раббының язаһынан бер кем дә ситтә ҡалмаç (бер кем дә: мин – мосолман, миңә Аллаһ яза бирмәç, тип ҡурҡмайынса йәшәргә тейеш түгел)»** (Мәғәриж, 70/27-28).

Изге Ҡөрьән Аллаһтың язаһынан имен ҡалыуҙарына ышаныусыларҙың ҡаза күрәсәге хаҡында әйтә:

**«Әллә улар үҙҙәрен Аллаһтың язаһынан ҡотолған тип һанаймы? Зыян-зәхмәт күрәсәк гонаһлылар ғына Аллаһ хөкөмөнән ҡурҡмай!»** (Әғраф, 7/99).

Ә Раббыларының мәрхәмәтенән, ярҙамынан өмөт өҙөүселәрҙең кәфер булыуҙары хаҡында әйтелә:

**«Аллаһтың ярҙамынан өмөтөгөҙҙө өҙмәгеҙ. Хаҡтыр, кәферҙәрҙән башҡалар Аллаһ ярҙамынан өмөтөн өҙмәç»** (Йусуф, 12/87).

Мөьминдең йөрәге, Аллаһҡа мөкиббән китеп буйһоноп, ҡурҡыу һәм өмөт менән яна. Аллаһҡа өмөт бағлаған мөьмин ҡурҡыу һәм өмөт араһындағы тигеҙлекте һиҙгер һаҡлап, үҙенең көсһөҙлөгөн танып, һуңғы көнөнә ҡәҙәр доғала булырға тейеш. Изге аятта әмер бирелә:

**«Аллаһтан (язаһынан) ҡурҡып һәм (Уның мәрхәмәтен) өмөт итеп, ғибәҙәт ҡылығыҙ. Хаҡтыр, изгелек ҡылғандарға Аллаһтың рәхмәте бик яҡын»** (Әғраф, 7/56).

Шуға күрә мөьминдәр

**«... Аллаһтан ҡурҡып торалар. Сөнки Аллаһтың ғазабы ҡот оскос бер ғазап һәм ул ғазаптан ҡурҡырға кәрәк»** (Исра, 17/57).

Пәйғәмбәрҙәрҙән һәм изге хәбәр алғандарҙан башҡалар берәү ҙә үҙенең ҡотолороно ышана алмай. Был турала Аллаһ әмер бирә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُواْ اتَّقُواْ اللّهَ حَقَّ تُقَاتِهِ وَلاَ تَمُوتُنَّ إِلاَّ وَأَنتُم مُّسْلِمُونَ

**«Әй, иман килтергәндәр, Аллаһтың яҙаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ (мосолман булып үлегеҙ)!»** (Әлү Ғимран, 3/102).

Аллаһтан ҡурҡыу йөрәктәрҙе бәхет нуры менән балҡыта. Изге Ҡөрьәндә гонаһлыларҙың йәһәннәмдәге ыҙалары һүрәтләнә. Әммә бик күп ғафил кешеләр былай тип иҫәпләй:

«Аллаһ – Ғәфү итеүсе. Унан ҡурҡырға кәрәкмәй, яратырға кәрәк». Ундайҙарҙы Изге Ҡөрьән киҫәтә:

**«Эй, кешеләр, Раббығыҙға ҡаршылыҡ ҡылыуҙан ҡурҡығыҙ. Ата балаһына, бала атаһына ярҙам итә алмаясаҡ көндән ҡурҡығыҙ. Шуны белеп тороғоҙ: Аллаһ әйткән һүҙ һис шикһеҙ тормошҡа ашасаҡ. Зинһар, һаҡ булығыҙ, донъя тормошона алданмағыҙ, ул бер алдаусы ғына. Һәм хәтәр ялғансы шайтан (Аллаһ һеҙҙе барыбер ғәфү итәсәк, тип) аҙҙырмаһын»** (Лоҡман, 31/33).

Ә ҡайһы бер юлдан яҙған әҙәмдәр әшнәләренә, «Гонаһың миңә булһын!» тип, типтереп көн итә. Ғәмһеҙ кешеләр, донъя ләззәттәренә баштүбән сумып, рәхәт йәшәй. Уйлана белгән иманлылар иһә мәңгелектәге тормошон ҡайғырта, рухи бейеклектәргә күтәрелергә тырыша һәм шунан йәм таба.

Йәнә шундай әҙәмдәр ҙә бар: һис бер нигеҙ булмаһа ла, йөрәге, әхүәле рухиәһе менән имандың рухи дәрәжәһенә күтәрелгәндәй тоталар үҙҙәрен; рухи кимәлдәре буйынса **Мәүләнә** һәм **Йунус Эмрә** кеүектәрҙән күпкә түбән булһалар ҙа, былай тип раҫлайҙар:

«Миңә йәннәт кәрәкмәй, мин тамуҡтан ҡурҡмайым. Мин Аллаһу Тәғәләне яратам, Уны ғына яратам...» Күтәренке фразалар сәсеп, улар дини экстазда булыуын күрһәтергә тырыша, ә был һис тә яраған эш түгел.

Аллаһ алдында үҙенең көсһөҙлөгөн таныған кеше, Уға илтеүсе тура юлды ғына һайлап, башҡаларын ябып ҡуя – Уға һөйөүен камиллыҡ

кимәленә еткерә. **Абдулҡадир Гейлани**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, һүҙҙәре буйынса, Раббыһына быңдай һөйөү йөрөткән кеше күңелен башҡа бер нәмәгә лә бағламай, хатта йәннәт хаҡында ла, тамуҡ хаҡында ла уйламай. Үҙ-үҙе менән дә яңғыҙ ҡалыу ситен уға, ул һәр ваҡыт Раббыһы янында. Был **Ләйлә** һәм **Мәжнүн** тарихына оҡшаш.

Ҡасандыр Ләйләгә һөйөүенән аҡылын юйған егет кешеләрҙән айырыла. Ул ауылын ташлап, сүллеккә китә, ҡырағай хайуандар араһында йәшәй. Кешеләрҙең маҡтауына ла, әрләүенә лә битараф ҡала, уларға иғтибар ҙа итмәй. Тынлыҡ та, халыҡтың ығы-зығыһы ла уға барыбер. Бер тапҡыр Мәжнүндән былай тип һорайҙар:

- Һин кем?

- Ләйлә,- ти ул.

- Һин ҡайҙан?

- Ләйләнән...

- Ҡайҙа бараһың?

- Ләйләгә...

Ләйләгә ҡарата көслө һөйөүҙән уның күҙе лә, йөрәге лә һуҡырая, тирә-йүнде күреүҙән туҡтай. Ҡолағы Ләйләгә ҡағылмаған хәбәрҙе ишетеү һәләтен юғалта (Абдулҡадир Гейлани, Фәтхур-Раббани, 284-се бит).

Юғары һөйөү ярҙамында Аллаһу Тәғәләне танып белгән мөьмин йөрәге, барса бәйҙәрҙән ҡотолоп, әйтерһең ireп юҡҡа сыға. Күңелендә бары Аллаһ ҡына ҡала. Ваҡытлы ер теләктәре юғала. Яңғыҙ саҡта ла, халыҡ араһында ла ул тик һөйгән Раббыһы менән. Аллаһу Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәп, хаҡ юлда булыу – уның өсөн бәхет. Ә Аллаһ былай тип әмер бирә: **«... һеҙгә бойоролғанса, тура юлда ҡалығыҙ»** (Һуд, 11/112). Шул рәүешле Аллаһ тәрән хәҡиҡәтте аса.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешелеккә **«шәхес өлгөһө»** булараҡ Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙҙе, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, бүләк иткән.

Бәйән ителгәнсә, Хөрмәтле **Пәйғәмбәребеҙ**, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, кешеләргә хас хистән арына алмай, ул йөрәге менән ейәндәре **Хәсән** һәм **Хөсәйенгә** ныҡ бәйләнгән була. Был турала **Йбраил**, ғәләйһис-сәләм, унан бер тапҡыр һорап ҡуя:

- Уларҙы ныҡ яратаһыңмы?

Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, яуап бирә:

- *Эйе, яратам.*

Ябраил, ғәләйһис-сәләм, шундай хәбәрҙе еткерә:

- Уларҙың береһен ағыулаясаҡтар, икенсеһен үлтерәсәктәр.

Был хәбәрҙән һуң, Рәсүлуллаһ, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, ейәндәренә ҡарата булған хистәрен нормаға һала ала (Абдулҡадир Гейлани, Фәтхур-Раббани, 314-се бит).

Тимәк, кемгә ҡарата булһа ла артыҡ һөйөүҙе Аллаһу Тәғәлә ҡабул итмәй. Хатта Пәйғәмбәребеҙ ҙә, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, әгәр Аллаһу Тәғәләнән киҫәтеү килмәһә, хаталанып ҡуйыр ине. Был миҫалдан шул аңлашыла: үҙеңдең хистәреңде, һөйөүеңде контролдә тотоу, кумирҙар булдырмау лазым.

Сиге булмаған һөйөү Аллаһу Тәғәләгә ҡарата ғына мөмкин. Аллаһтан ҡурҡыу хисе һәм өмөттәрҙе Уға ғына бағлау тигеҙләшеп, күңелдә даими булһа, кешенең әхүәле рухиәһе иман күгендәге рәхмәт болото кеүек була. Һөйгән бит һөйгәненең мөхәббәтен юғалтыуҙан, рәнйетеүҙән ҡурҡа.

Изге Ҡөрьәндә әйтелә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا إِن تَنصُرُوا اللهَ يَنصُرْكُمْ وَيُثَبِّتْ أَقْدَامَكُمْ

**«Һай, иман килтергән кешеләр, әгәр һеҙ Аллаһҡа буйһоноп, (Унын диненә, Унын пәйғәмбәре килтергән Исламға) ярҙам итһәгеҙ, Ул да (дошмандарығыҙға ҡаршы) һеҙгә ярҙам итер һәм теҙ быуындарығыҙҙы нығытыр»** (Мөхәммәт, 47/7).

Шуға күрә һәр мөмкинлекте файҙаланып, иманыбыҙҙы ғәмәлдәр китабыбыҙҙы тулыландырасаҡ гүзәл эштәр менән биҙәү зарур.

Беҙ, мөьминдәр, Аллаһтың рәхмәте менән хатта фәрештәләр сәждә ҡылған Әҙәм тоҡомо булыуыбыҙҙы, Аллаһтың Гүзәл Исемдәре Мәктәбе һәм дин ғилемендә Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт Мостафа, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, уҡыусылары булыуыбыҙҙы онотторға тейеш түгелбеҙ. Ҡөрьән тормошобоҙҙо тура юлға һала. Әхүәле рухиәбеҙ Ҡөрьән һәм Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, Сөннәһе менән тулы булырға тейеш, сөнки Улар беҙҙе икһеҙ-сикһеҙ бәхет һәм хаҡ юлға саҡыра. Раббыбыҙ әйтеүенсә, быға сәләмәт ҡәлб менән генә ирешергә мөмкин.

Ул саҡырыу хаҡында уйланмау, ғафил ҡалыу бикле йөрәктәребеҙҙең кәмселеге тураһында һөйләй. Изге аятта әйтелә:

أَفَلاَ يَتَدَبَّرُونَ الْقُرْآنَ أَمْ عَلَى قُلُوبٍ أَقْفَالُهَا

**«Улар Ҡөрьәнде аңламайҙармы? Әллә уларҙың күңеленә йоҙаҡ һалынғанмы?»** (Мөхәммәт, 47/24).

Изге Ҡөрьән уйланырға саҡыра:

أَفَلاَ يَتَدَبَّرُونَ الْقُرْآنَ وَلَوْ كَانَ مِنْ عِندِ
غَيْرِ اللّٰهِ لَوَجَدُواْ فِيهِ اخْتِلاَفًا كَثِيرًا

**«Ни өсөн кешеләр Ҡөрьән тураһында дөрөҫ фекерләмәйҙәр икән? Әгәр ҙә ул (Ҡөрьән) Аллаһтан башҡа зат тарафынан күндерелгән булһа, шунда (Ҡөрьәндә) ҡаршылыҡтар булыр ине»** (Ниса, 4/82).

Фән XIV быуат буйы Изге Ҡөрьәнгә нисек кенә ҡаршы сығырға тырышмаһын, бер генә аятты ла инҡар итә алмай. Һәр бер фәнни асыш ундағы мәғлүмәттәрҙең хаҡ булыуын раҫлай. Ҡөрьән, хатта XIV быуат элек ябай бәҙәүигә рухи аҙыҡ биреп, уның тормошон яйға һалған. Бөгөн дә мәңгелек хәҡиҡәттәре менән заманыбыҙҙың зыялыларын һоҡландыра. Иң аныҡ фәнни мәғлүмәттәр унда, улар Ҡиәмәткә ҡәҙәр үҙенең ҡиммәтен юғалтмаясаҡ. Аллаһу Тәғәлә фәнни эҙләнеүҙәргә юл аса, асыштар иһә Изге Ҡөрьәндәге хәҡиҡәттәрҙе раҫлай. Ҡөрьән мөғжизәһе шунда: бер асыш та тәғәйенләнгән ваҡытынан алда яһалмай. Аллаһу Тәғәлә бойора:

**«Йыраҡта йәшәүсе халыҡтарға һәм үҙ ҡәүемдәре araһында ла аяттарыбыҙҙы күрһәтәбеҙ, уның (Ҡөрьәндең) ысын икәнен (Аллаһтан индерелгәнен) яҡшы белһендәр өсөн. Раббыңдың һәр нәмәгә шаһит булғаны етмәҫме?»** (Фуссылат, 41/53).

Хаҡ юл хаҡында Илаһи аңлатыуҙар бихисап. Бына фәнни фактарға әйләнгән аяттар:

**«Әй, халыҡтар! Яңынан терелеүгә шикләнһәгеҙ, шуны белеп тороғоҙ: һеҙҙе тупраҡтан, һуңынан шәһүәттән, унан һуң ғәләҡтән (ҡан күҙәнәгенән), унан һуң күҙәнәктәре беленер-беленмәҫ йәнле ит киҫәгенән (яралғы итеп) яралттыҡ. Ҡөҙрәтебеҙҙе һеҙгә белдерер өсөн. Һәм мәғлүм бер ваҡытҡаса (яралғының кем буласағын**

**билгеләгән хәлдә) әсә ҡарынында тотабыҙ. Һуңынан һеҙҙе бер сабый бала рәүешендә донъяға сығарабыҙ. Унан һуң аҡылға, көскә эйә булһын, тип үҫтерәбеҙ. Ҡайһы берҙәрегеҙ (йәшләй) вафат була, ҡайһы берҙәрегеҙ ҡартайып, хәлдән тайғансыға ҡәҙәр йәшәй, ни ҡәҙәр генә ғилемле булһа ла, ҡартлыҡ көндәрендә барыһын да онотоп бөтөрә. Һин ҡоп-ҡоро (үле-йәнһеҙ) Ер йөҙөнә ҡарап тораһың, әммә Беҙ өҫтөнә ямғыр яуҙырғас, ул терелә, бүртә башлай һәм төрлө (тоҡомдан булған) үҫемлектәр үҫтерә»** (Хаж, 22/5);

**«Хаҡтыр, Беҙ кешене сафландырылған балсыҡтан яһаныҡ. Һуңынан уны ышаныслы бер урынға тамсы итеп урынлаштырҙыҡ. (Әҙәм ғәләйһис-сәләмдең нәҫел орлоғон ҡатынының аналығына урынлаштырҙыҡ). Унан һуң шул шәһүәт тамсыһын ойошҡан ҡан (яралғы) хәленә килтерҙек; ҡанды епсел-епсел ит иттек, уны һөйәккә (һөлдәгә) әүерелдерҙек, шул һөйәктәрҙе ит менән ҡаплаттыҡ. Һуңынан уны башҡа рәүешкә (кеше һүрәтенә) килтереп хасил иттек (йән өрҙөк. Ижад (барлыҡҡа килтереү) менән шөғөлләнеүселәрҙең иң бөйөгө, иң данлыһы - Аллаһ Тәғәләләр!»** (Мөьминун, 23/12-14).

Билдәле Канада эмбриологы, профессор, доктор Кейт Мур, яралғының әсә ҡарынында үҫешен тасуирлап яҙғандан һуң, изге аяттарҙы килтерә һәм һығымта яһай: ғилми факттар һәм Изге Ҡөрьәндәге һүрәтләү берберенән айырылмай. Улай ғына ла түгел, Изге аяттар кире ҡаҡҡыһыҙ медицина мәғлүмәттәрен тулыраҡ, образлыраҡ бирә.

Кейттың раҫлауынса, яралғының өс үҫеш стадияһы, атап әйткәндә, «нутфа, ғәләк, мутға» ғилми тикшеренеүҙәргә тап килә һәм медицинаның был өлкәһен алға этәрә. «Нутфа», йәғни «тамсы» яралғының башланғыс стадияһы, әле уны фән аҙағынаса өйрәнеп тә бөтмәгән. «Ғәләк» фазаһы – ул «ойошҡан ҡан», ул тән тышсаһына йәбешкән килеш аҫылынып тора. Ошо ойошҡан ҡанда бөтә тормош программаһы һаҡлана. «Мутға», йәғни «тешләнгән ит киҫәге» стадияһында яралғы, ысынлап та, тешләнгән итте – теш эҙҙәре ҡалған итте хәтерләтә. Тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәһе 1400 йыл элек төшөрөлгән мөғжизәле аяттар менән раҫланыуын күргәс, Кейт Изге Ҡөрьән хәҡиҡәте һәм Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, бөйөклөгөн танып, Ислам динен ҡабул итә.

Изге Ҡөрьәндәге бындай раҫланған дәлилдәр хаҡында шулай әйтелә:

**«Белемле кешеләр Раббынан һиңә индерелгән (Ҡөрьән)дең хаҡ икәнен беләләр; уның (Ҡөрьәндең) мотлаҡ өҫтөн һәм маҡтауға лайыҡ булған юлға өндәүсе икәнен күрәләр»** (Сәба, 34/6).

Кешенең бармаҡ эҙҙәрен тикшергән криминалистар шуны асыҡлаған: һәр кешенең бармаҡ эҙҙәре үҙенсәлекле һәм ғүмер буйы үҙгәрмәй. Шуға күрә тикшереү һәм хөкөм эшендә иң дөрөҫ ысул – енәйәт урынында ҡалдырылған эҙҙәрҙе сағыштырып ҡарау. XIX быуатта яһалған был асыш-ты бөтә донъяла киң ҡулланалар. Ул турала Ҡөрьәндә шулай әйтелә:

**«... кеше: үлгәс сереп тарҡалған һөйәктәребеҙҙе бергә йыйып, беҙҙе яңынан терелтә алмаясаҡ, тип уйлаймы? Һис шикһеҙ, уларҙың бармаҡ остарына саҡлы, нисек булған, шулай мөкәммәл итеп, яңынан йыйырға ҡөҙрәтебеҙҙән килә»** (Ҡийәмә, 75/3-4).

Йәғни, Ҡөрьән алдан, ә фән уның артынан килә. Изге аят бойора:

**«Әйт: «Шуныһы хаҡтыр: кешеләр менән барлыҡ ендәр бергә йыйылышып, бер-береһенә ярҙам итешһәләр ҙә, Ҡөрьәнгә оҡшаш башҡа китап майҙанға килтерә аласаҡ түгел», - тип»** (Исра, 17/88).

Ҡөрьән – үлемгә дусар, көсһөҙ әҙәм ғилеме түгел, ә һәр кемдең хәлен белеп торған Раббыбыҙ ғилеме. Шул уҡ ваҡытта был Һүҙҙең Хужаһы – Аллаһ Тәғәлә – кешене фәнни асыштар ярҙамында ғаләмде танып белеүгә этәрә.

Бөтә пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр Ҡөрьән хәҡиҡәттәренән ғилем ала. Ҡөрьәндә уға саҡлы булған барса Илаһи яҙмалар аҡылы тупланған. Кеше ғаләмдең кескәй моделе булһа, Ҡөрьән – үҙенә йыһанды һыйҙырған Илаһи китап, шуға күрә ваҡыт та, киңлек тә ундағы ғилемгә кәртә түгел. Ул барса ваҡытты үҙ эсенә ала. Аллаһтың яҡын ҡолдарының Ҡөрьәнгә мөнәсәбәте тап шундай, уның һәр һүҙе, хәрефе менән үҙгәреүсән йәшерен серҙәрҙең асылын аңлай улар. Аллаһтың һайлам ҡолдары раҫлауынса, бөтә ғилемдәр һәм күренекле әҫәрҙәр Ҡөрьән яҡтылығынан нур алған.

Йәнә шуны ла әйтеп үтке килә: әлеге Рәжәп айында рәхмәтле күркәм Миғраж төнө бар, ул иншә.Аллаһ бик күп илаһи ғилемдәр менән килер.

Һижрәткә ҡәҙәр йыл ярым ҡалғас, Рәжәп айының 27-се тәүлеге башланған кистә Рәсүлуллаһтың, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, бураҡҡа атланып, Мәккәләге Харам мәсетенән Иерусалимдағы Бәйтел-Мәҡдискә

килеүе, артабан күктең етенсе ҡатына олғашыуы - Раббыбыҙҙың ваҡыт һәм киңлеккә буйһонмаған Илаһи Ҡөҙрәте.

Аятта был изге юл шулай тасуирлана:

**«Аяттарыбыҙҙың бер өлөшөн күрһәтәйем тип, бер төн эсендә илсеһен Харам мәсетенән тирә-яғы ниғмәт (бәрәкәт) менән тулы Аҡса мәсетенә килтергән Аллаһ кәмселектәрҙән азат. Ул, ысынлап та, ишетеп, күреп тороусы»** (Исра, 17/1).

Икенсе аятта был изге юлда Илаһи Аҡыл сағылыш тапкан билдәләр һүрәтләнә:

**«Ситрәтүл ағасы балҡышлы ҡорма (үҙенең япрактары) менән ҡапланғайны. Мөхәммәттең күҙе ҡамашманы, ҡарашы ситкә тайпылманы. Хаҡтыр, ул Раббының иң бөйөк аяттарының (дәлилдәренең) бер өлөшөн күрҙе»** (Нәжем, 53/16-18).

Миғраж кисендә Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, төн эсендә ғәләмәт ҙур киңлектәрҙе үтеүе һәм Аллаһ Тәғәлә күрһәткән һоҡланғыс тамашаны күреүе асылда **«Яраткандың Яратканы»** менән осрашыуы була. Илаһи саҡырыу, уны ҡабул итеү, күренештәрҙең үтә лә нәзәкәтлелеге, матурлығы – әҙәм аҡылы аңларлыҡ нәмәләр түгел.

Онотмайыҡ, был төндә мәсет манараларынан күккә уҡталған яҡтылыҡ Аллаһтың барлығы һәм берлеге хаҡындағы шәһәҙәтебеҙ кеүек булыр; фатихалы был төн яҡты хәтирә, илаһи бүләк булып иҫебеҙҙә ҡалыр.

Бөтә өммәт был төндә намаҙҙа була. Намаҙ – диндең терәге, ҡараштарҙың нуры, ҡәлбебеҙ шатлығы, Раббыбыҙ менән осрашыу, мөьмин йәне миғражы. Аллаһ ҡоло һәм Уның Пәйғәмбәре, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, өммәте юлынан барыусы буларак һәммәбеҙ үҙ миғражын кисерергә ынтыла. Намаҙҙа үҙ миғражына олғашҡан ҡолдар тураһында ла ишетергә мөмкин. Миғражыбыҙҙың кимәле намаҙыбыҙҙың кимәленә бәйләнгән. Миғражыбыҙға, йәғни Раббыбыҙға саҡырыуҙы, көнөнә биш тапҡыр алабыҙ.

**Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә был фатихалы төндә бөтә өммәтебеҙгә бәхет сығанағы итһен!**

**Эй Аллам! Һинең Рәхмәтең яуған хаҡ юл бир беҙгә! Фани донъя теләктәре упҡынынан һаҡла беҙҙе! Йомарт Раббыбыҙ беҙҙең!**

**Үҙеңдең Хәкикәттәреңде төшөнөү өсөн уйланыу һәм аңлау һәләте бир! Ҡәлбтәребеҙҙе Үҙеңдең Һөйөүең менән тултыр!**

**Эй Аллам! Беҙҙе Ҡөрьән ғилеме менән биҙә! Шул турала уйланған сүрәттә, Пәйғәмбәреңә, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, күңелебеҙҙә оло һөйөү булғанда йән өр безгә, Һинең ҡаршыңа тере, саф ҡәлб менән килеп баҫырға насип ит!..**

**Әмин!..**

# *Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 3*

*Ергә сәселгән кескәй генә орлоҡтан бейеклеге менән хайран иткән ғәләмәт ҙур ағас үҫеп сыҡҡан кеүек, Ҡөрьән хәҡиҡәте һәм тәрбиәһенән көс алған уй-тойғоларыбыҙ ҙа иҫ киткес юғарылыҡтарға күтәрелеүе ихтимал. Тимәк, әгәр Ҡөрьән икһеҙ-сикһеҙ ғилем сығанағы, хаҡ юлға нәсихәт биреүсе булмаһа, уйҙарыбыҙ, хистәребеҙ ер һутын тоймаған орлоҡ ише үле, зәғиф ҡалыр ине.*

# *Ҡөрьән һәм тәфәккүр - 3*

Кешене үҙенә буйһоноусан итеп яралтҡан Аллаһу Сүбхәнү үә Тәғәлә **«Күктәрҙә һәм Ерҙә нимә булһа, шуларҙың барыһын да Үҙ тарафынан индереп»** (Жәҫиә, 45/13), беҙҙең ҡарамаҡҡа биргән, ә кеше үҙенең ҡылғандарын тоя, баһалай белһен өсөн, уға фекерләү, анализ яһау ҡеүәһен биргән. Әҙәм иманда камиллыҡҡа ирешә алһын өсөн, Аллаһ үҙ Рәхмәте менән өлгөлө шәхестәр, Хаҡ юлды күрһәтеүселәр булған пәйғәмбәрҙәрен ебәргән.

Пәйғәмбәрҙәр аша ебәрелгән Илаһи ярҙам һуңғы Ҡиәмәт көнө Пәйғәмбәре, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, һәм уның аша килгән Аллаһтың кешеләргә һуңғы Аманаты – Изге Ҡөрьән аша камиллыҡҡа ирешеп тамамланған.

Аллаһ беҙгә биргән бөтә ниғмәттәр өҫтәүенә Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, өммәтенә инеү бәхетенә ирешкәнебеҙ, Ҡөрьән серҙәрен танып белә алғаныбыҙ өсөн, үҙебеҙҙе ҙур бурыслы тойоп, Аллаһу Тәғәләгә сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе белдерергә тейешбеҙ. Ергә сәселгән кескәй генә орлоҡтан бейеклеге менән хайран иткән ғәләмәт ҙур ағас үҫеп сыҡҡан кеүек, Ҡөрьән хәҡиҡәте һәм тәрбиәһенән көс алған уйтоғоларыбыҙ ҙа иҫ киткес юғарылыҡтарға күтәрелеүе ихтимал. Тимәк, әгәр Ҡөрьән икһеҙ-сикһеҙ ғилем сығанағы, хаҡ юлға нәсихәт биреүсе булмаһа, уйҙарыбыҙ, хистәребеҙ ер һутын тоймаған орлоҡ ише үле, зәғиф ҡалыр ине. Беҙгә, Аллаһ ҡолдарына, бөйөк илаһи бүләк булған Ҡөрьәндә Раббыбыҙҙың сикһеҙ йомартлығы һәм танып белеүҙең икһеҙ-сикһеҙ бөйөклөгө кәүҙәләнеш тапҡан.

Йыһан тикшеренеүҙәре алып барылған XXI быуатта илаһи саҡырыу барып етмәгән кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр әҙәм балалары үҙҙәре аңлаған төшөнсәләргә, түбән маҡсаттарға ҡоролған. Әлеге мәлдә миллион-

дарса кеше ялған диндәр ҡосағында: берәүҙәре Будданың таш һындарына ғибәҙәт ҡыла, икенселәре, мәҫәлән, индуистар, көсһөҙ хайуандарҙы – һыйырҙарҙы изге хайуан тип иҫәпләй, йәнә миллиондары үҙҙәре кеүек үк үлемгә дусар кешеләрҙе Аллаһ урынына күрә. Был нәсихәтле, ғибрәтле картиналар Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, өммәтенә ни ҡәҙәр ҙур игелектәр бирелеүе хаҡында һөйләй. Тик ҡыҙғаныс булһа ла, шундайҙар ҙа бар: улар хәҡиҡәтте ишеткән, күргән, әммә нәпсеһенә буйһоноп, донъя байлыҡтарына ҡыҙығып, тура юлдан яҙлыҡҡан. Аҙашҡан ундай бәндәләр бөтә замандарҙа ла булған, улар хаҡында изге Ҡөрьәндә лә әйтелә:

**«(Улар) һуҡыр, телһеҙ, һаңғырау…»** (Бәҡара, 2/18).

Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мөьминдәрҙең аяттарына ҡарата уяу, зирәк, отҡор булыуын талап итә. Изге аятта әйтелә:

وَالَّذِينَ إِذَا ذُكِّرُوا بِآيَاتِ رَبِّهِمْ لَمْ يَخِرُّوا عَلَيْهَا صُمًّا وَعُمْيَانًا

**«Улар Раббының аяттарын тыңлағанда (мәғәнәһенә) күҙ йоммаҫ, ишетмәмешкә һалышмаҫтар»** (Фурҡан, 25/73).

Беҙҙең заманда мөьминдәр өсөн ике бурыс айырыуса мөһим:

Беренсеһе – бөтә йәнең менән иман нурын биргән Аллаһҡа рәхмәтле булыу. Икенсеһе – хаҡты күрмәгән, тура юл хаҡында ишетмәгәндәргә Аллаһ биргән игелек, йомартлыҡтан өлөш сығарыу, күҙҙәрен асыу.

Изге аяттарҙа әйтелә:

**«Һеҙҙән шундай бер өммәт булырға тейеш, улар һәр кемде хәйерле эштәргә, изгелеккә өндәрҙәр, яманлыҡтан ваз кисергә саҡырырҙар. Бына шундайҙар мораттарына ирешкән кешеләр булыр»** (Әлү Ғимран, 3/104);

**«Аллаһҡа йүнәлергә өндәгән һәм дә үҙе лә изгелекле ғәмәлдәр ҡылған һәм: «Мин мосолман!» - тигән кешенең һөйләшеүенән дә тәмле һүҙле башҡа берәү бармы икән?»** (Фуссыиләт, 41/33).

Хаҡ дингә саҡырыу һөҙөмтәле булһын өсөн, бөтә буш ваҡытыбыҙҙы әхүәле рухиәбеҙҙе Ҡөрьән нәсихәттәре һәм әхлағы менән тәрбиәләүгә бағышлау, йәғни күңелдәребеҙҙе Изге Ҡөрьән менән шифаландырыу мөһим.

Күреүебеҙсә, донъяға материалистик ҡараш кешене кәмһетеү, юғалтыуҙарға ғына әҙерләй, сөнки бәндәгә ысынбарлыҡты үҙ арбаһындағы хәлдәрҙән сығып ҡына баһалау хас. Изге Ҡөрьән аяттарында шундай мөрәжәғәттәрҙе йыш күрәбеҙ: **«Эй, аҡылы булғандар»**: (يَآأُولِى الْأَلْبَاِ) йәки шундай һорауҙар ҙа бар: «**Аңламайһығыҙмы әллә, уйланмайһығыҙмы, аңлай алмайһығыҙмы?»** - улар әҙәмде фекер йөрөтөүгә лә этәрә, киҫәтә лә.

Бөтә фәндәрҙең башында торған, асыштар яһауға этәргән Ҡөрьән кешенең күҙәтеүҙәр яһау, фекер йөрөтөү теләген ҡандыра, донъяны күркәм танып белеү сығанағы булып тора.

Беҙ, мосолмандар, кешелеккә Ҡөрьәндең бөтә бөйөклөгөн, камиллығын еткереүҙәге яуаплылығыбыҙ хаҡында уйланырға, кәмселек килтереүҙән һаҡланырға тейешбеҙ, әхлағыбыҙҙың дини талаптарға яуап биреүе лә зарур.

Быуаттар буйы Ҡөрьән хәҡиҡәттәренең фән менән раҫланып тороуы иманыбыҙҙың дөрөҫлөгөн раҫлай. Дөрөҫ юлдан, тура юлдан барғандар аҙашҡандар өсөн яуаплы. Ер шарының теләһә ниндәй мөйөшө менән бәйләнеш булдырыу мөмкин булғанда, улар яҙмышына битараф ҡалырға тейеш түгелбеҙ, юғиһә Ҡиәмәт көнөндә улар беҙгә ҡаршы шаһитлыҡ ҡыласаҡ. Былар иһә яуаплылығыбыҙҙы арттыра, ә дини мистик һүрәтләүҙәрҙең күпселеге аңлатылған, фәнни дәлилдәр менән иҫбатланған булыуы бөгөнгө бурыстарыбыҙҙы еңеләйтә.

Ҡөрьәндә ғаләмдәге ҡайһы бер йәшерен серҙәрҙең фәнни үҫеш һәм кеше аҡылы тейешле кимәлгә еткәс кенә асыласағы тураһында әйтелә. Тимәк, быға саҡлы булған һәм Ҡиәмәткә ҡәҙәр буласаҡ асыштар һәммәһе Ҡөрьәндә һаҡлана. Асыштар үҙ ваҡытында, ғилем тейешле кимәлгә еткәс, кеше уларҙы ҡабул итергә әҙер булғас эшләнә. Һис шикһеҙ, былар - Аллаһу Тәғәләнең кешеләргә мәрхәмәте.

Кеше физиологияһы, эмбриологияһы өлкәһендәге белемдәр, медициналағы бөйөк асыштар, йондоҙло күк һәм ер картаһы, ғаләм тәртибе һәм программаһы менән идара итеү кеүек хәҡиҡәттәр Ҡөрьәндә ситләтеп аңлатыла, тейешле сәғәттәр һуҡҡас, фән дә уларға иғтибар итә.

Ҡөрьән – боронғо ергә оҡшаш, ҡайһы урынын ғына ҡаҙма - хазина. Хәҡиҡәттәрҙең тәрән мәғәнәһен өйрәнгәндә, тырышлыҡ, күңел күҙен һалып бағыу ғына кәрәк.

Йәне, аҡылы булғандар был Ғаләм Китабы ярҙамында хистәр тәрәнлегенә, йыһандың йәшерен серҙәрен асыу һәләтенә эйә була ала. Шуға күрә Раббыбыҙ изге аяттарҙа кешелекте фекерләп ҡарарға саҡыра:

**«Әллә һуң улар Ер йөҙө буйлап сәйәхәт итеп йөрөмәйҙәрме? Йөрөгән булһалар, баштарына уй төшкән булыр ине. Ҡолаҡтары ишеткән булыр ине. Хаҡтыр, уларҙың (маңлай) күҙҙәре һуҡыр түгел, фәҡәт күңел күҙҙәре һуҡыр»** (Хаж, 22/46);

**«Ер йөҙөндә бер-береһенә күрше ҡитғалар, йөҙөм баҡсалары, игендәр, бер тамырҙан һәм төрлө тамырҙан үҫеп сыҡҡан хөрмә ағастары бар. Быларҙың барыһы ла бер һыу менән һуғарыла, ашауҙа тәме менән береһен икенсеһенән артыҡ ҡылырбыҙ. Аҡылдарын эшләткән кешеләр өсөн был нәмәләрҙе яралтыуҙа Аллаһуҙың берлегенә, әлбиттә, дәлилдәр бар»** (Рәғд, 13/4).

Хаҡ мөьмин булыр өсөн, йөрәктең һиҙгерлеген, уйланыуға, бөйөк һөйөүгә әүәҫлекте тәрбиәләү лазым.

Үҙ функцияларын үтәгән мейе һәм йән кешене кеше итә. Рухи тәрбиәне ситкә ҡуйып, интеллектты үҫтереүгә генә иғтибар итеү, бәлки, ерҙә яҡшы урын биләргә ярҙам итер. Ә һиҙгер, нескә тойғоло мөьмин булыр өсөн, ҡәлбтең ҡамырҙай йомшаҡлығы, һығылмалылығы, һәр нәмәнең асылына төшөнөү һәләте кәрәк. Ундай кимәлгә еткән кешенең тышҡы ҡиәфәте лә **«хәл-торош теле»** менән эске асылды сағылдыра. Кешене ҡылыҡһырлаған нәмәләр: шәхсиәт, йөҙ, бит, күҙҙәр, ғәҙәттәр витрина кеүек. Кеше ауыҙын асҡансы уҡ уның **«хәл-торош теле»** байтаҡ нәмә һөйләп өлгөрә.

Тыумыштан һуҡыр кеше ҡапыл күрә башлаһа, был уны шаҡ ҡатырасаҡ. Диңгеҙ ҙә, ағастар ҙа, осоп үткән ҡоштар ҙа аптыратасаҡ. Ул бит элек быларҙың береһен дә күрмәгән...»Раббым нисек барыһын да гүзәл сүрәттә бар иткән!»- тип һоҡланып ҡысҡырасаҡ ул. Ошо матурлыҡты меңәр тапҡыр күргән кеше быға битараф, тәрән уйланыуҙар, нескә тойғолар уға ят, ул яҙғы ямғырҙың бәрәкәтен тоймаған һалҡын ҡая кеүек, ғафил, ғәмһеҙ.

Изге Ҡөрьәндең беҙҙе йоҡобоҙҙан айнырға өндәүсе аяттары ниндәй гүзәл:

**«Төндөң һәм көндөң алмашыныуы, Аллаһтың Күктән индергән ризыҡтары (ямғыры) һәм үлемдән һуң тупраҡтың яңынан терелеүе, елдәрҙең төрлө яҡҡа иҫеүе аҡылы булған халыҡҡа (Аллаһтың бер булғанына һәм сикһеҙ ҡөҙрәтенә ышаныслы) дәлилдәрҙер»** (Жәҫиә, 45/5);

**«Ер үçтереп биргән ниғмәттәрҙе лә, кешеләрҙе лә һәм тағы уларға мәғлүм булмаған ни ҡәҙәр нәмәләрҙе (йәнле-йәнһеҙ) парлы-парлы итеп яралтканға (Аллаһҡа) сикһеҙ маҡтауҙар! Төн ҡараңғылығы ла (Аллаһтың ҡөҙрәтенә) бер дәлил. Беҙ унан көн яҡтылығын һурып сығарабыҙ. Шунан һуң улар төн ҡараңғылығында ҡала. Ҡояш та (Илаһи бер ҡөҙрәттең дәлиле булараҡ) үҙенә (Аллаһ тарафынан) билгеләнгән ваҡытка саҡлы әйләнеп йөрөр. Был эштәр сикһеҙ ҡөҙрәт эйәһе, (һәр нәмәне) дөрөçө менән белеп тороусы (Аллаһтың) әмерелер. Айҙың хәле иһә былай тора: (әйләнеп йөрөр өсөн) Беҙ уға ла теүәл күк көмбәҙе һәм фасылдар тәғәйенләнек. Ниһайәт ул ҡарт хөрмә ағасының нескә талы кеүек, нәҙек булып яңынан тыуыр. Ҡояш Айға килеп ирешә алмаç, төндөң дә көн менән бергә булаһы юҡ. Есемдәрҙең барыһы ла (теүәл билгеләнгән) күк көмбәҙе буйлап йөҙә»** (Йә Син, 36/37-40);

**«Бына беҙ был миçалдарҙы, ғибрәттәрҙе кешеләр һабаҡ алһын өсөн килтерәбеҙ. Уларҙы фәҡәт белемле, зиһенле кешеләр генә аңлар»** (Ғәнкәбут, 29/43).

Илаһи һөйөү һулышын тойоп, фани донъяла фекер-хис тәрәнлегенә ирешә алғандар үҙҙәренә бәрәкәттәрҙе арттыра, Әхирәттә лә бәхеттән үҙ өлөшөн ала. Тарихтан күрәбеҙ: пәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр, изге аҡыл эйәләре ғаләмде танып белеүҙә рухи эҙләнеүҙәр юлын һайлаған. Кеше тәбиғәтенә, төпкө аңына Аллаһ хаҡындағы ғилем (мәғрифәтуллаһ), йәғни Раббыһына ышанырға әҙерлек, хаҡты тойоу сифаты һалынған.

Күп кенә моңһоҙ әҙәмдәр тормош һынауҙары алдында яҡлаусыһыҙ ҡала, ә тәбиғәттән һалынған сифаттарын эшкә ҡушһа, Раббыһына кире ҡайта, мохтажлыҡ тыуһа ла, Уға һыйына, Унан ярҙам эҙләй. Бөйөк Ҡөҙрәт Эйәһе дәлилдәренә ышанмайынса, Ул идара иткән төп тормош ағымынан ситләшкәндәр киләһе тормошонда ла «һәпәләк» уйнауын дауам итәсәк. Изге аяттарҙа әйтелә:

**«… күҙҙәре һуҡыр түгел, фәҡәт күңел күҙҙәре һуҡыр»** (Хаж, 22/46);

**«Был донъяла (күңел күҙе) һуҡыр булған Әхирәттә лә һуҡыр булыр. Шуның өçтөнә улар тағы ла нығыраҡ аҙашыр»** (Исра, 17/72).

Изге Ҡөрьәнде йөрәктәрендә Раббыбыҙға оло һөйөү булған иманлы остаҙдарҙан өйрәнеү лазым, сөнки илаһи ғилем, һөйөү йөрәктән-йөрәккә күсеп, хистәр тәрәнлеген, фекерләү ҡеүәһен арттыра.

Рәсүлуллаһҡа, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, бер заман шундай һорау бирәләр:

- Ҡөрьәнде ниндәй тауыш һәм алым менән уҡыу яҡшы?

- *Ҡөрьән уҡығанда, Аллаһтан ҡурҡыуы һиҙелгән тауыш, алым иң яҡшыһы.* (Дарими, Фәдаил-әл-Ҡөрьән, 34)

Юғиһә ауыҙ эсенән мыңғырлап уҡыу тәрән хистәр ҙә, уйланыу, фекерләү теләгеп дә уятмай. Был йәһәттән Рәсүлуллаһ, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, киҫәтеүҙәрен иҫтә тотоу мөһим:

*«Һеҙҙең арала шундай төркөм барлыҡҡа килер: уларҙың намаҙы алдында һеҙҙең намаҙ, уларҙың ураҙаһы янында һеҙҙең ураҙа, уларҙың ғәмәлдәре янында һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙ кескәй генә булып күренер. Улар Ҡөрьән уҡыр, әммә уҡығандары ауыҙынан йыраҡ китмәҫ. Улар диндән йәйәнән атылған уҡ кеүек сығып китер».* (Бухари, Фәдаил-әл-Ҡөрьән, 36)

Ҡөрьән уҡығанда бындай бәләгә ҡалмаҫ өсөн, аяттарҙың асылын аңларға тырышып, Изге Китаптың тәрән мәғәнәһен, юғары әхлағын йөрәгеңә һеңдереү лазым. Ул бит мөьминдәрҙе даими уйланырға, фекер тупларға саҡыра. Изге аятта әйтелә:

**«…Ап-асыҡ мөғжизәләр һәм китаптар менән (пәйғәмбәрҙәрҙе ебәрҙек). Кешеләргә, үҙҙәренә индерелгәнде аңлатыу өсөн һәм уйлай-уйлай аңлаһындар тип, һиңә лә был Ҡөрьәнде индерҙек»** (Нәхл, 16/44).

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә беҙҙе, ҡолдарын, Үҙенең барлығының бөйөк дәлилдәре һәм бүләк ителгән бәрәкәттәр хаҡында уйланырға саҡыра. Ул төрлө телдә һөйләшкән, тән төҫтәре лә төрлө булған кешеләргә иҫтибар итергә саҡыра. Изге аятта әйтелә:

«**Әй, әҙәм балалары! Хаҡтыр, Беҙ һеҙҙе бер ир, бер ҡатын итеп яралттыҡ. Бер-берегеҙ менән аралашығыҙ тип, һеҙҙе ҡәүемдәр һәм ҡәбиләләргә айырҙыҡ. Хаҡтыр, гөнаһ ҡылыуҙан ҡурҡҡан кеше Аллаһ ҡаршыһында иң оло абруй ҡаҙаныр. Шөбһәһеҙҙер, Аллаһ барыһын да белеп, барыһынан да хәбәрҙар булып тора»** (Рум, 30/22).

Ысынлап та, кешеләр һөйләшкән бихисап телдәр ниндәйҙер комиссия эше нәтижәһендә барлыҡҡа килмәгән. Грамматикаһы ла, лексикаһы кеше хеҙмәте емеше түгел. Бер телдәрҙә, мәҫәлән, ҡылым һөйләм башында, икенселәрендә һөйләм аҙағында килә. Быларҙы кеше аңлы рәүештә һайлап алмаған, улар – Раббыбыҙ бүләге. Тән төҫө буйынса айырылған төрлө

расаларҙы барлыҡҡа килтереүҙә Илаһи Көсте күрәбеҙ. Расалар – географик шарттар йоғонтоһо һөҙөмтәһе, ә милләттәр – Бөйөк аҡылдың кәүҙәләнеше. Былар кешеләр еңелерәк аралашһын, бер-береһен аңлаһын өсөн эшләнгән, бәс, шулай булғас, юғарыла торған милләттәр ҙә, түбән торған милләттәр ҙә юҡ. Һәр милләттә яҡты күңелле кешеләр ҙә, ҡара эслеләр ҙә бар. Иң мөһиме – Аллаһтан ҡурҡыу. Ул хәҡиҡәт тураһында Аллаһу Тәғәлә былай ти:

**«Әй, әҙәм балалары! Хаҡтыр, Беҙ һеҙҙе бер ир, бер ҡатын итеп яралттыҡ. Бер-берегеҙ менән аралашығыҙ тип, һеҙҙе ҡәүемдәр һәм ҡәбиләләргә айырҙыҡ. Хаҡтыр, гөнаһ ҡылыуҙан ҡурҡҡан кеше Аллаһ ҡаршыһында иң оло абруй ҡаҙаныр. Шөбһәһеҙҙер, Аллаһ барыһын да белеп, барыһынан да хәбәрҙар булып тора»** (Худжурат, 49/13).

«Берлек» сифатын Үҙенә генә ҡалдырған Аллаһ һәммәһен парлап, улар бер-береһен тулыландырырлыҡ итеп яралтҡан. Йәннәттә нигеҙ һалынған Әҙәм һәм Һауа, ғәләйһүмәс-сәләм, араһындағы ир-ҡатын мөнәсәбәттәре Илаһи ҡанундар сифатында Әҙәм улдарына ла күскән һәм һуңғы дин – ислам дине бойороҡтарында камил төҫ алған.

Аллаһ бойора:

**«Үҙегеҙҙән ҡатындарҙы яралтыу ҙа, ул ҡатындар менән (ләззәтләнеп) бергә йәшәүегеҙ ҙә, ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәт һәм наҙ, бер-береңдең хаталарын кисерә белеү, һис шикһеҙ, Аллаһтың ҡөҙрәтенә асыҡ дәлилдәрҙер. Хаҡтыр, был эштәрҙә фекерләй белеүсе ҡәүемдәр өсөн ғибрәттәр бар»** (Рум, 30/21).

Хаҡ Тәғәлә Мөхәммәтең, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, бөтә өммәтенә никахты бәрәкәтле иткән. Фани донъяла уҡ Ҡөрьән һәм Сөннә күләгәһе аҫтындағы никахарға йәннәт бәхете биргән.

Ике бөтөнләй ят кешене берләштергән ғаилә мөнәсәбәттәре нигеҙендә иҫ китмәле тәрән аҡыл ята. Аллаһ ярҙамы менән һөйөү хисе берләштергән йәш пар, шул хис арҡаһында ата-әсә ҡанаты аҫтынан сығып, үҙ аллы донъя көтә башларға көс таба.

Әҙәм балаһының тәбиғәте шундай: ул бәхәс ҡорорға ярата, хәҡиҡәтте ҡабул итергә ашыҡмай, шуға күрә Изге Ҡөрьән, һәр кем үҙ хәленә ҡарап өлөшөн алһын өсөн, аҡыл кимәле, һөнәре төрлө булған кешеләргә мөрәжәғәт итә. Изге аятта был турала шулай әйтелә:

**«Ысынлап та, Беҙ был Ҡөрьәндә кешеләр өсөн һәр төрлө ғибрәтле ҡиссаларҙы ҡат-ҡат миҫалға килтерҙек. Ләкин әҙәм заты, ғәҙәттә, киреһенә тарта»** (Кәһф, 18/54).

Кешеләрҙе барлыҡҡа килтереүҙең серенә иғтибарыбыҙҙы йүнәлтеп, изге аят белдерә:

وَمَنْ نُعَمِّرْهُ نُنَكِّسْهُ فِي الْخَلْقِ أَفَلاَ يَعْقِلُونَ

**«Берәүһенә оҙон ғүмер бирә ҡалһаҡ, Беҙ уны бөкрәйтеп бөтөрөрбөҙ. Шул турала уйлап ҡарамайҙармы?»** (Йә Син, 36/68).

Икенсе аяттар, кеше ғәмәлдәре артында йәки гонаһҡа тартылыу, йәки Аллаһтан ҡурҡыу ятыуын аңлатып, киҫәтә:

وَنَفْسٍ وَمَا سَوَّاهَا فَأَلْهَمَهَا فُجُورَهَا وَتَقْوَاهَا قَدْ أَفْلَحَ مَن

زَكَّاهَا وَقَدْ خَابَ مَن دَسَّاهَا

**«һәр әҙәми затҡа һәм уны (Ер йөҙөндә йәшәрлек итеп) яралтҡан, уға яҡшылыҡ һәм яманлыҡ ҡылырға ирекле иткәндең исеме менән әйтәм: йәнен пак тотҡан кеше моратына (сәғәҙәткә) ирешәсәк. Выждаһын кер ҡаплаған кеше, әлбиттә, зыян күрәсәк»** (Шәмс, 91/7-10).

Аллаһ Ҡөҙрәте дәлиле булған Ҡиәмәттәге терелтеү, Ҡөрьәндә, әйтелгәнсә, кешенең сикләнгән мөмкинлектәре хаҡында һөйләй һәм уны киләсәктә нимә көтөүен тасуирлай:

**«Кеше үҙенең бер нәҫел орлоғонан яратылғанын аңламаймы? Аяныс, ул асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ ҡыла. Ул үҙенең нисек яратылғанын онотоп: «Был серегән һөйәктәргә кем йән өрә алһын?» - тип Беҙгә хәйләле һорау бирә. (Эй, Мөхәммәт) әйт һин: «Уларҙы иң беренсе яралтҡан (Аллаһ) терелтәсәк. Ул һәр яратылғанды асылы менән белеүселер», - тип»** (Йә Син, 36/77-79).

Ҡөрьәндә ваҡыт төшөнсәһенең дә сағыштырмаса нәмә булыуы аңлатыла:

كَأَنَّهُمْ يَوْمَ يَرَوْنَهَا لَمْ يَلْبَثُوا إِلاَّ عَشِيَّةً أَوْ ضُحَاهَا

**«Киәмәт көнөн күргәс, уларға донъяла өйләгә саҡлы – ярты көн, өйләнән һуң ярты көн генә торған кеүек тойолор»** (Нәзиғәт, 79/46).

Изге Ҡөрьән аяттарында Аллаһтың ныҡышмалы рәүештә әҙәм балаһын уйланырға саҡырыуы аҡылыбыҙҙы, йөрәгебеҙҙе эшләтергә кәрәклек тураһында һөйләй. Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мең дүрт йыл элек үк әйткән:

*«Бер ғибәҙәтте лә уйланыу менән сағыштырырлыҡ түгел».* (Али әл-Муттаҡи, Кәнзүл-Үммәл, XVI, 121)

Изге хәҙис нәсихәт биргәнсә, тәфәккүр һәм уның һөҙөмтәһендә ҡәлбтең рухи ғилем менән тулыуы ғибәҙәткә тиң, хатта ки уйланыу ғибәҙәттән алда барлыҡҡа килгән тиергә лә мөмкин. Фекер йөрөтөп кенә теге йәки был ғибәҙәттең мөһимлеген, кәрәклеген һәм әһәмиәтен төшөнөргә була.

✵

Иншә Аллаһ, оҙаҡламай Шәғбан айының 14-се кисендә Бәраәт төнө башланасаҡ, мөьминдәр ярлыҡаныу төнөн йыл һайын көтөп ала.

Риүәйәттәрҙә бәйән ителгәнсә, Әҙәм балаларының киләһе осорға (бер йыл дауамында) нимәгә юлығыуы, яҙмышы нисек буласағы, кемдәрҙең көнө бөтөүе ошо кистә тәғәйенләнә икән. Шуға күрә был кистә бәхет теләп, хәйерле ғүмер биреүҙе һорап, Раббыбыҙға ялбарабыҙ.

Изге хәҙистә әйтелә:

*Шәғбан айының уртаһы еткәс, төндә намаҙ уҡығыҙ, ә көндөҙ ураҙа тотоғоҙ. Аллаһу Тәғәлә ҡояш байығас, ҡолдарының ялбарыуына, доғаһына айырыуса илтифатлы була. Ҡояш сыҡҡансы, ул ҡолдарына мөрәжәғәт итә:*

*«Тәүбә итеүсе юҡмы? Мин уның тәүбәләрен ҡабул итәм. Ризыҡ һораусы юҡмы? Ризыҡ бирәм. Ғазап сигеүсе юҡмы? Мин уның ғазаптарым еңеләйтәм. Ундайҙар юҡмы, бындайҙар юҡмы?..»* (Ибн Маджа, Икамәтус-салят, 191)

Бәндәләрҙең үкенеүе, тәүбәгә килеүе, Аллаһтан гөнаһтарын ғәфү итеүҙе һорап ялбарыуы арҡаһында, күп гөнаһтар ярлыҡана был кистә.

Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәбәр итеүенсә, Бәраәт төнөн намаҙҙа, көндө ураҙала үткәргән мөьминдәрҙе Раббыбыҙ бәрәкәтле,

бәхетле итә. Намаҙҙарҙан тыш төндә Ҡөрьән уҡыу, зекер, салауаттар әйтеү, рухи үҫеш темаһына әңгәмәләр үткәреүгә бағышлау сауаплы.

Бәраәт төнөнән һуңғы көн һәм төндәрҙә лә ғибәҙәттәрҙә тырышлыҡ кәрәк. Имандың көсәйеүе изге Рамаҙан айы нурын тулыраҡ тойорға мөмкинлек бирәсәк.

Намаҙҙарыбыҙҙы рухи күтәренкелек, тән һәм йән гармонияһын тойоп уҡыу лазым, сөнки намаҙ – Раббың менән осрашыу ул.

Заманында бер әҙәм былай тип мөрәжәғәт иткән:

- Эй Рәсүлуллаһ! Ҡыҫҡа ғына итеп берәй файҙалы нимәгә өйрәт әле.

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, былай тип яуап биргән:

*- Һәр намаҙыңды һуңғыһы кеүек уҡы! Аҙаҡ ғәфү итеүҙе һорарҙай бер нәмә лә әйтмә! Башҡалар ҡулындағы нәмәгә өмөтөңдө бағлама, һәм быны ныҡлы үтә!* (Ибн Мәджа, Зухд, 15)

Мөьмин намаҙ бәрәкәтен ебәрмәҫкә тейеш. Икенсе хәҙистә Пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шундай һүҙҙәре бар:

*«Бер ҡол намаҙ уҡый, ә сауаптың йә яртыһы, йә өстән бере, йә дүрттән бере, йә биштән бере, йә алтынан бере, йә етенән бере, йә һигеҙҙән бере, йә туғыҙҙан бере, йә ундан бере генә эләгә».* (Абү Дауыт, Саләт, 123, 124)

Яҡынлашып килгән Ҡөрьән төшөрөлгән Рамаҙан айының ҡиммәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур, ул Ҡиәмәткә саҡлы мөьминдәрҙе бәрәкәтенән, игелегенән өҙмәйәсәк. Ҡөрьән һәм Рамаҙан – көндәлек тормошобоҙҙа иң гүзәл тәрбиәселәребеҙ.

Изге аяттарҙа әйтелә:

**«Рамаҙан айы кешеләргә тура юл күрһәтеүсе, ялғандан хәҡиҡәтте айыра торған дәлилдәр менән Ҡөрьән индерелә башлаған айҙыр. Шуға күрә ошо айға ирешкәндәр ураҙа тотһон. Сирле булғандар һәм сәфәрҙәгеләр башҡа көндәрҙә ураҙа тотор. Аллаһ һеҙгә еңеллек теләй, ҡыйынлыҡ теләмәй…»** (Бәҡара, 2/185).

Аллаһу Тәғәлә, Изге Ҡөрьәндең нәсихәт һәм яҡты аҡыл тулы етәкселек булыуы тураһында әйтеп, был бәрәкәтле айҙа ураҙа тотоуҙы һәм Ҡөрьән ярҙамы менән үҙеңде тәрбиә ҡылыуҙы бойора.

Изге Ҡөрьәнде тыңлау, ундағы хәҡиҡәттәрҙе күҙ алдына килтереү генә әҙ, мәңгелек тормошта ҡотолоу юлдарын аңлатыусы күрһәткестәрҙе йөрәгеңде асып ҡабул итергә һәм ашҡынып үтәргә кәрәк. Мөьмин, Ҡөрьән рухына ҡойоноп, үҙенең нәпсеһе менән көрәшкә сыға.

**Эй Раббым! Ошо изге айҙа Ҡөрьән рухы менән йәшәргә, ғүмеребеҙҙе йәннәттәргә лайыҡлы итеп үткәрергә насип ит. Иманыбыҙ һәм Ҡөрьән дәлилдәребеҙ булһын, ураҙаларыбыҙ – саҙаҡа, сәхәрҙәребеҙ – фатиха, ә ифтарҙарыбыҙ Һиңә яҡынайыу мәле!**

**Әмин!..**

# *Тәүбә һәм күҙ йәштәре*

*«Үкенес ялҡыны ялмаған күңел, йәшле күҙҙәр менән тәүбә ит. Сәскәләр ҙә бит ҡояшлы һәм дымлы урындарҙа тажларын аса!»*

*(Мәүләнә Йәләлетдин Руми)*

# *Тәүбә һәм күҙ йәштәре*

Тәҡүәле әҙәмгә бер тегенсе һорау биргән:

- Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең, хәҙисендә әйтелә: *«Аллаһү Сүбхәнәһү үә Тәғәлә үлем сәғәте еткәнгә ҡәҙәр кешеләрҙең тәүбәләрен ҡабул итә»* (Тирмиҙи, Дәғүәт, 98). Һин был турала нимә уйлайһың?

Тәҡүәле әҙәм әйткән:

- Эйе, был хаҡ. Һин үҙең нимә менән көн итәһең?

- Мин тегенсе, кейем тегәм.

- Тегенсе эшендә нимә бик еңел?

- Ҡайсы менән туҡыма бесеү.

- Тегенселек менән нисә йыл шөғөлләнәһең?

- 30 йыл самаһы.

- Үлем килгәндә туҡыма бесә алырһыңмы?

- Юҡ, булдыра алмам.

- Тыңла әле, тегенсе! Үлем күҙеңә ҡарап торғанда, 30 йыл тырышлыҡ һалып, оҫтарып бөткән нәмәнде лә эшләй алмаһаң, ғүмерҙә лә әйтеп ҡарамаған тәүбә һүҙҙәрен нисек әйтә алырһың? Хәҙер, көсөң барҙа тәүбә ит! Юғиһә һуңғы мәлеңдә яҡшыға өмөт бағлап тәүбә итер өсөн көсөң етмәүе бик мөмкин... *«Үлем килгәнсегә ҡәҙәр тәүбә итеп ҡалығыҙ!»* - тигән һүҙҙәрҙе ишетмәнеңме ни? (Мүснәүи, Фәиз-үл-Ҡадир, V, 65)

Был һүҙҙәр тегенсене тәрән уйға һала. Оҙаҡламай ул, тәүбә итеп, иман юлына баҫа.

Ҡисса Аллаһ ҡолдарының, тайып китеп, төрлө упҡындарға ҡолау ҡурҡынысы хаҡында иҫкәртә, шул упҡындарҙың иң хәтәре – тәүбәләрҙе

һуңға ҡалдырыу. Тәүбәләр – йәндәребеҙҙе ҡотҡарыу сараһы. Аллаһ Илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләренең береһенә шундай нәсихәт бирә: *«Һин күбеһенсә гөнаһтарың арҡаһында ғазапланаһың, ғазаптарҙың дарыуы – төн йөҙөндәге* ***истиғфар*** *(гөнаһтар өсөн ғәфү үтенеү)».* (Дайләми, Мүснәд, I, 136)

Аллаһҡа ынтылыу, әхүәле рухиәбеҙҙе юғары кимәлгә күтәреү юлында мөһим урын биләгән истиғфар – рухи керҙән таҙарыныу сараһы. Тәүбә ҡылыу – ҡол һәм Хужаһы араһындағы кәртәләрҙе һыпырып ташлай, изге ғәмәлдәргә юл аса. Әхүәле рухиәбеҙҙе тәртипкә килтерер өсөн, төп маҡсатҡа ҡамасаулаған керҙәрҙән ҡотолоу лазым. Шуға күрә тасаввуф ағымдарының барыһында ла таң алдындағы ғибәҙәтте тәүбә итеүҙән башлайҙар.

Беренсе булып Әҙәм, ғәләйһис-сәләм, ярлыҡау һорай. Тәүбәлә ул шундай һүҙҙәр әйтә:

قَالاَ رَبَّنَا ظَلَمْنَا أَنفُسَنَا وَإِن لَّمْ تَغْفِرْ لَنَا وَتَرْحَمْنَا لَنَكُونَنَّ مِنَ الْخَاسِرِينَ

**«...Йә, Раббыбыҙ, үҙебеҙҙе харап иттек. Әгәр беҙҙе кисермәһәң, ярлыҡамаһаң, һис шикһеҙ, зарар күреүселәрҙән булырбыҙ»** (Әғраф, 7/23). Был доға – бөтә быуындар өсөн ҙур ҡиммәткә эйә тәүбә һабағы.

Мөхтәрәм әүлиәләр тәүбәне өс төргә бүлгән:

1 - мөьминдәрҙең төп өлөшөнөң тәүбәһе, улар гөнаһтары өсөн тәүбә итә;

2 - һайлам ҡолдар тәүбәһе, улар наҙанлығы, белемһеҙ булыуы, иғтибарһыҙлығы өсөн ғәфү үтенә;

3 - тәҡүәлеләр тәүбәһе, улар Раббыбыҙға тағы ла яҡыныраҡ булыр өсөн тәүбә итә.

Һәр бер изге эштәге һымаҡ, тәүбәләрҙең төп шарты – ихласлыҡ, бөтә йөрәктән сыҡҡан һүҙ. Хәҡиҡәттә һәм Раббыбыҙҙы танып белгәндәр элекке тәүбәләре өсөн тәүбә иткән. Йәғни, бер ғәфү үтенгәс, ваз кискән гөнаһтарыңа кире ҡайтыуҙан мотлаҡ һаҡланырға кәрәк, ул һуңғыһы булырға тейеш. Нәфсе һәм шайтан, гүзәлеккә, яҡшылыҡҡа юл асыусы уҡытыусы ҡиәфәтен алып, тура юлдан яҙҙырыуы ихтимал. Ҡол был ҡапҡанға эләкһә, тәүбәләрен елгә осора. Тәүбәләренән һуң гөнаһтарына

кире ҡайтһа, үҙенең Әхирәттәге тормошон ҡараңғылыҡҡа батыра. Аллаһу Тәғәлә бойора:

عَسَى رَبُّكُمْ أَن يَرْحَمَكُمْ وَإِنْ عُدتُّمْ عُدْنَا

**«Бәлки, Раббығыҙ һеҙгә миһырбанлы булыр; әгәр һеҙ яңынан фетнә ҡорһағыҙ, Беҙ һеҙҙе тағы язаға һаласаҡбыҙ. Беҙ йәһәннәмде кәферҙәр өсөн зиндан иттек...»** (Исра, 17/8).

Тәүбәһен гел боҙоп торған әҙәмдән шайтан көләсәк. Әҙәм гөнаһтары өсөн ғәфү үтенгән һайын, шайтан һәм уның еңел аҡыллы ярҙамсылары уға әйтәсәк: «Төкөрҙөк беҙ һинең тәүбәләреңә!» Шуға күрә изге аят бойора:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُوا تُوبُوا إِلَى اللّٰهِ تَوْبَةً نَّصُوحًا

**«Әй, иманлы кешеләр, ихлас тәүбә итеп, Аллаһҡа ҡайтығыҙ…»** (Тәхрим, 66/8).

Әйтелгәндәрҙең мөһимлеген раҫлап, шағир былай ти:

*Тәүбәләр тик телдә генә булһа,*

*Ғәмһеҙ булһа әгәр йәнгенәң,*

*Нәфсе килер меңләп юл менән!..*

Рахмәти

Тәүбә хаҡында һүҙ сыҡҡанда, *Джәмиғус-Сәғир* йыйынтығындағы хәҙискә иғтибар итеү мөһим. Унда әйтелгәнсә, кеше гөнаһ ҡылғас, фәрештәләребеҙ 6 сәғәт буйы уны яҙмай көтөп тора, тәүбә өсөн ваҡыт бирә. Шуға күрә кеше «Тәүбәмә тоғро ҡалырға ныҡлыҡ етмәй, мин йәнә гөнаһ эшләп ҡуйырмын, шуға күрә аҙаҡ ғәфү үтенермен,»- тип әйтмәһен. Әҙәм даими истиғфарҙа булырға тейеш, Аллаһ ярҙамы менән ул гөнаһтарынан арыныуы ла ихтимал бит. Бер нәмәне һәр саҡ иҫтә тотоу лазым: тәүбә – Аллаһҡа ярлыҡау ғаризнамәһе, ул ихлас үкенеү, уға кире ҡайтмау ниәте менән әйтелергә тейеш. Аллаһ Тәғәлә киҫәтә:

**«…Һине (ялтырауыҡ нәмәләр менән тулы) донъя тормошо алдамаһын, шайтан һине Аллаһ юлынан яҙҙырмаһын»** (Лоҡман, 31/33).

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм, әйткән: *«Гонаһарың өсөн тәүбә – үкенеү һәм истиғфар ул».* (Әхмәт бин Хәнбәл, VI, 264)

Әҙәм гөнаһтарына кире ҡайтмаҫлыҡ итеп тәүбә итергә тейеш. Хәҙистә әйтелгәнсә, ғәфү үтенеүҙе үкенестән башларға кәрәк, йәғни гөнаһтарҙың бысрағы таҙа күҙ йәштәре менән йыуылыуы лазым.

Бер риүәйәттә бәйән ителә: тәүбәһенә килгән гөнаһ эйәһенә гөнаһтарының исемлеген тотторғандар һәм **«Уҡы!»** - тип бойорғандар. Тауҙай гонаһтарын күреп, гөнаһкәр һыҡтап илап ебәргән һәм, йәшкә төйөлөп, яҙылғандарҙы күрмәҫ хәлгә еткән. Әммә ихлас күҙ йәштәре яҙыҡтарын юйған. Гөнаһкәр ярлыҡау алған. **Тимәк, бер гөнаһыңдан арыныу өсөн, йылғалай күҙ йәше түгеү талап ителә, ә бер күҙ йәше иһә мең гөнаһтан әрсәләй.**

Күҙ йәштәре – Илаһи һөйөү хакимиәтенә буйһонғандарҙың тәүбә шишмәһе. Улар гөнаһтарҙы йыуа, паклай, ҡолдоң Раббыһына рәхмәте булып тора. Күҙ йәштәре – Аллаһ Тәғәлә бүләк иткән өмөт төйәге. Һуңғы өмөтөн юғалтып, күҙ йәштәре төйәге ҡапҡаһы янында тороусылар – иң бәхетлеләр.

Донъяға саф күҙ йәштәре аша баҡҡандар күрә: кескәй генә күҙгә ише күҙ йәштәрендә мең океандай Илаһи сер һәм һөйөү сағыла. Күҙ йәштәре телен һүҙҙәр аңлатырға ҡадир түгел, уларҙың мәғәнәүи көсө шул ҡәҙәр юғары, йәшкә мансылып Раббыһынан нимә һорағанын ҡол хатта үҙе лә аңлап бөтә алмай. Аллаһү Тәғәләнең һөйөүен татығандар күҙ йәштәре сығанаҡтарында йыуаныс, донъяһын ҡайғыртмаған илгизәрҙәр уның ярҙарында күңеленә ял таба.

Ҡисса Аллаһ алдындағы йәш бөртөгөнөң баһаһын матур итеп тасуирлап бирә:

«Бер заман юлда булған **Джунайд әл-Бағдади**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, күктән төшкән фәрештәләрҙе күрә – улар юлда нимәлер йыя.

- Нимә йыяһығыҙ? - тип һорай ул фәрештәләрҙең береһенән.

- Аллаһтың яратҡан ҡоло ошонан үткәндә «аһ!» тип әйтте һәм уның бер нисә бөртөк йәше тамды. Аллаһтың рәхмәтенә һәм мәғрифәтенә ирешеү өсөн, беҙ шуларҙы йыябыҙ, - тип яуап бирә фәрештәләр».

Бер хәҙис-шәрифтә әйтелә:

«Тамуҡ уты ҡағылмаған ике төр кешеләр бар: Аллаһты иҫкә төшөрөп илаусылар, таңда Аллаһ юлында уяу тороусылар». (Тирмиҙи, Фадаилүл-Йыһат, 12/1639)

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, тәүбә һәм күҙ йәштәре аша гөнаһтарҙан таҙарыныуҙы бысранған йылға һыуҙарының быуға әйләнеүе һәм, бәрәкәт булып, таҙарынып, ергә ҡайтыуы менән сағыштыра:

*«Бында, ерҙә, һыу паклығын, сафлығын юғалтып, буръяк, бысраҡ һыуға әйләнһә, тап беҙҙең һымаҡ, бысраҡлығынан тыныслығын юғалта... Ул иң төрәндән үк Аллаһҡа ялбара башлай. Уның ялбарыуына яуап биреп, Аллаһ һыуҙы быуға әйләндерә, күккә ала. Унда, төрлө юлдарҙа йүгереп, ул йәнә паклана. Аҙаҡ йә ямғыр, йә ҡар, йә борсаҡ рәүешендә ергә яуа, диңгеҙҙәргә ҡайта».*

Шик юҡ, был аллегория – Аллаһ Тәғәләнең Үҙ ҡолдарына рәхмәте, һөйөүе символы, Ул ҡолдарының гөнаһтарын ғәфү итергә һәм ҡотолоу юлын асырға теләй. Һәм күҙ алдына килтерегеҙ: гөнаһтар менән бысранған йөрәгендә тәүбә ямғыры һәм үкенестәр ҡояшы осрашҡан йәнде Аллаһ Тәғәлә күккә ала. Унда уны туҙан, бысраҡ, нәфсе ҡаралыҡтарынан таҙарта. Аҙаҡ ихсан бәрәкәтенә ирешкән камил йәнде кире ергә ҡайтара. Был халәт дөрөҫ ҡылынған намаҙҙа асыла, шул рәүешле ул намаҙ мөьминдең миғражына әүерелеүе ихтимал.

Донъя бысрағына башкөллө батҡан әҙәм балаһы был халәтте кисерергә ҡадир түгел, былар хаҡында хәбәрҙар ҙа түгел, шуға күрә ул илар урынға рәхәтләнеп хахылдай. Шулар тураһында Аллаһу Тәғәлә әйтә:

وَتَضْحَكُونَ وَ لاَ تَبْكُونَ وَأَنتُمْ سَامِدُونَ

**«...(Ҡөрьәндән) көлөүен көләһегеҙ, (яза килер тип) иламайһығыҙ. Һеҙ ҡара наҙанлыҡ эсендә ҡаласаҡһығыҙ?»** (Нәжем, 53/60-61). Икенсе изге аятта Ул быңдай ғафиллыҡтан киҫәтә:

فَلْيَضْحَكُواْ قَلِيلاً وَلْيَبْكُواْ كَثِيرًا جَزَاءً بِمَا كَانُواْ يَكْسِبُونَ

**«Әйҙә! (Монафиҡтар) бер аҙ көлһөндәр, ҡылғандарына күрә (ике йөҙлөлөк өсөн) күп иларҙар!»** (Тәүбә, 9/82).

Аллаһу Тәғәлә тәүбә һәм күҙ йәштәре аша ҡолдарының таҙарыныуын теләй. Әҙәм күҙ йәштәренең мөһимлеге тураһында **Мәүләнә Йәләлетдин Руми** ҙә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйтә:

*«Илап, күҙ йәштәрен ҡоя-ҡоя, шәм яҡтырак яна башлай. Ямғыр йәштәренә ҡойоноп, ҡояш нурында йылынып, ағас ботаҡтары терелә, йәшеллеккә күмелә; емешкә тумалыу өсөн, улар дымға һәм йылылыҡҡа мохтаж».*

*«Тәүбәләребеҙ ҡабул ителһен өсөн, болоттар һәм йәшендәр кәрәк, йәғни күҙ йәштәре һәм йөрәк ялкыны».*

*«Йәнеңдә йәшен йәшнәмәй икән, күҙ йәштәрең ямғыр булып аҡмай икән, нәфсе асыуын һәм гөнаһтар ялкынын нисек һүндермәк кәрәк? Әхүәле рухиәң Илаһи ғилемде, йәғни һоҡланғыс илаһи нурҙы нисек тойһон? Рухи шишмә һыуҙары нисек тулҡынланһын? Ямғыр яуып үтмәһә, рауза баҡсаһы үләндәргә нисек серен һөйләһен? Миләүшәләр һәм йәсминдәр менән нисек солох төҙөргә?»*

*«Тәбиғәткә теймә, бусығып илаһын әйҙә. Һыуһыҙ ҡалған был ерҙәр кибә. Башҡа йылғаларға ағып төшмәгән, айырылған үле йылғалар һарғая, һаҫый, ләмләнә, ҡарая».*

*«Дымдан мәхрүм ҡалғас, йәннәт менән сағыштырырлыҡ зөмрәт-йәшел баҡсалар, һарғая, һулый, япраҡтарын ҡоя, афат донъяһына әүерелә. (Әҙәм дә шулай...)».*

Ҡазаға ҡалыусылар яҙмышын ҡабатламаҫ өсөн, **Шөғәйеп** пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, шул ҡәҙәр күп илай, хатта һуҡырайып ҡуя. **Пәйғәмбәребеҙ**, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, былай тигән:

*«Мин белгәнде белһәләр, әҙ көлөрҙәр, күп иларҙар, ашау-эсеүҙән яҙырҙар ине...».* (Сүйүти, әл-Джәмиғ-әс-Сәғир, II, 10)

Йөрәгенә яғылған таптарҙы ғүмер буйы тәүбә йәштәре менән йыуғандар ғына йәннәттең ярлыҡау баҡсаларына элгә. Шуға бөтә пәйғәмбәрҙәр, ғәләйһүмүс-сәләм, әүлиәләр, тәҡүәле һәм иманлы ҡолдар юғалтыуҙар кисергәндә һәм именлектә, ҡайғылы сағында һәм шатлыҡта – һәр ваҡыт Аллаһҡа һыйынғандар, Уға ынтылғандар, доғала булғандар. Гөнаһтарҙан пак пәғәмбәрҙәр ҙә, ғәләйһүмүс-сәләм, хаталанып ҡуйғас, ябай ҡолдар араһында тәүбәгә һәм истиғфарға мохтаж булмағандар һис табылмаҫ. Асылда үкенес һәм ярҙам һорауҙан ғибәрәт булған тәүбә һәм истиғфар Аллаһҡа яҡынайыуҙың иң яҡын юлы.

Икенсе яҡтан, Аллаһ ебәргән ҡаза, ыҙалар һәм ул күрергә теләгән тәүбә һәм күҙ йәштәре – файҙалы сауҙа. Уның файҙаһын аңлағандар

яҙмышына зарланмаҫ, ә бынан иң ҡиммәтле нәмәне алырға тырышыр. Шуларҙың береһе – **Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, - ул турала яҡшы белгән:

*«Аллаһу Тәғәлә был донъяла бер нисә бөртөк күҙ йәшеңде ала, һәм бының өсөн шул ҡәҙәр үк йәннәт баҡсалары бүләк итә. Ул һинең ғазап, әрнеү тулы «аһ»тарыңды ала, һәм һәр һулышың, һәр һыҙланыуың өсөн ғәжәйеп бейек үрҙәргә күтәрә».*

Шуны иҫтә тотоу лазым: бер илау икенсеһенә оҡшамаған, уларҙың айырмалары ҙур. Һалҡын, яһалма, ялған илау була – асылда ул еңел аҡыллылыҡ, алдаҡ. **Суфиян Çәүри**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Илауҙың тиҫтәләрсә төрө бар, шуларҙың туғыҙы – рыя. Тик берәүһе – Аллаһ өсөн. Йылына Аллаһ өсөн осоҡ ҡына илаған хәлдә лә, иншә Аллаһ – был ҡолдоң тамуҡтан ҡотолоуына сәбәп булыр».*

Риүәйәттәрҙә һөйләнгәнсә, бер ҡатын, иренә зарланып, **Шүрәйһ ҡазыйға** барған. Был ваҡыт шунда булған **Шәғби** ҡысҡырып ебәргән:

- Был ҡатынды ысындан да йәберләгәндәр бит, ҡайһылай ныҡ илай!

Шүрәйһ ҡазый былай тигән:

- Тыңла әле, Шәғби, Йософтоң, ғәләйһис-сәләм, туғандары, гөнаһ эшләгәс, атаһына күҙҙәре йәшләнеп килгән. Илауҙан сығып ҡына һығымта яһарға ярамай!

Яһалма күҙ йәштәре – яҙыҡ, үҙен меҫкен итеп күрһәтеү маҡсатында илауҙы ла Аллаһ өнәмәй. Уларҙың урынһыҙ түгелгән йәштәре, шағир **Акиф** әйтмешләй, маңлайҙағы тир кеүек:

*Баш тартығыҙ матәмдән, ҡалдырығыҙ һыҡтауҙы.*

*Рәт булһа ул илауҙан, атам терелер ине!*

*Йәш түгеүҙән файҙа юҡ, тир түгәйек исмаһам!*

Аллаһ теләгән күҙ йәше беҙҙе дуҫ-дошман алдында йыуаш күрһәткән күҙ йәше түгел, ул икенсе – ул беҙҙе күктәргә күтәрә, йәнебеҙҙе миғражға олғаштыра. Киң даръялар сүп-сарҙы төпкә батырмай ағыҙып алып киткән кеүек, Аллаһ өсөн тамған йәштәребеҙ ҙә күҙҙәребеҙҙән түгел, йөрәктәребеҙҙән тамып, беҙҙе батырмай алып ҡалырға тейеш.

Шуны ла белеү лазым: зарланып илау кәрәкмәй. Зарланыу – ризаһыҙлыҡ, ә ризаһыҙлыҡ ҡабул ителмәй. Зарланыу ҡолдо буйһоноуҙан

алыҫлаштыра, булған сауаптарын юя. Беҙ бит асыуҙы арттыра торған йәштәр хаҡында һүҙ алып бармайбыҙ, ысын дуҫыбыҙ булған Раббыбыҙ риза булырҙай, йәнебеҙҙе пакларҙай күҙ йәштәре тураһында һөйләйбеҙ.

Үлем яҡынлашҡанда, ғүмер буйы йоҡола булғандар ҙа уяна, хәҡиҡәтте күрә башлай. Ләкин һуңғы минутында хаҡты күреү файҙа бирмәй, фирғәүенгә лә ул файҙа бирмәгән. *Мәүләнә Йәләлетдин Руми* бик күркәм әйткән:

*«Аҡыллылар тәүҙә илай, томаналар һуңғы мәлдә башын бәрә. Ҡиәмәттә үкенестә булмаҫ өсөн, алдан алып сараһын күр!»*

*«Ҡош аулаусы тоҙағында емде күреп, аҡылын юйған ҡош ише һин булып ҡуйма. Ихтыярын юйып тоҙаҡҡа ул үҙе килә. Ирек теләп, «Әнғәм,» «Йә-син,» уҡыр ине, тик ни файҙа! Бәлә килгәс, илау, һыҡтау, зарланыуҙан ни фәтүә – элегерәк кәрәк булған «ах» һәм «ух»тар».*

Шулай уҡ **Ибраһим**, ғәләйһис-сәләм, Раббыбыҙҙың асыуын зина һаҙлығына батып ҡабартҡан Лут, ғәләйһис-сәләм, халҡына Аллаһтан шәфҡәт һорап доға ҡылырға уйлағанда, уларҙың сиктән ашҡан кирелеген аңлап бөтмәй; фәрештәләр уны туҡтата:

«Доғалар ваҡыты үткән!..»

Аллаһ ихтыяры менән ҡайҙа һәм ҡасан беҙгә үлем килерен белмәйбеҙ, шуға күрә йөрәктәребеҙгә *«Үлемгә кәҙәр үлегеҙ!»* һүҙҙәренең серен һыйҙырырға һәм Раббыбыҙ алдына барып баҫырға әҙер булырға тейешбеҙ. Һуңғы һулышыбыҙҙа әсе дөрөҫлөктө күргәс, «Ҡайғы миңә, хәҙер ҡайҙа миңә?»-тип әйтерлек булмаһын. Изге аятта әйтелә:

وَجَاءَتْ سَكْرَةُ الْمَوْتِ بِالْحَقِّ ذَلِكَ مَا كُنتَ مِنْهُ تَحِيدُ

**«Көндәрҙән бер көндө үлем әселеге килер. Һинең ғүмер буйы ҡасып йөрөгән нәмәң шул (әжәл) булыр»** (Ҡаф, 50/19).

Шуға күрә ҡол белергә тейешле иң мөһим бурыс – нәфсене ауыҙлыҡлау һәм йөрәкте паклау. Беҙ һөйләгән тәүбә һәм күҙ йәштәре быға ирешеү өсөн ҡапҡа. Унда ингәс, изге ғәмәлде дауам итергә кәрәк. Фарыз, вәжиб, сөннәт ғибәҙәттәрҙе ҡылғас, Аллаһ бар иткәндәрҙең, ата-әсәнең хоҡуҡтарын һаҡлауға иғтибар ит, Аллаһ ризалығы өсөн саҙаҡалар бир, бөтә барлыҡҡа шәфҡәтле, миһыранлы бул. Ғәфү итә белгәндәрҙе Аллаһ та ғәфү итә. Йөрәктәрендә һөйөү һәм шәфҡәт булмағандар, «Йәлләгеҙ беҙҙе!»

тигәндәрҙе ишетергә хәлдәренән килмәгәндәр – тормошта аҙашҡан бахыр юлсылар.

Тәүбә һәм күҙ йәштәре мөхитендә мөмкин булған барса гүзәл сифаттарға эйә булғандар Раббыларына уҡтала. Был уҡталыуҙың даими булыуы зарур. Шул уҡ ваҡытта айырыуса бәрәкәтле мәлдәр ҙә бар. Ҡолдарҙың һоҡланғыс гүзәл яҙ ише рухи яҙҙары ла бар, уларҙың иң күркәме – Ҡөрьән төшөрөлгән, мең айҙан да ҡиммәтле, нурлы Ҡәҙер төнө булған Рамаҙан айы. Был изге ай - ҡараңғылыҡ баҫҡан йәндәрҙе яҡтыртыусы. Ә Ҡәҙер төнө – бәхетле мөьминдәргә күк ҡабағы асылыр төн. Әхүәле рухиәләре уянған мәьминдәр изге Рамаҙан айында тыуған хистәрҙе, Илаһи ғилемде, фатиханы ғүмерҙәре буйы һаҡларға тейеш. Ошо рәүешле йәшәгәндәр өсөн Ҡиәмәт көнө ҡайғы көнөнә түгел, байрам көнө таңына әүереләсәк.

**Раббыбыҙ һәммәбеҙҙе лә ошондай байрам көнө таңы менән бүләкләһен. Уға уҡталыуыбыҙ, ихлас күҙ йәштәребеҙ өсөн, гөнаһтарыбыҙҙы ярлыҡап, хәйерле яҙмыш бүләк итһен!**

**Әмин!..**

# *Доға*

*Доғаны ҡат-ҡат ҡабатлай торғас, ул мөьминдең йөрәгенә уйыла, холҡон үҙгәртә, уның сифаттарының береһенә әйләнә.*

# *Доға*

Кешелеккә Аллаһтың рәхмәте булып килгән пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр ҡазаға тарыһалар ҙа, уңышҡа ирешһәләр ҙә, ыҙала ла, шатлыҡта ла доғала булып, һәр саҡ Аллаһҡа өмөт бағлай. Улар, теләһә ниндәй шарттарҙа ла Раббыбыҙға яҡынайырға тырышыу өлгөһөн күрһәтә, барса барлыҡҡа ҡотолоу юлын асыусы юлбашсыларға әйләнә.

Аллаһҡа һыйыныу – тормош ҡануны, Раббыбыҙға буйһоноуыбыҙҙың асылы. Ерҙә һәм күктә булғандарҙың һәммәһе Аллаһ ихтыярына буйһона, үҙенә бирелгән тел менән доғала була. Яҡшы дини тәрбиәһе булған мөьминдең эске халәте уны доғаға этәрә, сөнки доға – Аллаһҡа илтеүсе ҡапҡаларҙы асыусы мөьмин йөрәгендәге асҡыс.

Доғаны ҡат-ҡат ҡабатлай торғас, ул мөьминдең йөрәгенә уйыла, холҡон үҙгәртә, уның сифаттарының береһенә әйләнә. Тап шуның өсөн тәҡүәлеге юғары булғандар һәр саҡ доғала. Уларҙың доғаның мөһимлеген таныған йөрәктәре Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең изге аяттағы киҫәтеүенән тетрәнә:

قُلْ مَا يَعْبَأُ بِكُمْ رَبِّي لَوْلاَ دُعَاؤُكُمْ

**«Әйт: «Аллаһҡа мөрәжәғәт итмәгән булһағыҙ, Аллаһ һеҙгә иғтибар итмәгән булыр ине»** (Фурҡан, 25/77).

Тап шулай даими доғала булған, Раббыһына ялбарған мөьминдең йөрәге аша Аллаһ һәм Уның ҡоло араһында күҙгә күренмәгән бәйләнеш барлыҡҡа килә. Рухи күтәренкелек, тетрәнеү мәлендә ҡылынған доғанан һуң, ҡол Раббыһының Илаһи рәхмәтен, яҡынлығын тоя.

Доғала булып, Аллаһтың шәфҡәтен, миһырбанлылығын өмөт итәбеҙ, үҙебеҙҙең зәғифлелегебеҙҙе, ярҙамға мохтаж булыуыбыҙҙы таныйбыҙ. Ҡурҡыу һәм өмөт менән доғала булып, Аллаһтың бөйөклөгө

алдында үҙебеҙҙең кес кенә, гөнаһкәр булыуыбыҙҙы аңлаған хәлдә Уға буйһоноуыбыҙҙы белдерәбеҙ.

Әҙәм һәм Һауа, ғәләйһүмәс-сәлләм, изге аяттан күреүебеҙсә, Аллаһу Тәғәләгә шулай мөрәжәғәт итә:

**«Улар әйттеләр: «Йә, Раббыбыҙ, үҙебеҙҙе харап иттек. Әгәр беҙҙе кисермәһәң, ярлыҡамаһаң, һис шикһеҙ, зарар күреүселәрҙән булырбыҙ»** (Әғраф, 7/23).

Икенсе изге аятта Юныс пәйғәмбәрҙең, ғәләйһис-сәләм, Аллаһҡа шулай тип доға ҡылыуы хаҡында әйтелә:

**«Зүннүн (Юныс) тураһында ла онотмағыҙ. Ул (үҙенең ҡәүеменә) бик нык үпкәләп, асыуланып киткән ине. Үҙенә көсөбөҙ етмәҫ тип уйлаған ине ул. Ниһайәт,ҡараңғылыҡҡа (балыҡ эсенә барып) эләккәс: «Һинән башҡа Һиңә тиң һис бер зат юҡ. Һине генә пак тип танproblemsйым. Ысындан да, мин ғәҙелһеҙ булғанмын икән,-тип Аллаһҡа ялбара башланы!»** (Әнбиә, 21/87).

✵

Икенсе бер доға, Йыһангир Солтан Морат Хан I Косово яланында ялбарған доға, Раббыңа мөрәжәғәт итеп ярҙам һорағанда, үҙеңдең көсһеҙлегеңдө аңлауҙың мөһим булыуын күрһәтә:

*«Эй Рабббым! Батшалыҡ та, был ҡолоң да – Һинеке. Мин Һинең зәғиф ҡолоң ғына. Һин минең ниәттәремде һәм серҙәремде бөтәһенән дә яҡшыраҡ беләһең. Һин беләһең: мин байлыҡ та көҫәмәйем, хакимлыҡ тураһында ла уйламайым. Мин Һинең ризалығыңды ғына теләйем...*

*Эй Раббым! Ислам һуғышсыларын кәферҙәр ҡулынан һәләк итмә!.. Бөтә мосолмандар өсөн байрам булырлыҡ еңеү бир уларға! Теләһәң, ҡолоң Морат был байрамдың ҡорбаны булһын!..»*

Ошо доғанан һуң, бығаса ҡоторонған дауыл тына, ике ғәскәр ҡара-ҡаршы үлемесле һуғыш башлай; һигеҙ сәғәткә һуҙылған алыштан һуң, мосолмандар өс тапҡыр ҙур булған дошманын ҡыйрата.

Алыш тынғас, Солтан Морат Хан I ғәскәрен барлап йөрөгәндә, бер әсир серб уға хәнйәр ҡаҙай һәм ул шәһит китә – Мораттың Раббыһына ҡылған доғаһы тулыһынса ҡабул була.

✵

Юғары рухиәт теле һәм иң гүзәл ихлас доғалар яҡтылыҡ һәм һөйөүҙән тыуа. Улар өмөтөн юғалтҡандарға ғүмер бирә, ҡанһыраған яралы йөрәктәрҙе дауалай. Ихлас, күҙ йәштәре менән саф күңелдән әйтелгән доғалар Аллаһтың рәхмәтенә ирештерә. Раббыбыҙға буйһоноу сере йәшеренгән доға йөрәккә ял, тыныслыҡ бирә.

**Рәсүлуллаһ**, салләллаһү ғәләйһи үә сәлләм, беҙҙе үҙ миҫалында камил рәүештә доға ҡылырға өйрәткән. Ул намаҙҙарҙа шул ҡәҙәр оҙаҡ торған, хатта ки аяҡ табандары шешер булған, аҙаҡ ул йәшле күҙҙәре менән Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә үҙенең зәғиф ҡол булыуын белдереп доға ҡылған:

*«Эй Раббым! Мин Һинең асыуыңдан Һинең мәрхәмәт-шәфҡәтеңә һыйынам, Һинең язаңдан - Һинең ярлыҡауыңа. Мин Һине Һин лайыҡ булғанса маҡтай, данлай алмайым. Һин Үҙеңде нисек маҡтаһаң, Һин шундай һәм Үҙеңде нисек данлаһаң, Һин шундай».* (Мөслим, Саләт, 222)

Доғаның әһәмиәте хаҡында ул былай тигән:

*«Доға – үҙе ғибәҙәттер, ғибәҙәттең асылылыр. Кешенең Аллаһу Тәғәлә каршыһындағы дәрәжәһе Уға ҡылынған доға һәм ғибәҙәте менән иҫбатлана. Доға һәм ғибәҙәте булмаған кешенең Аллаһ каршыһында бер дәрәжәһе лә ҡалмай. Ауырлыкта Аллаһтан ярҙам һораған кеше рәхәт һәм киңлек ваҡытында ла күп доға ҡылһын. Һеҙҙең Раббығыҙ – Әл-Хәйй (Мәңге Тере) һәм Әл-Кәрим - Иң Йомарт); ҡоло устарын асһа, Ул уны буш ҡалдырмай. Кемгә доға ҡапҡалары асылһа, уға хикмәт ҡапҡалары ла асылыр. Доға – рәхмәт ҡапҡалары асҡысы, мөьминдең ҡоралы, иман терәге, күк һәм ере нуры».* (Рудани, Джәмғүл-Фаваид, 9219-20-21-22-25)

Бирелгән ғүмерен ғәмһеҙ үткәреп, кешеләрҙе йәберләгән, кәмһеткәндең доғаһы түгел, өмөтөн юғалтып, мохтажлыҡта көн күргәндәргә бәхет бүләк итеүселәрҙең доғаһы ҡабул ителер. Үҙҙәрен гөнаһһыҙ һанаған тәкәбберҙәр түгел, тәүбә йәштәре менән күҙҙәрен, йөрәген йыуғандар Аллаһтың яуабын алыр.

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, был турала шулай тигән:

*«Үкенес ялкыны һәм йәшле күҙҙәр менән тәүбә ит!*

*Сәскәләр бит ҡояшлы һәм дымлы урындарҙа таждарын аса».*

Доға ишетелһен, ҡабул ителһен өсөн, уны тел менән генә әйтеү әҙ. Доға түбәнселекле рәүештә, ҡурҡыу һәм өмөт хистәренә күмелеп әйтелергә тейеш. Ул тетрәнгән яралы йөрәк менән өнһөҙ генә әйтелеүе лә ихтимал. Гөнаһтарың өсөн доғала булһаң, яҙыҡтарыңа кире ҡайтмауыңа ныҡлы ышанысың булыуы лазым.

Риүәйәттәр буйынса, **Муса**, ғәләйһис-сәләм, тырышып доға ҡылған кешене күрә, һәм күңеле менән доғаларының ҡабул булыуын теләй. Шул ваҡыт Аллаһу Тәғәлә Мусаға, ғәләйһис-сәләм, вәхи индерә:

**«Мин был ҡолға һиңә ҡарағанда ла шәфҡәтлерәк. Ул теле менән Миңә һөйләй, ә йөрәге үҙе хужа булған көтөүе янында».**

Муса, ғәләйһис-сәләм, был әҙәмгә ошо һүҙҙәрҙе еткергәс, тегеһе хатаһын төҙәткән һәм саф күңел менән Раббыһына уҡталған.

Икенсе яҡтан, янында булмаған диндәшең тураһындағы доға ҡабул ителә. Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Бер мөьминдең үҙе юҡта икенсе мөьмин өсөн ҡылынған доғаһынан да яҡшыраҡ доға юҡ».* (Тирмиҙи, Бирр, 50)

Кешеләр йыш ҡына доғалары ҡабул булыр тип иҫәпләгәндәрҙән доға ҡылыуҙы үтенә. Ә доғаларҙың ҡабул булыуы өсөн тәү сиратта ихласлыҡ һәм эскерһеҙлек кәрәк. Тимәк гөнаһкәр ҙә, берәү өсөн ихлас, бөтә йөрәгенән сыҡҡан һүҙҙәр менән доға ҡылһа, ул иң камил, ләкин хисһеҙ доғанан яҡшыраҡ буласаҡ.

Мәүләнә Йәләлетдин Румиҙың, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, шәфҡәт тулы тәьҫирле һүҙҙәре бар:

*«Эй Раббым! Әгәр иманлылар ғына Һинең рәхмәтеңә өмөт бағлай алһа, гөнаһкәрҙәр кемгә өмөт бағларға тейеш?..»*

*«Эй Раббым! Әгәр Һин һайлам ҡолдарыңды ғына ҡабул итһәң, гөнаһкәрҙәр доға менән кемгә мөрәжәғәт итергә тейеш?..»*

✵

Ҡол гөнаһ ҡылған икән, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уны ҡалдырҙы тигән һүҙ түгел. Кем доғаһы сәбәбендә теләктәре ҡабул булыуын әҙәм белмәй, быны Аллаһ ҡына белә. Тимәк, Аллаһ һәр кемдең ихлас ҡылынған доғаһын ҡабул итә.

Бер заман **Мәғруф әл-Ҡәрһи**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, баҙарҙа бер һыу ташыусы менән осраша. Һыу ташыусы уға былай тип мөрәжәғәт итә:

- Аллаһ ризалығы өсөн, эс әле минең һыуымды.

«Аллаһ ризалығы өсөн» тигән һүҙҙе ишетеп, Мәғруф әл-Ҡәрһи, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, нәфел ураҙаһында булһа ла һыуын һатып ала һәм эсә.

Аҙаҡ, Мәғруф әл-Ҡәрһи, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, үлгәндән һуң, бер әүлиә уны төшөндә бик яҡшы кәйефтә күрә һәм былай тип һорай:

- Аллаһу Тәғәлә ниндәй ғәмәлдәрең өсөн һине шундай ҙур дәрәжәгә күтәрҙе?

- Һыу ташыусының доғаһы арҡаһында, мин Аллаһу Тәғәләнең ризалығына ирештем.

Мосолмандарға кәмһетелгәндәрҙең, рәнйетелгәндәрҙең доғаһын алыу ни ҡәҙәр мөһим булһа, бәддоғаларҙан һаҡланыу ҙа шул ҡәҙәр мөһим. Быны киләһе миҫал бик яҡшы раҫлап тора:

Ҡала ҡәлғәһен төҙөп бөткәс, Сәлжүк Солтан Ғәләүетдин Кейкубад Мәүләнә Йәләлетдин Румиҙың, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, атаһы Баһаатдин Вәләдте, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, фекерен белер өсөн саҡыра. Ҡоролманы ҡарап сыҡҡас, Баһаатдин Вәләд, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, былай ти:

«Ҡәлғәгеҙ ғәжәп матур, дошман яуына ла, шыуғындарға ла ҡаршы торорлоҡ. Әммә ҡул аҫтындағы ғәҙелһеҙлектәрҙән ыҙа сиккәндәрҙең бәддоғаһынан үҙеңде яҡлау өсөн ниндәй сара күрҙең? Уларҙың ҡарғышы һинең ҡәлғәңде генә түгел, йөҙ мең ҡәлғәне үтә тишеп, уларҙы харабаға әйләндерергә һәләтле.

Һин ғәҙеллектән, игелектән, тәҡүәлектән ҡәлғә төҙө, һуғышсыларыңдың доғалары яҡшылыҡҡа йүнәлһен өсөн, иманлыларҙан ғәскәр йый – былар ҡәлғә диуарҙарынан ышаныслыраҡ. Халыҡтың тыныс, имен тормошон ошо һуғышсыларыңдың доғалары тотоп тора».

Мөьминдәрҙең бөтә уңыштары, еңеүҙәре уларҙың тырышлығына һәм доғаларының ихласлығына бәйләнгән.

Заман ахырына ҡәҙәр алып буласаҡ юл күрһәтеүсебеҙ Ҡөрьән доға менән Аллаһҡа нисек мөрәжәғәт итергә кәрәклеге тураһында дәрес бирә. Аллаһу Тәғәлә изге аяттарҙа бойора:

**«Ий, Мөхәммәт, әйт һин: «Әгәр ҙә һеҙ хаҡлы икән, һеҙгә Аллаһтың язаһы килһә йәки Ҡиәмәт килеп, яҡағыҙҙан тотһа, шул ваҡыт Аллаһтан башҡа кемде ярҙамға саҡырырһығыҙ? Эйе, һеҙ Уға ялбарығыҙ. Ул да теләһә, Һеҙҙе бәләләрҙән ҡотҡарыр һәм һеҙ үҙегеҙҙең уйҙырма тәңреләрегеҙҙе онотороһоғоҙ»** (Әнғәм, 6/40-41);

**«Эй, иман килтергәндәр, Аллаһтың язаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ (мосолман булып үлегеҙ)»** (Әғраф, 7/55).

Фани донъяның дауамы булған Әхирәттә ҡотолоусылар иҫәбенә инер өсөн, Аллаһтан ике донъя бәхетен һорарға кәрәк. Изге аятта Раббыбыҙ бойора:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُواْ اتَّقُواْ اللّهَ حَقَّ تُقَاتِهِ وَلاَ تَمُوتُنَّ إِلاَّ وَأَنتُم مُّسْلِمُونَ

**«Эй, иман килтергәндәр, Аллаһтың язаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ. Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ (мосолман булып үлегеҙ)!»** (Әлү Ғимран, 3/102).

Һәр мөьминдең тырышлығы һуңғы һулышын яҡшы һүрәттә тамамлауға һәм киләсәк тормошон бәхетле итеүгә йүнәлтелгән булырға тейеш. Пәйғәмбәрҙәрҙән, ғәләйһимүс-сәләм, башҡа берәү ҙә киләсәге ниндәй булырын белмәй бит. Хатта Аллаһтың һайланған ҡолдары – әүлиәләр һуңғы һулышы тураһында борсола.

Әҙәм һуңғы һулышы ниндәй булырын белмәй, әммә йәшәлгән тормошона ҡарап, ни рәүешле был донъя менән хушлашыуын күҙ алдына килтерергә тырыша. Һуңғы һулышыңды иман менән ҡаршы алыу өсөн, тура юлда, доғала, истиғфарҙа булыу кәрәк. Изге аятта әйтелгәнсә, Йософ пәйәмбәрҙең, ғәләйһис-сәләм, шундай доғаһы булған:

تَوَفَّنِي مُسْلِمًا وَأَلْحِقْنِي بِالصَّالِحِينَ

**«Йә, Раббым!.. Мосолман булған хәлемдә йәнемде ал, зинһар. Һәм мине изгеләр рәтенә ҡуй»** (Йусуф, 12/101).

Аллаһу Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә тәҡүәле ҡолдарының доғаһын килтерә, ул уларҙы хикмәт эйәләре, тип атай:

رَبَّنَا فَاغْفِرْ لَنَا ذُنُوبَنَا وَكَفِّرْ عَنَّا سَيِّئَاتِنَا وَتَوَفَّنَا مَعَ الأبْرَارِ

**«Йә, Раббыбыҙ! ... Инде беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы кисер, яманлыҡтарыбыҙҙы ярлыҡа, йәнебеҙҙе изгелек ҡылыусылар иҫәбенән ал, йә, Раббыбыҙ»** (Әлү Ғимран, 3/193).

**Муса** пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, мөғжизәләренән һуң, ғүмер буйы иманһыҙ булып йәшәгән **сихырсыларҙың** яңы динде ҡабул итеүендә, фирғәүен вәғәҙә иткән ҡаты үлем ғазаптарынан да ҡурҡып тормайынса, өмөттәрен Аллаһу Тәғәләгә бағлап, иман менән үлеүҙе хуп күреүҙәрендә беҙҙең өсөн бөйөк нәсихәттәр бар.

✵

Доғаларҙың ҡабул булыуында көслө тауыш, яһалма ҡыланыштар, буш һүҙҙәр, үҙәк өҙгөс аҡырып-баҡырыуҙарҙың хәжәте юҡ. Юғиһә ҡанлы йәштәр түгеп ыңғырашыусыларҙың, зәғиф кенә тауышлы ауырыуҙарҙың доғалары ишетелмәҫ тә ине.

Рыя, яһалмалылыҡ доғаның бәҫен ебәрә, изге асылын һайығайта, хатта ки юя. Ошо рәүешле доға ҡылыусылар тураһында пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шулай тигән:

*«Доға ҡылыуҙа сиктән сығыусылар төркөмө килер»* (Әбү Дауыт, Витр, 23).

Икенсе изге хәҙистә әйтелә:

*«Доғаларығыҙ менән һеҙ һаңғырауға мөрәжәғәт итмәйһегеҙ. Доғаларығыҙ менән һеҙ Аллаһҡа мөрәжәғәт итәһегеҙ, Ул – Ишетеүсе һәм һеҙгә Яҡын тороусы»* (Бохари, Йыһат, 131).

Аллаһу Тәғәлә ихлас доғаларҙы кире ҡаҡмай, тик ихлас булһа ла, тәҡдиргә тура килмәгәндәрен ҡабул итмәй. Доғам ҡабул булманы тип, төшөнкөлөккә бирелергә ярамай, ҡабул булмаған икән, тимәк ул доғаға яуап беҙҙе Әхирәттә көтә.

Доға юллап тетрәнгән йөрәк, һыйыныу урыны эҙләп, иң мөһабәт ҡапҡа янында тора. Ҡурҡыу һәм өмөт менән шәфҡәт көтөп, ҡапҡа янында ғүмер буйы торһа ла, ул арымаҫ, көтөүҙән туҡтамаҫ. Илаһи рәхмәт булған доға һәм күҙ йәштәре - ҡайғыға батҡандар күңеленә тыныслыҡ биреүсе бәхет йәншишмәһе. Уны эскәндәр, татлы Кәүҫәр һыуын эскән шикелле, Раббыбыҙға һөйөү менән янған йөрәктәр ләззәт таба.

Кеше булам тигән кешегә гөнаһтарынан арыныу лазым. Һуңғы һулышында мәңгелеккә ғәфү ителеүен күреп, Аллаһтың сикһеҙ рәхмәтенә ирешергә теләгәндәр рухиәт баҡсаһындағы ярлыҡау сәскәләрен күҙ йәштәре менән һуғарырға, ҡурҡыу һәм өмөт доғалары менән нурландырырға тейеш. Беҙ бит Бөйөклөк Эйәһе булған Раббыбыҙға мәрхәмәт һәм ғәфү итеүҙе һорап ялбарабыҙ.

**Эй Раббым! Ихлас һөйөү тулы күҙ йәштәре менән ярлыҡау һорап, рәхмәтеңә ирешкәндәр юлынан алып бар. Һинең ризалығыңды алыу өсөн, бөтә барлығыңа сикһеҙ мөхәббәт күҙе менән ҡарарға насип ит. Ихлас ҡолдарыңдың доғаһына яуап итеп, Изге Йортобоҙ булған Ватаныбыҙға бәхет-сәғәҙәт һәм тыныслыҡ бир, халҡыбыҙға хәҡиҡәтте танып ҡабул итергә насип ит.**

**Әмин!..**

# *Хәкиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа өндәү - 1*

*Үҙ-үҙебеҙҙән йыш ҡына имтихан алырға тейешбеҙ: Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең, өммәтендә булып, Уның сөннәһенә таянып эш итәбеҙме?*

# *Хәкиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа өндәү - 1*

Тәбиғәттән бирелгән уйлау, танып белеү һәләтен юғалтмаған, тормошҡа һәм ғаләмгә йөрәк күҙе менән баға белгән һәр кеше ерҙә буштан-бушҡа ғына йәшәмәүен яҡшы аңлай. Һәр кемдең фани донъяла үҙенә йөкмәтелгән бурысы бар. Изге аяттарҙа әйтелә:

أَيَحْسَبُ الْاِنسَانُ أَنْ يُتْرَكَ سُدًى

**«Кеше үҙен: һис сикләүҙәрһеҙ, күҙәтеүсеһеҙ йәшәргә хаҡлы, тип һанаймы әллә?»** (Ҡийәмә, 75/36);

أَفَحَسِبْتُمْ أَنَّمَا خَلَقْنَاكُمْ عَبَثًا وَأَنَّكُمْ إِلَيْنَا لاَ تُرْجَعُونَ

**«Былай ғына, эше булмағандан эш булһын, тип кенә беҙҙе яралтты һәм, ысынлап та, Ул беҙҙе үҙ хозурына ҡайтармаҫ, тип өмөтләнәһегеҙме?»** (Мөьминун, 23/115).

Бишектән алып ҡәбергәсә һуҙылған бәндә тормошонда ғаләм менән уның араһында бәйләнеш тыуа. Аҡылы һәм намыҫы булған кешене йыһандағы илаһи тәртип һәм ҡөҙрәт Хаҡ Тәғәләне таныуға, **иманға** алып килә. Кешеләр иман юлында камиллыҡҡа ирешһендәр өсөн, Аллаһу Тәғәлә хәҡиҡәт юлын күрһәтеүсе пәйғәмбәрҙәрен, ғәләйһис-сәләм, ебәргән.

Иманлы әҙәмгә ҡиммәтле сифат – миһырбанлыҡ хас. Миһырбанлылыҡ мөьмин йөрәгендәге һүнмәҫ ут кеүек, ул Раббыбыҙға яҡынайтыусы гүзәл табыш. Миһырбанлылыҡ – имандың хозур емеше, уны татып ҡарағандың күңеле нескәрә, ул, мин-минлеген ташлап, кешелекле, әҙәм йәнле була башлай. Йөрәктә иман камил төҫ алһа, унан мәхрүм булғандарға ярҙам итеү теләге уяна. Яндарында нәсихәткә мохтаждар йәшәгәндә, тәҡүәле

әҙәмдәр үҙенең иманлы булыуына ғына ҡәнәғәт булып тыныс ҡына йәшәй алмай.

Кеше фани донъя юлдары буйлап Әхирәткә атлай, быны инҡар итеү, күҙеңде йомоп, ҡояштың барлығын инҡар итеү менән бер. Шуға күрә тормошоңдо ошо хәҡиҡәткә ярашлы ҡороу - аҡыл һәм намыҫ талап иткән зарурлыҡ. Мөьмин өсөн иң мөһиме ҡулыңдағы мөлкәтте нәпсе талабы буйынса сарыф итеп типтереп йәшәү түгел, ә намыҫы ҡушҡан иң мөһим дини бурыс - аҙашып йөрөгәндәргә тура юлды күрһәтеп, нәсихәт биреү. Кешеләрҙе хәҡиҡәткә, яҡшылыҡҡа, ғилемгә, иманға, изге ғәмәлдәргә, тимәк мәңгелек бәхеткә саҡырыу, ямандан алыҫ булырға өндәү, әхлаҡи принциптарҙың тотороҡһоҙлоғо арҡаһында гөнаһтар, иманһыҙлыҡ ямына батыу ҡурҡынысы алдында торғандарҙы әрсәләү – ике донъя бәхетенә ирешергә мөмкинлек биреүсе ҙур яуаплылыҡ. Изге хәҙисендә **Рәсүлуллаһ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, былай тигән:

*«Игелек юлына баҫырға саҡырыусылар уның саҡырыуына эйәреп ҡылынған игелек өсөн сауап алыр. Бынан игелек ҡылыусыларҙың сауаптары һис кенә лә кәмемәҫ!*

*Гөнаһ юлына саҡырыусылар уның саҡырыуына эйәреп ҡылынған гөнаһтар өсөн язаһын алыр. Был уларҙың гөнаһтар өсөн язаһын һис кенә лә кәметмәҫ!..»* (Мөслим, Ғилем, 16, Әбү Дауыт, Сөннәт, 6; Тирмиҙи, Ғилем, 15)

Икенсе яҡтан, хәҡиҡәткә, изгелеккә саҡырыусы тәүге нәүбәттә үҙ шәхесен камил дәрәжәгә күтәрергә бурыслы, сөнки хәҡиҡәткә, яҡшылыҡҡа, игелеккә өндәгән дәғүәт алып барыусы үҙе был сифаттарҙың сағылышы булһа, тура юлда ныҡ баҫып торһа, һөҙөмтәһе лә нәтижәлерәк буласаҡ.

Фани донъя юлдары буйлап, ваҡытлы донъя биҙәктәренә ҡыҙыҡмайынса, мәңгелек йортобоҙ булған Әхирәтте ҡайғыртып, ышаныслы атлаған тәҡүәләр һәр ғәмәлен ихлас рәүештә Аллаһ ризалығы өсөн ҡыла. Был – барса пәйғәмбәрҙәргә хас сифат. Изге Ҡөрьәндә әйтелә:

**«Был эшем өсөн мин һеҙҙән бер ниндәй ҙә түләү һорамайым, миңә тигән бүләк бары тик ғаләмдәрҙең хужаһы булған Аллаһ хозурында ғына»** (Шуғәрә, 26/180). Ошо һәм башҡа шундай аяттар һәр пәйғәмбәрҙең холҡона илаһи аңлатма бирә.

**Яҡшылыҡҡа саҡырыу, яманлыҡтан туҡталырға өндәү** – динебеҙҙең төп бурыстарының береһе. Был илаһи бойороҡ динебеҙҙә шулай аңлатыла:

وَلْتَكُن مِّنكُمْ أُمَّةٌ يَدْعُونَ إِلَى الْخَيْرِ وَيَأْمُرُونَ بِالْمَعْرُوفِ

وَيَنْهَوْنَ عَنِ الْمُنكَرِ وَأُوْلَئِكَ هُمُ الْمُفْلِحُونَ

**«...Һеҙҙән шундай бер өммәт булырға тейеш: улар һәр кемде хәйерле эштәргә, изгелеккә өндәрҙәр, яманлыҡтан ваз кисерергә саҡырырҙар. Бына шулар мораттарына ирешкән булыр»** (Әлү Ғимран, 3/104).

Хәҡиҡәтте ялғандан, яҡшыны ямандан, юғары выжданлыҡты түбәнлектән, өлгөргәнлекте тәжрибәһеҙлектән айырыусы берҙән-бер критерий – дин ауазы, йәғни Аллаһу Тәғәләнең һәм Уның Пәйғәмбәренең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бойороҡтары һәм нәсихәттәре. Һәр мөьминдең бурысы – ауазды ишетергә ҡадир булмағандарға уны еткереү.

Аллаһу Тәғәлә изге аяттарының береһендә әйтә:

**«Бер миҙгелгә лә кәферҙәргә бил бирмә һәм шуның менән (Ҡөрьән менән) уларға ҡаршы булдыра алғанса ҡаты бул»** (Фурҡан, 25/52).

«Бөйөк йыһат» хаҡындағы әмер Мәккәлә, мөьминдәрҙең мөшриктәргә ҡаршы торорға етерлек көсө булмағанда төшөрөлә. Тамыр йәйгән наҙанлыҡ, ҡаты аҙашыу, хаос, ғилемгә дошманлыҡ, мәжүсилек хөкөм һөргән ваҡытта яңғырай Ҡөрьән ораны. Мөьминдәрҙең, залимдарға ҡаршы көрәшеү өсөн, Аллаһ һүҙенән башҡа етерлек ҡеүәте лә, ҡоралы ла булмай. Ҡөрьәнгә саҡырыу, уның изге аяттарының мәғәнәһен аңлатыу берҙән-бер тура юлға тоғролоҡ - бөйөк йыһат шул.

Хәҙистәренең береһендә **Аллаһ Илсеһе**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Кешеләрҙең ике төркөмөнә генә көнләшергә мөмкин: беренселәре – Аллаһ тарафынан Ҡөрьән ғилеме бирелгәндәр, улар көнө-төнө шуның менән мәшғүл (шуның менән йәшәйҙәр һәм башҡаларҙы ла шуға саҡыралар), икенселәре – Аллаһ тарафынан байлыҡ менән бүләкләнеүселәр һәм көнө-*

*төнө уны Аллаһ юлына сарыф итеүселәр».* (Бухари, Ғилем, 15, Мөслим, Мусафирин, 266)

Лайыҡлы рәүештә Ҡөрьән менән йәшәү – уны өйрәнеү һәм уға өйрәтеү, уның әхлағын алыу, тормошта уның әмерҙәренә һәм тыйыуҙарына буйһоноу, нескә һәм һаҡ рәүештә иманға саҡырыу ул. Ҡөрьәнгә саҡырыу ыңғай һөҙөмтә бирһен өсөн, Ҡөрьән мөьминдең йөрәгендә булырға тейеш.

Мәҫәлән, **Ғүмәрҙең**, разыйаллаһу ғәнһү, **Рәсүүллаһты**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡәбәхәттәрсә үлтереүҙән баш тартып, тура юлға баҫыуы пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, доғаларының көсөнә генә бәйле түгел, Ғүмәрҙең апаһының йортонда, Ҡөрьәнде өйрәнеп, уның саҡырыуын ихлас ҡабул итеүгә лә бәйле.

Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм оло йөрәкле сәхәбәләр, разыйаллаһу ғәнһүм, Ҡөрьән аша Аллаһ дине юлына саҡырыуҙа ҙур фиҙакәрлек күрһәткән, быны өсөн бөтә көстәрен йыйып, материаль мөмкинлектәрҙе лә, рухи мөмкинлектәрҙе лә файҙаланған. Улар, олоғара ҡаршылыҡтарҙы еңеп, пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Хаҡ дингә саҡырып яҙған мөрәжәғәтнамәләре менән һис бер ҡурҡыуһыҙ залимдар, хакимдар алдына барып баҫҡан, йыш ҡына йәндәрен фиҙа ҡылған. Бына шуның өсөн Рәсүүллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Хушлашыу хөтбәһендә (вәғәз) ҡатнашҡан 120 мең сәхәбеһенең 20 меңе генә Мәккә һәм Мәҙинә тирәһендә ерләнгән. Ҡалғандары ғүмерлеккә Ҡытай, Анадолу, Африка, Кавказ яҡтарына киткән, шәфҡәт, миһырбанлылыҡ таратып, Исламға лайыҡлы урын яулаған. Улар Мәккәлә башланған дәғүәтте бөтә халыҡтарға һәм замандарға тараҡан. Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм уға тоғро сәхәбәләренең хәҡиҡәткә саҡырыу юлында ғәҙәттән тыш тырышлығы, иманға саҡырыуы, фиҙакәрлек өлгөһө - барса мөьминдәр өсөн тормош һабағы.

Аллаһу Тәғәлә беҙгә, Үҙенең ҡолдарына, камил үрнәк итеп ебәргән Хөрмәтле **Пәйғәмбәребеҙ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бөтә ғүмерен динебеҙгә һәм дәғүәткә бағышлаған. Ул мөшриктәр күҙлегенән иң файҙалы, иң килемле булып күренгән тәкдимдәрҙән баш тартҡан, уларҙың мыҫҡыллауҙарынан, хурлауҙарынан ғазапланған, әммә иман юлында ихлас тырышлығын кәметмәгән. Бөтә барлығын билгән ҡеүәтле иман ялҡыны әҙ генә тайпылыуҙарға ла, шик-шөбһәгә лә урын ҡалдырмаған. Пәйғәмбәрлек

юлының башында уҡ, мөшриктәрҙең уйынса, ылыҡтырғыс тәҡдимдәрҙән ул һис бер икеләнеүһеҙ баш тарта һәм былай ти:

*«Аллаһ менән ант итәм, Аллаһ диненә саҡырыуҙан баш тартыуым өсөн уң ҡулыма ҡояш, һул ҡулыма айҙы һалһағыҙ ҙа, мин унан баш тартмаясаҡмын. Йәки Аллаһу Тәғәлә уны бөтә ер йөҙөнә таратасаҡ, йәки мин шул юлда үләсәкмен!»* (Ибнул-Әсир, әл-Камил фит-Тарих, II, 64)

Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәр уңайлы мәлде файҙаланып, әҙәм балалары йөрәгенә Хәҡиҡәт орлоҡтары сәсә, Исламға дәғүәт юлында шул ҡәҙәр ҡыйынлыҡтар, ыҙалар кисерә, ахыр килеп өммәттең иң яҡшыһы һәм камилы булып китә.

Пәйғәмбәрлек миссияһының тәүге йылдарында, мөшриктәр хаж ҡылыу өсөн төрлө яҡтарҙан Мәккәгә йыйылғанда, ул, Исламдың асылын аңлатыр өсөн, ҡәбиләләрҙе бер нисә тапҡыр йөрөп сыға. Кәңәштөңәш иткән, аралашҡан халыҡ араһында һәм кемде: ирекleme ул, ҡолмо, зәғифме, көслөмө, баймы, ярлымы - һәммәһен һис айырмай Аллаһ диненә саҡыра.

**Йәбир**, раҙыйаллаһу ғәнһү, былай тип һөйләй:

«Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яһилиәт заманындағы хаждар ваҡытында һәр ҡәбиләнең туҡталҡаһы янына килеп шундай тәҡдим менән мөрәжәғәт итә ине:

*«Мине үҙ халҡы менән таныштырыусылар табылмаҫмы? Ҡөрәйштәр Раббымдың һүҙен еткерергә миңә ҡамасау яһай?»* (Әбү Дауыт, Сөннә, 19-20)

Ул, Мәккәнең Указ, Мәдйәннә, Зүлмәдйәз баҙарҙарына килеп, шунда төн үткәргән төрлө ҡәбилә сауҙагәрҙәре менән танышып, Аллаһтың берлеге, Уға ғына ғибәҙәт ҡылыу кәрәклеге хаҡында һөйләй.

Таифтә ул кәмһетеүҙәргә, ыҙаларға дусар була, әммә **Аддас** исемле бер генә булһа ла ҡолдоң исламды ҡабул итеүе ҡайғыһын шатлыҡҡа алмаштыра һәм ул, башҡаларҙың да ҡотолоуын теләп, Аллаһҡа доға ҡыла.

Шул уҡ ваҡытта Таифтә дәғүәтенә кире ҡараш Рәсүлуллаһты, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әсенеп, борсолоп Раббыбыҙға ялбарырға мәжбүр итә:

*«Эй Раббым! Һиңә генә иҡрар итәм: көсөм бөттө, ярҙамсыһыҙмын һәм кешеләрҙең ғәйепләүҙәренә дусармын. Эй Мәрхәмәтлеләрҙең Мәрхәмәтлеһе! Әгәр Һин миңә асыулы булмаһаң, күргәндәремдең бер әһәмиәте лә юҡ. Раббым, был халыҡты тура юлға төшөр, сөнки улар аңһыҙ. Раббым! Һинең ризалығыңды белмәй тороп, мин Һинең рәхмәтеңә мохтажмын...»* (Ибн Хишам, II, 30)

Был ҡыҫҡа ваҡытлы тормоштоң иң ҙур ләззәте - Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үрнәге буйынса, әхүәле рухиәбеҙ баҡсаһын хуш еҫле кисерә белеү, игелек менән тултырыу. Миһырбанлылыҡ башҡа бөтә хистәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарһын өсөн кәрәк был. Илаһи шәфҡәткә эйә булыр өсөн, үҙебеҙ ҙә шәфҡәтле булайыҡ, Раббыбыҙҙың «Әр-Рахман» сифатынан үҙ өлөшөбөҙҙө алайыҡ.

Аллаһу Тәғәләнең рәхимлелеге – осһоҙ-ҡырыйһыҙ океан, ә йөрәктәребеҙ тулышһын өсөн кескәй генә тамсы ла етә. Йөрәгебеҙгә тамған ул тамсы океан дымы тәмен алып килә һәм йәнебеҙ океан менән ҡушыла. Һыйыныу урыны һораған доғаларыбыҙ менән йәндәребеҙ бер-бер артлы шәфҡәт океанында ирей һәм үҙенә лайыҡлы урынды биләй. Бындай йөрәктәр ярҙамсыһыҙ аҙашҡан йәндәрҙең өнһөҙ саҡырыуын ишетә, уларҙың ғазабын үҙенеке һымаҡ тоя. Таифтәге хәл быға асыҡ миҫал. Ҡояш яҡтыртмай, йылытмай булдыра алмаған кеүек, камиллыҡҡа ирешкән йәндәр мәрхәмәттән азат була алмай.

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғаләмгә игелек булып килә. Ул саҡырған рухи ҡиммәттәрҙе күптәр аңлай алмайынса, кәмһетеү, мыҫҡыл итеүгә хоҡуҡтары бар тип уйлаһа ла, Аллаһ илсеһенең йөрәгенә бихисап әҙәмдәр өсөн ғәҙәти булып күренгән асыу урынына шәфҡәт, миһырбанлылыҡ тула. Донъялыҡтағы уңыштарына йәбешеп ятҡандар, Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йөрәгенең сикһеҙ шәфҡәтлелек, сабырлыҡ, кисерә, ғәфү итә белеү сифаттары океанында иреп, Уның рухиәтенә ауаздаш булып, иманға килә.

Рәсүлуллаһтың, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, түбәндәге һүҙҙәре халыҡты Аллаһ юлына саҡырғандағы әхүәле рухиәһен сағылдыра:

*«Мин һәм һеҙ бына нимәгә оҡшаған: бер кеше усаҡ яға. Күрә: утҡа төнгө күбәләктәр оса, яҡтылыҡты яратыусы бөжәктәрҙең ҡайһы берҙәре утҡа инеп һәләк була. Кеше быға ҡамасауларға тырыша. Тик*

*бөжәктәр һаман оса, утта янып һәләк була. Уттан ҡотҡарыу өсөн, мин һеҙҙең ҡулдарығыҙҙан тотам, әммә һеҙ барыбер уға уҡталаһығыҙ».* (Бухари, Рикак, 26)

✵

Изге Ҡөрьәндә Аллаһ бойора:

كُنتُمْ خَيْرَ أُمَّةٍ أُخْرِجَتْ لِلنَّاسِ تَأْمُرُونَ بِالْمَعْرُوفِ وَتَنْهَوْنَ عَنِ الْمُنكَرِ

**«Һеҙ кешеләрҙең именлеге өсөн донъяла мәртәбәгә күтәрелгән иң изгелекле ҡәүем. Изгелеккә өндәп, яманлыҡтан ваз кисергә саҡырҙығыҙ…»** (Әлү Ғимран, 3/110).

Беҙгә **«изгелекле ҡәүем»** иҫәбендә булыр өсөн, Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, кеүек игелеккә саҡырыу, һәр ғәмәлебеҙҙә изгелекте алға сығарырыу, үҙебеҙгә яманлыҡтан, гөнаһтарҙан алыҫ тороп, башҡаларҙы ла шуға өндәү лазым.

Аллаһу Тәғәлә изге аятта бойора:

**«Аллаһҡа йүнәлергә өндәгән һәм дә үҙе лә изгелекле ғәмәлдәр ҡылған һәм: «Мин мосолман!» - тигән кешенең һөйләшеүенән дә тәмле һүҙле башҡа берәү бармы икән?»** (Фуссыиләт, 41/33).

Кешелектең хәкиҡәтте ишетеүе өсөн фиҙакәр көрәшкән Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, өммәтендә булыу бәхетенә ирешкәнбеҙ икән, ниндәй кимәлдә уның Сөннәһенә лайыҡлы булыу-булмауыбыҙ тураһында ла уйланырға тейешбеҙ, сөнки ул үҙе үтәгән бурыстарҙы өммәте лә үтәүен теләгән. Яйы сыҡҡан һайын, ул өммәтен дәғүәт алып барырға саҡырған һәм быға яуаплы булыуҙы иҫкә төшөрөп торған һәм бер хәҙисендә әйткән:

*«Кешеләргә минән бер аятты булһа ла еткерегеҙ».* (Бухари, Әнбиә, 50)

Икенсе хәҙистә әйтелә:

*«Беҙҙән берәй нимә ишетеп, уны шул көйө башҡаларға еткергәндең йөҙөн Аллаһ нурландырһын. Ғилемде алып, яҡшыраҡ аңлап һәм шуға ярашлы эш итерлек күпме кеше бар».* (Тирмиҙи, Ғилем, 7)

Нәсихәттә әйтелгәнсә, кешелекте зарарлы, гөнаһлы нәмәләрҙән тыйыу, гүзәллеккә, изгелеккә саҡырыу – дindeң төп асылы шунда.

Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Һеҙҙән ниндәй ҙә булһа насар бер эш күргән кеше, уны үҙ ҡулы менән төҙәтһен. Әгәр ҡулы менән төҙәтергә көсө етмәһә, теле менән, уға ла көсө етмәгән кеше йөрәге менән нәфрәт итһен, төҙәлеүе өсөн доға ҡылһын. Быныһы – имандың иң зәғифелер».* (Мөслим, Иман, 78)

Икенсе хәҙисендә Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйтә:

*«Миңә ғүмер биргән Аллаһ менән арт итәм, һеҙ йәки игелеккә саҡырып, гөнаһтарҙан тыяһығыҙ, йәки Аллаһ һеҙгә язаһын ебәрер. Шунан һуң һеҙ доға ҡылырһығыҙ, ә ул ҡабул булмаç».* (Тирмиҙи, Фитан, 9)

**Эй Аллаһ! Изгелеккә саҡырыу һәм ямандан әрсәләү бурысына еңел ҡарауҙың ҡаты эҙемтәләренән Үҙеңә һыйынам!**

**Эй Аллаһ! Үҙеңдең зәғиф ҡолдарыңа өлгө булараҡ ебәргән Пәйғәмбәреңдең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, гүзәл әхлағына эйәреп, хәҡиҡәткә һәм игелеккә саҡырыу бурысын лайыҡлы үтәргә насип ит һәм беҙҙе Уның шәфәғәтенә ирештер!**

**Әмин!**

# *Хәкиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа өндәү - 2*

*Иң бәхетле кешеләр, йөрәктәрен Изге Ҡөрьән һәм Сөннәнең юғары рухиәте төйәгенә әйләндереп, унда бөтә барлыкты ла һыйҙыра алған кешеләр. Әҙәмдең төп ҡиммәте һәм дәрәжәһе лә шунда: илаһи ғилем тулы рухи тормош менән йәшәүендә һәм, хәкикәт юлына саҡырыу өсөн, йөрәгенең билдәле юғарылыҡта булыуында.*

# *Хәҡиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа өндәү - 2*

Аллаһ Китабын һәм Уның Илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Сөннәһен үҙ йәшәйешебеҙҙә тормошҡа ашырыу өсөн, хәҡиҡәткә саҡырыу һәм халыҡҡа хеҙмәт итеү бурысы йөрәк талабына әйләнергә тейешле. Мөьмин Аллаһ һүҙен уға мохтаждарға еткерергә бурыслы.

Иманы көслө әҙәм башҡаларҙан миһырбанлығы менән айырылып тора. Аллаһ һүҙен еткереү – шул миһырбанлылыҡ емеше. Хәҡиҡәтте, игелекте үҙ йөрәгендә бәпләп үҫтергәс кенә, мөьмин уны башҡаларға тарата, сөнки өнһөҙ ҡала алмай, Аллаһ һүҙе башҡа йөрәктәргә лә юл эҙләй.

Хәҡиҡәткә саҡырыу, игелеккә өндәү өсөн, тәүге нәүбәттә шул хәҡиҡәттең, игелектең асылын аңлау лазым, сөнки наҙандың саҡырыу формаһы ышаныс тыуҙырмай, йөкмәткеһендә лә хаталар китеүе ихтимал. Тимәк, был юлда иң беренсе кәрәк нәмә – **ғилми һәм рухи капитал**. Аҡыл һәм йөрәгеңдә тотороҡло тигеҙлек булдырып, уларҙы яраштырып, ғүмер юлын иман һәм сабырлыҡ менән үтеү өсөн, ана шул ике капитал кәрәк.

**«Мотлаҡи дини белем»** мәсьәләләренә килгәндә, һәр мосолман, һис шикһеҙ, хәйерле ғилемгә эйә булырға тейеш. **«Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығармаҫ»** өсөн, теоретик һәм рухи ғилемеңде тулыландырыу, алған ғилемеңде тормошта файҙаланыу мөһим. Хәҡиҡәткә, игелеккә саҡырыуыбыҙҙың һөҙөмтәһе әхүәле рухиәбеҙ офоҡтарына туранан-тура бәйле, тимәк ғилемебеҙҙе, офоҡтарыбыҙҙы киңәйтергә лә киңәйтергә кәрәк буласаҡ.

**Мәүләнә Йәләлетдин Рәми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Төбө тишек тоҡто тултырырға тырышма».*

Ҡарамаҡҡа матур һымаҡ булып күренгән, әммә һөйөү һәм илһам булмаған хисһеҙ, ғилемһеҙ саҡырыу ыңғай һөҙөмтә бирмәү генә түгел, ауыр эҙемтәләргә килтереүе ихтимал.

Тап шуның өсөн һәр мөьмин үҙенең әхүәле рухиәһен исламдың нәзәкәтлелеге, тәьҫирлеге менән биҙәргә, үҙенең ғәмәлдәре һәм һүҙҙәре менән ыңғай тәьҫораттар ҡалдырырға, хәҡиҡәткә, яҡшылыҡҡа саҡырғанда, үҙе өлгө булырға тейеш, сөнки саҡырыуҙың асылы – Аллаһҡа һөйөү менән уҡталыу. Хира тауында **Рәсүллаһҡа**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, төшөрөлгән тәүге үәхи дәғүәт өсөн кәрәкле ғилем һәм илһам була.

Изге аятта Раббыбыҙ әйтә:

**«Мөьмин ирҙәр менән мөьминә ҡатындар бер-береһенең дуҫылыр. Улар ИЗГЕЛЕК ЮЛЫНА ӨНДӘЙ, ЯМАНЛЫҠТАРҘАН БАШ ТАРТЫРҒА ӨГӨТЛӘЙҘӘР, намаҙ ҡалдырмайҙар, зәкәт бирәләр, Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә итәғәт итәләр. Бына быларға Аллаһ рәхмәтен бирер. Шик юк, Аллаһ бөйөк һәм хикмәт эйәһелер. Аллаһ мосолман ирҙәренә һәм мөслимә ҡатындарға мәңге йәшәү өсөн аҫтында йылғалар ағып торған йәннәттәр һәм Ғәден ожмахтарында яҡшы урындар әҙерләп ҡуйҙы. Аллаһтың ризалығы һәр нәмәнән дә өҫтөндөр. Бына бөйөк ҡотолоу ошо булыр»** (Тәүбә, 9/71-72).

Иң бәхетле кешеләр, йөрәктәрен Изге Ҡөрьән һәм Сөннәнең юғары рухиәте төйәгенә әйләндереп, унда бөтә барлыҡты ла һыйҙыра алған кешеләр. Улар, Ҡөрьән сөңгөлдәренән үҙ өлөшөн алған кешеләр, һуңғы һулыштарына ҡәҙәр хаҡ иман менән йәшәйҙәр, нәпселе теләктәрҙән баш тарталар. Әҙәмдең төп ҡиммәте һәм дәрәжәһе лә шунда: илаһи ғилем тулы рухи тормош менән йәшәү һәм, хәҡиҡәт юлына саҡырыу өсөн, йөрәгенең билдәле юғарылыҡта булыуы. Әгәр йөрәгеңә сәнскеләр ҡаҙалып бөткән икән, һин Аллаһ һүҙен башҡаларға еткерергә ҡадир түгел, ваҡытты бушҡа сарыф итеү генә был. Динебеҙ кеше күңелендәге яман шеш кеүек булған **«эрелек һәм ғәйеп ташлау»** кеүек нәмәләрҙе ҡабул итмәй, йөрәктәрҙе баҫалҡылыҡ, һөйөү, игелек менән яулай. Мөьминдең әхүәле рухиәһе иң наҙан, ҡараңғы сырайлыларҙы йылмайтырлыҡ, ҡайғыға батҡан йөрәктәрҙе тынысландырырлыҡ гөл-баҡса булыуы лазым. Шуға күрә йәнеңде лә, тәнеңде лә сәнске һымаҡ йәрәхәтләрҙәй хистәрҙән, ғәҙәттәрҙән, ғәмәлдәрҙән арындырыу һәм Аллаһ юлына саҡырыуҙы лайыҡлы кимәлгә күтәреү мөһим.

Тарихта билдәле **Хаджадж Залим**, залим булып танылһа ла, фәлсәфәгә бирелергә яратҡан. Бер заман ул йома вәғәзендә шундай һүҙҙәрҙе ишетә: *«Залим хакимға баш-баштаҡлығы өсөн асыу белдереү - Аллаһ яратҡан ғәмәлдәрҙең береһе».*

Хаджадж вәғәзде аҙағынаса өндәшмәй генә тыңлай.

Йома намаҙынан һуң, ул хатипте (хөтбә һөйләүсене) саҡырып ала һәм һорай:

- Хөтбәң нимә хаҡында ине?

Башһыҙ ҡалыу ихтималлығын яҡшы аңлаған хатип әйтелгәндәрҙе тағы ла ҡатыраҡ итеп ҡабатлай. Хаджадж уға былай ти:

- Ғәжәп. Һин мәғрифәтле кешегә оҡшайһың, ә Исламға ни рәүешле саҡырырға кәрәк икәнлекте белмәйһең. Һин Ҡөрьәнде уҡымайһыңмы әллә? Аллаһу Тәғәлә **Мусаға**, ғәләйһис-сәләм, ә ул, һис шикһеҙ, һинән бар яҡлап өҫтөн, фирғәүен менән баҫалҡы, йомшаҡ һөйләшергә ҡуша. Ә **фирғәүендең** гөнаһтары, моғайын, минекенән күберәктер, өҫтәүенә ул мөшрик.

Хатип хатаһын таныған, Хаджаджтан ғәфү үтенгән, башы ла урынында ҡалған.

Аллаһ **Мусаға**, ғәләйһис-сәләм, бойороғонда ғына йомшаҡ булырға ҡушмай, Ҡөрьәндең башҡа аяттарында ла нәсихәт методтарын һайлауға иғтибарлы булырға, кешеләр күңелен яраламаҫ өсөн, дин юлына хикмәт һәм йомшаҡ һүҙҙәр менән саҡырырға ҡуша.

Икенсе аятта Хаҡ Тәғәлә былай ти:

ادْعُ إِلِى سَبِيلِ رَبِّكَ بِالْحِكْمَةِ وَالْمَوْعِظَةِ الْحَسَنَةِ
وَجَادِلْهُم بِالَّتِي هِيَ أَحْسَنُ

**«(Ий, Мөхәммәт) һин Раббың юлына хикмәттәр һәм матур өгөттәр менән саҡыр, улар менән бик тә гүзәл рәүештә бәхәсләш. Аллаһ тура юлдан яҙғандарҙы бик яҡшы белеп тора. Ул тура юлға баҫҡандарҙы ла бик яҡшы белә»** (Нәхл, 16/125).

Раббыбыҙ саҡырыуҙа әҙәп кәрәклеген төшөндөрә. Шуға күрә Ҡөрьәндең сағылышы булған Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә

сәлләм, тормошон һәм шәхесен үрнәк итеп алып, һәр эшкә ул ниндәй әҙәп, ниндәй алымдар ҡулланып тотонған, шуға иғтибар итергә кәрәк.

Һәр мөьмин әхүәле рухиәһен Ислам күркәмлеге менән байытып, гүзәл әхлаҡҡа эйә булып, кешеләрҙең ышанысын яуларҙай, ныҡлы характерға эйә шәхес итеп формалашырға тейеш. Аллаһу Тәғәлә Үҙенең Илсеһенә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бойороҡ бирә:

**«Яҡын туғандарыңды ла (гөнаһ ҡылғандарҙы Аллаһтың ҡаты язаһы көтә тип) киҫәтеп ҡуй»** (Шуғәрә, 26/214).

Бынан һуң Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Сафа ҡалҡыулығында ҡөрәйштәрҙән булған туғандарын йыя һәм шулай тип мөрәжәғәт итә:

- *Эй, ҡөрәйштәр! Ошо тау артында һеҙгә һөжүм итергә әҙер торған дошман һыбайлылары тора тиһәм, ышаныр һығыҙмы миңә*?

Йыйылған халыҡ шунда уҡ яуап бирә:

- Әлбиттә, ышанырбыҙ! Беҙ һине тоғро һүҙле кеше тип беләбеҙ, һинән ялған ишеткәнебеҙ юҡ!

Иман, дин тураһында һүҙ асҡанға, дәғүәтен башлағанға тиклем, Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үҙенә ҡарата ышаныстың раҫланыуын көтә, йәғни өлгөргән һәм тоғролоҡло кеше булыуын йәнә бер тапҡыр халыҡ аңына һеңдерә. Хатта мөшриктәр башлығы **Әбү Жәһил** да түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтергә мәжбүр була:

«Эй Мөхәммәт! Беҙ һине ялғансы, тип әйтмәйбеҙ! «Әл-Әмин» (ышаныслы) исемен һиңә беҙ, мәккәлеләр бирҙек. Һин алдамайһың. Ләкин, бәлки, һиңә килгән фәрештә һине яңылыштыралыр».

Изге аятта ла шул турала әйтелә:

**«Эй, Мөхәммәт, улар һөйләгән нахаҡ һүҙҙәргә көйөнгәнеңде лә белеп торам; нимә генә ҡыланһалар ҙа, асылда улар һине ялғансы, тип әйтәләр. Ул залимдар Аллаһтың аяттарын инҡар итә»** (Әнғәм, 6/33).

Рәсүлуллаһтың, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, иң ҡаты дошманы Әбү Жәһил дә уның бөйөк кеше булыуын раҫлай. Шул уҡ ваҡытта күп кенә кешеләр уның арбаусан һөйкөмлөлөгөнә, «халәт теленә» ышанып, «был йөҙ алдай алмай» тигән фекергә килеп, иман юлына баҫа – баҡтиһәң, йөрәктәрҙе яулауҙа былар ҙа мөһим роль уйнай.

Тарихта дан ҡаҙанған **Фатих Солтан Мехмет Хан**, Стамбулды яулап 10 йыл үткәндән һуң, Боснияны баҫып ала. Әммә ысын еңеү, боснияллыларҙың йөрәген яулау ҡылыс менән түгел, Анатолиянан Боснияға күсеп килгән хаҡ мосолмандарҙың **камил дәғүәте һәм күркәм ғәмәлдәре** менән яулана.

Ҡорал ғәҙелһеҙлекте юҡ итеү өсөн генә ҡулланыла, ә ысын еңеү – ул йөрәктәрҙе яулау. Был бурысты Исламға хас мораль һәм әҙәп менән шул сифаттарға эйә булған шәхестәр генә атҡарып сыға ала. Дәғүәттең тәьҫире хәҡиҡәткә саҡырыусының йәшәү рәүешенә, әхүәле рухиәһенә туранан-тура бәйләнгән. Әгәр дәғүәт алып барыусы йыһандағы Аллаһ тыуҙырған тәртип һәм хикмәтте күрмәй, бөтә барлыҡтың өнһөҙ телен аңламай икән, тимәк йөрәгендә кәмселек бар. Ул тойғоларға бай йөрәкте һыйҙыра алмаған буш ҡапсыҡ кеүек, тирә-яғына бәхет, шатлыҡ, матурлыҡ һулышын тарата алмай.

Тәүге нәүбәттә кеше үҙ-үҙен еңергә тейеш. Аллаһу Тәғәлә әҙәм йөрәгендә барған **«әҙәпһеҙлек һәм иманлылыҡ»** көрәше тураһында һөйләй. Ана шул әҙәпһеҙлектән ҡотолоу, Аллаһтан ҡурҡыу ысын бәхеткә һәм мәңгелек ҡотолоуға алып килә. Эске донъяһындағы алышта еңеп сығып, үҙен Аллаһҡа тапшырған әҙәм генә мәңгелек тормоштағы ҡотолоу хаҡындағы ғилемде башҡаларға еткерергә һәләтле.

Шуны ла иҫтә тотоу кәрәк: иман юлына саҡырылған кешенең хөрмәткә лайыҡ булыуы лазым. Аллаһ һүҙе еткерелгән кеше - Раббының һайлам ҡоло. Иман төп иғтибар үҙәгендә булырға тейеш, әгәр әҙәм үҙенең барлыҡҡа килеү асылын онотҡан икән, уға түбәнһетеп ҡарарға ярамай, уҫаллыҡ, ҡатылыҡ урынына өмөт, түҙемлек, ҡыҙғаныу тойғоһо менән яҡын килергә кәрәк. Кешегә шундай мөнәсәбәттә булып, беҙ уға тейешле хөрмәтте күрһәтәбеҙ. Тап шағирҙың үткен һүҙҙәре һымаҡ:

**«Ергә төшкән ҡиммәтле таш баһаһын юғалтмай».**

Изге Ҡөрьәндең барса аяттарында ла әҙәм мәртәбәле урынға, бөтә барлыҡтан юғары ҡуйыла:

وَلَقَدْ كَرَّمْنَا بَنِي آدَمَ

**«Хаҡтыр, беҙ әҙәм балаларын дан һәм шәрәфтәргә күмдек... Йәнә лә уларҙы яралтҡандарыбыҙҙың күбеһенән өҫтөн ҡылдыҡ»** (Исра, 17/70).

Аллаһу Тәғәлә кешене ерҙә шулай хәлиф итеп иғлан иткән.

Аллаһ һүҙе хаҡиҡәтен еткереүсе – көслө кеше, ул кешеләрҙең әхүәле рухиәләрен тәртипкә килтерергә, уларға йән өрөргә һәләтле. Юғары рухиәткә эйә иманлы әҙәм, ҡайҙа ғына эшләмәһен, һөйөү, шәфҡәт, миһырбанлыҡ менән саҡыра хәҡиҡәткә. Ул, йәмғиәттең иң алғы һыҙығында барыусы, хаттары, кешеләргә хәстәрлекле мөнәсәбәте менән бәхеткә, күңел тыныслығына юл күрһәтә, ҡайғылыны йыуата, йәберләнгәндәр һәм яңғыҙҙар менән бергә була. Кешеләрҙең әрнеүен тойоп, улар өсөн яуаплылыҡ тойоп, мохтаждарға ярҙамға ашыға, һәр кешене Аллаһ тапшырған бурыс, аманат итеп күрә. Бөтә барлыҡҡа һөйөү һәм шәфҡәт күҙе менән бағып, уларҙы үҙенең әхүәле рухиәһе менән сорнай. Йөрәктәрендәге миһырбанлылыҡ орлоҡтарынан үҫеп сыҡҡан яуаплылыҡ уны башҡаларҙан айырып тора, мәңгелек юлындағы мосафирға әүерелдерә.

Аллаһ менән осрашыу өсөн, хәҡиҡәт каруанына ҡушылып, йөрәктәрен мәңгелеккә йүнәлтеп, юлдың барса ауырлыҡтарын үҙенә алғандар хаҡҡа ғашиҡ **Худаи**, **Йософ** туғандары.

✵

Аллаһу Тәғәлә Үҙ яҡтылығын ерҙә тамам ҡылырға вәғәҙә биргән, тимәк Ислам ерҙә Ҡиәмәткә ҡәҙәр йәшәйәсәк. Әммә шуны онотторға ярамай: диндең таралыуы дәғүәткә бәйле, дәғүәт уның таралыуына бер сәбәп. Диндең асылы – Аллаһты тейешенсә танып белеүҙә, Раббыбыҙҙың ҡушҡандарын еренә еткереп үтәүҙә, йәғни ғибәҙәттә.

Әгәр ҡайһылыр мәлдә ҡайһылыр урында диндең йомшарыуы күҙәтелә, кешеләр башҡа, ялған ҡимммәттәргә күсә икән, дәғүәт һәм шуға бәйле эштәр иң алда торорға тейеш. Был мәсьәләлә ыңғай һөҙөмтәләр күренмәй тороп, дин менән бәйле булһа ла бүтән шөғөлдәрҙең әһәмиәте юҡ һәм кәрәкмәй ҙә. Янғын сыҡҡан өйҙә әсәнең һаман балаһын имеҙеп ултырыуына тиң был. Әгәр әсә балаһын имеҙеп ултырып, утты һүндереү сараһын күрмәһә, яуаплылыҡ уның өҫтөндә буласаҡ. Шулай уҡ дин һәм уның сағылышы булған ғәмәлдәр йомшарған осор етһә, хәҡиҡәтте иҫкә төшөрөрҙәй кешеләр башҡа шөғөл менән мәшғүл булһа, был уларға яуаплылыҡты икеләтә арттыра.

Онотторға ярамай: Ислам 1400 йыллыҡ тарихи юлында иҫ киткес ауырлыҡтар һәм кәртәләр аша үткән. Беҙҙең бурыс – уны киләһе быуындарға нисек бар, шул килеш тапшырыу. Хәҡиҡәт һәм яҡшылыҡ еңеп сыҡһын өсөн, ваҡыт беҙҙән тағы ла күберәк тырышлыҡ һәм фиҙакәрлек талап итә. Уйлап

ҡарағыҙ: бысраҡҡа батҡан машинаны этеп сығарыу еңелме, әллә тигеҙ юлда һүнгән машинаны этеү еңелме? Ситтә ҡул ҡаушырып күҙәтеп тороусыларҙың яуаплылығы бермә-бер арта был мәлдә. Бөгөн дин көсһеҙләнгәндә, йәштәр яман үрнәктәргә эйәргәндә, «көслөнөкө замана,» тип йәшәлгәндә, кешеләр нәпселе теләктәре ҡорбаны булғанда, бәләкәй генә иғтибарһыҙлыҡ та ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Заманыбыҙҙың үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп, үтә лә һаҡ булыу лазым.

✵

Аллаһтың саҡырыуы буйынса, динеңә, иманыңа, ватаныңа, халҡыңа хеҙмәт итеү – һәр кеше өсөн оло бәхет. Уңыш һәм уңышһыҙлыҡтарҙан бигерәк, дәғүәт эшендә иң мөһиме - Аллаһ ризалығы өсөн арымай-талмай тырышлыҡ күрһәтеү. Тырышлыҡ һалып та иманға саҡырыуың тейешле һөҙөмтә бирмәһә, ҡайғырырға кәрәкмәй. Хәкиҡәт юлына Аллаһ төшөрә. Ә ҡол, барыһын да Аллаһҡа тапшырып, арымай-талмайынса, төшөнкөлөккә бирелмәйенсә, Раббыбыҙ һүҙен еткерергә тейеш. Ғаләмгә рәхмәт өсөн ебәрелгән Хөрмәтле **Пәйғәмбәребеҙ** ҙә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, «бер йәнде булһа ла уттан һаҡлап алып ҡалыу» уйы менән янған һәм Раббыбыҙҙан шундай вәхи алған:

**«(Эй, Мөхәммәт) улар иманға килмәй тип, һин үҙеңде харап итер дәрәжәлә ҡайғыраһың. Әгәр Беҙ ихтыяр итһәк, уларҙың башына Күктән бер мөғжизә индергән булыр инек, уларҙың муйыны аҫҡа килгән булыр ине»** (Шуғәрә, 26/3-4);

**«Хаҡтыр, (ий, Мөхәммәт) һин үҙең яраткан кешеләрҙе тура юлға күндерә алмаҫһың. Үҙе ихтыяр иткәндәрҙе фәҡәт Аллаһ тура юлға күндерер. Кем тура юлға керәсәкте Ул бик яҡшы белеп тора»** (Ҡасас, 28/56).

Дәғүәтебеҙ тейешле нәтижә бирмәһә лә, ул яуызлыҡты, гөнаһтарҙы туҡтатыуы һәм яҡын арала яҡшылыҡ булып әүерелеүе бик мөмкин. Дәғүәтсе тейешле һөҙөмтәне күрмәһә лә, ғәмәлдәре менән өҫтөнә йөкмәтелгән бурыс өсөн яуаплылыҡты өҫтөнән төшөрә. Яуаплылыҡ Аллаһ юлына саҡырыуҙың уңыш булып әүрелеүендә түгел, ә мөмкинлек булғанда унда ҡатнашыуында йәки ҡатнашмауында. Аллаһ хөкөмөнә бит беҙҙең ҡулыбыҙҙан килгән ғәмәлдәребеҙ сығарыласаҡ.

Шундай замандар булған: пәйғәмбәрҙәр килгән – улар артынан ярҙай халыҡ эйәргән, икенсе пәйғәмбәрҙәр килгән – улар артынан бик

аҙҙар эйәргән. Тура юлға саҡырыу эше элек пәйғәмбәрҙәргә йөкмәтелгән булһа, бөгөн Хәкиҡәт диненә саҡырыу яуаплылылығы Ислам өммәтенә тапшырылған.

Хәкиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа саҡырыуҙы тәүге нәүбәттә үҙенән, ғаиләһенән, балаларынан башлау мосолмандың күңел талабы булырға тейеш. Һәр иманлы әҙәм, Хәкиҡәт динен таратыуҙың яңы юлдарын өйрәнеп, бөтә һәләттәрен, бөтә ғилемен һәм мәҙәни мөмкинлектәрен, бөтә рухи кимәлен шул бурысты атҡарыуға йүнәлтергә тейеш. Изге Ҡөрьәндә әйтелгән бит: Хаҡ Тәғәлә ҡолдарының мөмкинлектәренән сығып ҡына талап ҡуя. Әммә, бирелгән һәләттәрен файҙаланып, игелек эшләүгә һәр кем яуаплы.

Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәкиҡәткә, игелеккә саҡырыуҙың гүзәл өлгөһөн ҡалдырған. Уның күркәм шәхесе йоғонтоһонда тәрбиәләнеүселәр ул ҡалдырған рухи ҡиммәттәрҙе байытырға тырышҡан. Тормош юлы хәкиҡәткә илтеүсе билдәләр менән биҙәлгән, беҙгә нәсихәттәр биргән **Муса** әфәнде, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, шуларҙың береһе.

Яҡты донъя менән хушлашыр алдынан, бик ҡаты ауырып ятҡанда, ул гел ҡабатлай торғайны: «Әгәр көсөм булһа, бөтә ауыл һәм ҡалалар буйлап үтер, мохтаждарҙың матди һәм рухи ҡыйынлыҡтары хаҡында һорашыр һәм ярҙамға ашығыр инем!..»

Ул үҙенең йәне-тәне, мөлкәте менән иман юлында хеҙмәт итте һәм башҡаларға өлгө булды, ғәмәлдәре, рухи ғилеме менән яралы йәндәргә шифа бирҙе. Урта Азияға юлдар асылғас, ҙур теләк менән шунда уҡталды. Көньяҡ Африкаға һәм Европаға Исламдың рухи ҡиммәттәрен, матурлығын еткереү өсөн барса көсөн һалды. Изге Ҡөрьән маҡтап « نِعْمَ الْعَبْدُ » **«Гүзәл ҡол!»** тигәндәрҙән ине ул (Сад, 38/30,44). Ошо көмбәҙ аҫтында мәңгелек яҡшы эҙ ҡалдырҙы ул. Әхүәле рухиәһе даими рәүештә нәзәкәтлелек, игелек, яҡшылыҡ менән тулы булған йәндән тик күркәм хәтирәләр ҡалды…

**Раббым! Беҙ йәшәгән шарттарҙа беҙгә йөкмәтелгәнде тормошҡа ашырырға беҙгә насип ит, Ҡиәмәт көндө беҙҙе хур итмә! Раббым! Беҙ мосафир булған был донъяла беҙҙе ғафиллыҡтан һаҡла. Бер көн килеп әле бөгөн баҫып йөрөгән ер буласағыбыҙҙы төшөндөр! Ислам нуры өлөшөбөҙ булһын, Мөхәммәт рухиәте – төйәгебеҙ булһын. Һинең һөйөүең һәм Һинең ризалығың йәннәт баҡсаларыбыҙ булһын!**

**Әмин!..**

# *Исар*

*Миһырбанлылыҡ – мосолман йөрәгендәге*
*һүнмәҫ ут. Миһырбанлылыҡ - йөрәктәребеҙ*
*аша Аллаһҡа йүнәлтеүсе, яҡынайтыусы иң*
*гүзәл хазина. Миһырбанлы мөьмин – йомарт,*
*дин юлындағы баҫалҡы хеҙмәт кешеһе һәм*
*шул уҡ ваҡытта йөрәктәрҙе тәртипкә*
*һалыусы, йәндәргә шифа биреүсе.*

# *Исар*

*(башҡалар хәжәтен үҙ хәжәттәренән өҫтөн ҡуйыу)*

Сәфәрҙә булған саҡта, **Абдуллаһ бин Йәғәфәр**, раҙыйаллаһу ғәнһү, бер баҡса янынан үтә. Баҡсала ҡара тәнле ҡол эшләп йөрөй. Ҡолға өс көлсә килтерәләр. Шул мәл уға эт йүгереп килә. Кеше уға көлсә ташлай. Эт уны ашап бөтә. Икенсеһен ташлай – уныһын да ашап бөтә. Шунан ул һуңғы көлсәһен дә ташлай. Эт уны ла ялмап ҡуя.

Был хәлде күҙәтеп торған Абдуллаһ бин Йәғәфәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, ҡолға һорау бирә:

- Хеҙмәтеңә нисек түләйҙәр?

Ҡара тәнле ҡол яуап бирә:

- Һеҙ күргән өс көлсә менән.

- Ә ниңә һин бөтәһен дә эткә бирҙең?

Ҡол әйтә:

- Бында эттәрҙе осратҡаным юҡ ине. Моғайын, алыҫтан килгән. Уның ас ҡалмауына йәнем шатлана.

- Яҡшы, тик бөгөн һин нимә ашарһың икән? - тип һорашыуын дауам итә Абдуллаһ бин Йәғәфәр, раҙыйаллаһу ғәнһү.

- Эшләп алған икмәгемде Аллаһтың бер мәхлүгенә биргәс түҙермен инде, - ти ҡол.

Абдуллаһ бин Йәғәфәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, шул саҡ ҡысҡырып ебәрә:

- Сөбхәналлаһ! Мине йомарт тигән булалар. Был ҡол минән дә йомартыраҡ!

Аҙаҡ, ҡолдо финик баҡсаһы менән бергә һатып алып, ҡолдо ирекккә ебәрә һәм шул баҡсаны уға бүләк итә. (Ғазали, Кимйа-и-Сәғәҙәт, 440)

Хәстәрле, мәрхәмәтле һәм нескә күңелле кешеләрҙе тәрбиәләгән ислам байҙар һәм ярлылар араһында дошманлыҡ һәм көнсөллөк тыуыуын булдырмаҫ өсөн, йәмғиәттә тотороҡлолоҡто, һөйөү хисен һаҡлар өсөн, иман юлындағы хәлле кешеләргә «зәкәт» түләүҙе йөкмәтә. Ислам, рухи туғанлыҡты нығытыу һәм һәр мөьминдең рухиәтен байытыу өсөн, саҙаҡа биреүгә һәм уның юғары формаһы булған **исарға** – үҙеңә кәрәк нәмәне ҡорбан итеп биреүгә - ҙур әһәмиәт бирә. Аллаһтың берлеген таныуҙан һуң, йәмғиәттә тыныслыҡ булдырырға тейешле гүзәл, һиҙгер йөрәкле, миһырбанлы кешене тәрбиәләү - диндең төп маҡсаты.

Әхүәле рухиәһе миһырбанлыҡ, мәрхәмәт менән тулы булған бындай өлгөргәнлеккә күркәм, камил сифат хас – башҡаларҙың мохтажлығын үҙеңдекенән өҫтөн ҡуйыу. Миһырбанлылыҡ – мосолман йөрәгендәге һүнмәҫ ут. Миһырбанлылыҡ – йөрәктәр аша Аллаһҡа йүнәлтеүсе, яҡынайтыусы иң гүзәл хазина.

Миһырбанлы мөьмин – йомарт, баҫалҡы дин юлы хеҙмәтсеһе һәм шул уҡ ваҡытта йөрәктәрҙе тәртипкә һалыусы, йәндәргә шифа биреүсе. Дин эшендә теләһә ниндәй эште мөхәббәт һәм мәрхәмәт менән атҡарыусы мөьмин өмөт һәм иман сығанағы ла булып тора. Йәндәргә тыныслыҡ бүләк итеүселәрҙең алғы һыҙығында килә ул. Мохтажлыҡ, ғазап, һыҙланыуҙар ҡайҙа ғына булмаһын, ул һүҙе, ҡәләме, ғәмәле менән ярҙамға ашыға. Ул ярлылар, йәберләнгәндәр янында, ғазап сигеүселәрҙең баш осонда, сөнки мөьмин иманының төп емеше – мәрхәмәт.

Кешелектең әхлаҡи нормаларын Ҡөрьән камил дәрәжәгә күтәргән. Изге Ҡөрьәнде асҡас, беҙ Илаһи «Әр-Рахман» (Мәрхәмәтле), «Әр-Рахим» (Шәфҡәтле) сифаттарын күрәбеҙ. Раббыбыҙҙың бөйөк асылы – «Мәрхәмәтлеләрҙең иң Мәрхәмәтлеһе»- ҡолдары өсөн шатлыҡлы хәбәр ҙә һәм ошо Илаһи сифаттан үҙ өлөштәрен алыуға бойороу ҙа. Раббыбыҙға һөйөү – Ул бар ҡылған һәр йән эйәһенә һөйөү һәм мәрхәмәт менән бағыу. Яратҡандар бит һөйгәне өсөн үҙен ҡорбан итергә әҙер һәм быны ул ҙур теләк менән, ихласлыҡ менән атҡара.

Йәмғиәттә хәйер-саҙаҡаның төрлө төрҙәре бар. Шулар араһында исар – башҡаларҙың мохтажлығын үҙеңдекенән өҫтөн ҡуйыу - иң ҙур дәрәжәгә эйә. Башҡалар тураһында эскерһеҙ хәстәрлек һәм үҙеңдән

мәнфәғәттәрендә ҡорбан итергә әҙер булыуҙың иң юғары дәрәжәһе һәр бер өлгөргән мөьмингә хас. **Мөхәммәт Хәким Тирмиҙигә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, һорау бирәләр:

- «Биреү» нимәне аңлата ул? - Ул шулай тип яуап бирә:

- Биреү – башҡаларҙың шатлығынан рухи ҡәнәғәтлек алыу.

Исарҙың рухи хикмәте атмосфераһына мәрхәмәтле, нескә йөрәктәр генә инә ала, сөнки кеше бөлөп китеүҙән ҡурҡмайынса бирә. Был гүзәл халәтте пәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр тормошонда күрәбеҙ. Йондоҙло ундай үрҙәрҙе һәр кем яуларға ҡадир түгел. Әммә шул офоҡтарға ни ҡәҙәр яҡынайһаҡ, хәҡиҡәт юлында шул ҡәҙәр өлөшлө буласаҡбыҙ.

**Әбү Хурайра**, раҙыйаллаһу ғәнһү, һүҙҙәре буйынса, **Пәйғәмбәребеҙгә**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер кеше килә лә әйтә:

«Эй, Аллаһ Илсеһе! Мин ас».

Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ризыҡ һорап, ҡатындарының береһенә кеше ебәрә. Әммә мөьминдәр әсәһе, раҙыйаллаһу ғәнһә, былай ти:

- Һине Пәйғәмбәр итеп ебәргән Аллаһ менән ант итәм, өйҙә һыуҙан башҡа бер нәмә лә юҡ.

Башҡа ҡатындары ла шул уҡ хәлдә икәнлеге асыҡланғас, Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләренә мөрәжәғәт итә:

- *Кем был кешене үҙенә ҡунырға алып ҡайта ала?*

Ансарҙарҙың береһе тәкдим итә:

- Мин алып ҡайта алам, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм! - һәм ҡунаҡты алып ҡайтып китә. Ҡайтҡас, ҡатынынан һорай:

- Өйҙә ашарға бирәй нәмә бармы?

Ҡатыны яуап бирә:

- Балаларҙы ашатырлыҡ саҡ ҡына бар.

Сәхәбә былай ти:

- Балаларҙы алдаштыр. Өҫтәл янына килергә уйлаһалар, йоҡларға һал. Мосафир ашай башлағас, утты һүндер. Беҙ ҙә ашаған һымаҡ булып ултырырбыҙ.

Өҫтәл артына ултыралар. Ҡунаҡ туя, ә хужалар ас ҡала.

Иртән сәхәбә Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, янына китә. Уны күргәс, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, былай ти:

- *Аллаһу Тәғәлә мосафирҙы ҡабул итеүең менән бик ҡәнәғәт булды.* (Бухари, Мәнәкибул-Ансар, 10; Мөслим, Әшрибә, 172)

✵

Аллаһтың яратҡан ҡолдарының береһе, хөрмәтле Мәхмүт Сәми Рамазан улы, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, юрист дипломы булһа ла, Аллаһ ҡолдарына ҡарар сығарыуҙа яңылышыуҙан ҡурҡып, һөнәре буйынса түгел, Тахтаҡалала бухгалтер булып эшләй. Эшенә барып етер өсөн, ул диңгеҙ катеры менән Ҡаракейға сығырға тейеш була. Саҙаҡаға аҡса экономиялау маҡсатында, ул автобусҡа ултырмай, Ҡаракейҙан Тахтаҡалаға йәйәү йөрөй. Юлға тейешле аҡсаны саҙаҡа итеп тарата. Бөйөк шәхестәрҙең тормошонда беҙ рухи һәм әхлаҡи юғарылыҡтың шундай гүзәл күренештәрен йыш күрәбеҙ.

Шәхси уңайлыҡтарын, йортон биҙәү эштәрен, көндәлек ихтыяждарын бер аҙ кәметеп, һәр кем ошо әхлаҡи юғарылыҡтан үҙ өлөшөн алырға тейеш.

Исар – йомартлыҡтың үре. Йомарт үҙенән артҡанын, мөмкин булғанын бирә, исар иһә үҙ хәжәттәреңдән өҙөп, башҡаларға биреү ул. Исарҙың рухи бүләктәре ҡолдоң үҙ ихтыждарын онотоуына бәрәбәр. Мәккә мөһажирҙарын ҡабул итеп, уларҙың хәжәттәрен үтәүҙе алға ҡуйған ансарҙарҙы Аллаһу Тәғәлә шулай маҡтай:

**«…Байтаҡтан әүәл Мәҙинәне ватан итеп, ихлас күңелдән иман килтергән кешеләр үҙҙәре янына күсеп килгән мөһажирҙарҙы яҡын итеп ҡаршы алырҙар, уларға бирелгән мал (ғәнимәт) арҡаһында (күпсенеп) көнләшеү хисе тоймаҫтар. Хатта үҙҙәре ҡыйын хәлдә (ас) булһалар ҙа, улар (мохтаждарҙың, мөһажирҙарҙың) ихтыяжын алға ҡуйыр. Кем нәпсеһен (малға хирыслығын) тыя белә, шул моратына ирешкәндәрҙән булыр»** (Хәшр, 59/9).

✵

Ярмук алышында үлемесле яра алған, тамаҡтары кипкән өс мөһажир, ыңғырашып һыу һораған дуҫтарының тауышын ишетеп, турһыҡтан һыу

эсеү хоҡуғын бер-береһенә тапшыра. Тик уларҙың береһе лә һыуһынын ҡандырып өлгөрмәй, яҡындарының хәжәтен үҙенекенән өҫтөн күреп шәһит китә.

**Ибн Ғүмәр**, разыйаллаһу ғәнһү, һүҙҙәре буйынса, бер сәхәбәгә һарыҡ башы ебәрәләр. Теге уйланып тора: «Фәлән-фәлән миңә ҡарағанда асыраҡ, уға алып барайым». Башты алған кеше лә шундай уҡ уйҙа була. Һарыҡ башы шул рәүешле ете хужаны йөрөп сыға, ахыр килеп үҙенең тәүге хужаһына кире әйләнеп ҡайта - араларында иң асы ул була. (Ғазали, Ихйау-Улумиддин, III, 571)

**Ғүмәр**, разыйаллаһу ғәнһү, хаким булараҡ, Шамға дөйәлә һыбай инергә тейеш була, әммә ҡала ҡапҡаһынан йәйәү инә, сөнки сират буйынса хеҙмәтсеһе һыбай барырға тейеш була - күңел йомартлығының, киңлегенең күркәм миҫалы был. Күреүебеҙсә, саҙаҡа матди булмауы ла ихтимал, бындай ғәмәлдәр ҙур саҙаҡаларға тиң.

Исар – ҡорбан итеүҙең юғары формаһы – үҙенде нимәнәндер мәхрүм итеп, кемдеңдер хәжәтен үҙеңдекенән өҫтөн ҡуйыу. Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләргә, разыйаллаһу ғәнһүм, әүлиәләргә, рәхмәтуллаһи ғәләйһим һәм тәҡүәлеләргә саҙаҡаларын тап ана шундай оло һөйөү менән таратыу хас булған.

**Ибн Аббас** һүҙҙәре буйынса, улдары **Хәсән** һәм **Хөсәйен**, ауырыуҙан һауығыуы өсөн, **Али** һәм **Фатима** (разыйаллаһу ғәнһүм), өс көн нәҙер ураҙаһы тоторға ниәт итә. Улдары һауыҡҡас, улар вәғәҙә иткән ураҙаларын тота башлай. Тәүге ураҙа тотҡанда, улар ифтар өсөн арпа ононан ризыҡ әҙерләй. Тик ауыҙ асырға ваҡыт еткәс, берәү ишек ҡаға – был ас хәйерсе була. Изге күңелле ғаилә, Аллаһ ризалығы өсөн ризыҡтарын уға биреп, һыу менән ауыҙ аса. Икенсе көндөң ифтарында йәнә ишек ҡағалар – был етем бала була. Ғаилә, булған ризығын уға биреп, йәнә һыу менән ауыҙ аса. Өсөнсө көндөң ифтарында әсир ярҙам һорап килә. Был юлы ла үрнәк алыуға лайыҡлы түҙемлек, кешелеклелек менән улар ризыҡтарын әсиргә бирә.

Үҙең тураһында уйламайынса, киң күңел менән бирелгән саҙаҡалар, кешеләрҙең хәленә инә белеү әҙәмдең әхүәле рухиәһен юғары кимәлгә күтәрә, офоҡтарын күтәрә. Изге аяттарҙа ла был сифаттарға эйә булғандар маҡтап телгә алына.

Аллаһу Тәғәлә әйтә:

**«Үҙҙәре лә фәҡир булыуға ҡарамаҫтан, һуңғы ризыҡтарын мохтаждарға, йәтимгә, әсир кешегә бирер. Улар хәйерселәргә: «Беҙ һеҙҙе Аллаһ ризалығын алыр өсөн ашатабыҙ, һеҙҙән бер түләү ҙә, рәхмәт әйтеүегеҙҙе лә көтмәйбеҙ. Ысындан да, беҙ ситен (ауыр) һәм хәтәр бер көндөң ғазабынан ҡурҡабыҙ», - тип әйтерҙәр. Бына шуның арҡаһында, Аллаһ ул көндө уларҙы афәттән ҡотҡарыр, сырайҙарына нур өҫтәр, күңелдәренә ҡыуаныс бирер»** (Инсән, 76/8-11).

Сәғәҙәт осоро ваҡытынан йәнә бер күренеш.

Бәҙер һуғышынан һуң, әсирҙәр икешәр-өсәрләп сәхәбәләргә бүлеп бирелә. Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, улар менән яҡшы мөғәмәлә итергә ҡуша.

Әсирҙәр араһындағы **Әбү Ғөзәйр**, Мусғаб бин Ғүмәйрҙең ҡустыһы былай тип хәтерләй: «Ашарға ваҡыт еткәс, мин әсирлектә булған ансарҙар финиктар менән генә хушһынды, ә икмәк һәм аш тәмләткестәрҙе миңә бирҙеләр. Мин быға уңайһыҙландым, ризыҡты уларға тәҡдим иттем. Тик улар алманы, сөнки Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әсирҙәрҙәргә яҡшы мөнәсәбәт күрһәтергә ҡушҡан». (Рамаҙаноглу Мәхмуд Сами, *Бәдир Газүәси,* с. 93)

✵

Киң күңеллектә, исарҙа Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән берәү ҙә ярыша алмай. Йомартлыҡтың иң үрендә һәр саҡ ул тора.

Ул диндең асылын аңлата, ҡолдарҙы тура юлға баҫтыра, астарҙы ризыҡландыра, наҙандарҙың күҙен аса, мохтаждарға, ауырлыҡтарға осрағандарға кәрәкле ғилемде бирә, үҙен дә, мөлкәтен дә һис йәлләмәйенсә Аллаһ юлында сарыф итә.

**Сафуан бин Умаййа** ҡөрәйш мөшриктәренең юғары ҡатламынан булһа ла, Хунайн һәм Таиф янындағы алыштарҙа Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән бергә була. Джирандағы ғәнимәт Сафуанды шаҡ ҡатыра, быны Пәйғәмбәр, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, күреп ҡала һәм һорай:

- *Нимә, оҡшаймы?*

- Эйе, - ти Сафуан.

- *Ал бөтәһен дә, һинеке булһын!* - тип бойора Пәйғәмбәр, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм.

Тулҡынланыуын йәшерә алмайынса. Сафуан былай ти:

- Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йөрәгенән башҡа бер йөрәк тә былай йомарт була алмай.

Аҙаҡ ул шәһәҙәт һүҙҙәрен әйтә һәм ислам динен ҡабул итә. (Вакиди, Мағази, II, 854-855)

Исар – юғары выждандлыҡ нуры. Уйлап ҡараһаң, Пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уның сәхәбәләренең, тәҡүәлеләрҙең йомартлығы, киң күңеллелеге арҡаһында иманһыҙлыҡтарына йәбешеп ятҡан күпме кәфер тура юлға баҫҡан, мөьминдәр араһында дуҫлыҡ һәм һөйөү нығынған.

Пәйғәмбәр, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, кешеләрҙең бер генә үтенесен дә кире ҡаҡмаған. Бер тапҡыр ул 99 мең дирһәм ала. Шуларҙы септәгә таратып һала ла тиненә ҡәҙәр ярлы-ябағаға саҙаҡа итеп тарата.

## Тәҡүәлек (Бирр)

*«Үҙеңә иң ҡәҙерле булған нәмәне бүләк итеп биреү»* Ҡөрьәндә **«бирр»** (тәҡүәлек) атамаһы аҫтында телгә алып кителгән – исар кеүек үк, ҡорбандарға һәләтле оло һөйөүҙең сағылышы был.

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һис шикһеҙ, күркәм холоҡтоң бөйөк үрнәге. Күп һанлы миҫалдарҙан күреүебеҙсә, ул ваҡ мәсьәләләрҙә лә иман юлындағы арҡаҙаштарының хаҡын алға сығарған. Бына шуларҙың береһе:

Бер заман **Рәсүлуллаһ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ике мисүәк яһар өсөн ағас ботағы ҡырҡып ала. Мисүәктәрҙең береһе тура, икенсеһе кәкерерәк була. Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, кәкреһен үҙенә ҡалдырып, тураһын эргәләге сәхәбәгә һона. Сәхәбә әйтә:

- Был тигеҙ мисүәк һинең өсөн яҡшыраҡ булыр ине, Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм!

Рәсүуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уға былай тип яуап бирә:

*- Бер көн килеп, дуҫлығыбыҙ бер генә сәғәтлек булһа ла, дуҫтарыбыҙҙың хаҡын үтәү-үтәмәүебеҙ һораласаҡ.*

Был ғәмәле менән Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, эргәндәгеләрҙең хаҡын юғарыраҡ ҡуйыу кәрәклеген, уларҙың хәжәтен өҫтөнөрәк ҡуйыу кәрәклеген йәнә бер тапҡыр төшөндөрә. (Ғазали. Ихйау Улумиддин,II, 435)

Киләһе риүәйәт шундай саҙаҡаларҙың баһаһын күрһәтә.

Бер заман сәхәбәләр Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, рухи хикмәт тулы әңгәмәһен тыңлар өсөн, Мәсет-Нәбигә йыйыла. Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, изге аятты уҡый:

لَنْ تَنَالُواْ الْبِرَّ حَتَّى تُنفِقُواْ مِمَّا تُحِبُّونَ
وَمَا تُنفِقُواْ مِن شَيْءٍ فَإِنَّ اللّهَ بِهِ عَلِيمٌ

**«Һеҙ һөйөклө әйберҙәрегеҙҙе (мал-мөлкәт, саҙаҡа, зәкәттәрегеҙҙе Аллаһ юлында) сарыф итмәһәгеҙ, изгелеккә ирешә алмаҫһығыҙ. Һеҙ нимә сарыф иткәнегеҙ-итмәгәнегеҙҙе лә Аллаһ белеп тора»** (Әлү Ғимран, 3/92).

Ишеткәндәр мәсеттәгеләрҙе ныҡ тулҡынландыра, һәр кем, саҙаҡа итеп нимә бирә алам, тип баш вата башлай. Ҡапыл сәхәбәләрҙең береһе тора. Уның йөҙө, ул **Әбү Талха** була, илаһи нур бөркөп тора. Был ваҡытта уның Мәсет-Сәғәҙәт янында 600 финик пальмаһынан торған, үҙе бик яратҡан баҡсаһы була. Әбү-Талханың саҡырыуы буйынса, ул баҡсала Пәйғәмбәребеҙ ҙә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йыш була һәм, әлбиттә, уның килеүе бәрәкәт өҫтөнә бәрәкәт өҫтәй.

Әбү Талха былай ти:

«Эй Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм! Ошо ҡалалағы баҡсам – Байруха - минең иң яратҡан милкем. Ошо ваҡыттан һуң мин уны Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бирәм. Аллаһ миңә тәҡүәлек бүләк итер һәм мәңгелек донъяла ризыҡландырыр, тип өмөтләнәм. Шуға күрә, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, баҡса менән Аллаһ нимә бойора, шуны эшлә». (Бухари, Вәсайа, 17)

Әбү Талханың изгелеге, юғары выжданлығы кешеләргә нисек тәьҫир итеүен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Кешеләр күңелендә бөрөләнгән

иман Әбү Талха баҡсаһы име емешләнә, Исламдың алтын быуаты башлана.

✵

Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, осто-осҡа саҡ ялғап йәшәгәндәрҙе лә саҙаҡа бирергә дәртләндерә. Мәҫәлән, иң ярлы сәхәбәләрҙең береһе **Әбү Заррға**, разыйаллаһу ғәнһү, былай ти:

- *Эй Әбү Зарр! Аш бешергәндә, һыуҙы күберәк һал, күршеләреңде һыйла!* (Мөслим, Бирр, 142)

Мөьмин, ҡара төндәге ай нуры кеүек, нурлы, һиҙгер йөрәкле, нескә күңелле, шәфҡәтле, йомарт булырға тейеш.

Бөгөн етди хәйриә эштәре өсөн мөһим мәл етте. Һәммәбеҙ йәберләнгәндәр, мохтаждар хәлендә ҡалыуы ихтимал. Шуға күрә ауырыуҙарға, мохтаждарға, ғәриптәргә, яңғыҙҙарға, астарға саҙаҡа – Раббыбыҙға беҙҙең рәхмәтебеҙ. Ҡулыбыҙҙа булғандар менән мохтаждарға ярҙам ҡулы һуҙайыҡ; уларҙың ризалығы һәм шатлығы әхүәле рухиәбеҙҙе байытһын, Әхирәттә терәк, йәннәт баҡсаларында бәхет булып әүерелһен.

**Эй Раббым! Миһырбанлығыбыҙ рухи тормошобоҙҙоң тиңһеҙ хазинаһына әйләнһен! Эй Раббым! Ғаләмгә рәхмәт өсөн ебәрелгәндең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм Уға эйәргәндәрҙең фиҙакәрлегенән беҙгә лә өлөш сығар!**

**Әмин!**

# *Шөкөр итеү - истиғна*

*Истиғна – эске тәбиғәтендәге етешһеҙлектәрҙе еңеп, илаһи серҙәрҙе танып белеүҙә камиллыҡҡа ирешкән тәҡүәләр һәм иманлылар сифаты. Уларҙың әхүәле рухиәләре бай, улар булғанына шөкөр итә һәм артығын теләмәй. Рухиәте бай йөрәк тыныслыҡҡа ирешә. Изге хәҙистә әйтелгәнсә, ҡәнәғәтлек – осо ла ҡырыйы ла күренмәгән хазина.*

# *Шөкөр итеү - истиғна*

Сәхәбәләр, бөтә милкен ҡалдырып, Мәккәнән Мәҙинәгә һижрәт иткәс, Аллаһ Илсеһе, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөһажирҙар һәм ансарҙар араһында туғанлыҡ ептәрен нығытыуға күп көс һала. Мәҫәлән, ансарҙарҙан булған **Сағд бин Раби** һәм мөһажир **Абдррахман бин Ауф**, раҙыйаллаһу ғәнһүмә, дуҫлаша. Сағд бин Раби Абдрахман бин Ауфҡа былай ти:

- Мин ансарҙарҙың иң хәллеһе. Милкемдең яртыһын һиңә бүлеп бирәм. Бына минең милкем, ал.

Шөкөр итеп, үҙ хәленә һис тә зарланмаған Абдррахман бин Ауф, раҙыйаллаһу ғәнһү, шулай тип яуап бирә:

- Ҡулыңдағы милкеңә Аллаһ бәрәкәт бирһен, тик мин уға мохтаж түгел. Һин миңә баҙарға юл күрһәт һәм шул етер...

Абдррахман бин Ауф, раҙыйаллаһу ғәнһү, баҙарға бара һәм сауҙа эшенә тотона. Эштәре гөрләп алға бара, килеме арта, тиҙ арала байып китә.

Ваҡыт үтә, һәм мөьминдәр Исламдың ҡеүәтен һәм сәскә атыуын күрә. Бер заман ифтар ваҡыты етә, уға ризыҡтарҙың бер нисә төрөн килтерәләр һәм уларға моңһоу ҡарап былай ти:

*«**Мусғаб бин Умайр** шәһит киткәс, уны кәфенләр өсөн әйбер тапманыҡ. Кәфенләргә тип алған туҡымабыҙ бик бәләкәй булып сыҡты, мәйеттең аҫҡы өлөшөн урағас, өҫкө өлөшө асыҡ ҡалды. Ахыр беҙ уның өҫкө өлөшөн ураныҡ та аҫҡы өлөшөнә хуш еҫле үләндәр яптыҡ һәм шул көйө ерләнек. **Хәмзә**, раҙыйаллаһу ғәнһү, шәһит үлеменә дусар булғас, кәүҙәһен ҡарт ҡатындар уранып йөрөгән япма менән урап ерләнек.*

*Миңә Аллаһу Тәғәлә был донъяла иҫ киткес күп ниғмәттәр бирҙе. Мәңгелек тормошта быларҙың ҡоһоро төшөрмө икән минең башыма?!*

*Был донъяла тотоноп бөтөп, Әхирәттә сауапһыҙ ҡалырмынмы икән? Аллаһ алдында уның ниғмәттәре өсөн нисек яуап тотормон?!»* - шунан ул күҙ йәштәре менән ризығын ҡалдырып тороп китә.

Донъя ниғмәттәренә ҡарата Исламдың бөйөк кешеләренең аскетлығы уларҙың **зухд** (донъя ләззәттәренән ситтә тороу) һәм **истиғна** (булғанына шөкөр итеү) хәлендә булыуын иҫбатлап тора – былар ҡолдоң Аллаһ юлына ихлас бирелгәнлеге күренеше. Был донъяла «зухд» – Раббыбыҙға оло һөйөү һәм унан ҡурҡыу – әҙәмде башҡа бәйләнештәрҙән азат итә, «истиғна» иһә аскеттарса, дәрүиштәрсә йәшәүҙең юғары кимәле.

Истиғна – эске тәбиғәтендәге етешһеҙлектәрҙе еңеп, илаһи серҙәрҙе танып белеүҙә камиллыҡҡа ирешкән тәҡүәләр һәм иманлылар сифаты. Уларҙың әхүәле рухиәләре бай, улар булғанына шөкөр итә һәм артығын теләмәй. Рухиәте бай йөрәк тыныслыҡҡа ирешә.

Изге хәҙистә әйтелгәнсә, **ҡәнәғәтлек – осо ла ҡырыйы ла күренмәгән хазина**, (Дайлами, Мүәснәд, 4699) Раббыбыҙға яҡынайған йөрәк рухи байлыҡ һәм тыныслыҡ таба. Шөкөр итә белгән, ҡәнәғәтлек кисергән йөрәк матди нәмәләр хаҡында ҡурҡыу, борсолоуҙан азат. Күңеле менән мәңгелектә булған рух өсөн фани донъя биҙәктәренең әһәмиәте юғала. Ошо халәттә йәшәгән әүлиәләр, Аллаһтың яҡын дуҫтары, ғәмәлдәре менән тарихта яҡты эҙ ҡалдырған.

Хәлиф **Ғүмәр ибн әл-Хаттаб**, разыйаллаһу ғәнһү, идара иткән саҡта Сүриә, Фәләстән, Мысыр һәм Иран ерҙәре Ислам Хәлифлеге ҡулына күсә. Византия һәм Ирандың байлыҡтары хәлифлектең баш ҡалаһы – нурлы Мәҙинәгә ағыла. Мөьминдәр муллыҡта йәшәй. Әммә хәлиф Ғүмәр, разыйаллаһу ғәнһү, рухиәте бейеклеге юғарылығынан иҫәпһеҙ күп байлыҡтарға күңел һалмай, йома вәғәздәрен эҫке кейемдә үткәрә, ярлы йәшәй, ваҡыты-ваҡыты менән бурысҡа ла ингеләй. Ул ҡаҙнан бик аҙ ғына аҡса ала, шуға гел мохтажлыҡта була.

Хәлиф Ғүмәр ибн әл-Хаттабтың, разыйаллаһу ғәнһү, арҡаҙаштары был хәл менән килешкеһе килмәй, хәлифтең хеҙмәт хаҡын арттырырға теләй, туранан-тура ул хаҡта әйтергә ҡыймағас, ҡасандыр Мөхәммәттең, саллаллаһу үә сәләм, ҡатыны булған Хафсаға мөрәжәғәт итә. **Хафса**, разыйаллаһу ғәнһә, был турала атаһына әйткәс, Рәсүлуллаһтың, саллаллаһу үә сәләм, йыш ҡына финиктан башҡа ашарына бер нәмәһе лә булмағанын күргән Ғүмәр, разыйаллаһу ғәнһү (Мөслим, Зухд, 36), уға былай ти:

- Ҡыҙым! Рәсүлаллаһтың нисек ашап-эскәнен, нисек кейенгәнен хәтерләйһеңме?

- Эйе, иң кәрәгенән башҡа нәмәбеҙ юҡ ине, - ти ул.

Хөрмәтле Ғүмәр, разыйаллаһу ғәнһү, дауам итә:

*- Ике якын дуҫым (Пәйғәмбәр, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм Әбү Бәкер, разыйаллаһу ғәнһү) һәм мин бер юлдағы мосафирҙар инек. Тәүгеһе (Пәйғәмбәр, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бараһы еренә барып етте. Икенсеһе Әбү Бәкер, разыйаллаһу ғәнһү, шул юлдан барып, уға ҡушылды. Мин, өсөнсө булып, дуҫтарымды ҡыуып етергә теләйем. Әгәр йөгөм кәрәгенән артыҡ булһа, уларҙы ҡыуып етә алмам тип ҡурҡам! Әллә һин минең был юлда өсөнсө булыуымды теләмәйһеңме*? (Шахбандерзаде Әхмәт Хилми, Ислам Тарихы, I, 367)

Ғүмәр, разыйаллаһу ғәнһү, хәлифтең быңдай инанысы йөрәгенең юғары ынтылышынан тыуған әлбиттә. Бик күп риүәйәттәрҙә уның Ислам әҙәбен нығытыуға йүнәлтелгән изге ғәмәлдәре бәйән ителә. Шик юҡ, бөйөк кешеләргә халыҡ хөрмәт менән ҡарай, тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәр ваҡытта ла уларҙың өлгөһөнә эйәрмәй.

Көслө характерлы, үҙенә ныҡ ышанған, барына шөкөр итеп йәшәгәндәрҙең юғары әҙәбе, кешелеклелеге - бөтә өммәткә нәсихәт һәм һабаҡ.

Аллаһ Илсеһе, салләллаһу үә сәләм, шәхесенең күркәм сифаттарына һоҡланып, уның артынан барған сәхәбәләр әйтә торған булған: *«Исламға килгән кеше үҙенә етерлек ризыҡ менән тулыһынса хушһына».* (Тирмиҙи, Зухд, 35).

Улар бер нәмәне яҡшы аңлаған: Ғаләм Нурын, салләллаһу үә сәләм, үҙ нурына әйләндермәй тороп, улар был мөһабәт каруанды ҡыуып етеп ҡушыла алмаясаҡ. Улар - Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тәрбиәһен алғандар, бөтә өммәт өсөн лайыҡлы үрнәк. Иман юлындағы иптәшеңдең хәжәтен үҙеңдекенән алға ҡуйыу һабағын башлап улар бирә.

**Ғәйшә**, разыйаллаһу ғәнһә, былай тип һөйләй:

*«Рәсүлуллаһ йортонда беҙ туйғансы ашағаныбыҙ булманы. Теләһәк, мөмкин булыр ине. Тик беҙ исарҙы хуп күрҙек (имандағы кәрҙәштәребеҙҙең хаҡын юғарыраҡ ҡуйҙыҡ)».* (Байхаки, Шуаб, III, 61/1396)

**Йәбир**, разыйаллаһу ғәнһү, Хәндәк алышы ауырлыктары тураһында былай тип һөйләй:

«Без, траншея ҡазғанда, киң яҫы ташҡа тап булдыҡ. Был турала Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәбәр иттек, һәм ул беҙҙең янға килде. Ҡулына кәйлә алып, ул яҫы ташҡа һуҡты, һәм таш, әйтерһең ҡомдан эшләнгән кеүек, таралды ла төштө. Мөғжизәне ҡарап торғандар шуны күрҙе: Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, билбауына, ауырлығы менән аслыҡты кәметеү өсөн, таш бәйләнгәйне – беҙ бит өс көн ас торҙоҡ, беҙҙе ашатыусы булманы. Мин шунда уға былай тинем:

- Эй Рәсүуллаһ! Мин өйгә ҡайтып киләйем әле. - Өйгә ҡайтҡас, мин ҡатынымдан һораным:

- Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙҙең хәленә тыныс ҡарай алмайым. Ашарға өйҙә берәй нәмә юҡмы?

- Әҙерәк арпа һәм кәзә бәрәсе бар, - тине ул.

Мин кәзә бәрәсен һуйҙым, ҡатыным икмәк бешерә башланы. Итте утҡа ҡуйғас, мин Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, киттем.

- Беҙҙең әҙерәк ризыҡ бар. Һеҙҙе һәм йәнә бер нисә кешене үҙебеҙгә саҡырабыҙ, - тинем мин.

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мин һораны:

- *Күпме ризығығыҙ бар?* - Мин һөйләп бирҙем.

- *Күп, етмәһә тәмле икән! Ҡатыныңа әйт: итте уттан алмаһын һәм икмәкте мейестән сығармаһын,* - тип ҡушты ул. Шунан сәхәбәләргә әмер бирҙе: *«Торогоҙ!»* Мөһажирҙар ҙә, ансарҙар ҙа уның саҡырыуына йәһәт кенә урынынан ҡуҙғалды.

Мин ғаиләм янына ҡайттым (ризыҡтың әҙ булыуы, саҡырылғандарҙың күбәйеп китеүе мине ҡаушатҡайны):

- Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөһәжирҙәр, ансарҙар һәм уларға ҡушылғандар беҙгә килә, - тинем мин.

Ҡатыным һорай һалды:

- Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ризығыбыҙҙың күпме булыуы тураһында һорашманымы ни?

- Эйе, һорашты, - тинем мин.

- Улайһа, борсолма, - тине ул.

Бөтәһе лә килгәс, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, барыһын да тәртипкә саҡырып, былай тине:

- *Инегеҙ, төрткөләшмәгеҙ,* - аҙаҡ үҙе икмәк телде, өҫтөнә ит киҫәктәре һалды, һурпа ҡойҙо һәм сәхәбәләргә таратты. Кем килгән, барыһы ла туйғансы ашаны. Ризыҡ хатта артып ҡалды. Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғаиләмә ҡарап былай тине:

- *Үҙегеҙ ашағыҙ һәм күршеләрегеҙҙе һыйлағыҙ. Сөнки бөтәһе лә аслыҡтан интегә».* (Имам Навави, Хәҙистәр менән Ислам, 363-сө бит)

Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер нисә сәхәбәһе менән ашҡа саҡырылыуы тураһындағы был изге хәҙистә уның «өммәтем, өммәтем,» тип борсолоуының сере асыла. Табын артында, сәхәбәләренең өгөтләүенә ҡарамаҫтан, үҙе ашамай, ризыҡ тарата, аҙаҡ өй хужаларының, уларҙың күршеләренең ашауын һорай – былар Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, иҫ киткес шәфҡәтлелеге, миһырбанлығы хаҡында һөйләй һәм Ҡиәмәттә уның шәфәғәтенә өмөт уята.

Ғаләмгә рәхмәт өсөн ебәрелгән Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ярлы саҡта ла, муллыҡта ла Аллаһтан ҡурҡып, тотанаҡлы булып, әҙгә шөкөр итеп, гел Раббыбыҙға һыйына:

*«Эй Аллаһ! Әҙ ризыкты ла Мөхәммәт ғаиләһенә етерлек ит».* (Бухари, Рикак, 17)

Ғәйшә, разыйаллаһу ғәнһү, һүҙҙәре буйынса, бер тапҡыр уларға ҡунаҡҡа килгән ҡатын, Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, септә ябылған урын-ерен күргәс, бик аптырай. Ул йүгереп ҡайтып китә һәм түшәк, юрған күтәреп килә. Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ятҡан урыны үҙгәреүен күргәс, ризаһыҙлығын белдерә:

- *Эй Ғәйшә! Урынымды кире йәй. Аллаһ менән ант итеп әйтәм, әгәр теләһәм, әмеремә буйһоноп, алтын-көмөш тауҙары артымдан эйәреп йөрөр ине.* (Әхмәт бин Ханбал, Китабуз-Зухд, 30)

Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәҙистәрендә асып һалынған һәм уға хас булған **«зухд»** (аскетлыҡ), **«тәҡүә»** (Аллаһтан ҡурҡыу) сифаттарын йыш ҡына дөрөҫ аңламайҙар. Ҡайһы берәүҙәр уны донъя байлыҡтарына, тирә-йүндә булғандарға битарафлыҡ тип ҡабул итеlә. Ә бит матди саралар менән ҡылынған ғибәҙәттәр Аллаһ алдында

юғары ҡимməткə эйə. Изге Ҡөрьəндə был турала 200 тапҡыр əйтеп кителə. Исламдың биш бағанаһының икəүһе – хаж ҡылыу, зəкəт биреү - хеҙмəт хаҡың булыуҙы ғына түгел, матди мөмкинлектəрҙе лə күҙ уңында тота. Пəйғəмбəребеҙҙең, саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм, «биреүсе ҡул алыусы ҡулдан юғарыраҡ» тигəн һүҙҙəре ғибəҙəттең был төрҙəре өсөн тейешле килем туплауға тырышлыҡ һалырға кəрəклекте аңлата. Дин тарафынан зухд хуплана тиеүгə был һис тə ҡаршы килмəй.

Гөнаһҡа һəм моңһоҙлоҡҡа батмаç өсөн, «зухд» (аскетлыҡ), «тəҡүə» (Аллаһтан ҡурҡыу) сифаттарын файҙаланып, булғанына шөкөр итергə кəрəк. Əммə истиғна (шөкөр итə белеү) матди нəмə түгел. Зухд һəм **истиғна шуны аңлата: донъя эштəре менəн шөғөллəнгəндə, уларға йөрəгеңде бəйлəргə ярамай**. «Зухд» (аскетлыҡ) ярлы, хəйерсе булырға тейешһең тигəнде аңлатмай, сөнки был мөьмин йөрəгенең халəте.

Илаһи тəҡдир буйынса, ҡыçынҡы тормошта йəшəгəн, əммə йөрəге менəн донъя байлыҡтарына ҡыҙығып йөрөгəн əҙəм зухд һəм истиғнаға эйə була алмай. Зухд һəм истиғна Илаһи ихтыярға мəжбүри буйһоноуҙы аңлатмай, ул - аңлы рəүештə йөрəгеңде донъя байлыҡтары əсирлегенə элəгеүҙəн һаҡлау.

Түбəндəге бəйəн быларҙы яҡшыраҡ аңларға ярҙам итер.

Бер заман **Шаһ Наҡшибандтың**, рəхмəтуллаһи ғəлəйһи, уҡыусыһы булған **Мөхəммəт Парса** хажға китеп барышлай Багдад ҡалаһында аҡса алмаштырыу менəн шөғөллəнгəн егетте күрə. Уның шөғөлөн күреп, хажи күңелһеҙлəнə һəм былай тип уйлай:

«Ҡайһылай йəл! Был егет Раббыбыҙға хеҙмəт итеү урынына донъяның ваҡ-төйəгенə сумған!..» Əммə егеттең йөрəгенə күңел күҙе менəн бағып, ул шуны аңлай: уның ҡулдары донъя эштəре менəн мəшғүл, ə йөрəге иһə Раббыһы менəн, Уны зекер итə...

Хəҙер инде ул шулай уйлай:

«Аллаһ ихтыяры! Ҡулында – килем, йөрəгендə – Аллаһ!..»

Мəккəгə барып еткəс, Мөхəммəт Парис, рəхмəтуллаһи ғəлəйһи, Ҡəғбə япмаһына илап һыйынған кешене күрə. Был əҙəмдең ғəмəлдəрен, Аллаһҡа ялбарыуын күреп, уның башына шундай уй килə:

«Мин дə шулай илай һəм Аллаһҡа ялбара алһам ине».

Күңел күҙе менән был әҙәмдең йөрәгенә баҡҡас, ялбарыуҙарының, күҙ йәштәренең фани донъя байлыҡтары менән бәйле булыуын күрә, йөрәгенә көйөнөс тула. Тимәк, донъя эштәре менән мәшғүл булғанда ла мәңгелектәге тормошобоҙ хаҡында онотмау лазым.

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әҙәмде ғаләм һыуҙары буйлап йөҙгән карапҡа оҡшатҡан:

*«Карап аҫтындағы даръя уны алға йөҙҙөрөр.*

*Тулҡын күмеп китһә карапты, һыу төбөнә батырыр».*

Хәҡиҡәттә, ер байлыҡтарына йөрәгеңде бәйләү Аллаһтан баш тартырға мәжбүр итә. Изге Ҡөрьән, мөлкәтте һәм балаларҙы «фетнә» тип атап, мөьминдәрҙе был хәүефтән киҫәтә. Шуға күрә донъя эштәре менән мәшғүл булғанда, йөрәгеңде ғафиллыҡтан һаҡларға кәрәк. Әгәр йөрәк ер байлыҡтарына һөйөүҙән азат түгел икән, уның кескәй генә бер киҫәге лә Аллаһтан баш тартыуы ихтимал.

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Был донъяның ләззәттәре һәм байлыҡтары – киләсәк тормоштоң сәнскеләре һәм сәнскеле күгән ҡыуаҡтары».* (Хаким, Мустадрак, IV, 345)

Икенсе хәҙистә әйтелә:

*«Был донъя рәхәт, күренеше күркәм. Һүҙ юҡ, Аллаһ, һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙҙе, ниәттәрегеҙҙе белер өсөн, һеҙгә уның өҫтөнән хакимлыҡ биргән. Бәс, шулай булғас, был донъянан һаҡланығыҙ...»* (Мөслим, Зикр, 99)

Бер тапҡыр иртәнге намаҙға мәсеткә китеп барғанда, мин ҡырағай тауыш менән бесәйҙәр олоғанын ишеттем. Шунда ярһыған арыҫландар шикелле бер-береһенә ҡарап ҡатҡан һәм бер-береһенең өҫтөнә ябырылырға әҙер торған ике бесәйҙе күрҙем. Уларҙың арҡа йөндәре үрә торған. Береһе саҡ ҡына ҡуҙғалған хәлдә, икенсеһе ташланып йолҡҡолай башларға әҙер. Янындарында быуып үлтерелгән сысҡан ята – тап шул табыш уларҙы сәкәләштергән дә инде. Был ике бесәй бәләкәс кенә сысҡан өсөн алыша. Береһе икенсеһенән йәрәхәт алыуҙан да ҡурҡмай, һәр береһе сысҡанды үҙенеке итергә тырыша.

Бик ғибрәтле күренеш. Бесәйҙәр үле сысҡандан баш тартһалар, ваҡиғалар нисегерәк бөтөр ине икән тигән уй ҙа килде башҡа. Фани до-

нъя тормошонда ҡасып барған өлөштән күберәкте йолҡоп алырға маташып, мәңгелек донъяла юғалтыу ғазабын татығандарға оҡшай был. Быуып ташланған сысҡан – ер ләззәттәре, теләктәре, өҫтөнлөктәр, хакимиәт, даншөһрәт. Ошо өс көнлөк донъяның ваҡ-төйәге, ялтырауыҡтарына алданып, әҙәм мәңгелек тормошонда бәхет-сәғәҙәттән мәхрүм ҡала, ҡыҙғаныс, ифрат та ҡыҙғаныс хәл.

Ҡол үҙенең бөтә теләктәрен ваҡытлы донъя менән бәйләй, хаталы маҡсаттар ҡуя. Аллаһу Тәғәлә әҙәм балаларын киҫәтеп, былай ти:

كَلَّا إِنَّ الْإِنسَانَ لَيَطْغَى أَن رَّآهُ اسْتَغْنَى إِنَّ إِلَى رَبِّكَ الرُّجْعَى

**«Юҡ бит, кеше барыбер аҙғынлыкта хаттин ашыр. Байып алғас, мин Аллаһҡа мохтаж түгелмен, тип әйтер. Әй, әҙәм балаһы! Яуап тоторға һин Аллаһ хозурына ҡайтасаҡһың»** (Ғәләҡ, 96/6-8).

Матди байлыҡтарҙы көҫәгән, рухи яҡтан етлекмәгән кеше улар өсөн арымай-талмай көрәшә. Теләгәне ҡулына инһә, күктең етенсе ҡатына менгәндәй шатлана. Теләгәне тормошҡа ашмаһа, ҡайғынан сәсрәй яҙа. Милкең, вазифаң, ризығың өсөн кәрәгенән артыҡ борсолоу кешене матди донъя ҡолона әүерелдерә.

Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, был турала ҡат-ҡат киҫәткән:

*«Кем барса хәстәрен бергә туплап, уны мәңгелек донъя хәстәренә әүерелдерһә, Аллаһ был донъяла борсоған барса нәмә өҫтөнән уға хакимлыҡ бирер. Кем кәрәгенән артыҡ донъялығын хәстәрләһә, ҡайғырһа, Аллаһ ул йөрөгән юлдарҙың теләһә ҡайһыһында уға һәләкәт ебәреүе ихтимал».* (Ибн Маджа, Зухд, 2)

Сәхәбәләренә мөрәжәғәт итеп, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Аллаһ менән ант итәм, һеҙҙең фәкирләнеп китеүегеҙҙән ҡурҡмайым. Һеҙҙең алда ымһындырғыс донъя байлыҡтары асылғас, һеҙгә ҡәҙәр йәшәгәндәр менән булған кеүек, шуларға эйә булыр өсөн, уларға оҡшап үҙ-ара бәхәсләшә, хөсөтлөккә бирелә башларһығыҙ, тип ҡурҡам».* (Бухари, Рикак, 7)

Шуға күрә донъя байлыҡтарына кәрәк ҡәҙәр генә иғтибар бүлегеҙ, улар хаҡында ҡайғырыуҙы йөрәгегеҙгә индермәгеҙ.

Донъя - Ғаләмдәр Раббыһы Батшалығының бер тамсыһы ғына. Аллаһы Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бойора:

وَمَا هَذِهِ الْحَيَاةُ الدُّنْيَا إِلاَّ لَهْوٌ وَلَعِبٌ وَإِنَّ الدَّارَ الْآخِرَةِ
لَهِيَ الْحَيَوَانُ لَوْ كَانُوا يَعْلَمُونَ

**«Был донъя тормошо уйын ғына, күңел асыу ғына – башҡа нәмә түгел. Ысын тормош – ул Әхирәт тормошо. Был турала шик булыуы мөмкин түгел. Улар шуны белһә (фани донъяла гөнаһ ҡылмаҫ) ине»** (Ғәнкәбут, 29/64).

Хәҡиҡәтте асҡандар был донъяға күңел бағларға кәрәкмәгәнде яҡшы аңлай. Уларҙың берҙән-бер теләге – Аллаһу Тәғәләнең ризалығын алыу. ***Йунус Эмрэ*** нисек күркәм әйткән:

*Ниңә яратырға ҡулыңдағын,*
*Булмағанға ниңә көйөргә.*
*Һине һөйөп кенә мин йыуаныс табам,*
*Һин генә тик кәрәк, Һин генә.*

Наҙандарҙың күҙен быуған аҡсалар, банк иҫәптәре, дәрәжәләр, йәмғиәттәге урын, билдәлелек, нәпселе теләктәр – имен йөрәктәр өсөн быларҙың хаҡы һуҡыр бер тин. Аллаһтың һайлам ҡолдары булған әүлиәләр һәм тәҡүәле мөьминдәр Аллаһтың ихтыяры менән һәр саҡ ҡәнәғәт, үҙҙәренең инаныстарына һәр саҡ тоғро, фани донъя ҡармаҡтарына ҡаршы уяу һәм һаҡ.

**Яхъя бин Муаз**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, шулай тип әйткән:

*«Ғариф (йәшерен серҙәргә эйә булғандар), Әхирәтте – уң ҡулына, донъяны һул ҡулына алып, йөрәген Аллаһу Тәғәләгә оҙата. Аллаһтан башҡа уны бер нәмә лә ҡыҙыҡһындырмай».*

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми** *«Мәснәүиҙәр»*ендә былай ти:

*«Донъя – Аллаһ хаҡында мәғлүмәтһеҙлек. Аҡсалар, ебәктәр, ҡатындар, балалар. Нимә һине Аллаһтан айыра – шул һинең донъяң, фани донъя тормошоң».*

Истиғна – Аллаһты һөйөп, шөкөр итеп йәшәү – милеккә, байлыҡҡа ҡаршы килмәй. Әммә милек йөрәгеңдә булырға тейеш түгел, йөрәгеңдә һәр саҡ Аллаһ булырға тейеш.

Хакимлыҡ яратыу, лидер булырға ынтылыу, идара итергә һәм беренсе булырға тырышыу - Аллаһты онотторға мәжбүр иткән иң хәтәр тоҙаҡтар. Донъя тарихынан хакимлыҡҡа үрләүселәрҙең, теше-тырнағы менән үҙ урынын һаҡлап ҡалырға тырышыусыларҙың ниндәй аяуһыҙлыҡ, ҡатылыҡ менән эш итеүҙәрен беләбеҙ. Ислам тарихында ғына Аллаһҡа тоғро булғандарҙың хакимлыҡҡа, дәрәжәләргә ҡыҙмауын күрәбеҙ. Иң көслө, иң абруйлылар, әгәр ихтыяж тыуһа, һис икеләнеүһеҙ идаралыҡты башҡаларға тапшырған. Исламдың берлеге хаҡына хакимлыҡтан баш тартҡан өсәүҙең юғары выжданлығы, фиҙакәрлеге хаҡында әйтмәү мөмкин түгел.

Шуларҙың беренсеһе – Мөхәммәт, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ейәне хөрмәтле **Хәсән**, разыйаллаһу ғәнһү. Ул, алты ғына ай идара иткәндән һуң, ике община мәнфәғәте бәрелеше арҡаһында дәүләтте бүлдермәҫ өсөн, власты Муғавияға тапшыра; уның рухи өлгөргәнлеге сәйәси бәхәстәрҙе һәм ҡан ҡойошто туҡтата.

Икенсе бөйөк кеше – **Иҙрис Битлиси**. Ул, ҡылыс менән түгел, һөйөү менән генә ҡоралланып, көнсығыш территорияларҙы Осман хәлифлегенә ҡуша.

Өсөнсөһө – Джазайира һәм башҡа күп ерҙәрҙең хакимы булған һәм уларҙы Осман хәлифлегенә индергән **Барбарос Хәйретдин Паша**.

**Сөләймән пәйғәмбәр**, ғәләйһис-сәләм, йөрәген милек, байлыҡ, хакимлыҡтан азат иткән өсөн, үҙен хәйерселәргә индерә. Иртән торғас, ул хәйерселәр янына килә һәм, баҫалҡылыҡ һаҡлап, улар араһында ултыра.

**«Хәйерсе хәйерселәр янында булырға тейеш»,** - ти ул.

Әммә был эшләмәй хәйер һорап йөрөргә кәрәк тигәнде аңлатмай.

*«Биреү-бирмәүҙәрен белмәйенсә хәйер һорап ултырғансы, бау алып, тауҙарҙа сытыр йыйыу, уны һатып, донъя көтөрлөк акса эшләү якшырак – ошо рәүешле Аллаһ һеҙҙең намыҫығыҙҙы һаҡлар».* (Бухари, Зәкәт, 50-53; Насаи, Зәкәт, 85)

Хәҙис-шәриф хеҙмәт кешеһен юғары баһалай. Хәлле, көслө мөьмин артыҡ килемен хәйриә эштәренә тотона, башҡа кешеләргә эш урындары булдыра, ҙур теләк менән изгелектәр эшләй. Ул түбәндәге хәҙис маҡтап телгә алғандарҙың береһе:

*«Иң якшығыҙ – башкаларға файҙа килтергәне».* (Суюти, әл-Джамигүс-Сәғир, II, 8)

Ер тормошонда үҙ өлөшөңдө эҙләү хата түгел, донъя ҡоло булып, уға рухыңды урларға рөхсәт итеүең, һаранлыҡ күрһәтеп, дини бурыстарыңды, дин юлындағы ғибәҙәттәреңде ситкә ҡуйыуың хата. Оноторға ярамай: аҡсаның урыны кесә һәм янсыҡ, йөрәк түгел!

Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Йәнеңде донъяға бәйләмә, һәм һине Аллаһу Тәғәлә яратыр; кешеләрҙә булғанға ҡарама, ул сакта кешеләр ҙә һине яратыр».* (Ибн Маджә, Зухд, 1)

**Аллаһым! Һинән Һине һөйөүҙе, Һине һөйгән кешене һөйөүҙе һәм Һинең һөйөүеңә ирештергән ғәмәлде һөйөргә теләйем. Аллаһым! Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Сөннәһенә эйәреп, Һиңә күп шөкөр иткәндәрҙән, барса ғәмәлдәребеҙҙе һинең өсөн ҡылғандар иҫәбенән ит беҙҙе. Барса теләктәребеҙ, ынтылыштарыбыҙ, һөйөүебеҙ Һинең ихтыярыңда булһын!**

**Әмин!**

# *Сауҙаның әхлаҡи нигеҙҙәре*

*Беҙ тормош көтөү өсөн килемде Аллаһ хәләл иткән юлдар менән табырға һәм уны Ул хәләл иткән юлдарға тотонорға тейешбеҙ. Был тормошта сауҙа эшен һайлаған аҡыллы сауҙагәргә, Аллаһ юлынан тайпылмайынса, барыһынан да бигерәк мәңгелектәге килемен ҡайғыртыу лазым.*

# *Сауҙаның әхлаҡи нигеҙҙәре*

Бер заман **Рәсүлуллаһ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, иген һатҡан кешене осрата.

*«Сауҙа нисек бара?»* - тип ҡыҙыҡһына ул.

Әҙәм эштәре хаҡында һөйләй башлай. Шул ваҡыт Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үәхи төшөрөлә:

«Ҡулыңды игенгә тыҡ!»

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡулын ашлыҡҡа тыға һәм уның еүеш икәнлеген төшөнә. Шуға күрһәтеп, ул былай ти:

*«Еүеш игенде өҫкә һалһаң ине һин! Алдаусылар беҙҙән түгел».* (Мөслим, Иман, 164)

Хәҙистән күреүебеҙсә, Исламдың иҡтисади системаһы сауҙаның төп принциптары итеп кеше һәм йәмғиәткә хеҙмәт итеүгә йүнәлтелгән намыҫлылыҡты, ғәҙеллекте алған.

Сауҙа ул – тауарҙың етештереүсенән ҡулланыусыға күсеүе; башланғыс капитал булыуын да, хеҙмәт һалыуҙы ла талап итә; килем алыу мөмкинлеген дә, зыян күреү мөмкинлеген дә үҙендә йөртә. Килем килтергән сауҙа шәриғәт тарафынан рөхсәт ителә генә түгел, ул хупланған эшмәкәрлеккә ҡарай. Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, *«Килемдең ундан туғыҙ өлөшө сауҙанан»* (Суюти, әл-Джамигүс-Сәғир, I, 113) тигән һүҙҙәренең асылын аңлау уның ни өсөн хупланыуын төшөнөргә ярҙам итә. Икенсе яҡтан, хаж һәм зәкәт – Исламдың биш бағанаһының икәүһе – хәлле мөьминдәргә ҡағыла, был да шәриғәт хуплаған юлдар менән байып китеүгә бер этәргес. Хәҙис-шәрифтә әйтелгән:

*«Биреүсе ҡул алыусыныҡынан юғары»* (Бухари, Зәкәт, 18). Ул үрҙә әйтелгәндәрҙе дөрөςләп, биреүселәрҙән булыуҙы хуплай.

Милек һәм байлыҡ сығанағы булған сауҙа тураһында һүҙ барғанда, йәнә бер хәҙисте күҙ уңында тотоу лазым:

*«Һәр өммәттең үҙ һынауы бар. Минең өммәтемдең һынауы – байлыҡ».* (Ибн Ханбал, IV, 160)

Сауҙалағы аҡса эшләү ниәте әхүәле рухиәнде әсирлеккә алған фетнәгә әйләнеүе ихтимал. Ҡомһоҙ әҙәм көршәк кеүек, ҡорһағы тулһа ла, ауыҙы ябылмай. Ул көршәккә тотош йыулғаны ҡойорға уйлаһаң да, фәтүә юҡ, ташып ағасаҡ ҡына. Ҡомһоҙ әҙәм усаҡ йәки мейес тә кеүек: утын һәм күмер ташланған ут һүнмәй, артабан ялҡынланып яна. Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡомһоҙлоҡ хаҡында былай тигән:

*«Әҙәм балаһының ике үҙәнде тултырырлыҡ байлығы булһа, ул өсөнсөһөн һорар. Ер генә уның ҡомһоҙлоғон баςыр».* (Бухари, Рикак, 10; Мөслим, Зәкәт, 116)

Ошо гөнаһлы әүәςлеккә эйәрһә, әҙәм ҡылған хәйлә, этлектәрҙең осоҡырыйы күренмәς. Күпме халыҡтарҙың юҡҡа сығыуына сәбәпсе булған ул. Күпме дыуамал моңһоҙ рәүештә ғүмерен заяға үткәрә. Тарихта бөтә замандарҙа бихисап байлыҡ эйәләренең хәйерселәр, йәберләнгәндәр, яңғыҙҙар, тол ҡатындар, етемдәр, мохтаждар файҙаһына хәйер-саҙаҡалар таратырға, зәкәттәр түләргә, изге эштәр атҡарырға мөмкинлеге булып та, киреһенсә уларҙы талау, рәнйетеүҙе хуп күреүҙәрен беләбеҙ...

Дин рухыбыҙға йөк булған тәнгә донъялыҡта бәхет, ләззәттәр бирергә вәғәҙә итмәй. Киреһенсә, рухыбыҙ тәнебеҙҙе, нәпселәребеҙҙе ауыҙлыҡлап торорға бурыслы. Сауҙа һәм коммерция, нәпсебеҙҙе бәйҙән ысҡындырып, ҡыςҡа ваҡыт эсендә фани донъяла ла, Әхирәттә лә бөлдөрөүе ихтимал... Алыпһатарҙар менән тулған, бурҙар, ришүәт алыусылар оялаған иςәпһеҙ-хисапһыҙ контролдә тотоусы органдары булған йәмғиәттә ғәҙел сауҙагәрҙе табыу тормошҡа ашмаς хыял булып ҡала.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Изге Ҡөрьән аша **Шөғәйеп** ҡәүеменә ҡараған Мәдйән һәм Әйкә халҡын сауҙаның әхлаҡи нигеҙҙәрен боҙған өсөн юҡ итеүе хаҡында иςкәртә. Шуға күрә алдау, мутлыҡ юлы менән хәрәм килем алыу, көсһеҙҙәрҙе бөлдөрөү – халыҡты һәләк итәсәк оло гөнаһ. **Рәсүлуллаһ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Һауаланыуын, тәкәбберлеген күрһәтеп торған алтын-көмөш тәңкәләр һәм кейемдәр әһеле һәләк булһын! Әгәр ундай бәндәгә килем керһә (үҙе теләгән), ул ҡәнәғәт, килем килмәһә, ул ҡәнәғәт түгел (Илаһи тәҡдиргә ҡаршы сыға)».* (Бухари, Рикак, 10; Ибн Мажда, Зухд, 8)

Хөрмәтле **Ғүмәр**, разыйаллаһу ғәнһү, уның алдында берәйһен маҡтаһалар, өс нәмәне һорар булған:

- Һин уның күршеһе булдыңмы? Уның менән юлдаш булдыңмы? Уның менән сауҙа алып барҙыңмы?

Әңгәмәсеһенән кире яуап алһа, Ғүмәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, әйткән:

- Һин уның башын һелкеп Ҡөрьән уҡып ултырғанын күргәнһеңдер.

Әҙәм быны раҫлаған:

- Эйе, Ғүмәр, раҙыйаллаһу ғәнһү! Мин тап шуны күрҙем.

Ғүмәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, шунан һуң уға былай тип бойорған:

- Улайһа маҡтама уны! Ихласлыҡ уның елкәһенән күренеп тормай.

Ғүмәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, тышҡы билдәләргә алданмаҫҡа, кешенең ғәмәлдәренә һәм кешеләргә мөнәсәбәтенә ҡарарға ҡуша. Әгәр әҙәмдең ниәттәре, маҡсаттары ғәмәлдәренә ҡарап һыналмаһа, уның хаҡында хаталы фекер тыуыуы ихтимал.

Сауҙа һәм бизнес әҙәмдең эске халәтен асып һала. Ислам ҡануниәте буйынса, һатыусы һәм алыусының тауарҙы һатҡанда тәнҡитләүе, хаҡын күтәреү маҡсатында төрлө алымдар ҡулланыуы тыйыла. Алыусының мохтажлығынан файҙаланып, хаҡты күтәреү ҙә тыйыла. Алдашыу, йәшерен баҙар булдырыу, проценттар алыу, кәметеп үлсәү, ант итеү, йәмғиәткә зыянлы хәрәм тауар һатыу гөнаһ.

Сауҙа ҡағиҙәләрен **Пәйғәмбәребеҙ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бик яҡшы аңлата:

*«Эй, һеҙ, сауҙагәрҙәр! Һис шикһеҙ, шайтан һәм гөнаһ сауҙаға ҡыҫыла. Сауҙағыҙҙы саҙаҡа биреп таҙартығыҙ. Улар анттарығыҙҙың, кәрәкмәгән һүҙҙәрегеҙҙең ғәйебен юйыр»* (Тирмиҙи, Буйю, 4/1208);

*«Ҡиәмәттә сауҙагәрҙәр, Аллаһтан ҡурҡып, изгелек юлында булғандарынан башҡалары гөнаһ эйәләре булып тергеҙелер»* (Тирмиҙи, Буйю, 4/1210);

*«Сауҙалағы ант итеүҙәр килемде арттырһа ла, аҡсаларҙың бәрәкәтен кәметә»* (Бухари, Буйю, 26).

Тауарының ысын хаҡын белмәгән һатыусыға был турала әйтеү кәрәк. Файҙа алыу өсөн, һатыусының тәжрибәһеҙлеген, ышаныусанлығын файҙаланыу алдашыу була. Аллаһтан ҡурҡып, Уның ризалығын алырға теләгән мосолмандар был мәсьәләлә үҙенә уғата талапсан.

**Имам Әғзәм**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, уға ебәк кафтан һатырға килтергән ҡатындан хаҡын һорай. Тегеһе әйтә:

- Йөҙ дирһәм, имам! - Имам уға ҡаршы килә:

- Юҡ, ул ҡиммәтерәк тора...

Аптыраған ҡатын хаҡты йөҙ дирһәмгә күтәрә. Имам Әғзәм был хаҡҡа йәнә алыуҙан баш тарта. Ҡатын хаҡты тағы йөҙ дирһәмгә күтәрә, аҙаҡ тағы йөҙ дирһәмгә...Әммә имам Әғзәм йәнә ҡаршы сыға:

- Юҡ, ул дүрт йөҙ дирһәмдән ҡиммәтерәк тора.

Был юлы инде ҡатын әйтмәй булдыра алмай:

- О имам! Бәлки, минән көлөүҙән туҡтарһығыҙ!

Шунда имам хаҡтарҙы яҡшы белгән кешене саҡырырға ҡуша. Килгән кеше кафтандың биш йөҙ дирһәм тороуы хаҡында белдерә, һәм имам Әғзәм уны ошо хаҡҡа һатып ала.

Ғәҙеллектән ситләшеү, тауарҙың етешһеҙлектәрен йәшереү, үлсәүгә иғтибарһыҙлыҡ әҙәмде күңелһеҙ эҙемтәләргә алып килеүе ихтимал.

Ошондай әхлаҡи мөхиттә тәрбиәләнгән Ғосман дәүләте йәмғиәттә шундай тәртипте ныҡ тота, һәм был мосолман булмағандарҙы ла аптыраш-та ҡалдыра. Султан Фәтих Стамбулды яулап алғас, ике поп менән булған хәл быны асыҡ миҫалы. Улар аҙыҡ-түлек кибетенән ризыҡ алырға була. Һатыусы уларға былай ти:

- Мин магазинымды бөгөн генә астым. Һеҙ тауарҙы күптән һатыу иткән күршемдән алығыҙ.

Поптар уның күршеһенә китә, тегеһе шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлай:

- Мин магазинымды бөгөн генә астым. Тауарҙы күптән һатыу иткәндәрҙән һатып алығыҙ.

Поптар бер кибеттән икенсеһенә йөрөй һәм һәр ерҙә бер үк яуапты ала. Ахыр килеп, улар тауарҙы тәүге һатыусынан ала.

Юғары әхлаҡи мөхиттә тәрбиәләнгән ата-бабаларыбыҙ үҙен фиҙа ҡылырға әҙер булған. Ислам әҙәбе башҡалар тураһында уйлауҙы бойора. Ялған, мутлыҡ – мосолман өсөн ауыр гөнаһ. Мосолман ялғанға, алдашыуға бармаҫ. Шул уҡ ваҡытта ялғанға ышаныу – иҫәрлек билдәһе, был да мосолманға хас нәмә түгел. Кешелеккә юл күрһәтеүсе итеп ебәрелгән пәйғәмбәрҙәргә ғәҙеллек (сыдыҡ) һәм зирәк аҡыл (фатанат) хас. Күрһәтелгән юлдан барыусы мосолман аҡыллы һәм һиҙгер булырға тейеш. Аллаһу Тәғәлә ялғансыларҙың алдағына ышанмаҫҡа бойора:

**«Аллаһ һеҙгә мал бирҙе, һеҙ ул малды аҡылһыҙҙарға (мал тота белмәгәндәргә, аҡылы сәләмәт булмағандарға) бирмәгеҙ…»** (Ниса, 4/5).

Түбәндәге хәҙис ялғансыларҙы киҫәтә. **Пәйғәмбәребеҙ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Өсәү менән Аллаһу Тәғәлә Ҡиәмәттә һөйләшмәйәсәк, уларға ҡарамаяаҡ, уларҙы аҡламаясаҡ, һәм уларға ҡаты яза әҙерләнгән».* Әбү Зарр, раҙыйаллаһу, Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, быны өс тапҡыр ҡабатлауын ишетеп һорай:

- Юҡҡа сыҡһын улар, уңыш күрмәһен, бәхет күрмәһен. Ә кем һуң улар, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм?

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яуап бирә:

*- Кейемдәрен ергә ҡәҙәр һөйрәтеп йөрөүселәр (тәкәбберлектәре, һауаланыуҙары арҡаһында); биргәне менән битәрләүселәр; тауарын ялған анттар менән һатыусылар!* (Мөслим, Иман, 171)

Икенсе яҡтан, Ислам йәшерен баҙар (иддиха) булдыйырыуҙы, хаҡтарҙың күтәрелеүен көтөп, тауарҙы йәшереп тотоуҙы тыя. Йәмғиәтте милкең менән эксплуатациялау булып тора был. Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, иддихар төҙөүселәргә бәддоға уҡый. Изге хәҙистә әйтелә:

*«Баҙарға тауарын ҡыйыу рәүештә сығарған һатыусы үҙ өлөшөн алыр; хаҡтар күтәрелеүен көтөп, тауарын сығармай торғаны ҡарғыш алыр».* (Ибн Мааджа, Тиджарат, 6)

Ислам килем алыуға һәм уны тотоноуға ҡағылышлы сауҙа итеү принциптарын аса. Изге Ҡөрьән яҡтарҙың ризалығы, ҡәнәғәтлеге тәьмин ителмәгән сауҙа эштәрен хәрәм тип иҫәпләй:

**«Эй, мөьминдәр! Малдарығыҙҙы үҙ-ара һатыу итеп, килешеп кенә ашағыҙ. Хәрәм юл менән, әшәкелек менән (тартып алып) малдарығыҙҙы ашамағыҙ. Бер-берегеҙҙе үлтермәгеҙ. Шик юҡ, Аллаһ һеҙҙе ярлыҡаусы»** (Ниса, 4/29).

**«Үлтермәгеҙ»** һүҙе мөһим, тәрән мәғәнәгә эйә. Тормоштоң рухи яғын ситкә ҡуйып, йәһәннәм әһеле булып ҡуймағыҙ тигән киҫәтеү ҙә бар унда. Икенсе яҡтан, шуны ла иҫтә тотоу кәрәк: кеше милкенә ҡул һуҙыу һәм килем артынан сабыу арҡаһында, аралар һыуына, енәйәттәр эшләнә. Ислам билдәләгән сауҙа принциптарын үтәп кенә төрлө мөшкиләләрҙе булдырмаҫҡа мөмкин. Шуларҙың иң мөһиме - рибанан баш тартыу.

Риба – килем алыуға ҡоролған, хәүеф тә, көс һалыу ҙа талап ителмәгән эксплуаациялау күренеше. Ул байҙы артабан байытыуҙың, ярлыны артабан йәберләүҙең сәбәпсеһе. Риба хаҡында һиҫкәндерерлек хәҙис бар. Үҙенең һуңғы хөтбәһендә Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйтә:

*«Мин рибаның бер төрөн дә ҡабул итмәйем!»* - шул рәүешле ул рибаны тыя һәм хәрәм тип иғлан итә.

Изге аяттарҙа Аллаһу Тәғәлә был күренештең сиктәрен билдәләй:

**«Риба – (үтескә биреп торған аҡсанан-малдан арттырып алынған хәрәм керем) ашағандар иһә шайтан зәхмәте һуҡҡан тилеләр кеүек ҡәберҙәренән торасаҡтар. Улар: «Сауҙа итеү ҙә риба кеүек бит» ,-тигәндәре өсөн шундай хәлдә ҡалырҙар. Аллаһ алыш-биреште хәләл итте, рибаны хәрәм ҡылды. Әгәр кемдер Аллаһтан (риба алмаҫҡа) әмер килгәс, рибанан баш тартһа, әмер килгәнгә ҡәҙәр алған рибаһы ғәфү ителер, уның эше Аллаһ хөкөмөндә булыр. Кем ҡабаттан (был аят ингәндән һуң) риба ала ҡалһа, улар йәһәннәм әһелдәре булыр һәм улар шунда мәңгегә ҡалыр. Аллаһ рибаның бәрәкәтен ебәрер (үтесте арттырып алған кеше барыбер ул аҡсаның рәхәтен күрмәҫ). Саҙаҡа биргән кешенең малдарын арттырыр. Аллаһ (рибаны, хәрәмде хәләл тип таныҒандарҙы) кәферҙәрҙе, гөнаһлыларҙы яратмай»** (Бәҡара, 2/275-276).

Риба ҡулланғандарға Аллаһ ҡаты асыуын белдерә:

**«Иман килтергән кешеләр! Мосолман икәнһегеҙ, Аллаһтың нәфрәтенән ҡурҡығыҙ, алынмаған рибаларығыҙҙы алмағыҙ. Шулай эшләмәһәгеҙ, Аллаһҡа һәм Пәйғәмбргә ҡаршы һуғыш асҡан кәферҙәр кеүек булырһығыҙ. Был эштәрҙән тәүбә итһәгеҙ, малығыҙ-**

**байлығығыҙ – маяғыҙ үҙегеҙгә ҡалыр. Шулай ҡылһағыҙ, һеҙ ғәҙелһеҙ булмаҫһығыҙ, үҙегеҙгә лә ғәҙелһеҙлек булмаҫ»** (Бәҡара, 2/278-279).

Кем Ғаләмдәр Раббыһына һәм Уның пәйғәмбәренә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғаләмдәр Ғорурлығына ҡаршы сыға һәм еңә ала?!

Әгәр мосолмандарҙан берәү риба менән шөғөлләнһә, ул йә милкен юғалтасаҡ, йә иманына зәғифлек киләсәк.

Был тыйылған юл менән барыусының язаһы көслөрәк булһын өсөн, уның милке артасаҡ, йәғни, был донъяла килемдәре артасаҡ. Аллаһу Тәғәлә бер нәмәне лә иғтибарһыҙ ҡалдырмай, Ул ваҡыт бирә. Гөнаһкәрҙәрҙең язаһы Ҡиәмәткә ҡәҙәр кисектерелеүе ихтимал. Илаһи киҫәтеү айырым иғтибар талап итә, юғиһә был аҙашҡандарҙың хәле ифрат та ауыр буласаҡ. **Йәбир**, раҙыйаллаһу ғәнһү, әйткән:

«Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, процент алыусыларҙы, уларҙы биреүселәрҙе, проценттарҙы яҙып тороусыларҙы, килешеү шаһиттарын ҡарғаны һәм әйтте: *«Улар барыһы бер-береһенә тиң...»* (Мөслим, Мусаҡат, 106)

Берәүгә бурысҡа аҡса биргән **Әбү Хәнифәнең**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, миҫалы ни ҡәҙәр гүзәл. Бурысын алғанға тиклем бөйөк имам, процент тип иҫәпләнмәһен тип, бурыслы кешеһенең ағастары күләгәһендә лә тормаған.

Шик юҡ, процентты тыйыу хикмәт менән тулы һәм уның күп сәбәптәре бар. Төп сәбәптәре, бер яҡтан, эшһеҙлектең артыуы, яһалма рәүештә хаҡтарҙы күтәреп ебәреү, мин-минлек, байлыҡ туплауға хирыслыҡ, килем артынан ҡыуыу булһа, икенсе яҡтан, үҙ-ара ярҙам, теләктәшлек, һөйөү, шәфҡәтлелек, миһырбанлыҡ кеүек дөйөм кешелек һәм әхлаҡи нормаларҙың йомшарыуы менән бәйле.

Ислам рибаны тыя, әммә мөмкинлек булғанда, Аллаһ ризалығы өсөн бурысҡа биреүҙе хуплай һәм **ауыр хәлдә ҡалған кешегә бирелгән бурыс саҙаҡанан юғарыраҡ**, тип раҫлай.

Шуға ҡарамаҫтан, һәр заманда иманлы, ғәҙел, ышанысլы булған эшҡыуарҙар һәм һатыусылар әҙселекте тәшкил итә. Шуның өсөн дә *Рәсүлуллаһ*, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тәҡүәле һатыусыларҙы шатлыҡлы хәбәр менән ҡыуандырғандыр:

*«Һүҙенә тоғро, гәҙел, ышанычлы һатыусы-мосолман Ҡиәмәттә пәйғәмбәрҙәр, изгеләр һәм шәһиттәр менән».* (Тирмиҙи, Буйю, 4; Ибн Мааджа, Тиджарат, 1)

**Имам Әғзәм әбү Хәнифә** сауҙа менән шөғөлләнгән бай кеше була. Күберәк фәнгә күңел һалғанлыҡтан, сауҙа эштәрен ул управляющийҙарына тапшыра һәм эштең хәләл сиктән сыҡмауын тикшереп тора һәм был мәсьәләлә бик талапсан була. Бер тапҡыр ул уҙағы Хафс бин Абдуррахманды туҡымалар һатырға ебәрә һәм әйтә: «О Хафс, был туҡыманың етешһеҙлектәре бар, алыусыларға шул турала һөйлә һәм осһоҙораҡ һат».

Хафс туҡыманы имам әйткән хаҡ буйынса һата, әммә алыусыларға етешһеҙлеге тураһында әйтергә онота. Имам Әғзәм был турала белгәс, Хафстан һорай: «Туҡымаларҙы кем алғанын беләһеңме?»

Хафстың алыусыларҙы белмәүен асыҡлағас, имам бөтә тауарҙы саҙаҡа рәүешендә таратырға ҡуша. Ул бит **Рәсүлуллаһтың**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, **Ғамрға**, раҙыйаллаһу ғәнһү, әйткән һүҙҙәре буйынса йәшәргә теләй:

*«О Ғамр! Хәйерле байлыҡ иманлы кеше менән нисек матур яраша».* (Әхмәт бин Ханбәл, Мүснәд, IV, 197, 202)

Минең мәрхүм атайым **Муса әфәнде**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, сауҙа эшендә хәрәмдән ҡасыуҙың әһәмиәтле һәм фатихалы ғәмәл булыуын шулай аңлатҡайны:

«Беҙҙең ислам ҡабул иткән әрмән күршебеҙ бар ине. Уның нисек мосолман булып китеүе тураһында һорағас, ул былай тип һөйләне: Аджибадамдағы плантациям буйынса күршем Раби мулланың сауҙа эшендәге гүзәл әхлағы арҡаһында мин мосолман булып киттем. Мулла Раби һөт һатып көн күрә ине. Бер көн кис ул беҙгә килде лә әйтте:

- Алығыҙ, зинһар, был һеҙҙең һөт.

Мин аптыраным.

- Нисек инде, мин һөт һорамааным.

Был нескә күңелле, әҙәпле кеше шулай тип аңлатты:

- Бер һыйырым, мин күрмәгәндә, һеҙҙең баҡсаға кереп туйынған, шуға күрә һөт һеҙҙеке. Был үлән уны туйындырып бөткәнсе, мин һеҙгә һөт алып киләсәкмен.

Шул саҡта мин әйттем:

- Ниңә ул турала һөйләп торорға, күрше? Ул бит үләнде генә ашаған. Файҙаһы һеҙгә булһын!

Әммә Раби мулла ризалашманы:

- Юҡ инде, улай булмай. Уның һөтө һеҙгә тейешле!

Мулла, һыйыры ашаған үләненән таҙарынып бөткәнсе, беҙгә шулай һөт ташыны. Был изге күңелле кешенең ғәмәле мине ныҡ тулҡынландырҙы. Күҙемдән ғәмһеҙлек япмаһы шыуып төшкәндәй булды, һәм йөрәгемә иман нуры тулды. Үҙ-үҙемә былай тинем: «**Һис шикһеҙ, шундай гүзәл әхлаҡҡа эйә булған кешенең иманы – иң гүзәл иман.** Шундай һиҙгер, тәҡүәле, камил, ихлас кешеләрҙе тәрбиәләгән дин шикләнеүгә урын ҡалдырмай!» Шунан мин кәлимәи-шәһәҙәт һүҙҙәрен әйттем һәм мосолман булдым».

Шул уҡ ваҡытта ғәмһеҙ йәшәгән кешеләрҙең хәле ниндәй ҡыҙғаныс. Изге хәҙистә улар тураһында былай әйтелә:

*«Шундай замандар етер: үҙенең өлөшөн хәләл юл менән табамы, хәрәм юл менән табамы – кешеләрҙе бөтөнләй борсомаясаҡ».* (Бухари, Буйю, 7, 23)

Илаһи ҡанундарҙы боҙған гөнаһкәрҙәр яза ала – уның күберәге Әхирәттә буласаҡ. Хәрәм юл менән табылған байлыҡтың бәләләре киләһе быуындарҙың да башына төшәсәк, ул фани донъяла уҡ күренәсәк. Халыҡ ул турала былай тип әйтә: «Олатаһы хәрәм ейгән, ә ейәненең теше төшә».

Хәрәм кергән мираҫты алыусыларҙың дөрөҫ юлға баҫа алмауы ла хаҡ, сөнки аҡсаларҙың сере бар: улар ҡайҙан килгән – шунда китә. Хәрәм юл менән йыйылған милек уны алған вариҫты гөнаһлы юлға төшөрә. Ул милек йылан кеүек, өңөнә нисек шыуышып инһә, шулай шыуышып сығып та китә.

Иман юлында файҙаланылмаған милек гөнаһтарға, иманһыҙлыҡҡа ғына этәрә. Изге аятта Муса, ғәләйһис-сәләм, быны бик матур аңлатҡан:

**«Муса әйтте: «Йә, Раббыбыҙ, ысынлыкта Һин фирғәүенгә һәм уның тоҡомна фани донъяла күпме зиннәт, күпме малдар бирҙең. Йә, Раббыбыҙ, улар (шул байлыҡ менән ҡыҙыҡтырып) кешеләрҙе һинең тура юлыңдан яҙҙырһын өсөнмө (шул муллыкты бирҙең?) Уларҙың малын юк ит, йәндәренә әрнеү һал; шундай әрнеткес язаларҙы күрмәйенсә, улар иман килтермәҫ», - тине»** (Йунус, 10/88).

Килемһеҙ ҡалыуҙан ҡурҡып, сауҙала төрлө мутлыҡтарға барыусылар ҡайһылай бахыр. Уларҙың аҡланыуҙары мәғәнәһеҙ, улар хәҡиҡәтте күрмәй, улар Илаһи өлөштөң тәҡдиргә бәйләнеүен инҡар итә. Ошо гөнаһкәрҙәр ише фекер йөрөтһәк, Аллаһу Тәғәлә һәм Уның Пәйғәмбәре, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, юлына милкен даими рәүештә саҙаҡа итеп биргән һәм ғәҙел сауҙа принциптарынан һис ҡасан ситкә тайпылмаған Әбү Бәкер, разыйаллаһу ғәнһү, сәхәбәләрҙең иң ярлыһы булырға тейеш була. Әммә, тарихтан күреүебеҙсә, ул һәр ваҡыт сәхәбәләрҙең иң байы була. Күпме тапҡыр ул бөтә мөлкәтен ҡорбан итә, тик Аллаһтың рәхмәте менән йәнә байып китә.

Беҙ килемде шәриғәт рөхсәт иткән юлдар менән эшләп табырға һәм шәриғәт хуплаған урындарға тотонорға тейешбеҙ. Иманлы һатыусы, донъя эштәре менән шөғөлләнгәндә, мәңгелек тормошобоҙ мәнфәғәттәрен дә онотмаҫ. Мәңгелек сәғәҙәт тураһында уйлап, ул Илаһи ҡанундарға нигеҙләнеп эш итәсәк. Был изге аят ундай кешеләрҙең әхүәле рухиәләрен күркәм рәүештә асып һала:

رِجَالٌ لَّا تُلْهِيهِمْ تِجَارَةٌ وَلَا بَيْعٌ عَن ذِكْرِ اللّٰهِ وَإِقَامِ الصَّلَاةِ
وَإِيتَاء الزَّكَاةِ يَخَافُونَ يَوْمًا تَتَقَلَّبُ فِيهِ الْقُلُوبُ وَالْأَبْصَارُ

**«Бар шундай кешеләр: уларҙы сауҙа менән алыш-биреш эштәре лә Аллаһты зекер итеүҙән, (ваҡытында) намаҙ уҡыуҙан, зәкәт биреүҙән айыра алмай. Улар дәһшәтле Көн килеп, йөрәктәрҙе тетрәтә торған, ҡараштар әйләнә торған Көндән ҡурҡалар»** (Нур, 24/37).

Киләһе аят аңлатҡанса, улар хаҡиҡи сауҙа алып бара. Хәҡиҡи сауҙаны Аллаһу Тәғәлә былай аңлата:

**«Аллаһтың китабын уҡығандар, намаҙ ҡылғандар һәм үҙҙәренә бирелгән ризыҡты башҡаларға күрһәтмәйенсә лә, йәшермәйенсә лә (хәйер, саҙаҡа, зәкәт) биргәндәр, зыян күрмәйенсә, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ниғмәттәргә өмөт итә ала. Сөнки Аллаһ уларға тейешле әжерен теүәл итеп бирер, ниғмәттәрен арттырып өләшер. Шик юҡтыр, Ул – киң рәхмәтле ярлыҡаусы, шөкөр иткәндәргә мул мөлкәт биреүсе»** (Фатир, 35/29-30).

**Аллаһу Тәғәлә тормошобоҙҙо ошо аяттар сере менән яҡтыртһын! Илаһи Китапты йөрәк күҙе менән уҡыу һәләтен бирһен, сәждәләребеҙҙе миғражға олғашырлыҡ түбәнселек менән ҡылырға, хәләлде ҡулланырға, исрафтан һаҡланырға һәм Ул биргән ниғмәттәрҙе Уның юлында ҡорбан итергә насип итһен!**

**Эй Раббым! Сауҙа менән шөғөлләнгәндәрҙе ғәмәлдәре менән дә, һүҙҙәре менән дә зыян ҡылыуҙан йыраҡ торған, мосолмандарға, Ватанына, халҡына игелек эшләүселәрҙән ҡыл! Ике донъя бәхетенә алып килгән изге ғәмәлдәрен еңеләйт!**

**Әмин!..**

# *Аллаһҡа бирелгән гүзәл үтес*

*Бер нимәне онотмау мөһим: тәнебеҙ, әхүәле-рухиәбеҙ һәм милкебеҙ беҙгә ваҡытлыса бирелгән, улар мәңгелек түгел. Бер көн килеп, һәммәһен уларҙың Хаҡ Хужаһына ҡалдырып, беҙ улар менән хушлашырбыҙ. Мәңгелектәге бүләктәргә ирешеү өсөн, ҡулыбыҙҙағыны Аллаһ юлында дөрөҫ сарыф итергә тейешбеҙ.*

# *Аллаһҡа бирелгән гүзәл үтес*

Оло Ҡеүәт Эйәһе төҙөгән һәм биҙәгән ғаләм – ваҡытлы төйәгебеҙ. Һынауҙар урыны булған донъя етдилек, һиҙгерлек һәм тәрән фекер йөрөтә белеүҙе талап итә. Ваҡытлы төйәгебеҙҙән бүләк рәүешендә беҙ гүзәллекте генә үҙебеҙ менән мәңгелек донъяға алып китә аласаҡбыҙ. Гүзәл ғәмәлдәр менән килгән ҡолдарына Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ниндәй бүләктәр әҙерләүе хаҡында Изге Ҡөрьәндә бер тапҡыр ғына әйтелмәй.

Саҙаҡа һәм иғәнәләр ярҙамында үҙебеҙҙә игелеклелек, йомартлыҡ, киң күңеллелек тәрбиәләүгә, хис-тойғолар юғарылығына этәрә Аллаһу Тәғәлә. Шул уҡ ваҡытта, хәленән килә, байлығы бар икән, зәкәт, ғөшөр һәм ҡорбан салыу кеүек милек менән бәйле ғибәҙәттәр ҙә фарыз ҡылына. Был изге ғәмәлдәрҙән тыш миһырбанлылыҡтан, иман һөҡланыуынан тыуған ғәмәлдәр ҙә бар, уларҙы **карзы-хәсән** йәки **гүзәл үтес** тип атарға мөмкин.

Аллаһу Тәғәлә һәр бер саҙаҡаны, иғәнәне гүзәл үтес итеп ҡабул итә һәм арттырып кире ҡайтарырға вәғәҙә бирә. Изге аятта әйтелә:

مَن ذَا الَّذِي يُقْرِضُ اللهَ قَرْضًا حَسَنًا فَيُضَاعِفَهُ لَهُ وَلَهُ أَجْرٌ كَرِيمٌ

**«Кем дә кем Аллаһҡа (изгелекле ғәмәлдәрен) бурысҡа биреп тора (йәғни, сауап өсөн изгелек ҡыла) Аллаһ уға ҡат-ҡат ниғмәт бирер һәм уның өсөн бик тә мөһим әжер булыр!»** (Хәдид. 57/11).

Мохтаждарҙы шатландырған саҙаҡаларыбыҙ үлем ҡурҡынысы алдында йәнебеҙгә тыныслыҡ бирер, һуңғы һулышыбыҙҙы ышаныс менән ҡаршы алыуға нигеҙ булыр, шуға күрә изге ғәмәлдәр ҡылыуға тағы ла күберәк тырышлыҡ һалыу кәрәк.

Ғүмер юлыбыҙҙа осраған ҡыйынлыҡтар, яҡшылыҡтар Аллаһ тәҡдиренә бәйле. Байлыҡ бирелгән хаҡ мөьминдәр, һис бер

һауаланмайынса, ҡулындағын Аллаһ ризалығы өсөн ҡуллана, йәғни, беренсенән, мохтаждарға ярҙам итә, икенсенән, иғәнәләр эшләп, Аллаһҡа үтескә бирә...

Изге Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, мөьминдең һәр саҙаҡаһы – Аллаһҡа бирелгән карзы-хәсән (гүзәл үтес). Аллаһ уларҙы «Үҙенә көтәсәккә бирелгән үтес» тип атай, бындай ғәмәлдәрҙе хуплап, уларҙың эҙһеҙ юғалмаясағын белдерә, лайыҡлы бүләк буласағын вәғәҙә итә. Изе аят буйора:

**«…Намаҙҙы дөрөҫ уҡығыҙ. Зәкәтте биреп барығыҙ һәм Аллаһ әжер бирһен тип, алдан уҡ изгелек ҡылығыҙ. Ҡылған изгелегегеҙ һеҙҙең өсөн тағы ла хәйерлерәк әжер буласаҡ. Аллаһтан ярлыҡау һорағыҙ. Шик юҡ, Аллаһ – ярлыҡаусы, сикһеҙ мәрхәмәтле»** (Муззәммил, 73/20).

Аллаһу Тәғәлә Раббыһы ризалығы өсөн иғәнәләр биргән ҡолона айырыуса мәрхәмәтле, ҡоло донъя файҙаһы, дан, шөһрәт ҡаҙаныу хаҡында уйламаһа әлбиттә. Бәс, шулай булғас, бер ғәмәлең өсөн маҡтау көтөргә кәрәкмәй, һәр ғәмәлебеҙ Аллаһ ризалығы өсөн булырға тейеш. Ҡөрьән тәүгеләрҙән булып шундай саҙаҡа биргән **Али** һәм **Фатима**, разыйаллаһу ғәнһүмә, хаҡында бәйән итә:

**«Үҙҙәре лә фәкир булыуға ҡарамаҫтан, һуңғы ризыктарын мохтаждарға, етемгә, әсир кешегә бирер. Улар хәйерселәргә: «Беҙ һеҙҙе Аллаһ ризалығын алыр өсөн ашатабыҙ, һеҙҙән бер түләү ҙә, рәхмәт әйтеүегеҙҙе лә көтмәйбеҙ. Ысындан да беҙ ситен (ауыр) һәм хәтәр бер көндөң ғазабынан ҡурҡабыҙ», - тип әйтерҙәр. Бына шуның арҡаһында, Аллаһ ул көндө уларҙы афәттән ҡотҡарыр, сырайҙарына нур өҫтәр. Күңелдәренә ҡыуаныс бирер»** (Инсән, 76/8-11).

Изге аяттар түбәндәге мәлдәргә иғтибар итергә саҡыра:

1. Иман юлындағы «туғандарыңа» өҫтөнлөк бирергә кәрәк (исар);

2. Хәйер-саҙаҡаны фани донъя мәнфәғәте өсөн түгел, Аллаһ ризалығы өсөн бирергә;

3. Иғәнәләр ярҙамында үҙеңде Ҡиәмәт көнө ҡатылығынан һаҡларға;

4. Ихлас бирелгән саҙаҡаларҙы Аллаһ ҡабул итә, ҡолон юғары күтәрә. Йөҙөн нурландыра;

5. Бындай изге ғәмәлдәр һәр мөьмин өсөн зарур.

Хаҡ Тәғәләгә шул рәүешле бирелгән үтестәрҙең әжерҙе күп тапҡырға арттырыла. Икенсе Изге аятта Аллаһу Тәғәлә Үҙенә бирелгән үтестең дәрәжәһе тураһында былай ти:

**«...Намаҙҙы дөрөҫ уҡыһағыҙ, зәкәт бирһәгеҙ, пәйғәмбәрҙәргә инанһағыҙ, уларға ярҙамсыл булһағыҙ, Аллаһка булған изге вазифағыҙҙы үтәһәгеҙ, һис шикһеҙ, гөнаһтарығыҙҙы ҡаплармын, һеҙгә арыҡтарынан һыуҙар ағып торған йәннәттәргә индерермен...»** (Маидә, 5/12).

Ибн Мәсғүд, раҙыйаллаһу ғәнһү, еткереүенсә, Аллаһка гүзәл үтес биреү хаҡындағы был аяттар төшөрөлгәс, Әбү Дарда әл-Ансари Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, килә һәм һорай:

- Ий Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм! Ысынлап та, Аллаһ беҙҙән үтескә һораймы ни?

- Эйе, Әбү Дарда, Аллаһ беҙҙән бурысҡа һорай! - тип яуап бирә Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм. Шунда Әбү Дарда уға ҡулын һуҙа ла әйтә:

- Аллаһка гүзәл үтес (карзы-хәсән) итеп мин баҡсамды бирәм!

Ибн Мәсғүд һүҙҙәре буйынса, Әбү Дард баҡсаһында 600 финик пальмаһы һәм ғаиләһе менән йәшәгән йорто була. Аллаһ ризалығы өсөн баҡсаны биргәс, ул өйөнә ҡайта ла ҡатынына әйтә:

- Ий ҡатыным! Был баҡса һәм йорттан китәйек. Мин уны Аллаһу Тәғәләгә гүзәл үтес итеп бирҙем...

Ҡатыны яуап бирә:

- Ий Әбү Дарда! Һин бик файҙалы килешеү төҙөгәнһең!

Улар балаларын һәм әйберҙәрен алып, был баҡсанан сығып китә. (Табари, Тәфсир, II, 803; Хәким, Мустадрак, II, 24)

Ике донъя бәхетен өмөт итеп, изгелекте бер һүҙһеҙ ҡабул иткәс, ислам йәмғиәтендә именлек һәм сәғәҙәт урынлаша. Киләһе миҫал да ғәҙәти түгел.

**Әлие Кедоурия** үҙ китабында бәйән итеүенсә, XIX быуат аҙағында Англия Урта Көнсығышта үҙ сәйәсәтен алып барғанда, Көнсығыш Анатолияла көслө аслыҡ башлана. Форсаттан файҙаланып, региондағы хәлде ҡаҡшатыу өсөн, инглизәр унда шпиондарын ебәрә. Әммә мәғлүмәттәр йыйылғас, ғәжәйеп һығымталар яһала. Рапортта әйтелә:

**«Бында, ысынлап та, аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ, тик аслыҡ юҡ. Һәммәһе лә бер-береһенә ярҙам итергә, бәләнән йолоп ҡалырға тырыша. Шуға күрә, ризыҡ самалы булһа ла, асығыусылар юҡ – хәлде ҡырҡыулаштырыу өсөн саралар күреп булмай!..»**

Был ауыр замандарҙа мохтажлыҡ һәм аслыҡ көсәйгәс, хәйриә эштәренә иғтибар бермә-бер арта, Изге аяттар мөхитендә тәрбиәләнгән халыҡ бер-береһенә терәк-таяныс була. Бына ни өсөн Аллаһу Тәғәлә хәйриә эштәренә ғафиллыҡтан һаҡланырға саҡыра:

**«Һеҙгә нимә булды, эй, кешеләр! Аллаһ юлында сығымдар тотмайһығыҙ. Гәрсә Күктәр һәм Ер – Аллаһтың мираҫы. (Кәферҙәрҙе) еңеп (Мәккәне) алғанға ҡәҙәр (дин юлында мал) сарыф иткән һәм һуғышҡан кеше менән еңеүҙән һуң сарыф итеп һуғышҡан кеше тиң булмаҫ. Алдағыларының дәрәжәһе һуңғыларыныҡынан күпкә өҫтөн. Шуға ла ҡарамаҫтан, Аллаһ һәр икеһенә бөйөк әжер вәғәҙә итә. Һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙ Аллаһҡа мәғлүм»** (Хәдид, 57/10).

Ислам һәм мосолмандар өсөн ауыр заманда Аллаһ ҡолдарынан күберәк фиҙакәрлек талап итә. Ҡөрьәндә ул фиҙакәрлек «карзы-хәсән»-гүзәл үтес тип атала.

Бер нәмәне онотмау мөһим: тәнебеҙ, әхүәле-рухиәбеҙ һәм милкебеҙ беҙгә ваҡытлыса бирелгән, улар мәңгелек түгел. Бер көн килеп, һәммәһен уларҙың Хаҡ Хужаһына ҡалдырып, беҙ улар менән хушлашырбыҙ. Мәңгелектәге бүләктәргә ирешеү өсөн, ҡулыбыҙҙағыны Аллаһ юлында дөрөҫ сарыф итергә тейешбеҙ. Булғанды уларҙың хаҡ хужаһына – Аллаһу Тәғәләгә тапшырмаһаҡ, Ул уны беҙҙән донъялыҡта уҡ йәки һуңғы һулышыбыҙҙа кире аласаҡ. Ләкин инде айырма ҙур буласаҡ. Тәүге осраҡта, фани донъяла Раббыбыҙ бүләк иткән байлыҡтан әҙәм үҙ ҡулы менән өлөш сығарһа, Аллаһ ул саҙаҡаны көтәсәккә бирелгән үтес итеп, сауаптарын бик күп тапҡырҙар арттырып, Үҙенең киң рәхмәте менән ҡабул итә. Ә икенсе осраҡта, әҙәм саҙаҡа биреүҙән, игелек эшләүҙән ситәләшһә, сауапһыҙ ҡала ғына түгел, матди байлыҡтар өсөн яуаплылыҡ та арта. Хөрмәтле **Пәйғәмбәребеҙ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хәйриә эштәренән баш тартыуҙың насар эҙемтәләре тураһында киҫәтеп әйткән:

«Әҙәм балаһы уйҙары менән үҙ милке тирәһендә йөҙә... Эй әҙәм балаһы! Ашар ризығыңдан, кейер кейемеңдән, киләсәктә сауап өмөт итеп

биргән саҙаҡаларыңдан башҡа бүтән милкең бармы?!» (Мөслим, Зухд, 3-4, Тирмиҙи, Зухд, 34)

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, үҙенең *«Мәснәүиҙәр»*ендә был турала бик күркәм әйткән:

*«Үлем фәрештәһе, моңһоҙ байҙы колағынан эләктереп, ғүмер йоҡоһонан уята. Хәҡикәттә, үҙе хужа булмаған милке өсөн уның ҡурҡып йәшәүен күреп көлөп ебәрә яҙа».*

**Ғәйшәнән**, раҙыйаллаһу ғәнһә, тапшырылғанса, бер тапҡыр **Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һарыҡ һуя. Иттең күп өлөшө таратылып бөткәс, ул иттең ҡалыу-ҡалмауы хаҡында һораша.

Ғәйшә, раҙыйаллаһу ғәнһү, яуап бирә:

- Беҙгә ҡалаҡ һөйәге генә ҡалды.

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уны төҙәтә:

- Ҡалаҡ һөйәгенән башҡаһы беҙгә ҡалды тиһәң, яҡшыраҡ булыр ине!.. (Тирмиҙи, Сыфатул-Ҡыйама, 35)

Шуныһы хаҡ: изге ғәмәлдәре кешенең һәр саҡ үҙе менән. Матди байлыҡтар артынан ҡыуыу зарарынан йөрәгеңде әрсәләү, әхүәле-рухиәң аһәңен емереүҙән һаҡлау, матди бәйлелектән азат булыу, йомартлыҡта һәм фиҙакәрлектә алға сығыу – былар ана шулар рәтенән.

Аллаһу Тәғәлә бәндәнең иң үкенгәне бирелмәгән саҙаҡалары менән бәйле булыуы тураһында әйтә:

وَأَنفِقُوا مِن مَّا رَزَقْنَاكُم مِّن قَبْلِ أَن يَأْتِيَ أَحَدَكُمُ الْمَوْتُ فَيَقُولَ رَبِّ
لَوْلَا أَخَّرْتَنِي إِلَى أَجَلٍ قَرِيبٍ فَأَصَّدَّقَ وَأَكُن مِّنَ الصَّالِحِينَ

**«Әжәле килгән кеше: «Раббым, миңә ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа булһа ла ғүмер бир. Валлаһи, мин саҙаҡа бирер инем, изгелектәр ҡылыр инем, тип әйткәндән күпкә әүәл Беҙ биргән ризыҡтарығыҙҙан саҙаҡа бирергә кәрәк ине»** (Мунафиҡун, 63/10).

Һаранлыҡ йәки донъя байлыҡтарына бәйлелек арҡаһында, бөтәһен вариҫтарыбыҙға ҡалдырырға тырышып, һуңғы һулышыбыҙға ҡәҙәр үҙебеҙгә бурыс иҫәптәре йыйып, хәйриә, саҙаҡа таратыу эштәренән

ҡасмайыҡ, Әхирәткә мәңгелек донъяның банкроты булып китмәйек, йәмәғәт!

Ҡиәмәт көндө һәр ҡол яуап тотасаҡ һорау ана шул йыйылған һәм сарыф ителгән милкебеҙ хаҡында буласаҡ. **Аллаһ Илсеһе**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Ҡиәмәт көндө ғүмерен нисек үткәреүе, ғилемен нисек файҙаланыуы, ҡулына ингәнде нисек сарыф итеүе, һаулығын һәм милкен нисек файҙаланыуы тураһындағы һорауҙарға яуап бирмәй тороп, ҡол урынынан да ҡуҙғала алмаясаҡ».* (Тирмиҙи, Ҡиәмәт, 1)

Ата-бабаларыбыҙ был хәҡиҡәтте яҡшы аңлаған һәм саҙаҡалар таратыуға ҙур өлөш индергән, «**вәкеф мәҙәниәтенә**» нигеҙ һалып (вәкеф - йәмәғәтселек файҙаһына васыят ителгән мөлкәт), тарихҡа ингән. Улар бер-береһе менән игелектә ярышҡан, мохтаждар өсөн ярҙам фондтары булдырған, мохтажлыҡҡа төшөп тә ярҙам һорарға теләмәгән кешеләрҙең күңелен аяп эш итергә тырышҡан. Иҫке Стамбулдың ҡайһы бер райондарында махсус рәүештә **саҙаҡа таштары** ла булдырылған.

Бөгөн ундай ташты Усҡудар районында күрергә мөмкин. Заманында улар дин юлындағы бөйөк хеҙмәттең, яҡшылыҡ ҡылыуҙа уҙышыуҙың шаһиты булған. Пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, «саҙаҡа биргәндә, уң ҡулың биргәнде һул ҡулың белмәһен» тигән нәсихәтенә эйәреп, саҙаҡа һалырға теләүселәр хәйерҙәрен төндә килеп һалып китә торған булған. Ә шунда йәшәүсе ярлылар унан үҙҙәренә кәрәк тиклемен генә алғандар, артығына оронмағандар. Мохтажлығын күрһәтергә теләмәгәндәр кәрәкле сумманы төндә барып алған. XVII быуаттағы француз сәйәхәтсеһе һүҙҙәре буйынса, ҡайһы берҙә аҡсалар аҙналар буйына тейелмәй ятҡан. Стамбулда ул таштар дүрт урынға ҡуйылған булған.

Ата-бабаларыбыҙҙың дин юлындағы ул тырышлығын яҡшы аңлайбыҙ. Һәр йәмғиәттә, һәр заманда мохтаждар булған һәм артабан да буласаҡ. Шуға күрә **«байҙар милкендә ярлы-ябағаның өлөшө бар»** тиелгән изге аяттарҙы етәкселек итеп алып (әҙ-Ҙәрийәт, 51/19; әл-Мәғәриж, 70/24-25), мохтаждарға ярҙам итеүгә тәғәйенләнгән саҙаҡа таштары урынлаштырыу, вәкеф фондтары булдырыу һәм шул уҡ ваҡытта ауыр хәлдә ҡалыусыларҙың тойғоларын аяп эш итеү мөһим. Күптән түгел генә бирәүҙәре хәйер һалыр, икенселәре алыр өсөн саҙаҡа таштарына килгән кешеләрҙең ихласлығын, күңел сафлығын йөрәгебеҙҙә һаҡларға тейешбеҙ.

**Саҙаҡа таштары йөрәктәребеҙҙе иретергә, ауыр хәлдә ҡалғандар йән йылыбыҙҙы тойорға тейеш.** Ә беҙгә, Ризыҡ биреүсебеҙгә рәхмәтле булып, Уның йомартлығына сәждәләребеҙ менән яуап биреү лазым.

Түбәндәге һүҙҙәр тормошобоҙ маяғы булһын:

*«Иң сауаплылар башҡаларға файҙалы булыусылар».* (Суйути, әл-Джами-ус-Сәғир, II, 8)

Изге аят бойора:

**«Әйт: «Раббым теләгән ҡолдарына ризыҡ бирер, теләмәгәненең ризығын кәметер. Күпме хәйер бирһәгеҙ, Аллаһ уның урынына һеҙгә ниғмәт бирер. Ризыҡландырыусыларҙың иң хәйерлеһе – Аллаһ»** (Сәба, 34/39).

Саҙаҡалар – Хаҡ Тәғәләбеҙ бүләк итеп биргәндәрҙән өлөш сығарған гүзәл үтесебеҙ, ғибәҙәттәрҙең иң яҡшыһы. Йәғни, Раббыбыҙ беҙҙән Үҙе бүләк иткәнде артабан артып торасаҡ бәрәкәтле үтес рәүешендә ала. Киткән сығымдарыбыҙҙың тине лә юғалмай, бәрәкәт, ике донъя бәхете булып ҡайта. Асылда саҙаҡаларҙың хужаһы – Аллаһ, ә уның файҙаһын күреүсе – ҡол.

Хөрмәтле **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Ерҙәгеләр һәм күктәгеләр һәммәһен Унан һорай, сөнки йәшәйештәре менән бөтәһе Уға бурыслы».*

Кеше, Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, өммәтенә ҡарауына, Ислам шәфҡәтенә лайыҡ булыуына, бар булғандарҙың иң камилы итеп яратылыуына Үҙенең йомартлығы һәм рәхмәте менән быларҙы бүләк иткән Хаҡ Тәғәләбеҙгә бурыслы.

Хәҡиҡәт юлына баҫыуы өсөн һәр йән мәңгелек юлындағы етәксебеҙ булған Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бурыслы. Һәр йән сәхәбәләргә һәм сағыу йондоҙлоҡ кеүек беҙгә Рәсүлуллаһтан, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мираҫ итеп алған юлды күрһәткән Исламдың бөйөк шәхестәренә бурыслы.

Раббыбыҙҙың һәм Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, юғары әхлағынан үҙ өлөшөбөҙҙө алып, шул мөхиттә үҫкән рауза кеүек, Раббыбыҙға яҡынайыу өсөн Ҡөрьән һәм Сөннәнең тере көүҙәләнеше булһаҡ, был бурысты ниндәйҙер дәрәжәлә ҡайтарыу мөмкин. Аллаһҡа рәхмәтле булыу – һәр ҡолдоң бурысы.

Хаҡ Тәғәләбеҙҙең бөтмәҫ-төкәнмәҫ ниғмәте, мәрхәмәтенә ҡарамаҫтан, әҙәмдең нәпсе тоҙағына эләгеүе, яйлап кешелек бәҫен, хаҡ асылын юғалтыуға алып килә. Фани донъяның ығы-зығыһына бирелеп, бәндә Раббыбыҙ тыйғандарҙың сигенән сыға икән, ул кәмһетелгәндәр, юлдан яҙғандар араһында буласаҡ. Улар башҡаларға бурысҡа батҡандар рәтен тулыландырасаҡ, асылда камил итеп яратылһа ла, мохтаждар, зәғифтәр араһында буласаҡ, хаҡ байлығын юғалтасаҡ. Бындай хәлдәргә ҡалғандар хаҡында бошоноп һәм аптырап **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, былай ти:

*«Ғәжәп түгелме был хәл? Ҡояштың туҙандан үтескә алыуы яраған эшме? Сулпан йондоҙ нурын бәләкәй генә көршәктән аламы?»*

*«Һин – барлығын бер кем дә белмәгән рух, һин – йәшерен мөйөштәрен бөрәү ҙә танып белмәгән йән. Һин халәттәр һәм үҙенсәлектәр донъяһы тотҡоно. Һин төйөнгә уралған ҡояш, ниндәй йәлһең һин!»*

Был бәйеттәрҙә хөрмәтле Мәүләнә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, кешене ҡояш менән сағыштыра. Бөтә донъя – ҡояш нурына күмелгән туҙан бөртөктәре. Әҙәм балаһының Аллаһ биргән муллыҡҡа күмелеп йәшәү урынына, теләктәрен, нәпсеһен ҡандырыу өсөн, үтә торған фани донъя байлыҡтары артынан ҡыуыуы ҡояштың туҙандан үтес һорауына бәрәбәр. Ҡояш туҙанға нисек мохтаж була алһын?!

Аллаһу Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә әҙәмгә **«Үҙ рухынан йән өрөлөүе»** хаҡында әйтә (Сад, 38/72; әл-Хижр, 15/29). Әммә күп кешеләр үҙ йәненең бөйөклөгөн, әхүәле рухиәһенең ҡиммәтен аңламай, хәҡиҡи ғилемгә эйә түгел, улар бөйөк һәм изге бүләкте – Илаһи аманатты - үтә торған матди байлыҡтар һәм ваҡытлы теләктәргә алмаштырыусылар. Улар – асыу, шәһүәт, дан, ләззәттәр көсәү һаҙлығына батыусылар. Әйтерһең рухиәт ҡояшы батҡан, яҡтыртыуҙан туҡтаған. Бәс, шулай булғас, һәр ҡол үҙ хаҡын белергә тейеш! Аллаһтың иҫәп-хисапһыҙ мәрхәмәте, рәхмәте, үҙенең барлыҡҡа килтерелгәндәрҙең иң камилы булыуын кеше иҫенән сығармауы лазым. Осо-ҡырыйы күренмәгән теләктәр, ынтылыштар әсире булырға ярамай. Нәпсеһе артынан йүгереп йөрөү әҙәмгә төҫ түгел, Аллаһ биргән йәнебеҙҙән үҙебеҙгә кәрәкте эҙләргә кәрәк.

Әхирәт донъяһына оҙатылғанға ҡәҙәр, Аллаһ ярҙамы менән мәңгелектәге сәфәргә үҙебеҙҙе әҙерләү, иманыбыҙ ярҙамында һуңғы һулышыбыҙҙы хәүеф-хәтәрҙән әрсәләү мөһим.

**Эй Раббым! Һинең алдында баш эйеп, Сикһеҙ диңгеҙ кеүек йомартлығыңдан Һинең ризалығың өсөн Һиңә гүзәл үтес итеп иң яҡшы хәйер-саҙаҡалар биреүселәр иҫәбенән өлөш бир беҙгә. Беҙгә йөкмәткән рухи һәм матди бурыстарыңды еңеләйт! Мохтаж, яңғыҙ, зәғиф ҡолдарыңдың Һиңә өнһөҙ ялбарыуҙарын ишетә торған йөрәк бир беҙгә!**

**Әмин!..**

# *Үтескә нисек бирергә һәм алырға?*

*Исламда башҡа игелектәр менән бер рәттән, бурысҡа биреп, беҙ үҙебеҙгә йөкмәтелгән ғибәҙәттәрҙе үтәргә тейешбеҙ. Иртәгә, мәңгелек төйәгебеҙгә ҡайтарылғас, байҙарҙың быңдай мөмкинлеге булмаясаҡ, ярлыларҙың да быңдай мохтажлығы ҡалмаясаҡ. Хәллеләр бурысҡа бирмәҫ өсөн сәбәп эҙләргә тейеш түгел, үтескә алыусылар ҙа, мохтажлыҡтарына һылтанып, йәмғиәттә был ғибәҙәткә кире ҡараш тыуҙырып, бурысын ҡайтарыуҙы һуҙырға тейеш түгел.*

# *Үтескә нисек бирергә һәм алырға?*

Игелектәр ни ҡәҙәр генә гүзәл булмаһын, уның ғәмәлдәге хәҡиҡи матурлығы һәм камиллығы ихласлыҡ булғанда ғына мөмкин. Шуға күрә изге аятта әйтелә:

اَحْسِنُوَاْ إِنَّ اللّٰهَ يُحِبُّ الْمُحْسِنِينَ

**«Һәр ғәмәләгеҙҙә изгелек менән эш итегеҙ. Аллаһ изгелек ҡылғандарҙы ярата...»** (Бәҡара, 2/195).

Һәр изге эш, ғәмәл, һүҙ, ғибәҙәт һ.б. уға һалынған матурлыҡҡа ярашлы тормошҡа ашырылырға һәм йөрәктән сығырға тейеш. Юғиһә һис бер кәмселекһеҙ ғәмәлдәр һәм ғибәҙәттәр ҙә, нәпселе теләктәр өйөрөлмәгенә эләгеп, зыян ғына килтерәсәк.

**Үтескә биреү һәм алыу** мәсьәләһенә бигерәк тә иғтибарлы булыу лазым. Ғибәҙәттең был төрө миһырбанлыҡ, һөйөү кеүек ике яҡ таянып эш иткән мотлаҡи принциптарға нигеҙләнергә тейеш. Ике яҡтың да күңеле игелектә булғанда, әҙәмдәр Аллаһу Тәғәләнең ризалығын алырға һәләтле һәм фәрештәләрҙекенән дә юғарыраҡ әхлаҡи кимәлгә күтәрелеүҙәре ихтимал. Был хәҡиҡәтте асыҡлау өсөн, Әбү Хурайра, разыйаллаһу ғәнһү, аша тапшырылған хәҙискә иғтибар итәйек.

Бер тапҡыр **Рәсүлуллаһ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Израил улдарынан булған бер әҙәмдең икенсеһенән бурысҡа мең динар һорауы хаҡында һөйләй. Үтес һоралған кеше былай ти:

- Яҡшы, мин һин һораған аҡсаны бирәм, тик үҙең менән берәй шаһит алып кил.

- Нимәгә ул шаһит, Аллаһ – шаһит, - ти тегеһе.

- Улайһа һинең өсөн яуаплылыкты үҙ өҫтөнә алырҙай кешене алып кил.

- Нимәгә ул, яуаплылыкты өҫтөнә алыусы – Аллаһ.

- Эйе, һин хаҡлы! - ти кредит биреүсе һәм аҡсаны билдәле ваҡытҡа ҡәҙәр биреп ебәрә.

Әҙәм аҡсаны алғас, карапҡа ултырып, тауар артынан икенсе ҡалаға китә. Ул унда сауҙа эштәре менән бер аҙ ваҡыт тора. Эштәрен тамалап ҡайтырға уйлай, тик уға кәрәкле карап булмай сыға.

Көндәр үтә, ә карап һаман юҡ. Үтесте ҡайтарыу ваҡыты ла етеп килә. Бурыслы әҙәм уны ваҡытында ҡайтарып өлгөрмәҫен аңлай. Шунан ул ҙур бүрәнә һатып ала, соҡоп унда уйым яһай, үтес биреүсегә хат яҙып һала һәм мең алтынды ла шунда һала, уйымды яҡшылап ҡаплап ҡуя. Аҙаҡ, бүрәнәне күтәреп, диңгеҙ буйына китә. Унда ул Аллаһу Тәғәләгә ялбара:

- Раббым! Мин игелекле кешенән мең алтын алдым. «Яуаплылыкты өҫтөнә алыусы – Аллаһ,» - тип әйттем. Ул миңә ҡаршы килмәне. Шаһит килтереүҙе һорағас, «Аллаһ – шаһит,» - тип әйттем. Ул риза булды. Бурысымды ваҡытында ҡайтарыу өсөн, мин мөмкин булғандың барыһын да эшләнем. Әммә беҙҙең яҡҡа ҡайтыусы карапты тапманым. Хәҙер мин бурысымды ҡайтарам һәм тик Һиңә генә өмөт бағлайым.

Шулай доға ҡылғас, сауҙагәр бүрәнәһен диңгеҙгә ташлай.

Кредит хужаһы үтескә алған әҙәмде көтә башалай. Үткән караптарҙы ҡарарға йыш ҡына диңгеҙ буйына килә. Бер тапҡыр ул яр буйындағы һыуҙа бүрәнә күреп ҡала. «Һыуҙан алайым әле, утынға ярар,» - тип уйлай. Бүрәнәне алып ҡайта, быса башлай, һәм бүрәнән мең алтын һәм хат килеп төшә.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, сауҙагәр тыуған яҡтарына ҡайта һәм, мең алтын алып, кредит хужаһына китә.

- Бурысымды ваҡытында ҡайтарыр өсөн, күп тырышлыҡ һалдым, тик ҡайтыр яҡҡа карап тапманым. Бурысыңды ал, - ти ул.

Кредит хужаһы һорай:

- Бәй, бурысыңды һин ебәрмәнеңме ни?

- Әйтәм бит, карап булманы, ҡайтырға саҡ форсат табылды, - ти сауҙәгәр күңелһеҙ генә.

Шунда кредит хужаһы былай ти:

- Бүрәнә эсенә һин һалып ебәргән мең алтынды Аллаһ миңә ҡайтарҙы инде. Аҡсаларыңды кире ал, бәхетен, бәрәкәтен күр (Бухари. Кәфәләт, 1; Буйю, 10).

Был хәҙис-шәрифтә әйтелгәнсә, Аллаһ исеменән бирелгән һүҙҙе, биргән һүҙгә ихлас тоғролоҡто Аллаһ иғтибарһыҙ ҡалдырмай, ҡабул итә. Үҙенең рәхмәтенән өҙмәй. Ғибрәтле икенсе тарих быға дәлил.

Ифтар ваҡыты етә. Икмәкхәнаға күркәм йөҙлө кеше килә. Икмәк алыусылар таралып бөткәс, ул икмәк бешереүсегә былай тип мөрәжәғәт итә:

- Улым, мин бөгөн аҡса эшләй алманым. Яҙған булһа, иртәгә түләрмен, ә хәҙер миңә бер түтәрәм икмәк бирмәҫһеңме икән?

Уның тауышы ҡалтырана, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерә. Икмәк бешереүсе әйтә:

- Эй ағай, ал, түтәрәм икмәк түгел, бөтөн икмәк ал. Хәләл булһын ул һиңә, аҡса кәрәкмәй.

Тик хәйерсе ҡарт ныҡыша:

- Юҡ, балам, түтәрәм икмәк етә... Бәлки, тағы берәйһе килер, уларға бирерһең. Минең йөҙөм түтәрәмдән артыҡ ҡыҙара алмай, артығы миңә хәләл түгел. Килештекме? Ә иртәгә мин һиңә бурысымды ҡайтарырмын.

Аптыраған икмәхана хужаһы был әҙәмгә икмәк бирә. Тегеһе, икмәкте үбеп, шым ғына сығып китә. Тар ғына урамда уның ҡаршыһына эт сыға. Ул, мөлдөрәп, ҡарттың күҙҙәренә ҡарай. Кешенең йөҙө яҡтырып китә һәм ул әйтә:

- Яртыһы һинеке булырға тейеш тигән уйҙамын! - Ҡарт икмәкте бүлеп, яртыһын эткә бирә.

Аҙаҡ ул мәсеткә юл тота. Һыу һәм икмәк менән ауыҙ аса, һәм был ризыҡтар өсөн Аллаһҡа рәхмәтен белдерә.

Икенсе көндө кибетсе уны күреп саҡырып ала һәм былай ти:

- Бынау фляғаларға анау шишмәнән һыу тултырып килтер ҙә эскә индереп кенә ҡуй әле!

Кибетсе хеҙмәте өсөн уға бер лира түләй. Ҡарт йәһәт кенә икмәкханаға юл тота һәм үтескә алған түтәрәм икмәге өсөн 250 куруш һона. Икмәкхана хужаһы күпме генә ҡаршы килмәһен, был яҡты йөҙлө кешенең ихласлығына

ҡаршы тора алмай һәм, ирекһеҙҙән атылып сыҡҡан күҙ йәштәрен һөртөп, аҡсаны ала.

Бурысҡа алған аҡсаһын ихлас түләргә теләгән кешене Аллаһ яҡлаусыһыҙ ҡалдырмай, ярҙамын бирә, ҡыйын хәлдән сығыу юлдарын аса. Әгәр бурыслы әҙәмдең һатып түләрлек милке булһа, ә ул быны эшләмәһә, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә ала. Әгәр бурыслы әҙәм иркен йәшәп, аҡсаһын юҡҡа тәләфләһә, үтескә алғанын ҡайтарыу өсөн тырышлыҡ һалмаһа, Аллаһтың бирәй ҡолоноң хоҡуҡтарын боҙһа, ул Илаһи рәхмәттән мәхрүм ҡала, сөнки Раббыбыҙ бындай нимәләрҙе ғәфү итмәй. Изге аятта Аллаһ әйтә: **«Кешеләрҙең тәүбәһен ҡабул итеүсе, саҙаҡаларҙы алыусы Аллаһ икәнен ул белмәйме ни? Шик юҡ, тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе, сикһеҙ мәрхәмәтле бер Аллаһ»** (Тәүбә, 9/104). Бында Ул, әлбиттә, ҡолдарының хоҡуғын боҙған нәмәләргә ҡағылмай.

Икенсе яҡтан, бурысын түләүҙе һуҙған әҙәм хәләл ризығына хәрәмде ҡуша. Ә кире ҡайтарыуҙы ниәт итмәй алынған үтес – мәңгелек тормоштағы бөйөк бәхетһеҙлек. Ундай гөнаһкәрҙәр тураһында **Рәсүлуллаһ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Үтескә алып, уны ҡайтарыуҙы күҙ уңында тотмаған әҙәм Аллаһ алдына бур рәүешендә килеп баҫасаҡ».* (Ибн Маджа, Садаҡат, 11/2410)

Икенсе хәҙис тә Аллаһ ҡаршында уларҙы нимә көтөүен сағыу итеп тасуирлай:

*«Үтесен кире ҡайтарыу ниәте менән алғандарға Аллаһ быны еңеләйтер. Әгәр бирәү үтесен кире ҡайтармау ниәте менән алһа, Аллаһ уның мөлкәтен фани донъяла уҡ юҡ итер».* (Бухари, Истикраз, 2)

Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тормошонан түбәндәге ваҡиға әҙәмдәргә гүзәл нәсихәт.

**Рәсүуллаһ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм **Йәбир**, разыйаллаһу ғәнһү, Затуррика һуғышынан һөйләшеп ҡайтып киләләр. Йәбир, раҙыйаллаһу ғәнһү, күптән түгел өйләнеүе, хужалыҡ булдырыуы, шуға күрә бурысҡа батыуы хаҡында һөйләй. Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һатырлыҡ бирәй милке булыу-булмауы хаҡында һораша. Тегеһе ултырып йөрөгән дөйәһе барлығы хаҡында әйтә. Мәҙинәгә ҡайтҡас, Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Йәбиргә дөйәһе өсөн аҡса бирә, тик малды алып ҡайтып китер урынға уны кире хужаһына бүләк итә. Был ваҡиға мосолмандарҙы шул ҡәҙәр аптыраашта ҡалдыра, хатта улар был төндө «ләйләтүл-бәир» (дөйә төнө) тип йөрөтә башлай. Был төндә Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи

үә сәлләм, Йәбир өсөн доға ҡылып, егерме биш тапҡырҙан ашыу ярлыҡау һорай. (Рийаҙус-Салихин, I, 104-105)

Йәбир, раҙыйаллаһу ғәнһү, былай тип һөйләй:

«Юлда мин бер йәһүдте осратып, ошо ваҡиғаны һөйләнем. Ул, аптырап, минән ҡат-ҡат һораны: «Дөйәңде һатып алды, түләне һәм хайуанды кире бирҙеме?» «Эйе», - тинем мин». (Ибн Хәжәр, Фәтхул-Бари, 5/317)

Былар түбәндәге юғары әхлаҡи прициптарға нигеҙ булып тора:

1. Үтескә алған әҙәм, булған нәмәһен һатып, бурысын түләргә тейеш.

2. Мөмкинлектәре булғандар бурыслыларға ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш.

3. Бурысҡа батҡандар күп тәүбә итергә һәм доға ҡылырға тейеш.

✵

Бер хәҙис-шәрифтә әйтелә:

*«Аллаһ бер ҡолона бик күп ниғмәттәр бирә, аҙаҡ ул кешегә мохтаждарҙы килтерә; әгәр ул ризаһыҙлыҡ күрһәтһә, ҡулынан бөтә бәрәкәт китәсәк».* (Мунзири, ат-Тарғиб, 4/170)

Бер заман **Рәсүуллаһ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шундай һорау бирә:

*- Кемдең банкрот икәнлеген һеҙ беләһегеҙме?*

Сәхәбәләр яуап бирә:

- Беҙҙең аңлауыбыҙса, банкрот - аҡсаһы ла, милке лә булмаған кеше.

Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, былай тип аңлата:

*- Өммәттемдең банкроттары, сауап алыр өсөн, Ҡиәмәткә намаҙ, ураҙа, зәкәттәре менән килер, әммә шул асыҡланыр: ул кемделер әрләгән, кем хаҡындалыр ғәйбәт тараткан, кемгәлер яла яҡкан, кемдеңдер милкен ашаған, кемдеңдер ҡанын ҡойған, кемделер туҡмаған. Шул саҡта уның изге ғәмәлдәре кемдең хаҡына кергән шуларға таратылыр. Әгәр изге эштәре бурыстарын түләргә етмәһә, үҙе хоҡуҡтарын боҙған кешеләрҙең гөнаһтары уға йөкмәтелер. Аҙаҡ (барса шул гөнаһтары менән бергә) йәһәннәм утына ташланыр.* (Мөслим, Бирр, 59; Әхмәт бин Ханбал, II, 303, 324, 372)

Икенсе хәҙис-шәрифтә әйтелә:

*- Баҡыйлыҡҡа күскән әҙәмдең бер генә динар йәки бер генә дирһәм бурысы булһа ла, ул улар өсөн изге ғәмәлдәре менән түләйәсәк. Унда (Мәхшәр майҙанында) динарҙар ҙа, дирһәмдәр ҙә юҡ.* (Ибн Мажда, Садаҡат, 12/2414)

Бынан сығып, Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үтескә алыусыларҙы донъялыҡта йәһәтерәк бурыстарынан арынырға өндәгән:

*«Кемгәлер бурыстары булғандар, берәйһе алдында йөкләмәләре булғандар дирһәм һәм динарҙар булмаған көн (Хөкөм һәм иҫәпләшеү көнө) еткәнсе бында иҫәпләшһен. Юғиһә уға ғәҙелһеҙлектәре өсөн изге ғәмәлдәре менән түләргә тура киләсәк. Изге ғәмәлдәре етмәгән сүрәттә, рәнйетелгәндәрҙең гөнаһын үҙенә алырға тура киләсәк».* (Бухари, Мазалим, 10, Рикак, 48; Тирмиҙи, Ҡиәмәт, 2)

Бында иҫәпләшеү - бөтә бурыстар, йөкләмәләрҙе фани донъяла өҙөп китеү ул. Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәр саҡ ошо ҡағиҙәне үтәү яҡлы булған. Бурыстары түләнмәй тороп, ул Әхирәткә үтестәр менән киткәндәргә йыназа намаҙы ла уҡымаған. **Әбү Катада**, раҙыйаллаһу ғәнһү, был турала шулай һөйләй:

«Бер заман **Рәсүуллаһҡа**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йыназа намаҙы уҡыр өсөн, мәйетте килтерәләр, тик Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, былай ти:

*- Уның бурысы бар, һеҙ уның иптәштәре, үҙегеҙ йыназа намаҙы уҡығыҙ!*

- Мин үҙемә алам уның бурысын, - тинем мин.

- Үҙ ихтыярың менәнме? - тип һораны ул.

- Үҙ ихтыярым менән, - тип раҫланым мин.

Шунан һуң ул йыназа намаҙын уҡыны. (Тирмиҙи, Джанаиз, 69; Насаи, Джанаиз, 67)

Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Аллаһҡа, һанап кителгән ауыр гөнаһтарҙан һуң, колоноң түләнмәгән үтестәрен ҡалдырып, алдына бурыслы килеш килеп баҫыуынан ауыры юҡ».* (Әбү Дауыт, Буйю, 9)

Бурысҡа биреүселәр һәм алыусыларға килгәндә, уларҙы ике категорияға бүлергә мөмкин. **Бурысҡа биреүсегә хас сифаттар** хаҡында шуларҙы әйтергә мөмкин:

1. Ул, Аллаһтың ризалығы өсөн, мосолман ҡәрҙәшенең хәлен яҡшыртырға тырыша. Хәҙистә бит әйтелгән:

*«Кем башкаларҙың ауыр йөгөн еңеләйтә, Аллаһ уға үҙенең йөгөн еңеләйтер. Кем берәүҙе бәлә-ҡазанан, мохтажлыктан әрсәләй, Аллаһ Ҡиәмәттә унан бер ауырлыкты алып ташлар».* (Бухари, Мазалим, 3; Мөслим, Бирр, 58)

2. Бурысҡа биреүсе изге ғәмәлгә шәхси мәнфәғәттәрен ҡыҫтырырға тейеш түгел.

3. Бөтә тырышлыҡтарына ҡарамаҫтан, берәү бурыстарын түләй алмай икән, көтөргә биреүсе уның хәлен еңеләйтергә, үтесен ҡайтарыуҙы кисектерергә тейеш. Рәсүуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән бит:

*«Берәү бурысын алыуҙы кисектерһә, һәр көндө уға саҙаҡа биргәндең сауабы яҙыла. Артабан да кисектерһә, уҙған һәр көн саҙаҡа итеп яҙыла».* (Ибн Маджа, Садакат, 14/2418)

Йәнә бер риүәйәт:

*«Бер кешегә, йәнен алыр өсөн, үлем фәрештәһе килгән һәм һораған:*

*- Берәй якшылык эшләнеңме?*

*- Белмәйем, - тигән кеше.*

*- Хәтерлә, бәлки, иҫеңә төшөрөрһөң, - тип ныҡышкан фәрештә.*

*- Бер нимә лә иҫемә төшмәй, былай мин тормошта сауҙалағы уҙаҡтарыма гел ярҙам иттем. Хәллеләренә түләүҙе кисектерҙем, ярлыларҙың хәлен еңеләйттем (уларға еңелерәк булған сауҙа килешеүҙәре төҙөнөм, ул шарттар ҡайһы берҙә үҙем өсөн зыян ғына килтерҙе), - тигән кеше.*

*Изге ғәмәлдәре өсөн Аллаһ уны йәннәткә урынлаштырған».* (Бухари, Буйю, 17-18; Мөслим, Мусакат, 26-31)

4. Әгәр үтескә биреүсе бай, ә бурысҡа алыусы бик ярлы һәм мохтаж булһа, хәлле кеше үтесте саҙаҡаға хисаплап ғәфү итергә тейеш.

5. Бурыслыларҙы рәнйетергә ярамай. Хәҙис-шәрифтә был гүзәл ҡағиҙә хаҡында былай әйтелә:

*«Бурыс түләнһә лә, түләнмәһә лә, уға хоҡуктары булғандар сиктән сыҡмаҫҡа тейеш».* (Ибн Маджа, Садаҡат, 15)

Икенсе хәҙис-шәрифтә Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Аллаһ һеҙгә ҡәҙәр йәшәгән кешегә мәрхәмәтле булды. Был әҙәм һатҡанда һәм алғанда килешеүсән, күндәм булды, унан алыусыларға йомшаҡлыҡ күрһәтте».* (Тирмиҙи, Буйю, 75)

Шул уҡ ваҡытта үтескә алыусы:

1. Артыҡ мохтажлығы булмаһа, бурысҡа алырға тейеш түгел.

2. Тормош өсөн кәрәк тиклем генә бурысҡа алыу зарур.

3. Сиктән сығырға, аҡсаны әрәм-шәрәм итергә ярамай.

4. Бурысын ихлас түләргә ниәтләп, шуға бөтә тырышлығын һалып ынтылырға тейеш.

5. Үтескә биреүсенең яҡшы мөнәсәбәте менән файҙаланыу ярамай. Юғиһә ундай ҡылыҡтары менән улар тағы ла ныңғыраҡ мохтаждарға зыян һала – уларға үтескә бирмәүҙәре ихтимал.

6. Алған үтестәрен оҙаҡ бирмәй йөрөтөп, аҡсаларҙың ҡиммәте төшкәнгә ҡәҙәр һуҙырға тейеш түгелдәр.

7. Үтестәрен мөмкинлек булыу менән ҡайтарырға, мөмкинлектәре булмаһа, кисектереү һорарға тейештәр. Хәҙис-шәрифтә әйтелгән бит:

*«Әгәр кеше алған үтесен ҡайтарырға хәле булып та быны эшләмәһә, ул ғәҙелһеҙлек ҡыла».* (Бухари, Истикраз, 12; Хәүәләт, 1-2; Мөслим, Мусакат, 33)

8. Киләһе тормошҡа бурыстарҙы һис тә ҡалдырырға ярамай.

Үрҙә әйтелгән барса саралар үтәлгән сүрәттә генә үлгәндән һуң Аллаһу Тәғәлә үтесте ҡайтарыуы ихтимал. Был турала хәҙис-шәрифтә әйтелә:

*«Һис шикһеҙ, әҙәм бурыслы көйө үлһә, ул уны Ҡиәмәт көндө бирәсәк. Өс сәбәп кенә уны түләүҙән ҡотҡарыуы мөмкин:*

*1. Аллаһ юлында көсөн юғалтҡандар (һуғышта) үҙ дошмандарына йәки Аллаһ дошмандарына ҡаршы торор өсөн үтес алһа.*

*2. Эргәһендә мосолман үлеп, кәфенгә һәм уны ерләүгә бурыс алһа.*

*3. Буйҙаҡ егет нәпсеһенең вәсүәсәһе өсөн Аллаһтан ҡурҡһа, һәм, иманына зәғифлек килтермәҫ өсөн, өйләнер өсөн бурысҡа батһа.*

*Ҡиәмәттә уларҙың бурысын Аллаһ Үҙе түләйәсәк».* (Ибн Маджа, Садакат, 21)

Шик юҡ, Аллаһу Тәғәлә Ҡиәмәт көнөндә ҡиммәтен юғалтмаған мәңгелек бәрәкәттәр менән ҡайтарыр... Шундай иҫәп һәм шундай түләү үтескә биреүселәрҙе ризалатмай ҡуймаҫ, ул лайыҡлы әжер булыр.

Һис шикһеҙ, хәҙистән күреүебеҙсә, бурыстары өсөн әҙәмгә иҫәп ҡуйылыр. Үтестең ниндәй хәжәткә алыныуы мөһим түгел: Аллаһ юлында көрәш өсөнмө, янындағы мосолман өсөнмө, динен һаҡлау маҡсатында туй үткәреү өсөнмө – барыбер һәммәһе өсөн Ҡиәмәттә түләргә тура киләсәк.

Бәс, шулай булғас, үтесте кәрәк ҡәҙәр генә алып, йәһәтерәк кире ҡайтарыу өсөн бөтә сараны күрергә кәрәк. Ә үтескә биреүсе аңларға тейеш: был ғәмәлдәре уға шәфҡәтлелек, миһырбанлыҡ кеүек Исламда маҡталған сифаттарға эйә булырға мөмкинлек бирәсәк.

Бурыс һәм кредит мәсьәләһендә үтескә биреүсе лә, алыусы ла бер-береһенең хәлен ҡатмарландырмаҫҡа, бер-береһен аңлап эш итергә тейеш. Үтескә биреүселәрҙең хистәрен аярға, хоҡуҡтарын һаҡларға кәрәк, сөнки был изге ғәмәлдең киләсәге уларға бәйле, улар бурысҡа биргәнде алыуҙан төңөлөргә тейеш түгел.

Был йәһәттән киләһе хәҙис-шәрифтәр һәммәбеҙгә яҡшы нәсихәт:

«Бер заман Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бурысын талап итер өсөн кеше килә. Әммә хәбәрен ихтирамлы ғына һөйләмәй, тупаҫ, йәмһеҙ һүҙҙәр ысҡындыра. Сәхәбәләр Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, янында улай әҙәпһеҙ ҡыланыуы ярамағанлығы хаҡында киҫәтә. Әммә Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уға һүҙен дауам итергә ирек бирә:

*- Ҡуйығыҙ! Үтескә биреүсенең әйтергә теләгәнен әйтергә хоҡуғы бар».* (Бухари, Истикраз, 7; Мөслим, Мусакат, 118-122/1600-1601)

Шундайыраҡ хәл тураһында **Әбү Сәит әл-Худри**, раҙыйаллаһу ғәнһү, һөйләй:

«Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер бәҙәүи килде һәм тупаҫ, ҡаты итеп бурысын ҡайтарыуҙы талап итте. Ул хатта былай тине:

- Үҙемдекен алмай тороп, мин һинән ҡалмаясаҡмын.

Бының шаһиты булған сәхәбәләр бәҙәүигә киҫәтеү яһай:

- Оят һиңә! Һин кем менән һөйләшкәнеңде аңламайһыңмы әллә?

Әммә әҙәм һаман үҙенекен ныҡый:

- Мин хоҡуғым булған нәмәне талап итәм.

Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шул саҡ сәхәбәләренә әйтә: *«Уның хоҡуҡтарын таныу дөрөҫөрәк булмаҫмы?»* һәм Хәүлә Бинти Кайсҡа, разыйаллаһу ғәнһә, үтенес менән кеше ебәрә һәм әйтергә ҡуша:

*- Кипкән финиктарығыҙ булһа, минең бурыстарҙы түләгеҙ әле. Ә беҙ, уңышты йыйғас, үтесте ҡайтарырбыҙ.*

Хәүлә яуап бирә:

- Әлбиттә, атайым һинең өсөн хатта үлергә әҙер, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм!

Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, шул рәүешле бурыстарын ҡайтара һәм бәҙәүиҙе ашҡа саҡыра. Бәҙәүиҙең кәйефтәре күтәрелеп китә һәм ул, шатланып, былай ти:

- Һин миңә гүзәл рәүештә бурысыңды ҡайтарҙың. Аллаһ һиңә бәрәкәттәрен бирһен!

Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, быға шулай тип яуап бирә:

*- Бына шундайҙар (биргән үтестәрен кире алыу хоҡуғын яклаусылар) – кешеләрҙең иң яҡшылары. Көсһөҙҙәрҙең хоҡуҡтары яҡланмаған бер генә йәмғиәт тә уңышҡа ирешә алмаясаҡ.* (Ибн Маджа, Садакат, 17)

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тарихта бер башлыҡҡа ла хас булмағанса, биргән бурыстарын ваҡытынан алда талап итһәләр ҙә, һәр ваҡыт башҡаларҙың хоҡуғын яҡлап сыҡҡан. Уны яҡларға маташҡан сәхәбәләргә әйткән һүҙҙәре:

***«Уның хоҡуҡтарын таныу дөрөҫөрәк булмаҫмы?»*** - әхүәле рухиәбеҙҙе юғары кимәлгә күтәреүсе, кешелеклелек тәрбиәләүсе юғары әхлаҡ һабағы. Һәр кемгә артабан өммәтен тулыландырасаҡ кеше итеп, күңел күҙе менән баға ул.

Риүәйәттәр буйынса, йәһүдтәрҙән булған **Зәйд ибн Сағна** исемле ғалим Тәүрат һуңғы пәйғәмбәрҙе һүрәтләгән сифаттарҙы Рәсүлуллаһтан, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, эҙләй. Бер тапҡыр ул Рәсүлуллаһты, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һәм Алиҙы, раҙыйаллаһу ғәнһү, күреп ҡала һәм арттарынан китә, бәҙәүиҙәр кейемендәге берәүҙең улар янына килеүен һәм Рәсүуллаһҡа ошолай мөрәжәғәт итеүен ишетә:

- О Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мин фәлән-фәлән ҡәбиләгә барып, әгәр улар Исламды ҡабул итһә, Аллаһу Тәғәлә уларға муллыҡ бирер, тип әйттем. Улар мосолман булды. Үс иткәндәй, быйыл уңыш булманы һәм аслыҡ башланды. Халыҡ бик ауыр хәлдә. Хәҙер мин улар имандан яҙып ҡуймаһа ярар ине тип ҡурҡам. Әгәр берәй ярҙам йыйырға бойорһаң, мин уны алып барыр инем.

Быны ишетеп торған Зәйд бин Сағна, уңайлы мәлде файҙаланып, Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөрәжәғәт итә:

- О Мөхәммәт! Әгәр теләһәң, мин уларға үтескә биреп тора алам!

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, унан үтескә 80 динар ала ла, бәҙәүигә биреп, былай ти:

- *Быларҙы алып, йәһәтерәк ярҙамға ашыҡ.*

Бер нисә көн үткәс, Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Әбү Бәкер, Ғүмәр һәм башҡа сәхәбәләр менән бер кешене ерләргә Баки зыяратына юл тота. Йыназа намаҙынан һуң, Рәсүуллаһҡа, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Зәйд ибн Сағна боҫоп ҡына килә лә ныҡ итеп өҫкө кейеменән тарта. Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер нәмә лә аңламайынса, берсә ерҙә ятҡан кейеменә, берсә Зәйдтең ҡараңғы йөҙөнә ҡарай, ә тегеһе уйлаған ниәтен тормошҡа ашыу өсөн былай ти:

- Һин алған үтесеңде ҡайтарырға уйлайһыңмы, әллә юҡмы? Һеҙ бөтәгеҙ ҙә, Абдулмоталлибтар, алған бурысығыҙҙы ҡайтарыуҙы һуҙаһығыҙ.

Әммә Рәсүлуллаһҡа, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бурысты ҡайтарыу ваҡыты әле етмәгән була.

Зәйд, был хәбәрҙе ул һөйләп бирә, былай ти:

«Шул мәлдә мин Ғүмәргә ҡараным: уның күкрәге бер күтәрелә, бер төшә ине, һәм ҡурҡыштан минең йөрәк табанға төштө. Ул күҙҙәренән ут сәсеп ҡысҡырып ебәрҙе:

- Эй, Аллаһ дошманы! Һин Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән нисек һөйләшәһең! Уға хөрмәт күһәтмәүең етмгән, һин уны мысҡыл итәһең! Уны Илсе итеп ебәргән Зат менән ант итәм, әгәр ул һиңә бурыслы булмаһа, башың елкәңдән осоп төшөр ине!..

Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йәһүдтең ҡылығына сиктән тыш асыулы Ғүмәргә былай ти:

*- Тыныслан, Ғүмәр! Был әҙәм дә, мин дә һинән бөтөнләй башҡаны көткәйнек. Бурысты ҡайтарыу хаҡында һин минең хәтергә төшөрөргә тейеш инең, ә был кешегә бурысын тейешенсә талап итеү кәрәк ине. Үтесте түләүгә өс көн ҡалһа ла, һин уға бурысын түлә. Ҡурҡытҡаның өсөн, өҫтәп түлә!*

Зәйд үҙенә үтесен ҡайтарған Ғүмәргә былай ти:

- Тыңла әле, Ғүмәр! Пәйғәмбәргә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ҡараған һайын, мин унда пәйғәмбәрлек ғәләмәттәрен күрә инем. Әммә бөгөнгө көнгә ҡәҙәр мин унда хаҡ Пәйғәмбәр булыуын раҫлаусы ике сифатты эҙләнем. **Ул үҙе менән тупаҫ, ихтирамһыҙ булыуҙы ғәфү итәме? Тупаҫлыҡ, ихтирамһыҙлыҡ артҡан һайын йомшағыраҡ була барамы?** Бөгөн мин быны тикшерҙем һәм шуға инандым: **ул – хаҡ пәйғәмбәр**. Мин Алламды - Раббым, Исламды - динем, Мөхәммәтте, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, пәйғәмбәрем тип таныйым һәм милкемдең яртыһын Мөхәммәт, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, өммәтенә бирәм, һин быны шаһиты буласаҡһың.

Быға Ғүмәр шатлана, шулай ҙа былай тип кәңәш бирә:

- Һин бөтә өммәткә милкеңде бирә алмаясаҡһың, шуға тейәрен генә һөйлә.

Зәйд уның менән килешә һәм әйтә:

- Һин хаҡлы, мин милкемде ҡайһы бер мосолмандарға бирәм». (Хаким, Мустадрак, III, 700/6547)

Хәҙис-шәрифтән күреүебеҙсә, рухи зирәклек, үтескә алыусы тарафынан үтескә биреүсе хоҡуҡтарының һаҡланыуы Аллаһтың рәхмәтенә һәм бәрәкәтенә ирешеүгә бер сәбәп булыуы ихтимал. Рәсүлуллаһ, саллаллаһу

ғәләйһи үә сәлләм, үтескә йыш алған һәм үтес биреүсе менән нисек мөғәмәлә итеү кәрәклеген үҙ миҫалында бик күркәм рәүештә күрһәткән.

Миҫалдарҙан күреүебеҙсә, үтес биреү-алыу мәсьәләләре нәзәкәтле мөғәмәлә талап итә. Ике яҡ та, үтес кеүек ғибәҙәт аша илаһи ғилем һәм фатиханан мәхрүм ҡалмаҫ өсөн, билдәле шарттарҙы үтәүгә иғтибарлы булырға тейеш.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үтес кеүек ғибәҙәт төрөнөң һирәгәйә барыуы, күптәрҙең үтескә биреүҙе үҙенә зыян килтереү тип ҡабул итеүе башлыса үрҙә әйтелгән шарттарҙың үтәлмәүе арҡаһында килеп сыға.

Һатыу-алыуҙа бер-береңә ышаныс бөтөү, алдашыу, мутлашыуҙар артыу, биргән вәғәҙәләрҙең, килешеүҙәрҙең үтәлмәүе үтес кеүек гүзәл ғибәҙәт төрөнөң онотола барыуына алып килде. Бер нәмәлә шик юҡ: ҡалыплашып барған ошо хәлде үҙгәртергә кәрәк, йәғни мөмкинлектәре булғандар үтес бирмәҫ өсөн сәбәп эҙләргә, ә үтес алыусылар, мохтажлыҡтарына һылтанып, бурыстарын түләүҙән баш тартырға һәм шул рәүешле ғибәҙәттең был төрөнә йәмғиәттә кире ҡараш тыуҙырырға тейеш түгел. Юғиһә бай әҙәм үҙенә аманат итеп бирелгән милек өсөн Аллаһу Тәғәләгә рәхмәтен белдерә алмаясаҡ, мохтаждар иһә, үтес шарттарын үтәүгә иғтибарһыҙлыҡтары арҡаһында, тормош көтөү өсөн кәрәкле сығанаҡты юғалтасаҡ һәм аҡсаны процентҡа алырға мәжбүр буласаҡ.

Күп кенә аят һәм хәҙистәрҙә үтескә бирә белеүҙең дәрәжәһе тураһында әйтелә. Кем әҙәп ҡағиҙәләрен үтәмәй, тормошобоҙҙағы был изге ғәмәлдән мәхрүм ҡала, өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ ала. Ә бит әҙәп буйынса, ҡағиҙәләргә таянып бирелгән үтес мөьминдең мәңгелек тормоштағы ҡаҙанышы.

**Әнәс бин Малик**, разыйаллаһу ғәнһү, һөҙҙәре буйынса, **Рәсүлуллаһ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Миғраж төнөндә мин йәннәт ҡапҡаһына яҙылған яҙыуҙы күрҙем:*

*«Саҙаҡаға – ун сауап. Үтескә биреүсегә – ун һигеҙ сауап».*

*Мин һораным:*

*- О Ябраил! Ни өсөн үтес саҙаҡанан юғарыраҡ?*

*- Хәйер эстәүсе (йыш ҡына) ҡулында аҡса булһа ла һорай, ә үтесте кеше ысынлап мохтаж булғанда ғына һорай».* (Ибн Маджа, Садакат, 19/2431)

Һүҙ юҡ, саҙаҡа – динебеҙ хуплаған ғибәҙәт төрө. Ҡайһы бер осраҡта, кешенең тойғоларын аяу өсөн, саҙаҡа урынына бурысҡа биреү яҡшыраҡ. Бер хәҙистә әйтелгән бит:

*«Ҡайһы бер осракта, саҙака биргәнсе, үтескә биреү яҡшыраҡ».* (әл-Ғәзизи, ас-Сираджул-Мөнир, III, 57)

Күп кенә тәҡүәле мөьминдәр, Раббыбыҙҙың ризалығына ирешергә мөмкинлек биреүсе был эштә Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, нәсихәтенә эйәреп, бурыстарын алғас тотонмағандар, йәнә уны мохтаждарға үтескә биргәндәр, йәғни үҙенә күрә «карзы-хәсән» – гүзәл үтес банкы булдырғандар.

**Ҡайс бин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, тапшырған бәйән дә шул турала:

«**Сөләймән бин Узунан** бер заман Ибн Мәсғүд сәхәбәнең шәкерте **Әлҡама бин Ҡайсҡа** үтескә мең дирһәм бирә. Әлҡаманың ҡулына аҡса кергәс, Сөләймән ҡаты һәм тупаҫ итеп бурысын ҡайтарыуҙы талап итә. Әлҡама аҡсаны шунда уҡ бирә, әммә Сөләймәндең тупаҫлығы уны рәнйетә. Бер нисә айҙан Әлҡама йәнә аҡсаға мохтажлыҡ кисерә һәм йәнә Сөләймәнгә мең дирһәм һорап мөрәжәғәт итергә мәжбүр була. «Шатланып бирәм!» - тип, Сөләймән ризалаша һәм ҡатынына әйтә:

- Утбаның әсәһе, анау ябыҡ көршәкте килтер әле! - Ҡатын һауытты килтергәс, Сөләймән Әлҡамаға былай тип аңлата:

- Аллаһ менән ант итәм, бында һин килтергән шул уҡ дирһәмдәр. Мин унан бер дирһәм дә алманым! - Әлҡама шул саҡ унан былай тип һорай:

- Аллаһ атаңдан разый булһын! Әммә һин ниңә мин бурысты ҡайтармағас асыуландың? - Сөләмән яуап бирә:

- Һинән ишеткән хәҙистәр арҡаһында ул.

- Мин нимә хаҡында һөйләнем һуң һиңә?

- Һин Пәйғәмбәребеҙән, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Ибн Мәсғүд еткергән хәҙисте һөйләнең: *«Әгәр мосолман ике тапҡыр үтескә бирһә, шул изге эштәренең береһенә (карзы-хәсән) саҙаҡа сауабы бирелер!»*

Әлҡама уның әйткәндәре менән килешә:

- Эйе, Ибн Мәсғүд, раҙыйаллаһу ғәнһү, ысынлап та, миңә был турала һөйләгәйне». (Ибн Маджа, Садаҡат, 19/2430)

Исламдың бөйөк шәхестәренә бына шундай юғары әхлаҡи сифаттар хас була. Остаҙым **Муса әфәндегә** лә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, ул ят түгел ине. Ул хатта үтестәр өсөн махсус фонд та булдырҙы. Кемдер алған бурыстарын ҡайтара алмаһа, ул саҙаҡанан иҫәпләнде, ә кире ҡайтарылғандары шул уҡ маҡсаттарға тотонола ине, йәғни Аллаһ ризалығы өсөн бирелгән аҡсалар һәр саҡ әйләнеп йөрөнө. Ошондай изге ғәмәлдәр юғары ислам әҙәбенең сағылышы.

Үтескә биреүсе күркәм сифаттарға эйә булһа, үтескә алыу ҙа хупланған ғәмәлдәрҙән һанала. Ныҡ мохтажлыҡ кисергән әҙәм үтескә алмаһа, ул, сиктән сығып, хаталар, гөнаһтар ҡылып ташлауы ихтимал. Хәҙер бик күптәр кредит һаҙлығына бата, ҙур проценттар һаҙлығынан сыға алмай алйый. Ундайҙарға мөрәжәғәт итеп, үтескә бирерҙәй кешеләрҙе эҙләргә мәжбүр итеп, **Рәсүлуллаһ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Үтескә алыу Аллаһ тыйған ғәмәлгә инмәй икән, үтескә алған әҙәм бурысынан ҡотолмай тороп, Аллаһ уның менән гел бергә».* (Ибн Маджа, Садаҡат, 10)

Иң һуңында шуны әйткем килә: Исламдағы башҡа ғибәҙәттәр менән бергә, беҙ, әҙәп ҡағиҙәләрен һәм билдәле сиктәрҙе сыҡмайынса, үтескә биреү мәҙәниәтен тергеҙергә тейеш. Исламдың күркәм традицияһы булған үтескә биреү йәшәүен дауам итһен өсөн, уның үҙенсәлектәрен тәрән өйрәнеү һәм шуға таянып эш итеү лазым. Иртәгә, мәңгелек төйәгебеҙгә ҡайтарылғас, байҙарҙың бындай мөмкинлеге булмаясаҡ, ярлыларҙың да бындай мохтажлығы ҡалмаясаҡ.

✵

Ошо теманы тамамлап, йәнә шуны әйткем килә: беҙгә был донъяла игелекле, матур ғәмәлдәр ҡылыу мөмкинлеге бирелгән. Бигерәк тә, изге Рамаҙан айында, Аллаһтың сикһеҙ рәхмәте, мәрхәмәте төшкән айҙа, юғалтҡандарыбыҙҙы табырға, хаталарыбыҙҙы төҙәтергә гүзәл мөмкинлектәр бар.

Изге Рамаҙан айының хикмәт һәм йәшерен мәғәнәгә эйә булған көндәре – мөьминдәрҙең иман, ғибәҙәт, Аллаһты зекер итеү ләззәтен бөтә тулылығында татыуы ул, мохтаждарҙың хәленә инә белеүе, әхүәле рухиәләребеҙ менән улар менән берләшеү, уларға ярҙам ҡулы һуҙыу ул.

Изге Ураҙа ғәйетенә иң ҙур бүләк – ҡәлбебеҙҙең таҙарыныуы, Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең гөнаһтарыбыҙҙы ярлыҡауы.

Фани донъялағы тормошобоҙҙо мәңге дауам итәсәк Рамаҙан итеп күҙ алдына килтереп, беҙ көндәлек тормошобоҙҙо байыта алабыҙ. Был изге көндәр – ҡыҫҡа ваҡытлы ғүмеребеҙҙең иң ҡиммәтле мәлдәре. Изге Рамаҙандың фатихаһы һәм рухиәте менән көндәребеҙҙе байыта алһаҡ, шик юҡ, Ҡиәмәт көнө мәңгелек байрам көнө иртәһенә әүереләсәк.

Бәхлюл Дана ул хаҡта һоҡланғыс һүҙҙәр әйткән:

*«Байрам матур һәм яңы кейемдәр кейгәндәр өсөн түгел, үҙен Илаһи асыуҙан һаҡлағандар, мәңгелек язанан үҙен әрсәләгәндәр һәм мәңгелек ҡотолоу тапҡандар өсөн. Байрам ҡиммәтле арбаларға ултырғандар өсөн түгел, хаталарынан, етешһеҙлектәренән таҙарынып, Аллаһтың ихтыярына буйһоноп, Уның ихлас ҡоло булғандар өсөн...»*

**Эй Раббым! Әхүәле рухиәбеҙ офоҡтарын киңәйт һәм алдыбыҙҙа асылған күркәмлек ярҙамында беҙҙе ошо тормош байрамына һәм мәңгелек тормош тантанаһына алып кил! Беҙгә биргән ниғмәттәреңде Үҙең риза булырҙай ғәмәлдәр ҡылыу өсөн сәбәп ит! Бер-берейһенә ярҙам итеп, фани донъя ауырлыҡтары баҫҡанда, бер-берейһенә терәк-таяныс булып, мәңгелек донъя бәлә-ҡазаларынан ҡотолған бәхетлеләр иҫәбенән ит беҙҙе!**

**Әмин!..**

# *Дуҫлыҡ*

*Эй, хәҡиҡәт юлсыһы, ҡурҡыныс Хөкөм көнө еткәнсе, ҡулыңдан тотоп ҡотҡарып ҡалһын өсөн, һин хәҡиҡәт хакимы (Раббың менән) менән дуҫлығыңды нығыт. Ул көндө Уның рөхсәтенән башҡа һиңә ерәү ҙә ҡул бирмәҫ. Ул көндө әҙәм ағай-энеһенән, әсәһенән һәм атаһынан, ҡатынынан һәм балаларынан ҡасыр. Шуға күрә хәҡиҡәт менән дуҫлыҡ нимә икәнлеген төшөн, аңла: ул – һинең һуңғы һулышың орлоғо.*

*(Мәүләнә Йәләлетдин Руми)*

# *Дуҫлыҡ*

Риүәйәттәр буйынса, бер заман Хөрмәтле **Пәйғәмбәребеҙ**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ауырып китә. Был турала белеп ҡалғас, уны бик тә яратҡан **Әбү Бәкер**, раҙыйаллаһу ғәнһү, хәлен белергә йүгереп килә. Ғаләмдәр Әфәндеһен, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ауырыу килеш күреп, бик тә ҡайғыра һәм ҡайғынан үҙе лә сиргә һабыша.

Бер нисә көндән Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һауыға һәм, Әбү Бәкерҙең сирләп китеүен ишетеп, хәлен белергә китә. Тегегә «Рәсүлуллаһ хәлеңде белергә килә», - тип хәбәр итәләр.

Әбү Бәкер, шатлығынан ни эшләргә белмәйенсә, ишеккә йүгерә. Сирсырхауы ла үтә. Ғаләмдәр Әфәндеһен ишек төбөндә ҡаршы алып, түргә саҡыра. Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уны имен-аман килеш, һәйбәт кәйефтә күреп, әйтә:

*- О Әбү Бәкер, миңә бит һине ауырый тигәйнеләр!*

Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уның хәлен белергә килеүенә, Пәйғәмбәрҙе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яратҡандар араһында тап үҙе Уның яҡын дуҫы булыуына һөйөнөп, Әбү Бәкер ҡысҡырып ебәрә:

**- О Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм! Минең дуҫым ауырып китте – мин дә ауырыным. Минең дуҫым һауыкты – мин дә һауыктым!..**

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән дуҫ булыуы, Уны һөйөүе өсөн, Изге Ҡөрьәндә ул **«икәүҙең икенсеһе»** тип атап кителә, ихлас дуҫлыҡ, Илаһи һөйөүгә Аллаһтың һәр саҡ ризалығы, рәхмәте төшә. Тап шундай дуҫлыҡ хәҡиҡи рухи һөйөү һәм яҡынлыҡты танып белергә ярҙам итә.

**Имам Али әр-Риза** әйткән:

*«Аллаһу Тәғәлә Үҙенең дуҫтарына эсергән татлы эсемлек, рухи эсемлек бар; уны эскәндәр үҙҙәрен онота, онотолоп таң ҡала; таң ҡала һәм таҙарына; таҙарынғас, иреп юҡҡа сыға; иреп юҡҡа сыҡҡас, ихласлыҡҡа ирешә, ихласлыҡҡа ирешкәс, аңлау ҡеүәһен ала; аңлау ҡеүәһе ярҙамында дуҫтары менән берләшә; дуҫтары менән берләшкәс, уларҙы һис ни айыра алмай».*

Был халәт хаҡ дуҫлыҡты танып белгәндәргә хас. Бәлки, шуғалыр ҙа хөрмәтле Әбү Бәкер, дуҫының хәлен еңеләйтер өсөн, уның менән бергә ауырый. Дуҫлыҡ ептәре менән бәйләнгәндәр уның әсе емештәрен дә татый. **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Дуҫтары янындағы әҙәм, янған ҡуҙ өҫтөндә ултырһа ла, хуш еҫле рауза еҫтәренә күмелгән баҡсала итеп һиҙер үҙен».*

*«Дуҫтар! Әгәр һеҙ образдар һәм формалар сиге аша рухиәт донъяһына инһәгеҙ, ожмахтың рауза баҡсаһы артында унан да гүзәлерәк ожмах баҡсаһы барлығын күрерһегеҙ».*

Дуҫлыҡ уртаҡ хеҙмәттә һынала һәм нығына. Саф йәндәргә генә ысын дуҫлыҡ хас. Был сифат шәхестең юғары кимәле хаҡында һөйләй. Бер үк ваҡиға йәки төшөнсәгә ҡағылышлы икәүҙең уртаҡ кисерештәре дуҫлыҡ яралыуға этәргес була. Ысын дуҫлыҡ, электр тапшырыу линияһы һымаҡ, ике йөрәкте берләштерә. Шул линиялар буйлап һөйгәндең тойғолары һөйгәненә барып етә. Шунда мөхәббәт тулҡындары сайҡала һәм эҫенеү ҡояшы яҡтырта башлай.

Сәлжүктәр мәҙрәсәһендә уҡытып йөрөгән хөрмәтле **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, Хәҡиҡәткә мөкиббән, йөрәге һөйөү уты менән тулы **Шәмс Тәбризи** атлы дәрүиш менән осрашҡас та шулай була. Был осрашыу уны шул ҡәҙәр тетрәтә, китаптар һәм фәндәр донъяһы уның өсөн юҡҡа сыға, уға тотош ғаләм китабы асыла һәм ул уны уҡый башлай. Ерҙе, кешене, ғаләмде һәм Ҡөрьәнде танырға ярһып өндәүенән «Мәснәүиҙәре» ярала. Башҡа мөьминдәрҙең дә, Хәҡиҡәт дуҫтарына хас был халәтте татып ҡарар өсөн, ҡолдарынан килгән ҡәҙәр үҙҙәренең һөйөү һәм дуҫлыҡ мөнәсәбәтен Илаһи хуплау аҫтындағы нәмәләргә йүнәлтеүе зарур.

Юғиһә, ҡолдоң әхүәле рухиәһе ер ожмахында һымаҡ тойолһа ла, әгәр ул дуҫынан алыҫ икән, ул тамуҡ утында һымаҡ тоя үҙен. Уртаҡ тойғолар булмаған яҡынлыҡта дуҫлыҡ юҡ. Мәҫәлән, **Әбү Ләһәб Пәйғәмбәребеҙҙең**,

саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яҡын ғына туғаны булһа ла, асылда унан ифрат йыраҡ була.

Рухи тормоштоң бихисап серҙәре һәм лабиринттары бар. Рухи тормоштоң формалары тәнгә, материяға хас нәмәләрҙән айырылып тора. Әхүәле рухиәң тәрәнлегенән килгән изге хәбәр - илһам. Хөрмәтле Пәйғәмбәребеҙҙең, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, илаһи һөйөүе һәм дуҫлығы Хира мәмерйәһендә уға үәхи төшөрөлөүгә һәм артабан уның Иң Яратҡаны янына олғашыуға, миғражға сәбәп була.

Кешелекте яңғыҙлыҡтан ҡотҡарыусы һөйөү – Аллаһтың рәхмәте. **Әҙәм** һәм **Һауа**, ғәләйһүмәс-сәләм, ергә төшөрөлгәс, уның төрлө мөйөшөндә ҡырҡ йыл буйы айырылышыу һағышын татып йәшәй. Дуҫлыҡ уларҙың йәнен бер бөтөн итеп берләштерә. Хәҙис-шәрифтә әйтелгән бит:

*«Әҙәм дуҫтарының динен ала. Бәс, шулай булғас, кемде дуҫ итергә йыйыныуығыҙға иғтибарлы булығыҙ».* (Әхмәт бин Ханбал, II, 303, 304)

Йәнә шундай хәҙис тә бар:

*«Кеше һәр ваҡыт үҙенең һөйгәндәре янында».* (Бухари, Әҙәп, 96)

Дуҫтарыбыҙҙың беҙгә йоғонтоһо тураһында етерлек һөйләй улар. Хәҙистәрҙән күреүебеҙсә, яратҡандарың менән бергә булыу - һүҙҙәрең, уйҙарың, ғәмәлдәрең, тойғоларың, әхүәле рухиәң менән дә бергә булыу. Икенсе төрлө әйткәндә, сәнскеләр араһында торғанда ла, бөтә асылың, һүҙҙәрең, эштәрең, ғәмәлдәрең менән раузаны һөйөүеңде раҫларға кәрәк. Шуға күрә кем һүҙҙәре, рухиәте һәм ғәмәлдәре менән Аллаһ һәм Уның Пәйғәмбәре янында түгел, уларҙы ысынлап һөйөүселәр рәтенә индереп булмай.

Үҙеңде баһалағанда, үрҙә әйтелгәндәрҙе иҫтә тотоу лазым. «Аллаһты һәм Уның Пәйғәмбәрен, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, яратам» тип әйткәс, моңһоҙ һәм һаҙан булып йәшәһәм дә, хәҙистә вәғәҙә ителгән бәхеткә лайыҡ булам тип уйларға ярамай. Үҙ-ара мөхәббәт донъяға бер төрлө баҡҡанда, уны бер төрлө ҡабул иткәндә тыуа. Аллаһу Тәғәлә яҡын дуҫтар йөрәгендә гүзәл баҡсалар үҫтерә. Иң яҡын дуҫ атамаһына лайыҡ булған **Әбү Бәкер** миҫалы ниндәй күркәм.

Һәр ваҡыт Рәсүлуллаһҡа, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оло һөйөү менән уҡталып, Уның менән дуҫлыҡтан, әңгәмәләрҙән хозурланып, ул күңеленә тыныслыҡ тапмай. Бер тапҡыр Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу

ғәләйһи үә сәлләм, Әбү Бәкерҙең, разыйаллаһу ғәнһү, Аллаһ юлына ҡорбан итеүенә һоҡланыуын белдерә. Әммә фиҙакәрлеге, Рәсүллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, был донъянан китеүен һиҙемләүе арҡаһында, ул үҙенә төбәлгән был телмәргә иғтибар бирмәй, бөтә булмышын солғап алған ҡотолғоһоҙ айырылышыу минуттарын тойоп ғазаплана. Күңел төбөндә ятҡандарҙы аса биреп ул былай ти:

*«О Рәсүлуллаһ! Милкем дә, йәнем дә һинеке түгелме ни?!»* (Ибн Маджа, Мукаддимма, 11)

Хөрмәтле **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, бындай йәндәрҙең асылын аңлап, былай тигән:

*«Аллаһ менән бергә булырға, Уға якынайырға теләгәндәр әүлиәләр йәмғиәтендә, Аллаһ дуҫтары янында (Аллаһты танып белгәндәр) булһын.*

*Дуҫтар бергә булғанда, Изге Яҙманың меңдәрсә сере асыла һәм укыла!»*

Бер шағир әйткән:

*«Бер нисә кеше йыйылып, Хак Тәғәлә, хәкикәт хаҡында һөйләшһә, улар бергә йыйылған ергә күктәр сәждә кыла!..»*

**Шәйех Сади** Илаһи ғәләмәттәрҙе күргән, шуға күрә ер тормошона күңеле һыуынғандар тураһында былай тигән:

*«Дуҫтар йөҙөн күреү һыҡрап торған йән яраһына тамған бәлзәм кеүек».*

Аллаһу Тәғәлә ундайҙар иҫәбенә ингәндәр хаҡында былай ти:

إِنَّمَا وَلِيُّكُمُ اللّٰهُ وَرَسُولُهُ وَالَّذِينَ آمَنُواْ الَّذِينَ يُقِيمُونَ الصَّلاَةَ وَيُؤْتُونَ الزَّكَاةَ وَهُمْ رَاكِعُونَ

**«Һеҙҙең дуҫығыҙ бары тик Аллаһтыр, Рәсүлдер, иманлыларҙыр; Улар Аллаһтың әмерҙәренә буйһоноусылар, намаҙ укырҙар, зәкәт бирерҙәр»** (Маидә, 5/55).

Фани донъяның мөхәббәт төйөндәрен өҙөп һәм дуҫлыҡ ҡапҡандарынан ҡотолоп, мәңгелек дуҫлыкты һәм хәкики һөйөүҙе Аллаһта тапҡандар, бөтә йәне менән Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм,

бәйләнгәндәр, иман юлына баҫҡандар менән бергә булғандар - бәхет-сәғәҙәткә ирешеүселәр.

Дуҫлыҡта бындай бәрәкәткә эйә булмағандар тураһында хөрмәтле **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Шуны яҡшы төшөн: был донъялағы һинең аумаҡай һәм ялған дуҫтарың, ялған һөйөүең ахырҙа һинең дошманыңа әйләнәсәк. Улар һинең йәлләттәрең буласаҡ.*

*Ҡәберҙә һин Аллаһҡа шулай ялбарасаҡһың: «Эй Раббым, ҡалдырма минең яңғыҙымды!»*

Йәшәйеште аңлауҙы киңәйтеү һәм юғарылатыу, ғаләм китабын дөрөҫ уҡыу һәм уға һалынған хикмәтте төшөнөү батырҙарҙың ғына ҡулынан килә, улар ғына рухиәт донъяһына сумып, хаҡ дуҫлыҡ, илаһи һөйөү һәм илһам асылын тойорға һәләтле.

Ибраһим, ғәләйһис-сәләм, «хәлиуллаһ» (Аллаһ дуҫы), хәленең үтә лә мөшкөл булыуына ҡарамаҫтан, өмөттәрен Аллаһҡа бағлап, яҙмышын Уға тапшырып, ә был хәҡиҡи дуҫлыҡтың тәүге шарты, ҡурҡыу һәм шиктәрҙән тулыһынса азат була. Уны ялҡын ялмап алғас, фәрештәләр килеп, ярҙам тәҡдим итә, әммә Ибраһим, ғәләйһис-сәләм былай тип яуап бирә:

«Дуҫтар араһына баҫмағыҙ! Мин Раббым биргән тәҡдиргә тулыһынса буйһонам; ҡотҡара икән – Үҙ рәхмәте менән, яндыра икән – минең ғәйебем менән. Аллаһ ихтыяры буйынса мин түҙем буласаҡмын...»

Аҙаҡ ул былай ти:

«О Хәҡиҡи Әл-Хәлим (Иң Баҫалҡы)! Әйт, утҡа ҡуҙланып янырға кем бойора?»

Ахырҙа Аллаһтан, Бөйөк Дуҫтан, әмер төшә, һәм ут Ибраһимға, ғәләйһис-сәләм, хәүефһеҙ һәм һалҡынға әүерелә. Ибраһимдың, ғәләйһис-сәләм, тоғролоғо изге аят төшөрөлөүгә сәбәп була, унда Аллаһу Тәғәлә уны хөрмәт менән телгә ала:

وَإِبْرَاهِيمَ الَّذِي وَفَّى

**«Ул Ибраһим үҙенә йөкмәтелгән эштәрҙе тулыһынса үтәне»** (Нәжем, 53/37).

Биргән һүҙеңдә тора белеү һәм тоғролоҡ һәр кемгә хас булырға тейеш. Кешеләр араһындағы дуҫлыҡ шул шартты үтәүгә лә бәйле. Кемдеңдер йөрәк дуҫына әйләнгәндәр – бер үк ваҡытта диндә лә, тарихта ла бөйөк шәхестәр. Тарих китаптарынан күреүебеҙсә, хыянаттарса үлтерелгән **Шаһзада Ҡорҡоттоң Пияла** исемле иманлы дуҫы була. **Яуыз Солтан Сәлим Хан**, уларҙың дуҫлығы тураһында белеп ҡалғас, Пияланы саҡырып алып, шундай тәҡдим яһай:

- Әгәр теләһәң, иманлы булғаның өсөн, мин һиңә теләһә ниндәй вазифаны бирә алам. Теләһәң, вәзирем булырһың.

Тегеһе рәхмәтен белдерә лә, йәнә үҙенең иманлы булыуын раҫлап, былай ти:

- Солтаным, булып үткән ваҡиғаларҙан һуң, минең бурысым – Шаһзада Ҡорҡот ҡәбере ҡарауылсыһы булыу.

Пияла бейҙең был ғәмәле - дуҫлыҡ төшөнсәһенең үре, дуҫлыҡ әхлағының күркәм һабағы, хәҡиҡи дуҫлыҡ нәсихәте.

**Әбү Ғосман Хириҙың** шундай һүҙҙәре бар:

«**Аллаһу Тәғәлә** менән дуҫлыҡ – гүзәл әхлаҡ, үҙеңде һәр ваҡыт Раббыңдың ҡарашы аҫтында һымаҡ тойоу; **Рәсүүллаһ**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән дуҫлыҡ - Уның сөннәһенә ярашлы йәшәү, оло һөйөү менән уға буйһоноу; **изге кешеләр** менән дуҫлыҡ – уларға хөрмәт күрһәтеү, хеҙмәт итеү; **иптәштәрең** менән дуҫлыҡ – йылмайып ҡаршы алыу, әгәр гөнаһкәр булмаһалар инде; **ғаиләң** менән дуҫлыҡ – күркәм әхлаҡ; **яһилдар** менән дуҫлыҡ – улар өсөн доға ҡылыу, Аллаһтан уларҙы тура юлға төшөрөүҙе һорау».

Дуҫлыҡ һәм иптәшлектең үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәре һәм методтары бар, шуларҙы үтәгән хәлдә генә дуҫлыҡ һәм иптәшлек дауам итәсәк, һәм йөрәктәрҙә һөйөү уты һүнмәйәсәк. Ләкин әгәр дуҫлыҡ һәм иптәшлек әхлаҡ нормаларына тап килмәһә, һөйөү ептәре дошманлыҡ төйөндәренә әүереләсәк. Шуға күрә, дуҫтар менән һөйләшкәндә, иғтибарлы һәм һаҡ булыу мөһим. Һүҙҙәрҙең үткер ҡылыс кеүектәре лә бар – улар дуҫлыҡты урталай саба, үлтерә, йөрәктә уңалмаҫ яра ҡалдыра, әхүәле рухиәбеҙ баҡсаһы гөлдәрен ҡорота, һәләк итә. Һүҙҙәрҙең яҙғы ләйсән ямғыр кеүектәре лә бар, улар бөтә тирә-йүнде йәнләндереп, файҙа бирә.

Көсләп астырылған күҙҙең нуры булмағандай, мәжбүрән тыуған дуҫлыҡ, мөхәббәттән дә фәтүә юҡ. Мәжбүрилек ҡушып яралған дуҫлыҡ, фани донъя мәнфәғәттәрен көҫәп яралған дуҫлыҡ үткер бысаҡ терәлгән еп кеүек – иртәме-һуңмы ул өҙөлә. Шик юҡ, бындай дуҫлыҡ был донъяла ла, Әхирәттә лә файҙа бирмәй, ике донъя дуҫтарын кәметә генә. Бына ни өсөн лайыҡлы кешеләр менән дуҫ булыу һәм ул дуҫлыҡты һаҡлау уғата мөһим.

Йөрәктәге һөйөү бөтә булмышыңды биләп алһа, ул үҙенең хужаһын камил мөьмингә, хәҡиҡи мөхәббәт әһеленә, әүлиәгә әүерелдерә. Хатта ергә хас мауығыуҙарҙан яралған мөхәббәт тә, Раббыбыҙ хаҡына бөтә барлыҡты үҙ эсенә алһа, кескәй генә төймәнән **Илаһи һөйөү** таждары булып асылырға һәләтле.

Тик фани донъя бәйҙәренән күтәрелә алмағандар ундай кимәлгә күтәрелә алмай. Нәпселәрҙән азат булған ҡол ғына хәҡиҡи һөйөү һәм дуҫлыҡты татый ала. Башҡа юлы юҡ. **Шәйех Нәхшәби** ер ауҙарынан ҡотола алмағандарҙы миҫал итеп килтерә:

«Бер йәш егет падишаһ ҡыҙы һарайына килгән һәм ҡыҙға һөйөүен белдергән. Падишаһ ҡыҙы был турала ишеткәс, һарай ҡапҡаһы янына килгән һәм әйткән:

- Ошо мең дирһәмде ал һәм үҙеңә лә, миңә лә зыян килтерерҙәй хәбәрҙе башҡаса һөйләмә!

Егет баш тартҡас, ул шундай тәкдим яһай:

- Улайһа, 2 мең дирһәм ал!

Был юлы ла егет баш тарта. Яйлап тәкдим 10 мең дирһәмгә барып еткәс, егет ризалаша. Быға яуап итеп падишаһ ҡыҙы ҡысҡырып ебәрә:

- Күҙең аҡса менән томаланып, мине күрмәҫ булғас, нисек һин мине һөйөүең хаҡында һөйләй алаһың? Мине башҡаға алмаштырғандар менән нимә буласағын беләһеңме? Улар баштарын юғалта! - Байлыҡты һайлаған был әҙәмде ҡыҙ ҡыуып ебәрә.

Камиллыҡ дәрәжәһенә күтәрелгән һайлам заттарҙың береһе, был турала ишетеп, иҫтән яҙа. Аңына килгәс, ул былай ти:

- Эй кешеләр! Ялған ҡиммәттәрҙе һайлаусыларҙы нимә көтәсәге хаҡында уйланығыҙ! Аллаһты яратам тип, күңелдәрен башҡаға бағлағандар менән Ҡиәмәттә нимә булыр?!..»

Һөйөүҙең ҡиммәте, мохтажлыҡ килеп тыуһа, һөйгәнең өсөн ҡорбандарға, хәүеф-хәтәргә әҙер булыуың менән баһалана. Ысынлап һөйгәндәр дуҫы өсөн ғүмерен фиҙа ҡылырға әҙер. Һөйөү һәм дуҫлыҡты татымағандар камиллыҡ юлына баҫа алмай, улар үҙҙәрен генә ярата. Һөйә белмәгән йөрәк – эшкәртелмәй ятҡан ер. Камиллыҡ нигеҙендә һөйөү ята бит, бөтә барлыҡтың сәбәбе лә – һөйөү. Билдәле хәҙис-ҡудсиҙа Аллаһу Тәғәлә әйтә:

*«Мин йәшерен хазина инем, Мине танып белеүҙәрен теләнем, һәм бөтә барлыҡты бар иттем».* (Ажлүни, Кәшфүл-Хафа, II, 132; Бурсәүи, Кәнз Махфи)

Мөхәббәт һәм дуҫлыҡты татығандар ғына Илаһи серҙәрҙе күрергә ҡадир. Хаҡ Барлыҡ дуҫтары күңел күҙе менән Раббыбыҙ сағылышын кешеләрҙә генә түгел, тирә-йүндәге үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһында ла күрә ала.

Атайым **Муса Әфәнде**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, хайуандарға ла дуҫтарса мөнәсәбәттең мөһим булыуын раҫлаусы ваҡиға тураһында һөйләне:

«Бынан 40 йыл элек мәрхүм булған остаҙым Сәми әфәнде, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, менән Нурлы Мәҙинәлә бер йортто ҡуртымға алдыҡ. Йорттар ул саҡта кирбестән ине. Йоҡо бүлмәһенә ингәс, бер мөйөштә бөгәрләнеп ятҡан йыланды күрҙек. Беҙ хафалана башланыҡ. Сәми әфәнде беҙҙе туҡтатты һәм тыныс ҡына әйтте:

- Аллаһ барлыҡҡа килтергән йән эйәһе ул, теймәгеҙ уға.

Ысынлап та, оҙаҡламай йылан юҡҡа сыҡты».

Был ваҡиғанан күреүебеҙсә, һөйөү сығанағы Аллаһ һәм Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, менән бергә булғандар Раббыбыҙ бар иткән бөтә йән эйәләренә лә дуҫтарса мөнәсәбәттә. **Юныстың** һары сәскәләргә мөхәббәте, дуҫлығы шундайҙарҙан. Тәбиғәттә Бөйөк Дуҫыбыҙҙың сифаттарын күрмәүселәр – һуҡыр. Тәбиғәт менән аралаша белмәгәндәрҙең йөрәктәре – телһеҙ. Кешеләр араһында дуҫ таба алмағандар уны тәбиғәттә таба. Йылғалар, йәшеллек, тауҙар, сәскәләр, баҡсалар дуҫын эҙләгән һәр бер әҙәм йөрәгенә дуҫлыҡ хаҡында сонет һөйләй. Илаһи сәнғәт әҫәрҙәре менән хозурланып, моң тулған йөрәктәр тетрәнә, уларға илһам килә. Йөрәк улар менән тойғолар аша аралаша. Мәңге яҡын Дуҫыбыҙ һөйөүенең тәрәнлеген аңлаған йөрәктәр бик күп илаһи серҙәрҙе аса һәм үҙе лә мөхәббәтен таба. Шул рәүешле яңғыҙ мосафир сир-сырхауынан арына һәм һағыштан ҡотола.

Ҡеүәтле хәрәкәт, тәбиғәт серҙәре һәм йомаҡтарына яҡынайыу тойғоларҙы нескәртә, Раббыбыҙ менән дуҫлыҡты булдырыуы өсөн кәрәкле фатихалы Илаһи ғилем бирә. Бөтә күп яҡлы һәм хозур барлыҡ иң яҡын һайлам дуҫтарын Бөйөк Дуҫыбыҙға, бөтә был гүзәллектең Хаҡ Тәғәләһенә илтеүсе тупһалар ише. Ошо тупһаларҙы ашаҡлап үтеүселәр Раббыбыҙ менән аралашыу мөмкинлегенә эйә. Ошо дәрәжәгә еткән мөьмин, ҡайҙа ғына булһа ла, һәр саҡ Аллаһ менән бергә, даими Уның яҡынлығын тойоп, йөҙө илаһи нур бөркә.

Был бәхетле һәм нурлы йөҙҙәр - бөтә өммәт һәм ғаләм өсөн материаль һәм рухи бәрәкәт сығанағы.

**Малик бин Динар**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, шулай һөйләне:

«**Ғүмәр бин Абдулғәзиз** хаким булғас, тауҙарҙағы көтөүселәр былай тине:

- Тәҡүә әҙәм хаким булды.

- Һеҙ быны ҡайҙан беләһегеҙ?-тип һорайҙар уларҙан.

- Хайуандар ғәҙәттән тыш тыныс һәм ҡәнәғәт...»

Мөхәммәт бин Уйайна, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, бәйән итте:

«Ғүмәр бин Абдулғәзиз хәлиф булғанда, мин Кирманда һарыҡ көтә инем. Хатта бүреләрҙе күргән саҡта ла, һарыҡтарым үҙен тыныс тота һымаҡ күренде миңә, быныӊ сәбәбен мин Ғүмәр килгәс урынлашҡан рухиәт һәм ғәҙеллектә күрҙем.

Бер төндө көтөүгә бүреләр ябырылды. Мин шаҡ ҡаттым. Әйтерһең, күк көмбәҙен тотоп торған терәүҙәр емерелеп төштө, әйтерһең, һиллек, тынíслыҡ юҡҡа сыҡты.

«Хәҡиҡәт дуҫы, ғәҙел хәлиф үлгәндер», - тип уйланым. Аҙаҡ белеүемсә, ысынлап та, ул төндә Ғүмәр бин Абдулғәзиз донъя ҡуйған».

Әхүәле рухиәһен кешелек тарихындағы камил шәхестәр үрнәгендә тәрбиә ҡылырға тейешле кешегә, Аллаһтың яҡын ҡолдарына хас булғанса, таң мәлен иғтибар менән күҙәтеү лазым. Күк көмбәҙендәге гүзәл төҫтәр менән балҡыған картинаны күҙәтһендәр. Оҫта Рәссамдың әҫәрҙәренә һоҡланһындар, Уның Хакимлығын таныһындар, Уның Ижадын таныһындар. Беҙ быларҙы үҙ күҙҙәребеҙ менән күргәс, йыһан киндеренә еңел һәм ҡыйыу рәүештә буяуҙар һалған Аллаһтың Бөйөклөгөн

мотлаҡ аңларбыҙ. Раузаларға бағығыҙ, миләүшәләргә бағығыҙ...Улар һоҡланғыс төҫтәрҙе ҡара тупраҡтан аламы?! Илаһи Ҡөҙрәттең йыһанда күпме нәзәкәтле, ғәжәйеп мөғжизәләре йәшеренгәнен берәү ҙә һанап бөтөрә алмаҫ...Күңел күҙе күргәндәр генә ул мөғжизәле галереяны тамаша ҡылырға һәләтле. Былар бит Раббыбыҙҙың Ҡеүәте һәм Гүзәллеге сағылышы. Шуға күрә **«... күтәрелеп бер ҡарағыҙ һеҙ Күккә, шунда һис бер етешһеҙ урын күрмәҫһегеҙ. Унан һуң тағы ҡат-ҡат ҡарағыҙ, ҡарашығыҙ, хәлдән тайып, меҫкен хәлдә кире ҡайтыр».**

Йәл, аҡыл һәм логика, күпселек осраҡта, шымарған ҡаялар ише, шифалы ямғырҙың тамсыһын да һеңдерә алмай.

Раббыбыҙ Илаһи сәнғәт өлгөләрен тәрән аңлау ҡеүәһен бирһен һәм уй-хистәребеҙ ҙә шундай уҡ тәрәнлек һәм юғарылыҡҡа эйә булһын.

Даими рәүештә Раббыбыҙ Ҡөҙрәте ҡосағында булыуыбыҙ тураһында етди уйланһаҡ та, нәпселе теләктәребеҙ йөрәктәребеҙҙе ҡамап ала, һәм беҙ Илаһи һөйөү һәм дуҫлыҡтан мәхрүм ҡалабыҙ. Быға иғтибарһыҙ булғандарҙы шағир киҫәтә:

*Ят төйәктән мәңгелеккә «Дуҫ» һүҙен әйтмәй китһәң,*

*Осрашыуың да ул Көндө ят төйәк бүләк итер!..*

Хөрмәтле **Мәүләнә** лә тап шул турала әйтә:

*«О хәкикәт юлсыһы, ер ярылып китер һәм һине ҡотҡарыр кеше табылмаҫ Көн еткәнсе, ҡулыңдан тотоп алһын өсөн, һин был тормошта Хәкикәт Батшаһы менән дуҫлаш.Ул Көндө Уның рөхсәтенән башҡа берәү ҙә ҡулыңдан тотоп ҡала алмаҫ. Ул Көндө әҙәм ағай-энеһенән, атаәсәһенән, ҡатыны һәм улдарынан ҡасыр».*

*«Бәс, шулай булғас, ысын дуҫлыҡтың асылын аңла, һуңғы һулышыңдың башы тап шунда. Ул теге донъя һәм Аллаһ ризалығы өсөн».*

Был һөйөү серҙәрен танып белеүгә ғүмерен бағышлаған **Юныс Эмрэ**, йөрәктәрҙе «Бөйөк дуҫыбыҙҙы» яратырға саҡырып, шулай тип яҙа:

*Атлайыҡ йөрәктәр типкәндә,*

*Тән һәм йән бергәләп үткәндә,*

*Дошман беҙҙе йырып үтмәҫ борон,*

*Уҡталайыҡ, йәнем, Дуҫыма!*

*Был төйәктә мәңге ҡалмабыҙ беҙ,*

*Алдай алмаç беҙҙе был донъя.*
*Әле икәү, әле бергә саҡта*
*Уҡталайыҡ, йәнем, Дуçыма!*

*Китәйек беҙ был донъяны ташлап,*
*Елдерәйек Дуçым иленә,*
*Нәпселәрҙе, ҡурҡыуҙарҙы атып,*
*Уҡталайыҡ, йәнем, Дуçыма!*

Был саҡырыу асылда Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һуңғы минутында әйткән һөйөү тулы һүҙҙәренә оҡшаш:

*«Ий Аллаһым! Рафики-Әғлә, Рафики-Әғлә (Бөйөк Дуçым, Бөйөк Дуçым)!..»*

Ул һөйөүҙән үҙ өлөшөн алғандар, илаһи дуçлыҡ үрҙәренә артыла алғандар мәңгелеккә сәйәхәттәре мәлендә Раббыбыҙҙың вәғәҙәһе серен аңлар:

أَلا إِنَّ أَوْلِيَاء اللهِ لاَ خَوْفٌ عَلَيْهِمْ وَلاَ هُمْ يَحْزَنُونَ

**«Эйе, шулай, Аллаһтың дуçтарына ҡурҡыныс юҡ, улар хәсрәттә ҡалмаç»** (Йунус, 10/62).

**Эй Раббым! Йөрәктәребеҙҙе Һинең Илаһи ризалығыңа алып киләсәк дуçлығың менән нығыт! Беҙгә Һөйөүеңде бүләк ит, һәм беҙҙең һөйөүебеҙҙе ал, шатландыр беҙҙе!**

**Әмин!..**

# *Һүҙгә тоғролоҡ*

*Раббыбыҙға тоғролоҡ Уның әмерҙәрен үтәүебеҙ менән раҫлана. Бындай тоғролоҡ - Уға уҡталған хис һәм ғәмәлдәребеҙҙең юғары нөктәһе. Ул – беҙҙе барлыҡҡа килтереүсе, ғүмер биреүсе, тормошобоҙҙоң һәр мәлендә беҙ Уға мохтажбыҙ. Ғүмеребеҙ ҙә, үлемебеҙ ҙә Уның хакимиәтендә. Шуға күрә Уны һөйөү, һәр һулышыбыҙ менән Уға бәйлелегебеҙҙе тойоу – Уға буйһоноу һәм тоғролоҡ бурысыбыҙҙың юғары дәрәжәһе.*

# *Һүҙгә тоғролоҡ*

Инде мәрхүм булған **Мехмет Акиф** ҡыҙының туйына дуҫы **Али Шевки** әфәндене саҡырғайны. Оло йәштәге мөғәллим тантанаға әҙерәк һуңланы һәм быны Вафа (Тоғролоҡ) тауы аша килеүе менән аңлатты. Акиф әфәнде мәғәнәле йылмайып әйтеп ҡуйҙы:

**«Ниндәй Тоғролоҡ хаҡында һөйләйһең, мөғәллим әфәнде? Әлеге быуын уны ер менән тигеҙләне бит инде».**

Һағыш менән Акиф әфәнде әйткән, «Аһ, тоғролоҡ!» - тип күптәр үкенес белдергән был сифат инҡар итеլә алмай, бөтә кешелек уға мохтаж. Ваҡытында был сифатты һаҡлау ауырлығын, тау артылыу ауырлығы менән сағыштырған Акиф әфәнде, бөгөнгө йәмғиәткә ҡарап, нимә әйтер ине икән?.. Бөгөн **«тоғролоҡ»** төшөнсәһе ҡулланыштан сығып бара? Уны Стамбулдағы шул тау менән бәйле генә ҡулланалар.

**Тоғролоҡ** - Исламда иң кәрәкле сифаттарҙың береһе. Әлбиттә, Исламдың асылы - иман. Шул да хаҡ: иман билдәле дәрәжәлә тоғролоҡ күренеше. Тоғролоҡ – биргән һүҙеңде үтәү, иман – Раббыбыҙға тоғролоғобоҙҙо раҫлау.

Тоғролоҡ – биргән вәғәҙәңә ярашлы ғәмәл ҡылыу ғына түгел, ул – Раббыбыҙға ҡарата ихласлыҡ һәм Уға ҡарата хистәребеҙҙең тотороҡлоғо; пәйғәмбәрҙәр аша килгән иманды беҙгә һеңдергән ата-әсәләребеҙгә, туғандарыбыҙға, иман юлынан бергә атлағандарға, ғалимдарға, изгеләргә сикһеҙ рәхмәтебеҙ, йөрәктәребеҙҙең улар йөрәге менән бергә тибеүе һәм был халәтте даими һаҡлау.

Миҫалдағы һымаҡ, тоғролоҡтоң да ике яғы бар, уларҙың бер яғы «рәхмәтле булыуҙы, ғәҙеллекте, хәҡиҡәт юлынан барыуҙы аңлата». Асылда иманға ҡағылышлы бөтә сифаттар тоғролоҡҡа ла хас.

Тоғролоҡ – пәйғәмбәрҙәргә, әүлиәләргә, кешелектә әхлаҡи юғарылыҡҡа эйә булған камил заттарға хас үҙенсәлек. Ҡайһы бер тәфсир итеүселәр фекеренсә, Ислам – шәһәҙәт һүҙҙәрен әйтеү, йөрәгеңдәге иман, Аллаһу Тәғәләнең тәҡдиренә буйһоноу һәм тоғролоҡ.

Әхүәле рухиәләре тоғролоҡ сығанағынан үҙ өлөшөн алғандар үҙҙәренең нәпсе утын гөл-баҡсаға әйләндереүселәргә бәрәбәр. Ул баҡсаларҙа зекер рауҙалары сәскә ата, тәсбих һандуғастары һайрай, иман болондары йәшәреп ултыра, илаһи ниғмәт сәскәләре үҫә һәм изге ғәмәл йылғалары аға. Ундай йәндәргә үҙҙәренә лайыҡлы бүләктәр әҙерләнгән: йәннәттең юғары кимәле һәм Раббыбыҙҙы күреү. Ундай йәндәр янында ут та үҙенең сифаттарын үҙгәртә һәм гөл-баҡсаға әүерелә.

**Ибраһим**, ғәләйһис-сәләм, Нәмруд тарафынан ялҡыны тауҙай булған утҡа ташланғас, Аллаһтың әмере буйынса:

يَا نَارُ كُونِي بَرْدًا وَسَلَامًا عَلَى إِبْرَاهِيمَ

**«Һәй, ялҡын, Ибраһимға зарар килтермә, һалҡын бул»** (Әнбиә, 21/69), ул гөл-баҡсаға әүерелә, сөнки Ибраһим, утҡа ташланғансы, тоғролоҡ һыуы менән нәпсеһен һүндерә, Аллаһу Тәғәләнең тоғро пәйғәмбәре була.

**Рәсүлуллаһтың**, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, - Ғаләмдәр Ғорурлығының тормошо баштан уҡ тоғролоҡтоң иң гүзәл үрнәге. Мәккәне алғандан һуң, Ғаләм Нуры, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, унда 15 көн тора. Шул арҡала ансарҙарҙың ҡайһы береһе, Пәйғәмбәребеҙ инде Мәҙинәгә ҡайтмаҫ, тип борсола, һағышлана башлай. Аллаһу Тәғәлә бит уға еңеү һәм тыуып-үҫкән изге Мәккәгә ҡайтыу мөмкинлеген биргән. Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ансарҙар араһындағы кәйефте һиҙеп, уларға килә һәм һорай:

- Нимә тураһында һөйләшәһегеҙ?

Хафаларының сәбәбен асыҡлағас, тоғролоҡтоң юғары өлгөһөн күрһәтеп, былай ти:

*- Ий ансарҙар! Былай ғәмәлдәр ҡылыуҙан Аллаһу Тәғәләгә һыйынам. Мин һеҙҙең ҡалаға һижрәт иттем, минең тормошом – һеҙҙең тормошоғоҙ, һәм үлемем дә һеҙҙең янда буласаҡ.* (Мөслим, Йыһат, 86; Әхмәт бин Ханбал, Мүснәд, II, 538)

Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, вафат булыр алдынан, ауырый башлаған, мәсетенең минбәренә һуңғы тапҡыр күтәрелә һәм мөһажирҙарга мөрәжәғәт итә:

*- Ансарҙар менән яҡшы мөғәмәлә итергә васыят итәм. Улар – минең өммәтемдән, минең фекерҙәштәрем һәм таянысым. Улар тулыһынса үҙ бурыстарын үтәне. Әммә хеҙмәттәре өсөн әжерҙәрен тулыһынса алманы. (Уның күп өлөшө Әхирәттә буласаҡ). Шуға күрә иманлы ансарҙарға игелекле булығыҙ һәм яманлыҡ ҡылғандарын ғәфү итегеҙ.* (Бухари, Мәнәкибүл-ансар, 11)

Был телмәре менән ул һуңғы минутына ҡәҙәр биргән вәғәҙәһенә тоғро ҡалыуын күрһәтә. Һәр пәйғәмбәр - үҙ миҫалында кешелекте тоғролоҡҡа өйрәтеүсе. Аллаһу Тәғәләнең һөйөүенә лайыҡ булырға уйлаһаҡ, Хәҡиҡәт юлын күрһәтеүсебеҙ - Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, аманат иткән тоғролоҡтан тайпылмаҫҡа бурыслыбыҙ.

## 1. Ғаләмдәр Раббыһы – Аллаһҡа тоғролоҡ

Рәхмәтле булыуыбыҙ һәм уның һөҙөмтәһе – Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә тоғролоҡ. Аллаһу Тәғәлә үҙе бар ҡылған йәндәргә мөрәжәғәт иткән:

أَلَسْتَ بِرَبِّكُمْ قَالُواْ بَلَى

**«Мин һеҙҙең Раббығыҙ түгелме ни?» - тине. Улар яуап бирҙе: «Әлбиттә, шаһит булдыҡ (Һин беҙҙең Раббыбыҙ)», - тинеләр»** (Әғраф, 7/172).

Был диалогтың асылы шунда: Аллаһтың – Раббыбыҙ, кешеләрҙең Уның ҡоло булыуын раҫлай ул. Ошо антҡа ярашлы ғәмәл ҡылыусылар үҙҙәренең тоғролоғон иҫбат итә ала. Тоғролоҡ өсөн һүҙ генә етмәй. Ант итеү аҡыл һәм тән менән ҡылына торған байтаҡ бурыстар йөкмәтә, был – Аллаһ ҡушҡандарҙы үтәү, һәм Ул тыйғандарҙан тыйылыу.

Раббыбыҙға тоғролоҡ Уның әмерҙәрен үтәүебеҙ менән раҫлана. Бындай тоғролоҡ - Уға уҡталған хис һәм ғәмәлдәребеҙҙең юғары нөктәһе. Ул – беҙҙе барлыҡҡа килтереүсе, ғүмер биреүсе, тормошобоҙҙоң һәр мәлендә беҙ Уға мохтажбыҙ. Ғүмеребеҙ ҙә, үлемебеҙ ҙә Уның хакимиәтендә. Шуға күрә Уны һөйөү, һәр һулышыбыҙ менән Уға бәйлелегебеҙҙе тойоу – Уға буйһоноу һәм тоғролоҡ бурысыбыҙҙың юғары дәрәжәһе. Ҡул-аяҡтарын

ҡырҡтырып, фирғәүен пальмаларға ҡаҙаҡлатҡан иман килтергән сыхырсыларҙың һүҙҙәре – тоғролоҡтоң юғары күренеше.

رَبَّنَا أَفْرِغْ عَلَيْنَا صَبْرًا وَتَوَفَّنَا مُسْلِمِينَ

**«Йә, Раббыбыҙ! Беҙгә сабырлыҡ бир, мосолман булараҡ йәнебеҙҙе ал»** (Әғраф, 7/126), – ти улар. «Эй Раббым! Беҙгә мәрхәмәтле бул, бәләнән йолоп ҡал», - тип әйтмәйҙәр.

Тоғролоҡ өлгөһө булған шундай ҡолдары хаҡында Аллаһ әйтә:

لِيَجْزِيَ اللّٰهُ الصَّادِقِينَ بِصِدْقِهِمْ

**«Аллаһ тоғро булғандарға тоғролоҡтары сәбәбе менән әжерен дә бирәсәк»** (Әхзәб, 33/24).

Тоғролоҡ өлгөһө булған шундай ҡолдары хаҡында Аллаһ әйтә:

مِنَ الْمُؤْمِنِينَ رِجَالٌ صَدَقُوا مَا عَاهَدُوا اللّٰهَ عَلَيْهِ فَمِنْهُم
مَّن قَضَى نَحْبَهُ وَمِنْهُم مَّن يَنتَظِرُ وَمَا بَدَّلُوا تَبْدِيلًا

**«Мөьминдәр араһында Аллаһҡа биргән анттарында тороусылар бик күп. Уларҙың ҡайһылары вәғәҙәһен аҙағына саҡлы килтереп еткерҙе. Сабыр ғына (әжәлен) көткәндәре лә бар. Улар бер нисек тә анттарын боҙманы»** (Әхзәб, 33/23).

Ошо хәҡиҡәткә таянып, Мәүләнә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, илаһи ғилем эстәүселәрҙе фани донъя һынауҙарына түҙем һәм Аллаһҡа тоғро булырға саҡыра:

*«Эй, һандуғас! Ҡырыҫ ҡыш килеүгә күпме зарланмаҡ булаһың? Эй, һандуғас! Ыҙаларға туҡтауһыҙ зарланыу яраған эшме? Йөрәгеңдең һөйгәненә бәйлелеге хаҡ булһа, рәхмәтле бул – тоғролоҡ хаҡында йырла! Сәнскеләрҙе ҡалдырып тор, раузаны маҡта! Һабаҡ, тамырҙарҙы онотоп тор, асылын күр! Нимә менән мәшғүл һин был үтәсәк донъяла, юлыңдың ахыры булмаҫмы ни?»*

Мәүләнә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, аңлатҡанса, тоғролоҡтан яҙыу – ваҡытлы донъя ялтырауыҡтарына йәбешеп, хәҡиҡи, мәңгелек төйәгендән

яҙыу ул, һәм был – бөйөк юғалтыу. Аллаһу Тәғәлә ҡолдарын ундай моңһоҙлоҡтан һаҡ булырға өндәй:

**«Аллаһты оноткан һәм шуның арҡаһында Аллаһ та уларға (яҡшылыҡтың) нимә икәнен онотторған кешеләр кеүек булмағыҙ. Улар – Аллаһ юлынан яҙған бәндәләр»** (Хәшр, 59/19);

**«Кем минең кисәтеүҙәремдән йөҙ сөйөрә, һис шикһеҙ, уның тормошо ғазаплы буласаҡ һәм беҙ уны Ҡиәмәт көнөндә тома һуҡыр килеш (ҡәберенән) ҡубарасаҡбыҙ. Ул әйтер: «Йә, Раббым, мине нимә өсөн һуҡыр килеш (ҡәберемдән) ҡубарҙың? Әүәл мин күрә инем бит», - тиер. (Аллаһ) әйтер: «Шулай шул. Һиңә аяттарым (кисәтеүҙәрем) килде. Һин уларҙы оноттоң. Бына һин дә бөгөн онотоласаҡһың (мәхрүм ҡаласаҡһың)»** (Та Һа, 20/124-126).

Шик юҡ, фани донъяла Раббыһына тоғро булғандар мәңгелек донъяла тоғролоҡ әжерен аласаҡ. Иң бөйөк тоғролоҡ Аллаһу Тәғәләгә хас, киләһе аят та быны раҫлай:

**«Аллаһтан башҡа үҙ һүҙендә ныҡ тороусы тағы башҡа бер зат бармы?»** (Тәүбә, 9/111).

Кисәтеүҙәргә ҡарамайынса, Раббыһын онотоп, ғәмһеҙлеккә сумғандар игелектәр талап ителәсәк хәтәр Хөкөм көнөндә хыянаттары өсөн ғазаплы яза аласаҡ. Тоғролоҡ бит буйһоноусанлыҡтан башлана. Хәҡиҡи дуҫлыҡҡа хас сифат ул. Был турала Мәүләнә, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, бик күркәм әйткән:

*«Мөхәббәт, дуҫлыҡ, һәм башҡа шундай хистәр тоғролоҡ менән бәйле, улар һәр ваҡыт үҙҙәренә хужа булырҙай йәндәрҙе эҙләй. Тоғролоҡ ят булғандарға улар яҡын да килмәйәсәк».*

*«Ҡауырһын яҙҙы: «Тоғролоҡҡа әжер – тоғролоҡ; ғазаптарға әжер – ғазаптар, һәм ҡара кипте».*

*«Хаким теләһә, һәр кемдең башын сабып өҙә ала, хыянаты өсөн үҙ улыныҡын да. Әммә хатта индус-ҡол уға тоғролоҡ һаҡлаһа, хаким уға мәрхәмәтле буласаҡ һәм әйтәсәк: «Оҙаҡ йәшә»... Бындай мәрхәмәтте йөҙләгән вәзир ҙә күрмәйәсәк».*

*«Нимә ҡол, ҡапҡа төбөндәге ҡарауыл эте тоғро булһа, хужаһының йәне унан ифрат та ҡәнәғәт буласаҡ. Хужаһы уны яратып иркәләйәсәк».*

**2. Аллаһ Илсеһенә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тоғролоҡ**

Аллаһтан ҡала иң юғары һәм кәрәкле тоғролоҡ Ғаләмдәр Ғорурлығы - Аллаһ Илсеһенә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тоғролоҡ. Был тоғролоҡ Аллаһу Тәғәләгә һәр ялбарыуында тәү сиратында ***«Өммәтем, өммәтем...»***, - тип, өммәтен ҡайғыртҡан Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тоғролоҡ.

Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хөрмәт һәм һөйөү тәрәнәйеүенән башланған тоғролоҡ уның Сөннәһенә эйәргәндә генә мөмкин. Аллаһҡа илтеүсе бөйөк Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғүмере буйы беҙгә нәсихәт бирә, сикһеҙ сәғәҙәткә илтеүсе юлыбыҙҙа һүнмәҫ маяҡ ул. Уға тоғролоҡ һәм уның тоғролоғо хаҡындағы хәҙистәр уғата ғибрәтле:

«Өхөд һуғышында бер заман мөьминдәр еңелә башлай. Мөшриктәр Пәйғәмбәребеҙҙе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үлтереү өсөн шул ҡәҙәр тырыша, хатта тешен дә һуғып һындыра. Ҡурҡыныс мәлдәрҙә Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, янындағы сәхәбәләр иҫ киткес тоғролоҡ һәм фиҙакәрлек күрһәтә: берәүҙәре уны тәндәре менән ҡаплай, икенселәре осҡан уҡтарға устарын ҡуя, өсөнсөләре ябырылып килгән дошмандарға уҡтар яуҙыра. Ул көн Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, янында булған **Сәғд бин Әбү Ваҡҡас**, раҙыйаллаһу ғәнһү, мөшриктәргә меңләгән уҡ ебәрә. Ғаләмдәр Әфәндеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Сәғдтың тоғролоғона, фиҙакәрлегенә һоҡланып, былай ти:

*«Ий Сәғд! Атам-әсәм һиңә ҡорбан булһын!»*

**Али**, раҙыйаллаһу ғәнһү, әйтә:

«Сәғд менән булған ваҡиғанан һуң, Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ата-әсәһен фиҙа итеү тураһында һис ҡасан ант иткәне булманы» (Бухари, Йыһат, 80; Мөслим, Федаилүс-Сәхәбә, 41/1876).

Икенсе бер миҫал.

Хоҙайбиә көнөндә Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, **Ғосманды**, раҙыйаллаһу ғәнһү, Мәккәгә парламентер итеп ебәрә. Ғосман, раҙыйаллаһу ғәнһү, мөшриктәргә ғүмрә ҡылырға ниәтләүҙәре хаҡында белдерә, тик мөшриктәр ул йылды быға рөхсәт бирмәй. Ә Ғосманға шулай тәкдим итәләр:

«Теләһәң, хәҙер тәуаф ҡыл...»

Әммә Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үҙен бағышлаған Ғосман, раҙыйаллаһу ғәнһү, былай ти:

«Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Ҡәғбәне тәуаф ҡылмай тороп, мин быны эшләмәйәсәкмен. Мин Бәйтуллаһта унан һуң ғына була алам. Уны ҡабул итмәгән ерҙә мин дә юҡ...»

Шул рәүешле ул йәнә бер тапҡыр Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тоғролоғон раçлай.

Шул уҡ мәлдә Пәйғәмбәребеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләрҙән ант ҡабул итә. Ғосман, раҙыйаллаһу ғәнһү, улар араһында булмағанлыҡтан, Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер ҡулы менән икенсеһен тота ла былай тип әйтә:

*«О Раббым! Ә был – Ғосмандың анты».* (Бухари, Әсхәбүн-Нәби, 7; Тирмиҙи, Манакиб, 18)

Ғосмандың, раҙыйаллаһу ғәнһү, Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тоғролоғон күрһәтеп торған оло һөйөүе – бөтә өммәт өсөн үрнәк. Беҙ ҙә, тоғролоғобоҙҙо күрһәтеп, Бейәтур-Ридуанда булған сәхәбәләргә йөрәгебеҙ менән ҡушыла һәм шатлыҡлы хәбәргә лайыҡлы була алабыҙ:

**«Шуныһы хаҡтыр: (эй, Мөхәммәт) һиңә һүҙ биргәндәр (ант иткәндәр) Аллаһҡа һүҙ биргән кеүек булыр. Аллаһтың (хуплаусы) ихтыяры уларҙың (һүҙ биргәндәрҙең) өçтөндәлер. Кем (һүҙендә тормаһа) ант бауын өҙһә, анты үҙ башына булыр. Аллаһҡа биргән һүҙендә кем нык тора, Аллаһтың олуғ әжере шуға булыр»** (Фәтх, 48/10).

Изге Ҡөрьән аятында Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, оло һөйөүебеҙ уға тоғролоғобоҙ булыуы хаҡында әйтелә:

النَّبِيُّ أَوْلَى بِالْمُؤْمِنِينَ مِنْ أَنفُسِهِمْ

**«Иман килтергәндәргә Пәйғәмбәр үҙ йәндәренән дә яҡыныраҡтыр…»** (Әхзәб, 33/6).

Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөү һәм тоғролоҡ шунда ла күренә: уны ятаҡандар баш кейемдәрендә уның сәс, һаҡал һәм аяҡ эҙҙәре ҡалған ерҙе ҡуйып йөрөтә. Уларҙың шундай ихласлығы арҡаһында ғына беҙҙең көндәргә Рәсүуллаһтың, саллаллаһу ғәләйһи

үә сәлләм, япмаһы, таяғы, ҡылыстары һәм йәйәләре, изге мисәте һәм башҡа әйберҙәре килеп етә һәм аманат итеп ҡабул ителә. Ғосман дәүләте ул аманттарға айырыуса хөрмәт һәм тоғролоҡ күрһәтә. Хикмәткә эйә булған күпселек аҡһаҡалдарҙың әйтеүенсә, илдең алты быуатлыҡ күркәм йәшәйеше Ҡөрьән һәм Сөннәгә таянып эш итеүҙә һәм аманаттарҙы ҡәҙер-хөрмәт менән һаҡлауҙа.

## 3. Исламдың бөйөк кешеләренә тоғролоҡ

Һәр мөьмин Исламдың бөйөк кешеләренә тоғролоҡ һаҡларға тейеш. Исламдың бөйөк кешеләре – Аллаһ һәм Унының Илсеһенең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әмерҙәрен һәм тыйыуҙарын, гүзәл әхлағын килтереп еткереүселәр һәм ике донъяға яҡтылыҡ һибеүсе маяҡтар. Улар кешелеккә нәсихәт бирә һәм уны тәрбиәләй, уның эске донъяһын күркәмләй һәм тура юлға йүнәлтә. Шуға әйтелгән бит:

*«Ғалимдарҙың үлеме бөтә донъя үлеменә тиң».*

Икенсе яҡтан, Ҡөрьән тәфсире менән шөғөлләнеүселәрҙең ҡайһы берҙәре аяттағы «иманлылар» һүҙен:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُواْ اتَّقُواْ اللّهَ وَكُونُواْ مَعَ الصَّادِقِينَ

**«Эй, иман килтергән кешеләр! Аллаһ хөкөмдәренә хилаф булыуҙан һаҡланығыҙ! Һәм тура юлдағылар менән бергә булығыҙ!»** (Тәүбә, 9/119) «тоғролар» тип аңлата, һәм аятҡа шундай тәфсир яһай:

«Иман һәм Ислам юлында тоғролар менән бергә булығыҙ. Һәм тоғролоҡҡа эйә булырһығыҙ, фани һәм мәңгелек донъяла ҡотолоусылар йөмләһенән булырһығыҙ!»

## 4. Ата-әсәңә һәм яҡындарыңа тоғролоҡ

Ата-әсәләр хоҡуғы – айырым иғтибар талап иткән мәсьәлә. Уларға хеҙмәт итеү, айырыуса улар оло йәшкә еткәс яҡшы һүҙле булыу һәм хөрмәт менән ҡарау, балаларының тоғролоҡ бурысы булып тора. Изге Ҡөрьәндә ата-әсәләргә һөйөү һәм хеҙмәт итеү Аллаһҡа ғибәҙәттән һуң икенсе итеп телгә алынып китә. Аллаһу Тәғәлә бойора:

**«Раббың бары тик үҙенә генә ғибәҙәт ҡылыуығыҙҙы, ата-әсәгеҙгә лә изгелекле булыуығыҙҙы ҡәтғи рәүештә бойорҙо. Уларҙың береһе йәки икеһе лә һеҙҙең янда ҡартайһа, уларға «Уф» (туйҙым һеҙҙән),**

**тип әйтмәгеҙ; уларға ҡысҡырмағыҙ; икеһенә лә яҡшы мөғәмәләлә булығыҙ. Миһырбан һәм түбәнселек менән улар алдында (күңел) ҡанаттарыңды йәй ҙә әйт: «Раббым, сабый сағымдан алып, улар мине нисек яратып үҫтергән булһа, Һин дә уларға шулай мәрхәмәтле бул», - тип доға ҡыл»** (Исра, 17/23-24).

**Рәсүуллаһтың**, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ғүмере тоғролоғон иҫбатлаусы шундай миҫалдарға бай. Алиҙың әсәһе, уны аҫырауға алған **Фатима бинт Асад**, разыйаллаһу ғәнһүмә, Пәйғәмбәребеҙгә, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бала сағында хәстәрлекле үҙ әсәһе кеүек була. Был изге күңелле ҡатын вафат булғас, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уның баш осонда Аллаһу Тәғәлә алдында уның фиҙакәрлегенә шаһитлыҡ бирә:

«*Ий әсәм минең! Аллаһ һиңә мәрхәмәтле булһын инде! Һин минең үҙ әсәм урынына әсәм булдың. Һин мине үҙең ас булғанда - ашаттың, үҙеңә кейем булмағанда - кейендерҙең, тәмле ризыкты, үҙеңә алмайынса, миңә бирҙең, һәм Аллаһтың ризалығын һәм мәңгелек төйәк кенә һораның*».

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, уны өс тапҡыр ғөсөлләндерергә ҡуша, аҙаҡ үҙ ҡулы уға хуш еҫле кәфүр бөркә, үҙ күлдәген сисеп, уға кейҙерә. Мәрхүмә шул күлдәк менән ерләнә.

Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үҙ ҡулы менән ҡәбер ҡаҙа. Эшен тамамлағас, ул ләхеткә инеп ята ла былай ти:

*«Ғүмерҙе биреүсе һәм Алыусы – Аллаһ. Ул Мәңге һәм Тере. Ий Аллаһ! Әсәйем Фатима бинт Асадты ғәфү ит. Бер Аллаһ хаҡында иҫенә төшөр һәм ҡәберен киң ҡыл. Үҙ Илсең һәм минән алдағы пәйғәмбәрҙәр хаҡына доғамды ҡабул ит. Һинең Мәрхәмәтлеләрҙән Мәрхәмәтле булыуыңа шик юҡ...»*

Һуңынан Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Ғаббас һәм Әбү Бәкер, разыйаллаһу ғәнһүмә, менән бергә йыназа намаҙы уҡый һәм мәрхүмәне ҡәбергә төшөрә. (Табарини, Муғджамул-Кәбир, XXIV, 351-2)

Рәсүлуллаһтың, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, үрнәк булырлыҡ тормошо кешелеккә камил әхлаҡи һабаҡ бирерҙәй, юғары тоғролоҡ өлгөһө булырҙай миҫалдар менән биҙәлгән.

Хунайн алышынан һуң, Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, Хавазин ҡәбиләһе вәкилдәре килә һәм, мосолман булыуҙарына һылтанып,

әсиргә эләккән ырыуҙаштарын азат итеүҙе һорай. Ҡайһы берҙәре Рәсүлуллаһҡа, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, былай ти:

- Улар араһында һинең һөт әсәләрең, тәрбиәселәрең дә бар.

Рәсүуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тоғролоҡ күрһәтеп әйтә:

- Мин үҙемдә һәм Абдулмоталлип улдарында булған әсирҙәрҙе ебәрәм.

Был изге эшкә сәхәбәләр ҙә ҡушыла:

- Беҙ ҙә Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хаҡына әсирҙәребеҙҙе ебәрәбеҙ.

Ул көндө бер ниндәй түләүһеҙ 6 мең кеше азат ителә, һөҙөмтәлә бөтә Хавазин ҡәбиләһе Ислам ҡабул итә.

✵

Ата-әсәләрҙән ҡала һөйөүебеҙ һәм тоғролоғобоҙ туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға. Яҡынлыҡ ике төрлө була: беренсеһе – иман берлеге, икенсеһе – туғанлыҡ берлеге. Туғандар менән араларҙы өҙөү – насар, гөнаһлы ғәмәл. Шуға күрә әйтелгән бит:

«Туғанлыҡты өҙөүселәр булған йыйынға Аллаһу Тәғәләнең рәхмәте төшмәҫ».

Динебеҙ туған-тыумасаға һәйбәт мөнәсәбәттә булыуҙы бойора һәм, уларҙың яҡынлығынан сығып, хоҡуҡтарын билдәләй.

Ғаилә һәм туғанлыҡ мөнәсәбәттәре институты - Раббыбыҙҙың мөғжизәләре һәм серҙәренең бер күренеше. Никахтан һуң, элек сит булған кешеләр араһында тыуған мөхәббәт һәм туғанлыҡ хистәре - Аллаһу Тәғәләнең бүләге һәм бәрәкәте. Туғанлыҡты өҙөү – тоғролоҡҡа хыянат. Кешеләрҙә тарҡаулыҡ һымаҡ күренгән нимәне никах бөтәйтә, уның сығанаҡтары Әҙәм һәм Һауаға уҡ, ғәләйһимәссәләм, барып тоташа. Иманлылыҡ күҙлегенән ҡарағанда, тоғролоҡ туғанлыҡ ептәренән юғарыраҡ. Ғаилә һәм туғанлыҡ мөнәсәбәттәренә ислам әхлағын индереү фани донъя именлеген нығыта. Уларҙың дауамы булған ихласлыҡ һәм тоғролоҡ – фани донъя һәм Әхирәт бәхете сығанағы.

Әммә тоғролоҡҡа лайыҡлылар улар ғына түгел. Йөрәгебеҙҙә диндәш дуҫтарыбыҙға ла тоғролоҡ булырға тейеш. Әхлағы һау булған һәр шәхес өсөн баҡыйлыҡҡа күскән ата-бабаларына, әсәй-өләсәйҙәренә, тере һәм

үлгән мосолмандарға, Ватанына тоғролоҡ, йәмғиәт йөкмәткән һәр нәмәгә тоғролоҡ мотлаҡи булып тора.

Кешелә булған Аллаһтан ҡурҡыу һәм тоғролоҡ хисе Илаһи ҡанундарға ғафиллыҡтан, йәнебеҙҙәге һөйөүҙе емереүҙән әрсәләп ҡалырға һәләтле. Юғиһә нәпсе, беҙҙе ике йөҙлөлөккә, ғәмһеҙлеккә этәреп, бер упҡындан икенсе упҡынға ташлаясаҡ. Бик күп халыҡтарҙың юҡка сығыуы, Раббыбыҙҙың асыуына тарыуы Хаҡ Тәғәләбеҙгә биргән вәғәҙәне боҙоуға бәйле. Антҡа тоғролоҡ - кешелектең бурысы, ә улар быны ҡабул итмәгән. Улар ғилем, идрак (танып белеү), мәғрифәткә (хаҡиҡи танып белеү) лайыҡ була алмай юҡка сыҡҡан. Ошо хәлдәрҙе күргәндәр өсөн, киләсәк быуындар өсөн нәсихәтле һабаҡ былар. Изге аятта әйтелә:

**«Уларҙың күбеһен антҡа тоғро тапманыҡ...»** (Әғраф, 7/102).

**Фәридуддин Аттарҙың**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, хикәйәһендә, Аллаһтың биргән бәрәкәттәрен онотоп, нәпселе буш теләктәр ҡоло булғандарҙың хәле бик сағыу һүрәтләнә:

Бер падишаһтың бик яратҡан һунар эте була. Уның үҙенә генә хас һиҙгерлеге, отҡорлоғо була ау эшенә. Шуға күрә падишаһ уны юғары баһалай һәм һунарға һәр саҡ үҙе менән алып йөрөй. Падишаһтың фарманы буйынса, эттең муйынсағын гәүһәрҙәрҙәр менән биҙәйҙәр, тәпәйҙәренә алтын һәм көмөш beләҙектәр кейҙерәләр, арҡаһына атлас япма һалалар.

Бер заман падишаһ ауға йыйына һәм ғәҙәттәгесә этен дә ала. Атҡа атланған, ебәк муйынсаҡ менән этен тотҡан падишаһ ғорур һәм тыныс була. Әммә көтөлмәгән хәл һәммәһен селпәрәмә килтерә. Яратҡан эте, хужаһын онотоп, муйынсағын ситкә тарта башлай. Падишаһ, сәбәбен белмәйенсә, уны кире урынына баҫтырырға тырыша. Эт ҡаршылаша, сөнки табып алған һөйәген кимерә башлай. Был хәлде күреп, падишаһ аптырап ҡысҡырып ебәрә:

- Мин барҙа, миңә иғтибар итмәйенсә, ниндәйҙер шөғөл тапҡан! Мөмкин булған хәлме был?!..»

Уның бик ныҡ йәне көйә. Этенең уның ҡәҙерен белмәүе, тоғролоҡһоҙлоғо, вайымһыҙлығы күңелен яралай. Ул эт кенә булһа ла, уны ғәфү итергә теләмәй. Этенең күҙ асып йомғансы хужаһының хәстәрлеген, мәрхәмәтен, йомартлығын бер эшкинмәгән һөйәккә алмаштырыуы падишаһтың эсен бошора, һәм ул быны ғәфү итергә теләмәй:

- Ҡыуып ебәрегеҙ был рәхмәтһеҙҙе!

Эт хужаһының ниңә асыуланғанын аңлап ҡала, тик инде һуң була.

- Ий падишаһ! Гәүһәр, алтын-көмөштәрен һалдырып алайыҡ! - тип һорай һарай хеҙмәтселәре, тик ул былай тип бойора:

- Шул килеш китһен!

Этенең артынан да ҡысҡырып ҡала:

- Шул килеш китһен! Шул килеш китһен дә, эҫе, йәнһеҙ сүллектә, бер кемгә лә кәрәкмәгән хәлдә, ошо биҙәүестәргә ҡарап, әсенеп үҙе юғалтҡан ҡәҙер-хөрмәт, бәрәкәттәр хаҡында уйланһын!..

Нәсихәтле был тарих Аллаһу Тәғәләнең бихисап бәрәкәттәрен лайыҡлы баһалай алмаған, сүпкә лә тормаған буш өмөттәр менән алданып, имандан буш ҡалғандарҙың һәм шул арҡала юҡҡа сыҡҡандарҙың хәлен аңлата. Иртәме-һуңмы улар үҙҙәренең хәлен, маҡсаттарының файҙаһыҙлығын аңлар, тик эш үткән булыр. **Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткән:

*«Тоғроһоҙлоҡ эт өсөн дә оят һәм шелтәгә лайыҡ ғәмәл икән, һин, кеше, нисек тоғролоҡтан мәхрүм була алаһың?»*

Исламдың бөйөк кешеләре иман юлындағыларға былай тип мөрәжәғәт иткән:

«Ғәмһеҙҙәр тормошонан һәм тәҡүәлеләр тормошонан яҡшы һабаҡ ал һәм Аллаһҡа тоғро ҡол булырға ынтыл!»

**Эйе, эштең асылы шунда: тоғро ҡол булырға ғына кәрәк.**

Беҙгә тәҡүәле ҡоло янында оҙаҡ йылдар йәшәргә насип иткән Аллаһу Тәғәләгә сикһеҙ күп маҡтауҙарыбыҙ. Ул бөйөк кеше 1999 йылда Раббыбыҙға ҡайтҡан хөрмәтле атайым **Муса әфәнде**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, ине.

Атайым һәм остаҙым Әбү Бәкер әс-Ситдыйҡҡа, разыйаллаһу ғәнһү, хас күркәм сифаттарҙы үҙендә туплаған кеше булды. Яратҡандары уны **«сахибул-вафа»**, йәғни «тоғролоҡ эйәһе» тип йөрөттө, һәм ул был исемгә лайыҡ ине. Аллаһтың һайлам ҡолоноң тормошо тоғролоҡ миҫалы, әхүәле рухиәһе – көндәребеҙҙең ҡояшы, төндәребеҙҙең айы булды. Уның менән хушлашыуға байтаҡ ваҡыт үтһә лә, йөрәгебеҙҙәге айырылышыу яраһы әле булһа уңалмаған, тәрәнәйгән генә. Уның янында яралған сикһеҙ тоғролоҡ

мөхите тиңе булмаған туғанлыҡ, тоғролоҡ, дуҫлыҡ һәм һөйөү кеүек гүзәл сифаттарҙы тәрбиәләгән мәктәп булды.

Аллаһу Тәғәлә ҡолона маҡтаулы эш ҡуша икән, ошо хеҙмәт өсөн мөһим булған күркәм һәләттәрҙе лә бирә. Йөҙө лә, әхүәле рухиәһе лә камил булған зат - Муса әфәнде - Раббыҙҙың шундай һайлам ҡолдарының береһе булды. Иң ауыр һәм сетерекле хәлдәрҙән үҙенә генә хас үткер зиһен һәм әҙәплелек менән сыға белде һәм беҙҙе лә шуға өйрәтте. Уның аураһында үҫкән гүзәл сәскәләр рухиәтебеҙ баҡсаһын йәнләндерә. Уның Раббыбыҙға бирелгәнлеге, Ҡөрьән һәм Сөннәгә ярашлы ғәмәл ҡылыуы, ата-бабалар традицияларына тоғролоғо, туғандарға, дуҫтарға, хатта дуҫтарҙың дуҫтарына йылы мөнәсәбәте, вәкеф эштәрендәге фиҙакәрлеге һәм уға хас бихисап күркәм сифаттар – ҡасандыр йәндәребеҙ Хаҡ Тәғәләбеҙгә биргән антты ни рәүешле үтәргә тейешлегебеҙҙе күрһәтеп тороусы һоҡланғыс миҫал.

Муса әфәндәнең тоғролоғон раҫлаусы мәлдәрҙе хәтергә төшөрөп киткем килә.

Йәмғиәттә яҡлау тапмаған, мохтажлыҡ эсендә көн күргән үгәйһетелгән оло йәштәге кешеләрҙе күргәндә, ул бик борсола һәм әйтә торғайны:

«Асылда был әҙәмдәрҙе үҙ йорттарыбыҙға алып ҡайтырға тейешбеҙ, әммә беҙҙең ундай мөмкинлегебеҙ юҡ, шуға күрә уларҙы бағыу өсөн махсус йорттар төҙөргә тейешбеҙ».

Аҙаҡ ул үҙенең ҡул аҫтындағылар менән был уйын тормошҡа ашырҙы, һәм, ҡарттар йортона йыш-йыш барып, кәрәк булған бөтә нәмә менән уларҙы тәьмин итергә тырышты.

Ул баҡсабыҙҙа йәшәгән һәр бесәйҙең холҡон белә, бесәй балаларына холоҡтарына ярашлы исем бирә һәм холоҡтарына ярашлы улар менән аралаша ине.

Ул 50 йыл элек мине тәрбиәләгән шәфҡәт туташын табырға бойорҙо һәм уға ҙур хөрмәт күрһәтте.

Остаҙы **Мәхмүт Сәми әфәндегә** тоғролоғо легендаға әйләнеп китте. Байрам көндәрендә ул мотлаҡ Сәми әфәнде йортона бара торғайны. Тәүге ҡорбанды ла ул мотлаҡ уның исеменән салыр ине. Ул, остаҙы рухына бағышлап, Ҡөрьән сыға, һәм Сәми әфәндене яратыусыларҙы ла шуға

өндәй ине. Һөҙөмтәлә меңдәрсә кеше, унның үрнәгенә эйәреп, Ҡөрьән сыға, ә Муса әфәнденең йөрәге шатлыҡ менән тула ине.

Әбү Бәкерҙең һөйөүен һәм дуҫлығын өлгө итеп ҡуйып, ул ғәмәлдәре менән «һөйгәндең тоғролоғо ниндәй булырға тейешлеген» үҙ миҫалында күрһәтте. Бөгөн тоғролоҡ ерендә йәшәгәндәр күңелдәрендә бөрөләнгән гөлдәрен Раббыбыҙға, Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, тәҡүәлеләргә ҡарата оло һөйөү булып асылған гөлдәр итеп тәрбиә ҡылырға тейеш.

**Аллаһу Тәғәлә беҙҙе ихсан менән бүләкләһен, даими Раббыбыҙ янында булыу тойғоһон бирһен!**

**Эй Раббым! Әхүәле рухиәләребеҙҙе тоғролоҡ эйәләренә хас сифаттар менән биҙә һәм беҙҙе тәҡүәле ҡолдарың йөмләһенән ит! Изгелекле һәм ихлас ғәмәлдәр ҡылып, юғары йәннәт баҡсаларына инергә насип ит! Йөҙҙәребеҙҙе нурландырырҙай балалар бир, тәҡүәле быуындар сылбыры менән бүләклә. Уларҙы Һиңә, Пәйғәмбәребеҙгә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ата-әсәләренә, туғандарына, бөтә мөьминдәргә, Ватанына, милләтенә, йөкмәтелгән бурыстарыбыҙға тоғролоҡло ит. Ике донъяла ла Һинең Илаһи мәрхәмәтең аҫтында йәшәргә насип ит!**

**Әмин!**

# *Тәҡүәлек*

*Хаҡ Тәғәләгә яҡынайғандар Уның һөйөүе, рәхмәте күләгәһенә инә, һөҙөмтәлә әҙәмдәрҙең донъяға хас нәпселе теләктәре, лупа йүнәлткәс, нурланып янып киткән ҡағыҙ ише юҡҡа сыға. Ә инде улар яҡтылыҡ сығанағына әүерелгәс, башҡа кешеләр үҙҙәренең ихтыярынан тыш уларға тартыла башлай.*

# *Тәҡүәлек*

Аллаһу Тәғәлә, ҡолдарын хаҡ юлға төшөрөү өсөн, холҡо һәм һәләттәре менән улар араһынан айырылып торғандарҙы һайлап ала һәм был тәҡүәле кешеләргә остаҙлыҡ эшен йөкмәтә.

Әҙәм тәбиғәте менән көслө шәхестәргә эйәреүсән, йәғни, аҡылына һәм йөрәгенә тәьҫир итеп, рухи тәрбиә биреүселәрҙең, Хаҡ Тәғәләгә һәм хәҡиҡәткә йүнәлтеүселәрҙең үрнәгенә эйәреү теләге һалынған уға. Шуға күрә Аллаһу Тәғәлә изге китаптар ғына ебәрмәгән, кешеләргә нәсихәт биреүсе һайлам ҡолдарын, йәғни пәйғәмбәрҙәрен һәм әүлиәләрен дә ебәргән. Пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр иҫ киткес гүзәл сифаттарға эйә булған, хатта дошмандары ла улар хаҡында насар һүҙ һөйләй алмаған. Күпме кеше улар аша Раббыбыҙға һәм Хәҡиҡәткә ҡайтҡан, иман юлына баҫҡан. Уларҙың барыһы ла Ҡөрьәндең тере кәүҙәләнеше булған бөйөк шәхес – Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, йоғонтоһонда иманға килгән һәм Уның тирәһендә тупланған. Тереләй ҡыҙ балаларын күмгән ҡырағай халыҡ юҡҡа сыҡҡан һәм улар урынына Ислам тарихының иң яҡшы биттәрен яҙған шәхестәр тыуған.

Иманға килгәндәрҙең төп бурысы булып иман, ихласлыҡ, тәҡүәлек менән бер рәттән үҙендә Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хас лайыҡлы сифаттарҙы тәрбиәләү ҙә тора. Шундай сифаттарға эйә булған мөьминдәр хәҡиҡәт юлына тартып тороусы магнитҡа әүерелә. Ә ундай сифаттарҙан мәхрүм ҡалғандар, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, иман юлына баҫҡандарҙы диндән айырыуы ихтимал. Ул хәҡиҡәт тураһында **Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, былай тасуирлап яҙа:

*«Баязит Бистами, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, осоронда утҡа табыныусы әҙәм йәшәгән. Бер заман бер мосолман уға былай тигән: «Ҡотолоу өсөн һәм маҡтаулы кеше булыу өсөн, мосолман булыу һиңә яҡшыраҡ булмаҫмы?»*

*Утҡа табыныусыһы әйткән: «Минең ҡотолоуымды теләгән әҙәм, әлегә мин өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрәм һәм иманым хаҡында асыҡтан-асыҡ һөйләгем килмәй, әммә күңелемдең иң төбөндә Баязит ышанғандарға ышаныу бар. Унда үҙенсәлекле матурлыҡ һәм рухиәт йәшәй. Рухым әле ул диндә ҡабул итмәне, тик Баязит диненең юғарылығы миндә һоҡланыу уята. Ул мин белгәндәрҙең һәммәһенән өҫтөн торған, әҙәпле, яҡты һәм һиҙгер йөрәкле, үҙенә башҡа кеше.*

*Әгәр мине үҙегеҙҙәге иманға саҡырһағыҙ, был минең өсөн түгел... Һеҙҙеке һымаҡ иманды мин теләмәйем. Иманға килеү өсөн мең теләк тыуһа ла, һеҙҙәге уҫаллыҡты, тупаҫлыҡты күреп, был теләктәр һүнәсәк һәм һис ҡасан ҡабат тыумаясаҡ, сөнки әҙәм һеҙҙә Исламды түгел, уның исемен, ярлығын ғына күрә. Ҡыҫыр сүллеккә ҡарап, ул сәскәләр, баҡсалар тыуҙырыр тип көтөү менән бер ул...*

*Тойоуымса, Баязит иманында тартыу көсө лә, яҡтылыҡ та бар. Әгәр уның иман тамсыһы сүллеккә төшһә, ул океан булыр ине.*

*Сикләнгән тышҡы яры менән ҡапланған һеҙҙең иманығыҙ ике йөҙлөлөк кенә. Һөйөү тыуҙырыу урынына ытырғаныу тыуҙырған йәмһеҙ, хисһеҙ тауышлы мәзиндәргә оҡшаш иманығыҙ. Һеҙҙең иманығыҙ гөл-баҡсаға инһә, раузаларҙы ҡоротасаҡ.*

*Баязит имамдың иманы әхүәле рухиәһе көмбәҙенә ҡояш кеүек күтәрелһә һәм бөтә йыһанды яҡтыртһа, был фани донъя үҙәгенә ҡәҙәр зөбәрҙжәт менән туласаҡ, ер ожмахҡа әүереләсәк, ә мөьминдәрҙең күңеленә илаһи ғилем туласаҡ. Шуға күрә Баязиттың иманы һәм тәҡүәлеге минең йөрәгемдә һәм рухиәтемдә тетрәндерә һәм үҙенә саҡыра».*

Утҡа табыныусыға иҫ киткес йоғонто яһаған Баязит Бистамиҙың гүзәл әхлағы, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, Исламға саҡырыусыларға нәсихәтле үрнәк!..

Был бөйөк әүлиә утҡа табыныусыны ҡайһы яғы менән үҙенә ылыҡтырған һуң? Һис шикһеҙ, Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, мөхәббәте һәм тоғролоғо менән... Бөтә барлыҡҡа Хаҡ Тәғәлә күҙе менән ҡарай белеүе, йәғни **бөтә барлыҡҡа миһырбанлығы менән**. Баязит Бистамиҙың, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, рухи донъяһын асып һалыусы киләһе миҫалдар һәммәбеҙ өсөн нәсихәтле.

Бер сәфәрендә Баязит Бистами, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, ял итер, хәл йыйыр өсөн, бер ағас янында туҡтай. Аҙаҡ юлын дауам итә. Тик бер аҙ барғас, биштәре буйлап китеп барған ҡырмыҫҡаны күреп ҡала.

«Мин был меҫкен ҡырмыҫҡаны Ватанынан айырҙым!» - тип ҡысҡырып ебәрә ул һәм килгән юлынан кире китә, теге ял иткән ағас янына барып, ҡырмыҫҡаны шунда ҡалдыра.

Аллаһу Тәғәләгә оло һөйөүе уның күңелен шул ҡәҙәр нескәртә, ул һәр барлыҡтың яфа, михнәтен тоя.

Бер заман ул йөк ташыған хайуанды туҡмағандарын күрә, туҡмауҙан меҫкендең арҡаһында ҡыҙыл юлаҡ булып яра эҙҙәре күренеп тора. Оҙаҡламай Баязит Бистамиҙың сираҡтарында ла ҡан күренә...

Рәсүлуллаһҡа, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, хас сифат була был.

Бер заман Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бер ансарҙа ҡунаҡта була һәм, ял итеп, финик баҡсаһында уйланып ултыра. Көтмәгәндә шундағы дөйә илауға оҡшаш ҡыҙғаныс тауыштар сығарып ҡысҡыра башлай һәм күҙҙәренән йәш ағып китә. Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, дөйә янына килә, йәштәрен һөртә, тынысландыра. Аҙаҡ дөйәнең хужаһын киҫәтә:

*«Был дөйә өсөн һине яуаплы иткән Аллаһтан ҡурҡмайһыңмы ни? Ул һинең ҡыланышыңа зарлана. Һин уны ас тотаһың һәм ауыр эш менән йонсотаһың».* (Әбү Дауыт, Йыһат, 44)

Баязит Бистами һымаҡ, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һыҙаттарын үҙендә туплаған, йөрәктәре сәләмәт ҡәлб дәрәжәһенә күтәрелгәндәр һәр бер ғәмәле менән Пәйғәмбәребеҙ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, юлын ҡабатлай. Шуға күрә улар, улар артынан барыусылар - өлгөлө иманға эйә булыусылар. Уларҙың яғымлы мөғәмәләһе күңелдәрҙе бөтәйтеүсе, шатлыҡ биреүсе яҙғы еләҫ көн кеүек. Ҡараштары тыныслыҡ бирә. Ә нур бөркөп торған йөҙҙәре даимән Аллаһты иҫкә төшөрә, сөнки улар гел генә Аллаһ Илсеһенән илһам һәм илаһи ғилем алып тора. Киләһе миҫал быға асыҡ дәлил.

**Мәүләнәнең**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, бер уҡыусыһы **Гурджу Хатундың** ире Кайсери округы пашаһы һәм губернаторы була. Гурджу Хатун билдәле сәлжүк рәссамы һәм каллиграфы **Ғәйнүтдаулаға** Мәүләнәнең портретын йәшерен генә төшөрөп алып килергә бойора. Рәссам, күп уй-

лап тормай, үҙенә ҡушылған эш хаҡында Мәүләнәгә килеп һөйләй. Шәйех йылмайып ҡарай ҙа былай ти:

«Ҡушылған эште, үҙеңә нисек уңайлы, шулай үтә».

Рәссам эшкә тотона, әммә төшөргән портретының алдындағы Мәүләнәгә бөтөнләй оҡшамағанын күрә. Аптырап, ул эшен ҡабаттан башлай, һүрәтен төшөргән арала Мәүләнә шәйехтең ҡиәфәте егерме тапҡыр үҙгәрә. Рәссам үҙенең көсһөҙлөгөн танырға мәжбүр була һәм эшен туҡтата. Был ваҡиға уны шул ҡәҙәр тетрәндерә, уйландыра, үҙенең әхүәле рухиәһенә яңыса ҡарарға мәжбүр итә.

**«Әгәр был диндәге вәли (изге бәндә) шулай икән, Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, ниндәй һуң?»** - тип уйлай ул һәм Мәүләнә шәйехтең ҡулын килеп үбә.

Йәнә бер миҫал. Беҙ **Сәми әфәнде** һәм атайым **Муса** менән Бурсанан Стамбулға ҡайтып килә инек. Яловалағы кисеүгә еткәс, автомобиль борамына сиратҡа баҫтыҡ. Борам килгәс, кешеләр араһында сират өсөн талаш сыҡты. Шул мәл хәрәкәтте көйләүсе беҙҙең янға килде лә үтергә ҡушты һәм артта ултырған Сәми һәм Муса әфәнделәрҙе күреп ҡалды. Ул шаҡ ҡатып туҡтап ҡалды. Шунан, йәнә машинаға яҡыныраҡ килеп, артта ултырыусыларға диҡҡәт менән ҡараны. Саҡ тын алып, былай тине:

**«Аллаһ, Аллаһ, ниндәй ғәжәп был донъя! Фәрештәләрҙеке һымаҡ йөҙҙәр бар... Нәмрудтыҡы ише йөҙҙәр бар...»**

Был ваҡиға, һис шикһеҙ, һүҙһеҙ, йөҙ-ҡиәфәт менән генә лә Аллаһҡа саҡырырға мөмкинлекте иҫбатлай.

Беҙгә, мөьминдәргә, үҙебеҙгә тәғәйенләнгән юлды, ошо бөйөк кешеләр миҫалынан үрнәк алып, камиллыҡҡа ирешеү юлы итеп күреү лазым. Автомобилдең арттағы тәгәрмәстәре алдағылары артынан эйәреп барған кеүек, кешеләр ҙә үҙҙәре күргән, өлгө итеп алған кешеләр йоғонтоһонда формалаша. Йыһан тәртибен, тормоштоң әхлаҡи юғарылығын зирәк аҡыллылар, ихлас, саф, һиҙгер йөрәклеләр тәьмин итә. Әүлиәләр, тәҡүәлеләр – халыҡтың бәхет һәм именлеге көмбәҙендәге йондоҙҙар ише булһа, наҙандар ҡараңғылыҡ упҡыны менән бер. **Әхмәт Йәүҙәт Пашаның** хикәйәһе лә үрҙә әйтелгәндәрҙе ҡеүәтләй.

«Омеядтар хәлифе **Вәлид бин Абдулмалик** яңы биналар төҙөү менән мауыға. Уның хакимлығы осоронда халыҡ төҙөлөш эштәренә ҙур иғтибар

бирә. Һәр йыйында мотлаҡ рәүештә төҙәлөшкә ҡағылышлы мәсьәләләр ҡарала. Күңел асыуҙы, нәзәкәтле табындарҙы яратҡан **Сөләймән бин Абдулмалик** иһә йәмғиәтте тантаналы мәжлестәр һәм байрамдар ҡороуға әүәҫләндерә. Аҙаҡ хакимлыҡ баҫалҡылығы менән айырылып торған **Ғүмәр бин Абдулғәзиз**, бөйөк хәлиф, тәҡүәле Аллаһ ҡоло ҡулына күсә. Халыҡ та Аллаһҡа йөҙө менән борола, Раббыбыҙға ғибәҙәттәр һәм буйһоноусанлыҡ алға сыға. Мәжлестәрҙәге әңгәмәләр ҙә рухи темалар тирәһендә урала:

«Бөгөн төндә ниндәй намаҙҙар уҡының? Изге Ҡөрьәндең ниндәй аяттарын ятланың? Был айҙа нисә көн ураҙа тоттоң?» (Ҡысас әл-Әнбиә вә Таварих Хулафа, I, с. 717)

Тартым көсөнә эйә камил шәхестәр тирәһендә кешеләрҙең күбәләктәр һымаҡ өйөрөлөүе хаҡ. Был тартым көсөн бөйөк шәхестәрҙең йөрәктәрен биләгән Раббыбыҙға оло һөйөү тыуҙыра, сөнки Раббыбыҙ уларҙың күрер күҙе, һәммәһен ишетер ҡолағы. Хаҡ Тәғәләгә яҡынайғандар Уның һөйөүе, рәхмәте күләгәһенә инә, һөҙөмтәлә әҙәмдәрҙең донъяға хас нәпселе теләктәре, лупа йүнәлткәс, нурланып янып киткән ҡағыҙ ише юҡҡа сыға. Ә инде улар яҡтылыҡ сығанағына әүерелгәс, башҡа кешеләр үҙҙәренең ихтыярынан тыш уларға тартыла башлай. Улар, фани донъя мәнфәғәттәрен ситкә ҡуйып, һауаланыу, эреләнеү кеүек сифаттар менән бәйле булған барса түбәнлектәрҙән ары тора. Уларҙың берҙән-бер теләге – Аллаһтың ризалығына ирешеү, шуға күрә бәләкәй-ҙур, һыуыҡ-эҫе, байярлы төшөнсәләрендә улар айырма күрмәй, йәғни дәрәжәләргә, үҙгәреүсән тормош шарттарына улар битараф. Уларҙың һәммәһе фани, ваҡытлы бит.

Был бәхетлеләрҙең әхүәле рухиәләре Аллаһ янында, Аллаһтың күҙәтеүе аҫтында, шуға ла улар башҡаларҙың етешһеҙлектәренә, тупаҫлығына иғтибарһыҙ.

Ергә хас ваҡлыҡтарҙы ҡалдырып һәм бәхәстәрҙән ситләшеп, рухи юғарылыҡты һаҡлап, улар йыш ҡына кешеләрҙән үпкә, шелтә һүҙҙәре ишетә, тик Аллаһтың әмерен һәр саҡ иҫендә тота:

وَعِبَادُ الرَّحْمَنِ الَّذِينَ يَمْشُونَ عَلَى الْأَرْضِ هَوْنًا
وَإِذَا خَاطَبَهُمُ الْجَاهِلُونَ قَالُوا سَلَامًا

**«Кемдер ер йөҙөндә итәғәт менән йөрөй, шулар мәрхәмәтле ярлыҡаусы (Аллаһ)тың бәндәләре булыр. Һәм улар наҙан ахмаҡтарҙың әҙәпһеҙлегенә ҡаршы «Сәләм» менән яуап бирә»** (Фурҡан, 25/63).

Хәҙис-шәрифтә әйтелә:

*«Берәү мәңгелек тормошо хаҡында борсолһа, Аллаһ уның йөрәген хазиналар менән тултырыр, ер тормошон уға буйһондороп, эштәрен тәртипһеҙлектән ҡотолдорор. Берәү ер тормошо өсөн борсолһа, Аллаһ алдына ярлылыҡты сығарыр, эштәрендә буталсыҡлыҡ тыуҙырыр, ер байлыҡтарын тәҡдиренә яҙған ҡәҙәр генә бирер».* (Тирмиҙи, Сыфатул- ҡыяма, 30)

Бөйөк кешеләр, Аллаһтың һайлам ҡолдары, шул ҡәҙәр гүзәл әхлаҡҡа эйә була, улар берәүҙе лә йәберләмәй, һәм уларҙы ла берәү ҙә йәберләмәй. Улар илаһи асыштар менән йәшәй:

الَّذِينَ يُنفِقُونَ فِي السَّرَّاء وَالضَّرَّاء وَالْكَاظِمِينَ الْغَيْظَ
وَالْعَافِينَ عَنِ النَّاسِ وَاللّهُ يُحِبُّ الْمُحْسِنِينَ

**«Улар - саф мосолмандар; муллыҡта ла, юҡлыҡта ла йомарт булғандар, асыу һаҡламаусылар, кешеләрҙең кәмселектәрен кисерә белеүселәр (өсөн ул йәннәт). Аллаһ изгелек ҡылғандарҙы ярата»** (Әлү Ғимран, 3/134).

**Йәғәфәр Садыҡ**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, өҫтөнә ҡайнар аш түккән хеҙмәтсеһен ғәфү итә, хатта иреккә ебәрә. **Хәсән Басри** үҙе хаҡында ғәйбәт тараҡандарҙы һәр ваҡыт ғәфү итә, һәм, төҙәлһендәр тигән ихлас теләк менән, уларға бүләктәр ебәрә.

Исламдағы был бөйөк кешеләрҙең тәҡүәлеге хаҡында **Юныс Эмрэ**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, бик күркәм яҙған:

Уйлама, заһит, бар ғилләә

Ураҙа, намаҙ һәм хаж, тип.

Бары тик камил кеше бул –

Шундай ул ябай талап.

Кешелек өсөн иман үрнәге булған тәҡүәле кешеләр Аллаһуға ғибәҙәткә бәйле мәсьәләләрҙә һәр саҡ мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлек яғында торған,

һәм уларҙың йәндәре лә тәсбихкә оҡшаш. Улар янындағылар илаһи таң ҡалыуҙы татып белгән. Һайлам ҡолдарҙың Аллаһ Илсеһенә, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөү менән тулған йөрәгенән тыңлаусыларға илаһи ғилем һәм нәсихәт түгелгән.

Тормошта Аллаһтың тәҡүәле ҡолдары, әүлиәләр янында булып, Әхирәттә лә улар янында булыу кәрәклеге хаҡында Рәсүуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән:

*«Әрүәхтарығыҙҙы изгеләр янында ерләгеҙ».* (Дәйлами, Мүснәд, I, 102)

Хаҡ Тәғәлә тәҡүәле ҡолдарына биргән юғары кимәлдәге тоғролоҡ, ғәҙеллек сифаттары арҡаһында, баҡыйлыҡҡа күскәс тә уларҙың тәне элеккесә ҡала. **Йәбир бин Абдуллаһ**, раҙыйаллаһу ғәнһү, һөйләй:

«Өхөд алышы алдынан атайым мине саҡырып алды ла былай тине:

- Һиҙеүемсә, был алышта мин Рәсүлуллаһ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм, сәхәбәләренән тәүгеләрҙән булып үләсәкмен, һин Унан ҡала минең берҙән-бер яҡын кешем. Бурыстарым бар, уларҙы түлә. Ҡустыларың менән һәр саҡ яҡшы мөғәмәлә ит!..»

Иртән, Өхөд һуғышы башланғас, атайым тәүгеләрҙән булып башын һалды. Мохтажлыҡ арҡаһында, мин уны башҡа шәһиттәр менән бер ҡәберҙә ерләнем. Бының менән һис кенә лә килешә алманым, шуға күрә 6 ай үткәс, уның ҡәберенә килдем һәм ҡаҙып алдым. Һәм нимә күрҙем мин? Ҡолағының бер мөйөшөнән башҡа бөтә тәне мин ни хәлдә ерләһәм, шул хәлдә ине. Мин уны айырым ҡәберҙә ерләнем». (Бухари, Джанаиз, 78)

Тәҡүәлектең юғары дәрәжәһенең миҫалы был.

Күптән түгел шундайыраҡ хәл тәҡүәле зат, хафиз һәм мәзин йәшәгән Аданда ла була. Аллаһтың ятҡан ҡолдарының береһе **Сәми Рамазан улы**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, һөйләүенсә, хафиз үлеп, 30 йыл үткәс, уның ҡәбере ятҡан ерҙән автомагистраль үтергә тейешлеге асыҡлана һәм ҡәберҙе күсерергә булалар. Ҡәберҙе ҡаҙығас, тәндең, яңы ғына күмелгәндәй ҡалыуын күрәләр, хатта кәфене лә нисек таҙа булһа, шул килеш ҡалған.

Ислам тарихында бындай миҫалдар күп. Хаҡ Тәғәләбеҙ етәкселеге, ихтыяры билдәләренең сағылышы был. Ошо бөйөк шәхестәр кеүек мәңгелектәге бәхеткә лайыҡ булыу һәм үҙеңдән һуң иман юлында ныҡ баҫып торған быуынды тәрбиәләп ҡалдырыу мөһим. Хәҙис-шәрифтә әйтелгән бит:

*«Аллаһу Тәғәлә колоноң йәннәттәге урынын күтәрәсәк һәм коло аптырап һораясак: «Ий Раббым, ни өсөн мине был дәрәжәләргә күтәрҙең?» Аллаһ әйтәсәк: «Сәбәбе һинең балаңда, ул һинең өсөн ғәфү үтенә һәм доға кыла...»* (Әхмәт бин Ханбал, II, 509; Ибн Маджа, Әҙәп, I)

Икенсе хәҙистә лә шул турала әйтелә:

*«Әҙәм үлгәс, изге ғәмәлдәрен яҙыу ҙа туктала, әммә өсәүһе кала: саҙака-джәрийә, файҙалы ғилем һәм* ***уны доғаларында иҫкә алып торған иманлы бала****».* (Мөслим, Васыйа, 14; Тимиҙи, Ахкам, 36)

Рухиәт менән тулы тормош ерҙе йәннәт баксаһына әйләндерә. Аллаһтың рәхмәте һәм ярлыкауы Раббыларынан курккан иманлылар менән бергә. Яҙҙың сәскә атыуы һәм Мөхәммәттең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, һөйөүе - фани донъя бәхетенең юғары нөктәһе һәм мәңгелек тормош бәхетенең башы. Уның өммәтенә тоғролок һаклау, Уның юлынан барыу – ғүмеребеҙҙең асыл бурысы.

**Раббым! Йөкмәтелгән бурысыбыҙҙы үтәй алыр өсөн, беҙгә мәрхәмәтле бул. Ғүмерҙәре беҙгә үрнәк булған, бөтә өммәтте үҙҙәренә тартып торған Ғүмәр бин Абдулғәзиз, Баязит Бистами, Сәми әфәнде кеүек иманға эйә булғандарҙы беҙгә юлдаш, терәк, таяныс ит!**

**Әмин!..**

# *Яҙмыш һәм уның серҙәре*

*Билдәле сиктәрҙә күҙ күрә, ҡолаҡ ишетә. Ниндәйҙер алыҫ арауыҡтан нимәнелер күреү, ишетеү мөмкин түгел. Шулай уҡ кешегә тәҡдир (ҡадар) һәм тәҡдирҙең алға килеүен (ҡада) аңлау бирелмәгән. Беҙ һәммәһен сәбәп – эҙемтә бәйләнештәре аша танып беләбеҙ. Ә улар артында торған хикмәтте төшөнә алмайбыҙ.*

# *Яҙмыш һәм уның серҙәре*

Элементар өлөшсәләрҙән ҡатмарлы молекулаларға ҡәҙәр, ваҡ ҡына есемдәрҙән иң ҙурҙарына ҡәҙәр, беҙҙең донъяны ла индереп, бәләкәй дәүмәлдәр донъяһынан бөтә ғаләмдәргә ҡәҙәр ваҡыты, урыны, образы һәм сәбәбе билдәләп ҡуйылған. Билдәләнгән ваҡыты етһә, Аллаһу Тәғәлә Илаһи ниәтен бөтә күркәмлегендә тормошҡа ашыра.

Аллаһу Тәғәлә бар иткән һәр нәмәнең үҙ тәғәйенләнеше, маҡсаты бар. Тормошобоҙҙа булып үткән бөтә ваҡиғалар асылда яҙмыш һыҙаттары. Ай, ҡояш, йондоҙҙар, үҫемлектәр, хайуандар һәм бихисап башҡа бөтә барлыҡ – һәммәһе тәҡдир прогаммаһы эсендә. Ағастан өҙөлөп төшкән япраҡ та шул программаның бер өлөшө. Әгәр ҙә бөтә барлыҡ тәҡдир ҡануниәтенә буйһонмаһа, йыһанда ғәләмәт ҙур хаос һәм анархия хөкөм һөрөр ине.

Һәр сәнғәт әҫәре авторҙың көсө һәм һәләттәре арҡаһында барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, рәссам картинаһын яҙа, хаттат (каллиграфия оҫтаһы), мөмкинлектәренән, талантынан сығып, каллиграфик композицияһын төҙөй. Аллаһу Тәғәлә Үҙенең Ҡөҙрәте менән ғаләм барлыҡҡа килгәндән алып уның һуңғы көнөнә ҡәҙәр, кеше танып белһен өсөн, сер һәм хикмәте менән сорнап, буласаҡ бөтә нәмәләрҙе раҫлаған. Был план һәм тәртип **ҡадар**, йәки Аллаһтың Ихтыяры тип атала. Ошо хәҡиҡәт хаҡында Аллаһу Тәғәлә изге аяттарҙа әйтә:

إِنَّا كُلَّ شَيْءٍ خَلَقْنَاهُ بِقَدَرٍ

**«Шик-шөбһәлә булмағыҙ, Беҙ һәр нәмәне үҙ тәҡдире менән (үҙ йөрәгендә) яралттыҡ»** (Ҡәмәр, 54/49).

مَا أَصَابَ مِن مُّصِيبَةٍ فِي الْأَرْضِ وَلَا فِي أَنفُسِكُمْ إِلَّا فِي كِتَابٍ مِّن قَبْلِ أَن نَّبْرَأَهَا إِنَّ ذَلِكَ عَلَى اللَّهِ يَسِيرٌ

**«Беҙ бар итмәҫтән элек, Китапта яҙылмаған килеш, Ер йөҙөнә һәм һеҙҙең башығыҙға һис бер ҡайғы килмәҫ. Был эштәр беҙгә бер ҙә ҡыйын түгел»** (Хәдид, 57/22).

Ваҡиға башланғансы, уның раҫланған башланғыс планы **(ҡадар)** ғәмәлдәр китабында – Ләүхүл-мәхфүздә һаҡлана, уны тормошҡа ашырыу ваҡыты етһә, **ҡада** (тормошҡа ашыу ваҡыты) башлана.

**Әл-Ғилем** сифатлы Раббыбыҙға булып үтәсәк бөтә ваҡиғалар мәғлүм. Аллаһ ваҡытҡа һәм урынға мохтаж түгел, шуға күрә ғилемгә эйә булыу уның быларға бәйле үҙенсәлеге. Сикләнгән мөмкинлектәребеҙ сәбәпле, беҙ төшөнә алмаған нәмәләр Аллаһ өсөн ауырлыҡ тыуҙырмай.

Йыһандағы һәр нәмә алдан билдәләнгән Илаһи күрһәтмә буйынса барлыҡҡа килеүенә беҙ ышанырға тейеш. Тәҡдиргә ышаныу алты иман бағанаһының береһе булһа ла, ысын мәғәнәһендә уны ҡабул итеү кешегә ауырыраҡ. Әйтергә кәрәк, диндә булмаған кеше лә ниндәйҙер бөйөк көстөң йоғонтоһон тоя, яҙмышына һүҙһеҙ буйһона. **«Миңә шулай яҙған»**, - ти ул. Хатта бөтә нәмәне инҡар итеүсе лә тәҡдиргә бәйлелеген йәшерә алмай: **«Уңыш миңә арты менән боролдо»**, **«Мине әсе яҙмыш эҙәрлекләй»**, - тип һөйләп ҡуя.

**Нәжип Фазыл** әҫәренән килтерелгән өҙөк «ҡадар» һәм «ҡада» төшөнсәләренең мәғәнәләрен бик һәйбәт асып бирә:

«...Мәҫәлән, бер автомобиль Әминөнө майҙанында кешене төкөтә. Ун минут элек нимә булғанын күҙ алдына килтерәйек. Әйтәйек, кеше Гөлхан паркы янында икән, ти. Автомобиль Таксим буйлап бара, тип уйлайыҡ. Быларҙы күҙ алдына килтерәһегеҙме? Улар хәрәкәт итә. Меңдәрсә автомобиль араһынан бер автомобиль, меңдәрсә кеше араһынан бер кеше. Кеше үҙе менән нимә буласағын белмәй, автомобиль йөрөтөүсе лә кеше тапатасағын белмәй... Икеһе лә осрашыу буласаҡ урынға яҡынлаша, минут һайын аралар ҡыҫҡара. Бәлки, кеше, магазин янында туҡталып, берәй шырпы һатып алғандыр, бер-ике аҙым үткәс, дуҫын осратҡандыр. Витриналарға күҙ һала-һала артабан киткәндер. Бер нисә минуттан ниндәй фажиғә буласағын ул күҙ алдына ла килтермәй. Бөтә был ваҡиғалар ҡотолғоһоҙ мәлгә барып

тоташа. Ябай ғына сәбәп ул мәлде хәл итә. Кемдеңдер иғтибарһыҙлығы, кемдеңдер уйлап еткермәүе, йәки тағы ла нимәлер... Ҡайҙа һәм ҡасан ул хәл буласағын, һис бер йәлләүһеҙ ниндәй хөкөм сығарыласағын берәү ҙә белмәй...» (Бер кешенең яратылышы, 43)

Уйлана белгән, тирә-йүндәге ваҡиғаларҙың асылын аңлаған кешеләр бер нимәгә төшөнә: бөтә йыһан йәшәйеше сценарийы Илаһи ҡәләм менән яҙылған.

Әммә һуҡырға төҫтәрҙе аңлатып булмаған кеүек, донъяны ваҡыт һәм арауыҡ менән сикләнгән ер тормошо шарттарынан сығып танып белгәндәр тәҡдирҙең нимә икәнен һәм уның ни рәүешле тормошҡа ашыуын аңлап бөтә алмай. Һәммәһе лә шулай ҡоролған: кеше, үҙенең яҙмыш серен белеп, тыныслығын, түҙемлеген юймаһын, үҙен һәләк итмәһен.

Аллаһу Тәғәлә тәҡдирҙе бөтә барлыҡтан йәшергән, һәм ул алға килмәй тороп, уны танып белеү мөмкин түгел. Был арауыҡта Аллаһу Тәғәлә бик һирәктәргә генә ул ғилемдең **(ләдунни ғилем)** бер өлөшөн аса.

Аллаһтың сикһеҙ мәрхәмәте менән, хатта уйлана һәм эҙләнә белгән кеше өсөн дә киләсәк билдәһеҙлек диуары артында ҡаласаҡ. Хаҡ Тәғәлә ара-тирә генә кешегә ул диуар артына күҙ төшөрөргә мөмкинлек бирә, һәм был хәҡиҡи төштәрҙә була. Барыбыҙға мәғлүм: тәҡүәләр күргән төштәрҙең юш килеүе хаҡ – Изге Ләүхүл-Мәхфүҙдән төшкән нур был.

✵

Кешегә бирелгән һайлау хоҡуғы: килешеү йәки инҡар итеү, изге йәки насар ғәмәлдәр ҡылыу Аллаһуға буйһоноу сиктәрендә шәхси ихтыярын, **«джузи ирадаһын»** тормошҡа ашырыу ул. **«Күлли ирада»** - барса Ихтыяр Аллаһта ғына, шуға күрә ҡол өсөн тулы ирек мөмкин булмаған нимә. Тыуым һәм үлем, ғүмер оҙонлоғо, милләт, енес, һәләттәр әҙәмгә бәйле түгел, улар Илаһи тәҡдир буйынса бирелә. Кеше тәбиғәттән бирелгән сифаттар өсөн яуаплы түгел.

Хаҡ Тәғәлә кешегә яуаплылыҡты уның һәләттәренә һәм мөмкинлектәренә ҡарап бирә. Үҙ ихтыярына буйһонмаған нәмәләр өсөн кеше яуаплылыҡ тотмай, бының өсөн уға бүләк тә бирелмәй. Әйтәйек, ураҙаһын онотоп, берәй ризыҡ ҡапҡан кешенең ураҙаһы боҙолмай һәм ул яҙа ла алмай.

**«Аллаһ бер кемгә лә көсө етмәçлекте йөкләмәç»** (Бәҡара, 2/286) тигән аяты менән Аллаһа Тәғәлә кешегә көсө еткән эште генә йөкмәтеүен белдерә. Әммә биргән һәләттәренә ярашлы ғәмәл ҡылыу-ҡылмауы хаҡында һәр кем һораласаҡ, тимәк, яҙмышҡа һылтанып, ғәмәлдәрҙән баш тартыу – иçәрлек, наҙанлыҡ.

Кеше рухиәтенә тыйнаҡһыҙлыҡ һәм Раббыһынан ҡурҡыу кеүек сифаттарҙы һалған Аллаһу Тәғәлә, һайлау хоҡуғы биреп, уны һынарға теләй, йәғни ул ер тормошонда билдәле бер сиктәрҙә үҙ ихтыярына ҡуйыла. Бала ла бит ваҡ-төйәккә ата-әсәһе биргән аҡсаны яҡшыға ла, яманға ла тотона ала. Әҙәм һайлаған юл кешенең мәңгелек тормошона туранан-тура йоғонто яһай – уға йә бәхет, йә һәләкәт әҙерләй.

Аллаһу Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ихтыярынан тыш ғаләмдә бер эш тә ҡылынмай, хатта япраҡ та һелкенмәй. Һәр нәмә Аллаһ ихтыяры менән эшләнһә лә, Уның ризалығы изге ғәмәлдәр менән генә. Мәçәлән, уҡытыусы уҡыусыһының уңыштарға ирешеүен һәм киләһе синыфҡа күсеүен теләй. Әгәр уҡыусы тырышырға теләмәй икән, уҡытыусы бер нимә лә эшләй алмай.

Берәү гөнаһ юлын һайлап, «Тәҡдирем шундай», - тип әйтә икән, был ғәмһеҙлеген генә аҡларға маташыу. Аллаһ намаҙ уҡырға теләгәндәргә был мөмкинлекте бирә, намаҙ уҡырға теләмәгәндәргә лә бихисап сәбәптәр бирә. Тимәк, әгәр кеше яҙмышына һылтана икән, ул хәҡиҡәткә ҡаршы бара.

Изге аяттарҙа Аллаһу Тәғәлә бойора:

إِنَّ اللهَ لاَ يَظْلِمُ مِثْقَالَ ذَرَّةٍ

**«Шик юҡ, Алллаһ һеҙгә туҙан бөртөгө кеүек тә ғәҙелһеҙлек ҡылмаç...»** (Ниса, 4/40);

وَمَا أَصَابَكُم مِّن مُّصِيبَةٍ فَبِمَا كَسَبَتْ أَيْدِيكُمْ وَيَعْفُو عَن كَثِيرٍ

**«Башығыҙға төшкән һәр бәлә үҙегеҙ ҡаҙанған урынына. Шуға ҡарамаçтан, (тәүбәгә килгәндәрҙең) күбеһен (Аллаһ) ярлыҡаясаҡ»** (Шура, 42/30).

**Мәүләнә Йәләлетдин Руми**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, әйткәнсә, кешенең ихтыяры сикле булһа ла, ул яҙмышҡа япһарып ҡуя алмай:

*«Аяғыңа сәнске ҡаҙалған икән, ғәйеп үҙеңдә! Нәзәкәтле, йомшаҡ кейемдәр кейеп алғанһың икән, һин бит уларҙы үҙең тегергә ҡуштың!»*

Билдәле сиктәрҙә күҙ күрә, ҡолаҡ ишетә. Ниндәйҙер алыҫ арауыҡтан нимәнелер күреү, ишетеү мөмкин түгел. Шулай уҡ кешегә тәҡдир (ҡадар) һәм тәҡдирҙең алға килеүен (ҡада) аңлау бирелмәгән. Беҙ һәммәһен сәбәп – эҙемтә бәйләнештәре аша танып беләбеҙ. Ә улар артында торған хикмәтте төшөнә алмайбыҙ. Хөрмәтле **Алиҙан**, разыйаллаһу ғәнһү, «ҡадар» һәм «ҡада»ның нимә икәнен һорағас, ул былай тип яуап бирә:

*«Был тема төпһөҙ диңгеҙ кеүек тәрән!»*

Был төпһөҙ океанды йөҙөп сығырға маташыусылар ҙа бар, улар араһында ҡолдоң ихтыярын бөтөнләй инҡар итеүсе **«джабариттар»**, һәммәһе ҡолдоң ихтыярынан тора тип иҫәпләгән **«кадариттар»** бар. Тегеләре лә, былары ла диңгеҙ упҡынына бата.

Бәс, шулай булғас, бәндәнең мөмкинлектәре, ихтыяры сиген, ә иң мөһиме яуаплылығын билдәләмәй тороп, беҙ хаталарҙан азат була алмайбыҙ. Ҡолдоң, ихтыяр һәм һайлау азатлығын арттырып күрһәтеп, бөтә ғәмәлдәрҙең, ваҡиғаларҙың ижадсыһы тип баһалау дөрөҫ түгел; бәндәнең ихтыярын инҡар итеп, уны йәнһеҙ автомат рәүешендә күҙ алдына баҫтырыу ҙа дөрөҫ түгел – былар диндең нигеҙенә ҡаршы килә. Дөрөҫө шул: бәндәне Аллаһу Тәғәлә бар ҡылған һәм уға һайлау һәм ихтыяр азатлығы биргән.

Был мәсьәләлә аҡыл һәм күҙаллау көсһөҙ, әммә, үҙеңде Аллаһ Ихтыярына тапшырып, рухи донъя аша бер ни тиклем ғилем алырға мөмкин, тик яҙмыш серен асыу элеккесә мөмкин түгел. Сиктәрҙе белеп, шунан сыҡмайынса уны танып белеү камил ҡолдоң ғына хәленән килә.

✵

Хөрмәтле **Мәүләнә**, рәхмәтуллаһи ғәләйһи, үҙенең *«Мәснәүиҙәр»*ендә яҙмыш сере һәм уны төшөнөү мөмкин түгеллеге һәм был асылда бөйөк мәрхәмәт булыуы хаҡында яҙа:

*Бер әҙәм Муса пәйғәмбәргә, ғәләйһис-сәләм, килгән дә әйткән:*

*- Ий Кәлимуллаһ (Аллаһ менән һөйләшкән кеше)! Мине хайуандар телен аңларға өйрәт әле! Улар телен аңлап, үҙемә нәсихәт алырға теләйем!..*

*Муса, ғәләйһис-сәләм, былай тигән:*

*- Был уйыңдан кире ҡайт, көсөңдән килмәгән нәмәне аңларға тырышма! Әгәр ҡырмыҫҡа бөтә күл һыуын эсеп бөтөрөргә теләһә, ул һыуға сәсәп батасаҡ. Һин дә мөмкин булмағанды аңларға ынтылма! Өлөшөңә төшкән һәләттәр менән Илаһи ҡөҙрәтте танып белергә тырыш! Йөрәгең менән Аллаһҡа уҡтал! Уның серҙәре һәм хикмәте йөрәге һәм ниәттәре саф булғандарға асыла!*

*Әммә әҙәм ныҡышыуын дауам иткән:*

*- Этемдең, йорт хайуандарының телен булһа ла аңларға өйрәт!*

*Уны был уйынан дүндерә алмағас, Муса, ғәләйһис-сәләм, теләген ҡәнәғәтләндерергә булған, әммә киҫәткән:*

*- Зирәк бул, мәғлүмәт океанында батып ҡуйма!..*

*«Йорт хайуандарының телен аңлай башланыммы икән?»- тип уйлаған бәндә иртән торғас.*

*Был ваҡыт хеҙмәтсе ҡатын иртәнге табындан һуң өҫтәл йыйыштырып йөрөгән һәм ергә икмәк киҫәген төшөрөп ебәргән. Уны эргәлә йөрөгән әтәс эләктереп тә ҡасҡан, ә эт артынан былай тип ҡысҡырған:*

*- Һин ғәҙел түгел! Һин бит иген сүпләй алаһың. Һин ни эшләп миңә тейешле киҫәкте алдың?*

*Әтәс яуап биргән:*

*- Ҡайғырма, иртәгә хужаның аты үләсәк, һәм һин туйғансы ит ашаясаҡһың.*

*Билдәһеҙ донъянан килгән хәбәргә һанап, кеше атын йәһәт кенә һата һалған. Әтәскә эт алдында оят булған. Улар бәхәсләшә башлаған, һәм бәхәс өс көнгә һуҙылған. Икенсе көндө шул уҡ әтәстән ҡасыры үләсәген, өсөнсө көндө хеҙмәтсеһе үләсәген белеп ҡалған хужа, аҡыллы эш итәм тип уйлап, уларҙы ла һата һалған. Эт йәнә ҡоро ҡалған. Әтәс уны һәр ваҡыт алдай һымаҡ килеп сыҡҡан. Өс тапҡыр уңайһыҙ хәлгә ҡалған әтәс дүртенсеһендә былай тигән:*

*- Һис шикһеҙ, беҙҙең хәйләкәр хужабыҙ, йолом биреп ҡотолорға уйлаған. Әммә был ғәмәле менән ул үҙенә генә насар эшләне. Иртәгә ул үләсәк! Вариҫтары һыҡтаясаҡ, уфтанасаҡ, үгеҙҙе һуясаҡ, һәммәһе үҙ өлөшөн аласаҡ: һин дә, мин дә!.. Атының, ҡасырының, хеҙмәтсеһенең*

*үлеме тәкдиргә яҙылғаны һәм был наҙан бәндәне бәләләрҙән йолоу була. Ә ул, милкенә зыян килтереүҙән ҡурҡып, үҙенә зыян ғына эшләй.*

*Иҫәр әҙәм әтәстең әйткәндәрен ишетә, был хәкикәт уны уғата ҡурҡыуға һала. Ҡото осоп, ул Мусаға, ғәләйһис-сәлләм, йүгереп килә.*

*- Ий Кәлимуллаһ! Минең ялбарыуымды ҡабул ит, ярҙам ит! - тип инәлә башлай.*

*Муса, ғәләйһис-сәләм, әйтә:*

*- Һин хәлеңдән килмәгән нәмәне йөкмәнең. Хәҙер һин хәкикәттән йыраҡайҙың. Хайуандарыңды, хеҙмәтсеңде һатып, тәкдирҙән ҡотолам, тип уйланыңмы ни? Мин һиңә ҡадар һәм ҡада хаҡында белергә тырышма тип кәңәш бирмәнемме? Аҡыллы кеше аҙағын тәүҙә уйлай, ә иҫәр эш үткәс кенә уйлай башлай. Хәҙер инде ғәмәл ҡылынған. Сауҙала уңышка ирешкәнһең икән, йәнеңде файҙа менән һат һәм үҙеңде ҡотҡар!*

*Был әҙәм, нык үкенеп, Муса пәйғәмбәрҙән, ғәләйһис-сәләм, күпме генә ярҙам һорамаһын, теге былай тип әйтеү менән сикләнгән:*

*- Уҡ йәйәнән осҡан! Уны кире бороп булмай. Мин Хак Тәғәләнән һинең иманлы булып китеүеңде генә һорайым!*

*Муса, ғәләйһис-сәләм, Аллаһҡа ялынып доға ҡыла. Кәлимәтуллаһ доғалары фатихаһы менән әҙәм бик ыҙа күрмәй генә йән бирә. Аллаһу Тәғәлә әйтә:*

*- Ий Муса! Әгәр теләһәң, мин уны ҡабаттан терғеҙәм...*

*Әммә Муса, ғәләйһис-сәләм, былай ти:*

*- Ий Раббым! Һиңә бик күп дан һәм маҡтауҙар! Яҡты һәм юғары донъяларҙа терғеҙ уны! Сөнки унда, мәңгелек донъяла, тәкдир һәм уның алға килеү серҙәре асыла!*

Хикәйәнән күреүебеҙсә, әҙәм балаһы йыш ҡына үҙенә игелек килтермәҫтәй нимәләрҙе теләй. Хатта теләгәне уны һәләкәткә илтеүе лә ихтимал. Былдай финалға килеп еткәс, ул меңәр тапҡыр ялынып һораған нәмәләре өсөн бик үкенә. Шуға күрә ер тормошонда күңел тыныслығы табыу һәм мәңгелек донъяла бәхетле булыу өсөн, Аллаһтың Ҡөҙрәтен аңлап, тулыһынса Уның Ихтыярына буйһонорға кәрәк. Үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө таныу – ҡолдоң мәңгелек капиталы. Яҙмыштың билдәһеҙлеген танып, Аллаһтың ихтыярына буйһоноу – иң яҡшыһы. Өмөттәреңде Аллаһҡа

бағлау, үҙеңде Уға тапшырыу – мәрхәмәт ишектәре. Тәҡдир, ана шул ишектәр аша үтеп, шатлыҡ һәм хозурлыҡ алып килә.

Аллаһ Илсеһе, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, әйткән бит:

*«Тәҡдиргә ышаныу төрлө һағыш, көйөнөстәрҙе алып ташлай».* (Суйути, Джамиус-Сәғир, I, 107)

Ҡәнәғәтлек, үҙеңде Аллаһҡа тапшырыу, мөмкин булған бәләләрҙән һаҡланмайынса, ялҡау һәм пассив рәүештә көтөү тигәнде аңлатмай. Именлекте тәьмин итеү, яманлыҡты еңеү өсөн бөтә сараларҙы күргәс кенә өмөттәрҙе Аллаһҡа бағлау лазым. Сәбәп итмәһәң, һөҙөмтәһе лә булмаясаҡ. Ғәмәл ҡылмайынса, өмөт бағлап ҡына ултырыу ҙа дөрөҫ түгел.

Мәҫәлән, хөрмәтле **Ғүмәр**, раҙыйаллаһу ғәнһү, Сүриәгә походтарҙың береһендә, үҙе йыйған шура ҡарары буйынса, киҙеү булған төбәккә барыуҙан баш тарта. Асылда Аллаһу Тәғәләнең һәм Пәйғәмбәребеҙҙең, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бойороғона тап килгән был ҡарар ҡайһы бер сәхәбәләрҙә, бигерәк тә танылған ғәскәр башлығы **Әбү Үбәйҙә Джәррахта**, раҙыйаллаһу ғәнһү, шик тыуҙыра:

- Ниңә һин Аллаһтың тәҡдиренән ҡасаһың? - ти ул.

Ғилемле, абруйлы сәхәбәнән быны көтмәгән Ғүмәр, раҙыйаллаһу ғәнһү, әйтә:

*- Ий Әбү Үбәйҙә! Был һүҙҙәрҙе башҡа берәү әйтһәсе! Эйе, беҙ Аллаһтың тәҡдиренән йәнә Аллаһтың тәҡдиренә ҡасабыҙ. Бер яғы көйөп бөткән үлән, икенсе яғы йәм-йәшел тау янына килеп, һин ниндәй ҡарарға килер инең икән? Дөйәләреңде көйөп бөткән битләүгә түгел, йәшел утлауға ебәреү Илаһи тәҡдир булмаҫ инеме?* (Бухари, Тыбб, 30)

Тәҡдир сиктәренән ситкә сығыу мөмкин түгеллеге мәғлүм. Шуға күрә ҡол, тейешле саралар күреп, маҡсатына ынтылырға тейеш.

Зирәк күҙ менән ҡарағандар белә: яҙмышыңды аҙағынаса асыҡлау мөмкин булмаған эш, һәм был бәлә түгел, киреһенсә, беҙгә ҡарата бөйөк мәрхәмәт. Әгәр бәндә уға яҙмыш нимә әҙерләгәнен алдан белһә, ул икенсе сиккә ташланыуы ихтимал, ундай хәүефте лә инҡар итергә ярамай.

Әйтәйек, кеше төҙәлә алмаҫлыҡ сирҙән үләсәген белмәй. Әгәр ул быны белһә, һау сағында уҡ үлә башлар, иҫен юйыр, фалиж һуғыр, бер нәмә лә эшләй алмаҫ ине. Балаһы үҙенән алда үләсәген белгән әсә ҡайғы

һәм һағыш эсендә ғүмер кисерер ине. Һөҙөмтәлә ғаләм ҡоролошона ҡаршы килеү булыр ине был, тормош гармонияһын юҡҡа сығарыр ине.

Заманыбыҙҙың рухиәтһеҙлеге эске көсөргәнеш, көрсөктәр тыуҙыра, үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙарҙы арттыра. Рухи тәрбиә алмаған йөрәк нәпселе теләктәр һәм ынтылыштар йоғонтоһона бирелеүсән. Ҡапыл килеп баҫҡан һынауҙарҙы һәм яҙмыштың боролоштарын «күҙгә күренмәгәнгә» һәм тәҡдиргә ышаныусылар ғына тыныс, күндәм үткәрә ала.

Бәхеткә илтеүсе ҡаҡшамаҫ ҡағиҙә – Илаһи яңылыҡтарҙы аҡылың менән ҡабул итеү, йөрәгеңде гүзәл әхлаҡи сифаттар менән биҙәү, яҙмыштың көтөлмәгән боролоштарында ла ҡәнәғәт булыу. Ә бәхет – тормошто нисек бар шулай ҡабул итеү, ауыр мәлдәрҙә түҙемлек күрһәтеү, һәр нәмәнең яҡшы яғын күреү һәм Ғаләмдәр Раббыһы Ихтыярына буйһоноу.

Хаҡ Тәғәлә Үҙенең мәрхәмәтен ҡайғы рәүешендә, ә ҡайғыны мәрхәмәт рәүешендә биреүе ихтимал. Ҡайһы бер нәмәләрҙең йәшерен булыуы тормоштоң һынау урыны булыуы менән аңлатыла.

Аллаһу Тәғәлә был турала шулай ти:

عَسَى أَن تَكْرَهُواْ شَيْئًا وَهُوَ خَيْرٌ لَّكُمْ وَعَسَى أَن تُحِبُّواْ شَيْئًا
وَهُوَ شَرٌّ لَّكُمْ وَاللّهُ يَعْلَمُ وَأَنتُمْ لاَ تَعْلَمُونَ

**«...Шулай ҙа була: һеҙ берәй нәмәнән нәфрәтләнәһегеҙ, ә ул һеҙҙең өсөн файҙалы; ҡайһы саҡ һеҙ үҙегеҙгә зарарлы булғандарҙы ла ярataһығыҙ. Быларҙың барыһын да Аллаһ белә, һеҙ белмәйһегеҙ»** (Бәҡара, 2/216).

Икенсе аятта әйтелә:

قُل لَّن يُصِيبَنَا إِلاَّ مَا كَتَبَ اللّهُ لَنَا هُوَ مَوْلاَنَا وَعَلَى اللّهِ
فَلْيَتَوَكَّلِ الْمُؤْمِنُونَ

**«Әйт һин: «Аллаһ яҙғандан башҡа нәмә беҙҙең өҫкә килмәҫ. Ул – беҙҙең ярҙамсыбыҙ. Шуға күрә һеҙ, мосолмандар, бары тик Аллаһҡа ғына инанығыҙ», - тип»** (Тәүбә, 9/51).

Хәҡиҡәттә, тормоштоң асыҡ, күренеп торған яғын ғына күреү зыян һәм юғалтыуҙарға дусар булыу, һуҡыр булыу менән бер. Бәхәсһеҙ, күрә

алыу – бөйөк бүләк. Әммә был донъяға һуҡыр булып килгән кеше күп кенә яманлыҡтарҙан һәм гөнаһтарҙан әрсәләнә, етешһеҙлек ахырҙа шатлыҡ сығанағына әүерелә. Фәҡирлек һәм байлыҡҡа ла был ҡағыла. Әгәр ярлы тормошона зарланмайынса, Аллаһтың тәҡдиренә ҡәнәғәт булыуын күрһәтһә, мәңгелек тормошта ул бәхет-сәғәҙәткә лайыҡ булыуы мөмкин. Әгәр ул бай булһа, ҡулындағы байлығы арҡаһында нәпсеһенә эйәреүе һәм моңһоҙлоғо сәбәпле күп хаталар һәм гөнаһтар ҡылып ташлауы, мәңгелек бәхеттән мәхрүм ҡалыуы мөмкин. Әлбиттә, киреһе булыуы ла ихтимал. Мөьмин үҙе менән булғандарҙы ыңғай баһаларға, Илаһи тәҡдир менән ҡәнәғәт булырға, уны мәңгелек бәхеткә ирешеү юлы тип ҡабул итергә һәм түҙемле, рәхмәтле, күндәм булырға тейеш.

Хәҙистә әйтелә:

*«Мөьминдең хәле ни ҡәҙәр ғәжәп һәм гүзәл, сөнки уның менән нимә генә булһа ла был яҡшылыҡҡа сәбәп. Тик мөьмингә генә шундай сифаттар хас: мөьминде шатландырырҙай бер хәл булһа, ул рәхмәтле, һәм был уның өсөн игелек. Әгәр уға бәлә килһә, ул түҙемлек күрһәтә, был да уның өсөн игелек».* (Мөслим, Зухд, 64)

Үрҙә бәйән ителгән тәҡдиргә бәйле төп темаларҙың нескәлектәренә инеп китһәк, әлегә яуап табылмаған һорауҙар ҡалҡып сығыуы ихтимал. Шуға күрә Рәсүлуллаһ, салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм, бик күп уйланыуҙарға бирелмәйенсә һәм бәхәсләшмәйенсә, тәҡдиргә ышанырға ҡушҡан. Бер заман ул яҙмыш хаҡында бәхәс ҡорған төркөмдө осрата һәм әйтә:

*«Һеҙгә был әмер ителдеме? Мин һеҙгә шуның өсөн ебәрелдемме? Һеҙгә ҡәҙәр булғандар һәм һеҙҙең һымаҡ ҡылангандар юҡ ителде. Был темаға бәхәсләшеүҙән һаҡ булығыҙ!»* (Тирмиҙи, Ҡадар, 1)

**Эй Раббым! Беҙҙе Үҙеңә иң тоғро ҡолдарыңдан ит, Үҙең риза булырҙай ғәмәлдәр ҡылырға насип ит. Биргән тәҡдиреңә ҡәнәғәт булғандарҙан ҡыл беҙҙе!**

**Әмин!**